ШАМИЛ НАФИҠОВ

# Һыу буйында балыҡсы





ШАМИЛ НАФИКОВ

# Һыу буйында балыҡсы



## Балыҡтар хаҡында китап

ӨФӨ
«КИТАП»
1997

ББК 84 Баш
Н 28

Төҙөү-туплау, аңлатмалар авторы **Ш. В. Нафиҡов**
Рәссамы — **Ф. Ф. Ислахов**

**Нафиҡов Шамил**

Н 28 Һыу буйында балыҡсы.— Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1997.— 176 бит.

ISBN 5-295-01708-7

Балыҡтар хаҡындағы был китап — үҫмерҙәргә генә түгел, өлкәндәргә лә файҙалы ҡулланма.

**Н** $\frac{4202020000—207}{М121(03)—97}$ **118—97** **ББК 84 Баш**

ISBN 5-295-01708-7

© Нафиков Ш., 1997

Башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләгән атайым менән әсәйемә вә балыҡсылау ҡомарын уятҡан Яйыҡ йылғаһына бағышлап яҙҙым китабымды

*Шамил Нафиҡый*

# ИНЕШ ҺҮҘ

Наҙлы ел иҫә. Ҡамыштар бәүелә, аҡсарлаҡтар кәйелеп оса, ҡапыл һыу өҫтөн сирылтып балыҡ ҡарпый. Малай-шалай ҡармаҡ һала. Яр буйында усаҡ ялпылдай.

Кемгә генә таныш һәм танһыҡ түгел ошо матур, һоҡланғыс күренеш?!

Ана ҡаба, бына ҡаба!..

**Һеҙ тәүге битен асҡан әлеге китап, нигеҙҙә, Башҡортостан балыҡтары тураһында. Автор балыҡтарыбыҙ тураһында мәғлүмәттәр килтерә, һәр төр балыҡтың ҡылығын, йәшәү рәүешен тасуирлай. Йәнә уҡыусы был йыйынтыҡтан донъя балыҡтары хаҡында ла күп кенә мәғлүмәттәр алыр, бихисап кәңәштәрҙе күңеленә һалыр.**

Балыҡтар донъяһы ла үҙенә күрә хикмәтле, мауыҡтырғыс. Мәҫәлән, шамбыны алайыҡ. Ул тәрән урындарҙа ҡышлай, сатлама һыуыҡтарҙа ыуылдырыҡ сәсә. Халыҡ телендә, ырымдарында, юрауҙарында балыҡтарға бәйле байтаҡ һүҙ бар. Әйтәйек, селбәрәнең иң бәләкәйен йотколокто — терелэй йотһаң, моратыңа ирешеп була, имеш. Нөгөш буйы башҡорттары һәм башҡа урындарҙа әле лә булһа ошолай тип әйтәләр.

Әгәр балыҡтарҙың телдәре булһа, улар кешеләрҙең балыҡ тормошо тураһында йыртҡыс хайуандарҙан һәм ҡоштар тураһында белгәндән дә аҙыраҡ белеүҙәре тураһында һөйләр ине. Һәм, моғайын, улар ваҡ күҙәнәкле йылым менән тотоусы ҡомһоҙ балыҡсыларҙан зарланырҙар ине. Бындай йылымдарҙа хатта әле яңы тыуған һәм үҫергә лә өлгөрмәгән селбәрәләр буталып бөтә. Улар, тәбиғәткә хужаларса ҡарамайынса, күлдәргә һәм йылғаларға төрлө сүп-сар ташлаусы һәм бысраҡ ағыҙыусы кешеләрҙән зарланыр, бындай һыуҙарҙа барлыҡ балыҡ та — ҡарттары һәм йәштәре лә һәләк булыуы тураһында һөйләр ине.

Бәләкәй генә, тымыҡ йылға-күлдәрҙә йәшәүсе балыҡтар, тындары бөтөп үлмәҫ өсөн, ҡыш көнө боҙ өҫтөндә кескенә мәкеләр яһауҙы һорай. Быларҙың барыһы өсөн дә улар бер тауыштан һыу яткылыктарын ташламаҫҡа һәм йәй көнө балалар ҡармағына бик рәхәтләнеп сиртергә вәғәҙә бирә. Йәшәү өсөн уңай шарттар булған ерҙә уларҙың яҡшы сиртеүҙәре һәр кемгә билдәле: тотоуҙан тыш, балыҡҡа ярҙам итергә теләүселәргә — бына ни тиклем эш! Әйҙәгеҙ, балалар, Тыуған илебеҙ тәбиғәтенең байлығын һаҡлайыҡ. Был беҙҙең көсөбөҙҙән килә.

...Йәй. Күңелле сәйәхәттәр, усаҡ янында төн үткәреү һәм, билдәле инде, балыҡ ҡаптырыу ваҡыттары етте тигән һүҙ. Күҙәтеп барған балыҡсы үҙ ҡармағына эләккән ябай ғына балыҡтар тураһында ла ҡыҙыҡлы хәлдәр һөйләй ала. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә шундай балыҡсы артынан барайыҡ, уның ниҙәр һөйләгәнен тыңлайыҡ.

Билдәле, борон, бер нисә быуат элек, беҙҙең йылғаларҙа балыҡ ифрат күп булған. Ата-бабаларыбыҙ йылғаларҙан һәм күлдәрҙән хәтһеҙ балыҡ тотҡан. Бының өсөн улар күбеһенсә тал сыбыҡтан үрелгән мурҙаны файҙаланған.

Әле лә ташландыҡтар менән бысранмаған йылға-күлдәрҙә балыҡ күп: йыртҡыс балыҡтарҙан — йәйен, суртан, алабуға; карп һымаҡтарҙан — ҡорман, опто, ажау, ә Дим йылғаһында һаҙан да бар.

Фабрика һәм заводтарҙың ҡалдыҡтары менән бысранған һыуҙың йылғаларға, күлдәргә һәм диңгеҙҙәргә ағып төшөүен тотҡарлаусы таҙартҡыс ҡоролмалар төҙөүгә ҙур иғтибар бирелә.

Балыҡты күпләп юҡ итә торған ысул һәм ҡорамалдар (шартлатҡыс, һалдау, атыу ҡоралдары) менән тотоу тыйыла.

Әйткәнебеҙсә, балыҡтарҙы шартлатҡыстар менән шаңҡытыу ҡәтғи рәүештә тыйыла, сөнки был саҡта төрлө йәштәге һәм төрлө тоҡом балыҡтар күпләп ҡырыла.

Беләһегеҙ — ҡыш көнө һыу ятҡылыҡтарында боҙ аҫтында ҡайһы берҙә кислород етешмәй. Бына шуға ла балыҡтар күпләп ҡырыла. Быға юл ҡуймау өсөн боҙ өҫтөндә мәкеләр уйырға кәрәк.

Күп кеше аңлап етмәй — балыҡ тотоу хикмәтле һәм бер үк ваҡытта күңелле эш тә ул. Көн буйы бер табалыҡ та ала алмаған саҡтар була. Уның ҡарауы, күл ситтәрендә спиннинг менән балыҡ эләктереүгә мауығып, үҙеңдең нисә километр ер киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың!

Хәҙер балыҡ тотоу спорты ныҡ алға китте. Эйе, балыҡтарҙы күпләп тотоу маҡсат итеп ҡуйылмай, ләкин балыҡсыға үҙенең оҫталығын, сослоғон күрһәтергә һәм балыҡтарҙың биологияһын белергә бөтә мөмкинлек бар. Балыҡ тотоу спорты сәләмәтлекте нығытыусы ял булып тора, кешенең тәбиғәт менән тығыҙыраҡ бәйләнешкә инеүенә булышлыҡ итә.

Беҙҙең күлдәрҙә һәм йылғаларҙа төрлө балыҡ йәшәй. Тыныс холоҡло балыҡтарға сабаҡ, опто, ажау, йомро сабаҡ, ташбаш, табан балыҡ, һаҙан (карп), ҡорман балыҡ, күстерә (тарансабаҡ), күк балыҡ (күкәнәш), күкйөн, ҡыҙылғанат; этбалыҡ, ҡомтөрткө, еҙмыйыҡ, шырт балыҡ инә.

Тау йылғаларында бағры, бәрҙе, шамбы балыҡтары бар. Ә инде йыртҡыс балыҡтар иҫәбенә суртан, йәйен, ағасъяңаҡ, алабуға инә.

**Йәш дуҫтар! Бөтә ошо балыҡтар тураһында һеҙ әлеге китаптан уҡып белерһегеҙ.**

Республикабыҙ йылға-күлдәргә бик бай. Беҙҙә дөйөм майҙаны 20,4 мең га булған 336 күл, дөйөм оҙонлоғо 4350 км-ға һуҙылған 13 мең йылға һәм 3 ҙур һыуһаҡлағыс бар. Ҡарман ГРЭС-ының һыуһаҡлағысы 3600 га майҙанды биләй, Нөгөш һыуһаҡлағысы 2600 гектарға йәйелгән, ә Павловка быуаһының дөйөм майҙаны 12 мең га тәшкил итә. Асылыгүл 2400 га майҙанында йәйрәп ята.

*ШАМИЛ НАФИҠОВ,*
Бөтә Рәсәй тәбиғәтте һаҡлау йәмғиәте ағзаһы, һәүәҫкәр балыҡсы.



## Балыҡсының йыл миҙгелдәре

Бер нисә көн сиртеп алғандан һуң, ғәҙәттә, балыҡ ял итә. Әммә шуныһы ла бар — сабаҡ, опто, ажау кеүек балыҡтар ыуылдырыҡ сәскәндән һуң ял иткән саҡта суртан, алабуға, һыла йылға буйлап аҙыҡ эҙләргә сыға. Был йыртҡыстар башҡа төр балыҡтарҙың ыуылдырығын ашау менән бергә уларҙың үҙҙәренән дә ауыҙ итергә тартынмай. Шулай булғас, ҡармаҡ һалыусы әлеге мәлдә йыртҡыс балыҡтар тотоу сараһын күрергә тейеш.

Яҙ мәлендә көн тиҙ үҙгәреүсән. Әле генә ҡояш көлөп торһа, икенсе ҡарауға инде ямғыр һибәләй башлай. Шуға күрә ошо ваҡытта үҙең менән ҡармаҡтарҙың төрлөһөн йөрөтөү хәйерлерәк.

Һауа торошо боҙолоуын балыҡ бер нисә көн алдан һиҙә һәм сиртеүҙән туҡтай. Әйтәйек, төньяҡтан иҫкән ел сабаҡ, ҡорман, опто кеүек балыҡтар сиртеүенә тәьҫир итмәйенсә ҡалмай. Ниндәй генә ризыҡ биреп ҡарама, был осраҡта улар емгә яҡынламай. Уның ҡарауы, суртан һалҡын ел күл-йылғаларҙы тулҡынландырғанда ла ҡомһоҙланып ваҡ балыҡ эҙләй. Тимәк, бындай йонсоу көндәрҙә ҡармаҡ һалыусыға ошо йыртҡыс балыҡты аулау кәрәк. Суртан йәшәгән һәм уйнаған урынды тапҡанда, яҙғы һалҡын көндәрҙә лә һыу буйынан табыш менән ҡайтырға була.

Ҡармаҡ һалыусы һыу буйына ҙур өмөт менән килә. Дәү балыҡ эләктереү тураһында хыяллана ул.

Әммә балыҡ ҡаптырыу өсөн уның холоҡ-фиғелен дә белергә кәрәк бит әле. Юғиһә, буш ҡул менән ҡайтыуың да бик ихтимал.

Ыуылдырыҡ сәсер алдынан, мәҫәлән, балыҡ туҡтауһыҙ аҙыҡ эҙләй. Ә был иһә ошо ваҡытта балыҡ һәйбәт сиртә тигән һүҙ. Әммә бының өсөн, ҡайһы балыҡтың ҡасан ыуылдырыҡ сәскәнен белеү шарт.

Ә хәҙер балыҡсы календары биттәренә күҙ һалайыҡ.



## ЯҘ ЕТҺӘ...

### Март айы

Балыҡ ҡышлау урындарынан китә һәм һыуы йылына башлаған һай урындарға йыйыла.

Март килде, яҙ етте. Яҙғы елдәр ҡарҙы селтәрләй, ләкин әле урманда ҡар тәрән. Йылғалар һәм күлдәр боҙ ҡатламы аҫтында ята, ә балыҡтар боҙға морон төртөп ҡарай. Яҙға табан һыуҙа һауа аҙая, балыҡтар тонсоға башлай. Күлдәргә яҡын йәшәгән кешеләр мәке уялар, һәм балыҡтар бәләнән ҡотола. Һеҙ ҙә был эштән ситтә ҡалмағыҙ! Балыҡтар һеҙҙән ярҙам көтә!

Көндәр бер аҙ йылынды. Нәҡ балыҡҡа йөрөр ваҡыт. Димдә йәки Ҡариҙелдә, һөймән менән мәке уйып, балыҡ ҡаптырыуы ни тиклем күңелле. Эш кешеһе өсөн балыҡ ҡаптырыуҙан да яҡшыраҡ ял юҡтыр ул.

Йылға һәм күлдәрҙә лә йәнлелек башлана, балыҡтар ҡышлаған урындарынан һайыраҡ тамаҡтарға ашыға, йылы эҙләй.

### Апрель айы

Яҙ һыуҙары ялан-баҫыуҙарға йәйрәй. Балыҡсылар өсөн күңелле осор етә. Боҙ өҫтөндә балыҡ ҡармаҡлап (ә иртә яҙҙа балыҡ айырыуса шәп сиртә), һабан һәм һоло турғайҙарының моңло йырын тыңлап ултырыу — үҙе бер ғүмер!

Яҙғы ташҡын мәлдә, боҙ китеү менән үк, һай һәм йылы урындарҙа алабуға, борош, опто ла ыуылдырыҡ һала.

Боҙ китеп, 2—6 көн үтеүгә суртан ыуылдырыҡ сәсә. Улар һыу менән күмелгән болондарға сығалар. Бында һыу йылынған була инде.

Апрелдә йомро сабаҡ, шырт балыҡ, һыла һәм башҡа балыҡтар ыуылдырыҡ сәсәләр.

### Май айы

Йылғаларҙа шамбы ҡармаҡҡа ҡапмай, ә башҡа бөтә балыҡтар ҡаба башлай. Балыҡ ҡармаҡлау беренсе сиратта яҙғы бысраҡтарҙан алданыраҡ таҙарған ҡушылдыҡ йылғаларҙа һәм ваҡ күлдәрҙә башлана. Ә ыуылдырыҡ сәсеүҙән һәм һыуҙар таҙарғандан һуң йылғаларҙа балыҡ ҡармаҡлауға мөмкинлектәр арта, май аҙаҡтарында инде дәррәү ҡармаҡсылау осоро башлана.

Ташбаш, йәйен, ажау, бәрҙе кеүек балыҡтар май айында ыуылдырыҡ сәсәләр.

Һыу баҫҡан болондарҙа, туғайҙарҙа опто «уйнай». Май айында һыуҙың йылылығы 12—16 градусҡа еткәс, алабуға, сабаҡ, ҡорман, ажау балыҡтары уйыны башлана.

Майҙа шулай уҡ этеш, йәйен ыуылдырыҡ сәсә. Табан ыуылдырыҡ сәскән ваҡытта малайҙар ҡайһы бер урындарҙа уны күлдәк менән генә һөҙөп тоталар. Йәтмә-маҙар һис кәрәк түгел.

Ғәҙәттә, яҙ айының һуңғы сирегендә йәки яңы ай башында балыҡ ыуылдырыҡ сәсә. Әлбиттә, барлыҡ урындарҙа ла түгел. Сөнки һәр йылғаның үҙенә генә хас сифаттары — холоҡ-ғәҙәте бар тип әйтергә мөмкин.

## ЙӘЙГЕ КӨНДӘРҘӘ

Бына инде яҙҙар үтеп, һыулыҡтарға июнь, июль, йәғни йәйге селлә килде. Йылға-күл төптәрендә хәҙер ем күп, ә балыҡтар балыҡсыларҙың ризығына наҙланып, һайлап ҡына сиртә башлай.

### Июнь айы

Һыу ятҡылыҡтарында йәнләнеү осоро. Табандар, ҡарабалыҡтар ыуылдырыҡ сәсеүен дауам итә.

Йылғаларҙа һәм күлдәрҙә тормош ҡайнай. Сүмесбаштар йөҙә.

Иң һуңынан, июнь айында, һыуҙың йылылығы 18—20 градусҡа еткәс һаҙан ыуылдырыҡ сәсә. Унан һуң ул ныҡ ашамһаҡ булып китә.

### Июль айында

Йылы һыуҙа ваҡ ҡына ылымыҡтар бик күп үрсей. Улар һыуға йәшел төҫ бирә — һыу «сәскә ата». Был осраҡта балыҡтар туйғансы ваҡ ҡына ылымыҡтарҙы, бөжәктәрҙең, дафнияларҙың һәм башҡа ябай ҡыҫала һымаҡтарҙың ҡарышлауыҡтарын ашай. Һаҡалсан һәм сағалаҡ балыҡтар ыуылдырығын сәсә.

Һаҡалсан (эт балыҡ) — бик ҡыҙыҡ балыҡ. Ул иң бысраҡ һыуҙа ла йәшәй ала. Буръяҡлы һыуҙа кислород етешмәгәнгә күрә, ул айғолаҡтары менән һулауҙан тыш, эсәктәре менән һулай. Йәнә һаҡалсан һауа торошон алдан бик оҫта белдерә. Йонсоу көндәр килерҙән алда ул үтә тынысһыҙлана, һыуҙы болғата. Күк күкрәп ямғыр яуырҙан алда һыу өҫтөнә ҡалҡа. Күк күкрәүҙе ул бер тәүлек «алдан әйтә».

Июлдә ҡайһы балыҡ ниндәй емгә ҡаба һуң?

Ажауҙы — ҡармаҡты һыу үҫемлектәре янына төпкә һалып, бәләкәй тәлмәрйенгә һәм икмәк киҫәгенән йоморсаҡ рәүешендә әүәләгән емдәргә; ҡорман балыҡты, айырыуса төнөн, ҡармаҡты төпкә батырып, селәүсенгә тоталар. Карп, һаҙанды — тәрән урында ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән селәүгә, төрлө бутҡа, ҡамырға, ҡайнар һыуҙа бүрттерелгән борсаҡ, бойҙай, фасоль, кукурузға; ҡарабалыҡты — һыу үҫемлектәре араһында ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән селәүсенгә һәм икмәк киҫәктәренә; һыла һәм сұртанды — кәтүкле ҡармаҡ (спиннинг) менән йылтырмаға, ваҡ балыҡҡа; табан балыҡ, сабаҡ, алабуғаны ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән һыу үҫемлектәре янында һәм улар араһындағы асыҡлыҡтарҙа селәүсенгә, себен ҡортона, икмәк киҫәктәренә, бешкән арпа ярмаһына ҡаптыралар.

Ә нишләп һуң июль айына шулай күп яҙабыҙ әле? Яҙмай ни — Балыҡсылар көнө тип ошо айҙа байрам ителә лә баһа.

Июлдә һыу «сәскә ата». Ул ваҡ ҡына үҫемлектәрҙән йәшел төҫ ала. Был саҡта балыҡ ошо үҫемлектәрҙе туйғансы ашай һәм ҡармаҡҡа насар сиртә. Күлдә томбойоҡ ап-аҡ булып ултыра.

Балыҡсыларға әллә ни маҡтанырлыҡ сәбәп ҡалмай. Йылы һыуҙа балыҡ ылымыҡтар, дафниялар, ваҡ ҡыҫалалар менән туйына һәм емдәргә әллә ни әүрәмәй.

## Августа

Һәүәҫкәр балыҡсылар буш ваҡыттарын йылға йә күл буйында үткәрә. Август урталарынан башлап һаҙан һәм табан ҡармаҡҡа шәп ҡаба.
Ташбаш һымаҡ ваҡ балыҡтар ҙа эләгеүсән.
Ә һалҡын көндәрҙә балыҡтар нисегерәк көн күрә һуң?

# КӨҘ

## Сентябрь

Был айҙа йылға-күлдәрҙә һыу тоноҡлана, һалҡыная. Сентябрь баштарында әле сабаҡ яҡшы сиртә. Балыҡтар ҙур эркеү булып йыйыла башлай һәм тәрәнерәк урындарға китә.

Сабаҡ, алабуға һәм сурағай ҡаба, шамбы, ҡорман балыҡ, опто ла ҡармаҡҡа эләгә.

## Октябрь

Йылға-күлдәрҙәге тереклек эйәләре һүлпәнәйә. Ҡормандар, табандар йөҙгөстәрен саҡ ҡына ҡыбырҙатып йөҙә. Алабуға, шамбы, шырт балыҡ һәм опто әлегә емде ҡаба һәм ҡармаҡҡа эләгә. Һыу бөжәктәренән — ҡуңыҙҙар, ҡандалалар һәм башҡалар, һыуҙың һалҡынлығына ҡарамаҫтан, күл туңғансы етеҙ хәрәкәтләнә. Был осраҡта улар ялҡау балыҡтарҙы һағалай һәм уларҙы ашайҙар.

Күл һәм йылғаларҙа балыҡтар бик һүлпәнләнә. Бары тик алабуға, суртан һымаҡ йыртҡыс балыҡтар ғына ялтырмаға яҡшы сиртә.

Октябрь аҙаҡтарында бик күп балыҡ өйөр-өйөр булып, йылғаларҙың тәрән урындарына ҡышлауға йыйыла.

## Ноябрь

Ноябрҙә һаҙан балығы, табандар, ҡара балыҡтар, йәйендәр, сөгәләр һәм башҡа төр балыҡтар ҡышҡы йоҡоға тала. Һыу температураһы 6 градустан түбәнәйһә, был балыҡтар һыу төбөндәге ләмгә, лайға инеп ята. Был саҡта уларҙың тиреһе ҡалын лайла менән ҡаплана, был уларға үҙенә күрә һалҡындан һаҡлай торған «тун» булып хеҙмәт итә.

Бары тик ҡайһы бер балыҡтар ғына ҡыш буйына хәрәкәтсән булып ҡала.

Һыу өҫтө боҙлана башлағас, алабуға, опто, шырт балыҡ ашамһаҡлана төшә. Улар теләһә ниндәй емгә лә ҡаба. Хатта күлдә суртанды икмәккә ҡаптырған кешеләр ҙә бар. Һыла ҡармаҡҡа ҡабыуын дауам итә, ә инде ай аҙаҡтарында күп төрлө балыҡтар сиртеүҙән туҡтай.

Ноябрҙә, йылғалар туңғанға тиклем, шамбы, опто, ажау яҡшы ҡаба. Ә күлдәрҙә боҙ туңыу менән балыҡсылар мәкеләрҙән ҡармаҡлай башлай. Тәүге осорҙа сабаҡ һәм шырт яҡшы ҡаба. Ә спиннингка суртан һәм алабуға ла ҡаптырып була.

Ноябрь айында опто, суртан балыҡтары йылғалар туңғанға хәтлем яҡшы сиртә, сөнки улар ас була. Мәҫәлән, Шишмә төбәге күлдәрендә суртанды хатта икмәккә ҡаптырыу осраҡтары ла булды.

## ҠЫШ

### Декабрь

Йылғаларҙа һәм күлдәрҙә боҙ инде ярайһы уҡ ныҡ — балыҡ тотоуҙы ысынлап башларға була. Декабрҙә мәкеләрҙән суртан, алабуға, ажау, опто балыҡтарын тоторға мөмкин.

Декабрҙә ысын мәғәнәһендә ҡышҡы балыҡ тотоу көндәре башлана. Күлгә лә, йылғаға ла балыҡҡа барырға мөмкин. Айҙың тәүге көндәрендә суртан менән алабуға айырыуса күп әләгә. Был айҙың һыуыҡ көндәрендә балыҡ бәлтерәп төшә. Әммә һыуыҡ декабрҙә шамбы ыуылдырыҡ сәсә башлай.

Балыҡтар ҙур тупҡа йыйнала. Хатта алабуға емгә ҡабыуҙан туҡтай яҙа.

### Ғинуар

Һыу ятҡылыҡтарында боҙ ҡалыная, һыуҙа ярым ҡараңғылыҡ хөкөм һөрә. Күлдәрҙә һәм быуаларҙа мәкеләр туңа, ошо саҡта балыҡ һауа етешмәүҙән ыҙалана. Уларҙың күпләп ҡырылыуы — тәүге йөҙәүҙәре башлана. Балыҡтарҙың үлеүе ике сәбәп арҡаһында килеп тыуа. Беренсенән, һыуҙа кислород аҙая, икенсенән, үҫемлектәр һәм хайуандар тарҡалыуҙан һыуҙа көкөртлө водород газы йыйыла. Балыҡҡа һулау өсөн кислород етешмәй, ул таҙа һәм саф һыу алып килә торған шишмәләргә ташлана, мәкеләр янына йыйыла.

Ғәҙәттә, балыҡтарҙың һауа етмәүҙән *йөҙәүе* (үләтләүе) һай һәм бысранған быуаларҙа, күлдәрҙә була. Шуның өсөн бындай һыу ятҡылыҡтарында мәкеләр уйырға кәрәк, улар аша һыуға саф һауа инеп торор.

Әлегә тиклем хәрәкәтсел балыҡтар ҙа «йоҡоға» тала. Февралгә тиклем алабуға сиртеүҙән туҡтай тиерлек. Балыҡсылар мәке аша суртан аулауҙы дауам итә. Шамбы хәрәкәтсел булып ҡала. Хатта ғинуарҙа ул йылғаларҙа апаруҡ йәнләнә. Сатлама һалҡындарҙа шамбы, төбө таш йәки ҡом булған тәрән урындарҙан сығып, һай ергә йыйыла һәм йәбешкәк ваҡ ыуылдырығын сәсә. Инә шамбы бер миллионға яҡын ыуылдырыҡ сығара. Ләкин һыуҙа әле булһа һыу ҡуңыҙҙары йөҙә, ләмдә бер төр серәкәйҙәрҙең ҡыҙыл ҡарышлауыҡтары (ҡыҙыл ҡорттар) ҡаҙына.

Ғинуарҙа йылға һәм күл һыуҙарының йылылығы 0—4 градусҡа етә. Был саҡта балыҡ үҙен тыныс тота, йөҙгөстәрен саҡ ҡына һелкетә. Уның һулауы ҡырҡа ҡыҫҡара, ҡан йөрөшө аҡрыная, ул йәшәү өсөн бик аҙ энергия түгә. Мәҫәлән, һаҙандың ҡыш һулау өсөн йәйгә ҡарағанда кислородты ун тапҡыр аҙыраҡ сарыф итеүе иҫәпләп сығарылған. Балыҡ тәненең температураһы был саҡта тирә-яҡтағы һыу йылылығына тигеҙ була.

## Февраль

Февралдә йөҙҙәрсә балыҡ ҡармаҡлаусылар күлдәргә һәм йылғаларға ашыға. Улар сәғәттәр буйы мәкеләр эргәһендә ултыра — алабуға, сабаҡ балыҡтарын һәм хатта суртан тоторға тырышалар.

Балыҡтарҙың йөҙәүе (үләтләүе) көсәйә. Йөҙәү менән көрәште туҡтатмаҫҡа кәрәк. Быны менән беҙ күп балыҡты ҡырылыуҙан һаҡларбыҙ.

Ағым йылғаларҙа, күлдәрҙә иһә февралдә сабаҡ, алабуға, бөгәрсә, шырт балыҡ яҡшы ҡаба. Ошондай ырымды тикшереп ҡарағыҙ: ҡышын балыҡ һалҡын, тыныс көндәрҙә шәп сиртә. Ныҡлап ҡар яуһа, буран булһа, ҡапыл йылытып ебәрһә, балыҡ ҡапмай башлай. Йылтырауыҡҡа ҡаптырғанда ҡыш башында бәләкәйерәген, аҙағында иһә ҙурырағын алырға кәрәк.

* * *

Йәнә яҙ, унан һуң йәмле йәй ҙә етә. Йыл миҙгелдәре алмашынып тора. Боҙ ҡуҙғалып ике-алты көн үтеүгә суртан ыуылдырыҡ сәсә. Улар һыу менән күмелгән болондарға сыға. Бында инде һыу йылынған була.

Апрелдә йомро сабаҡтар, шырт балыҡтар, һылалар һәм башҡа төр балыҡтар ыуылдырыҡ сәсә.

Ташбаш, йәйен, ажау, бәрҙе кеүек балыҡтар ыуылдырығын май айында һала.

Һыу баҫҡан болондарҙа, туғайҙарҙа опто «уйнай». Май айында, һыуҙың йылылығы 12—16 градусҡа еткәс, алабуға, сабаҡ, ҡорман балыҡтарының да уйындары башлана. Иң һуңынан, июнь айында, һыуҙың йылылығы 18—20 градусҡа еткәс кенә, ҡарабалыҡ, табан һәм һаҙан ыуылдырыҡ сәсә. Был инде гөлйемеш сәскә атҡан ваҡытҡа тура килә.

## Балыҡтар болаһы

Асыу менән бола күтәргәс
Һыуҙағы бар балыҡтар,
Ыҡ ярында геүләп торған
Бөтә урман-таллыҡтар.

Ҡыҙыл күҙле сабаҡтар ҙа
Күктәргә ырғышҡандар:
— Ҡар яуһа, беҙ ҡалын боҙҙар
Аҫтында ҡыш сығабыҙ,
Йәй килһә һыуҙы ҡаплаған
Дегеткә тонсоғабыҙ.

Иҙелгә төшһәң дә шул хәл,
Өсәнгә үрләһәң дә,
Таҙа һыу тапмаҫһың көндөҙ
Ут менән эҙләһәң дә.

Балыҡтар ҙа, ҡыҫалалар ҙа
Ҡушылғандар ул бунтҡа,
Ҡаҙ, өйрәк тауыштары ла
Гөж килеп торған Ыҡта.

Йәйендәр башлаған бунтҡа
Ҡушылғандар суртандар,
Унан ташбаштарға тиклем
Изге яуға сыҡҡандар.

Үпкәбеҙҙә лә гел дегет,
Бүкһәбеҙҙә лә дегет,
Һулышты нисек алырға,
Инде ҡайҙа барырға?

Ҡоро ерҙә йәшәргәме,
Тонсоҡторғос Ыҡтамы?
Беҙ — илаҡ тәгәрмәс түгел,
Беҙгә дегет шайтанғамы?!

Ни әйтәһең, ҡош-ҡорттоң да
Бик шәптән түгел көнө,
Йырым көлкө өсөн түгел,
Кем теләй, әйҙә көлһөн,
Был ғибрәтте үрҙә әйткән
Етәкселәр ҙә белһен.

*Тимер Йосопов*

## Ҡыш көнө — табан

Татыш күленә барабыҙ, тинеләр. Бер ҙә булғаным юҡ унда. Шуға ла шатланып ризалаштым. Яңы ерҙәр, яңы күл күрәсәкмен. Үҙе ни тора!

Илеш районының Татарстан сигендәге мөйөшөндә Иҫке Татыш ауылы эргәһендә икән ул күл. Йома төн киткәйнек, шәмбелә таңға яҡын барып еттек. Ҙур ғына күл. Буйында һарай, кәртә кеүек нәмәләр ултыра. Колхоз фермаһының йәйләүе икән. Бигерәк матур урын һайлағандар. Иркен туғайлыҡ, көтөүлек киң, һыу ҙа эргәлә генә. Яҡтырғансы автобуста ҡапҡылап алдыҡ, термостан бөһөрәп торған сәй эстек. Ҡайһы бер ағай-эне, боҙ өҫтөндә йылыраҡ булһын өсөн, әҙ генә мәйен дә уртланы. Шулай әҙерләнеп бөттөк тигәндә генә һаҡалтай Степанычыбыҙ: «Мин бында йәй ҙә булдым. Гелән карась»,— тип хәбәр һалмаһынмы.

Карась тигәне — беҙҙеңсә табан инде ул. Ҡайһы бер яҡтарҙа күл балығы тип тә йөрөтәләр, сөнки күл, быуаларҙа ғына йәшәй. Ағын һыуҙа осрамай тиерлек. Һыуы яҙ алышынып торған урындарҙағы табан тәмле була. Ә инде тонсоу күлдәгеләренән ләм тәме сығыңҡырай. Шуға уны күберәген ҡурып ашайҙар. Ҡайһы берәүҙәр ҡурыр алдынан уны бер ни тиклем ваҡыт һөттә йә һөтлө һыуҙа тотоп ала.

Ҡыҫҡаһы, насар балыҡ түгел. Тик ул ҡыш эләкмәй ҙәһә! Һуңғы йылдарҙа ҡыш Кушнаренко районындағы бер күлдә табан тоталар тигәнде ишеткеләнем, әммә үҙемә тоторға йә тотҡандарын күрергә тура килмәне.

...Күлгә ырыя ғына төштөм, табандан башҡа балыҡ булмағас, өмөтөмдө өҙгәйнем тиерлек. Боҙҙо тишеп, ҡармаҡты ҡыҙыл ҡорт менән емләп һыуға төшөрөп ебәрҙем. Йүнле яҡтырып та бөтмәгән, күренер-күренмәҫ кенә. Шулай ҙа балыҡ сирткәнен шәйләп ҡалдым. Ҡаптырҙым бит! Ауыр ғына тойола. Сығарам. Ысынлап та табан! Тик беҙҙең яҡтарҙа элек-электән күреп күнегелгән һарыһы түгел, ә аҡ табан.

Аҡ табан һуңғы йылдарҙа йыш осрай. Балыҡсылар гибрид тиҙәр уны. Йәғни ҡәҙимге табан менән карптан яралған. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә холҡо башҡа, карптыҡына ла, һары табандыҡына ла оҡшамаған. Улар, әйтеүҙәренсә, ҡыш йоҡлай, ә был ҡармаҡҡа ихлас ҡаба.

Элегерәк, «Фитиль» тапшырыуҙарында шикелле, ғалимдарҙың бысраҡ һыуҙа әрһеҙ балыҡ барлыҡҡа килтереү буйынса тәжрибә үткәреүен күрһәткәйнеләр. Теге гибрид балыҡ ниндәй генә бысраҡ һыуҙа йәшәмәй ҙә, нимә генә ашамай. Тикшеренеүсе тәмәке төпсөгөн ырғытҡайны, шуны ла йота һалып ҡуйҙы. Гибрид табан да, бәлки, шулайыраҡтыр!

*Ғ. Шәмсетдинов*

## Ҡармаҡ һалдым...

Уйлап ҡараһаң, балыҡ ҡаптырыу ысулының борон-борондан йәшәп килгән ҡағиҙәһе юҡ һымаҡ. Тәү тапҡыр балыҡ ҡармаҡлағанда, юлың уңмаһа, күңелде һүрелтергә ярамай. Был уңышһыҙлыҡ ни бары балыҡты тейешле ваҡытында һәм уңайлы урында ҡаптыра алмауҙан килеп сыға.

Үҙ яйына ҡарап балыҡ ярға яҡыныраҡ йә иһә унан алыҫыраҡ йөҙөргә ярата. Быуа, күпер, һыуға ауған ағас күләгәләре эргәһендә, йылға һәм инеш яҡкылыҡтары балыҡ ҡармаҡлау өсөн иң һәйбәт урындарҙан иҫәпләнә.

Балыҡсыға йылдың иң ҡулайлы осоро — һыуҙың ҡайтыуы, әммә тоноп өлгөрмәгән мәле ул. Һауа торошо үҙгәрешһеҙ торһа ла көндәр йонсоу, ел булыуға ҡарамаҫтан, балыҡ яҡшы эләгә. Көньяҡтан йылы һәм көнбайыштан йомшаҡ, талғын ел иҫкәндә балыҡ күпләп ҡаба. Киреһенсә, ел төньяҡтан йәиһә көнсығыштан иҫһә, был юлы ҙур уңышҡа өмөтләнергә ярамай.

Хәҙерге көндә беҙ балыҡ ҡаптырыу йыһаздарын (хатта емгә ҡәҙәр) һатып алыу яғын ғына ҡарайбыҙ. Ә бына ҡалҡыуыс, батырғыс яһағанда, балыҡсы булыу теләге артҡандан-арта, дәрт-дарман өҫтәлә.

Ҡармаҡ һабына артыш, муйыл, сәтләүек ағасын һайлайҙар. Мышар, ҡайындан яһалған ҡармаҡ һабы ла насар түгел. Ҡарағай, ерек ағастары бығa яраҡһыҙ. Яҡшы ҡармаҡ һабын көҙ көнө, ағаста һут кәмегәс кенә ҡырҡып алырға мөмкин. Киҫеп алынған һаптың ҡайырыһын өҫкө яртыһында ғына ҡалдыралар.

Йәнә бер кәңәш: балыҡ тоторға барған ваҡытта сыбар кейем-һалым кейергә ярамай. Балыҡтың күҙе үткер, етмәһә һыу буйындағы шау-шыуҙы ла тиҙ ишетә. Шунлыҡтан тәжрибәле балыҡсы һыуға артыҡ яҡын килмәҫкә, яр башында һелтәнеп йөрөмәҫкә, тыныс ҡына булырға тырыша.




## Ниңә ҡапмай ҙа ҡапмай?

Ял көнө Ағиҙел, Ҡариҙел һәм башҡа йылғалар буйлап үтһәң, яр буйында ҡармаҡ һалып ултырған бик күп кешеләрҙе күрәһең. Ҡайһы берәүҙәр ял көнөн ғаиләләре менән һыу буйында үткәрергә ярата. Унда ысынлап та рәхәт: йылға өҫтөнән һалҡынса дымлы ел иҫә, теләһәң — яр буйындағы эҫе ҡомда ҡыҙын, теләһәң, ҡолас ташлап һыуҙа йөҙ йәки ҡуйы ағас күләгәһендәге йәшел үләндә серем итеп ал. Әлбиттә, ялын йылға буйында үткәргән һәр кем балыҡ һурпаһы өмөт итә. Яңы ғына тотолған балыҡтан бешерелгән һурпаға ниндәй аш етә!

Шулай итеп, балыҡсылар яр аҫтында тырышып-тырышып ҡармаҡ һала. Ләкин көткән балыҡ эләкмәй ҙә ҡуя. Эләкмәҫлек бер ниндәй сәбәп тә юҡ һымаҡ: ҡармаҡ һабы һығылып торған бамбук, һыу өҫтөндә ағым ыңғайына



һыу төбө ҡармағы



өҙөлгән ҡармаҡ ебен нисек тоташтырып бәйләргә




һыу төбө ҡармаҡтары ошондайыраҡ була



ҡармаҡты епләргә өйрән

Йыртҡыс балыҡҡа ҡармаҡ һалғанда



йерә



суртанныҡ йәки еле

өс йәпле ҡармаҡ



йерәгә емләнгән сыр балыҡ

ҡалҡыуыс өйөрөлөп йөрөй, еп (жилка), ҡармаҡ та бөтөн. Яр буйынан яңы ғына ҡаҙып алынған селәүсен. Тик балыҡ ҡына юҡ. Ниңә улай һуң? Сәбәп — оҫталыҡ етешмәүҙә. Тотоу өсөн йәшәү шарттарын, яратып ашаған аҙыҡтарын һәм ваҡыттарын, ҡылыҡтарын, ҡасан, ниндәй емгә эләгеүҙәрен һәм башҡа бик күп нәмәләрҙе белергә кәрәк. Балыҡ тотоу — тәжрибә талап иткән үҙенсәлекле бер һөнәр ул.

Бына эҫе йәй ҙә башланды. Һыу буйында ял итеүселәр күбәйгәндән-күбәйә. Июнь айында балыҡты нисек ҡармаҡларға һуң? Бөтә балыҡтар ҙа тиерлек (бигерәк тә эреләре) ҡыҫала итен яратып ашай. Май ҡуңыҙына, сиңерткәгә, икмәккә — ажау, сабаҡ; ай урталарынан сиңерткәгә, бүрттерелгән һоло, бойҙай, борсаҡ һәм башҡа бөртөклө ашлыҡҡа, ҡамырға, селәүгә, себенгә йылғаның тәрән урындарында — опто; ҡыҙыл селәүсенгә, арыш икмәгенә күл һәм быуаларҙа, йылғаның яй аҡҡан ерҙәрендә — табан һәм ҡорман балыҡ; селәүгә — алабуға; таҙа, һалҡын һәм ағын һыулы тау йылғаларында сиңерткәгә йомро сабаҡ яҡшы ҡаба.

Шамбы йәй көнө ҡармаҡҡа эләкмәй тиерлек, сөнки һыу 12—15 градустан юғары йылынғас та ул йәйге йоҡоға тала. Уны яр ҡыуышындағы ояһынан, таш аҫтарынан хатта ҡул менән тотоп була.

Суртан ҡамыш, томбойоҡ һәм башҡа һыу үләндәре араһында һыуға эйелеп үҫкән ағас ышыҡтарында, ҡорбанын һағалап, сәғәттәр буйы ҡуҙғалмай ята. Бик һаҡ ҡыланғанда уларҙы сиртмәк менән ауларға мөмкин. Йәй суртан ҡармаҡҡа эләктереп һалынған тере балыҡҡа яҡшы ҡаба.

Опто, табан балыҡ һәм ҡорман балыҡтарын ҡармаҡлау өсөн, йылғаның улар йәшәрҙәй урынын һайлап, алдан ем һибергә һәм балыҡтарҙы ошо ергә эйәләштерергә кәрәк. Ем өсөн ҡорман балыҡҡа — бүрттерелгән һоло, арпа, арыш (аҙ ғына борсаҡ һәм бойҙай ҡушыла), оптоға — ҡырмыҫҡа йомортҡаһы, арпа бутҡаһы, табан балыҡҡа — икмәк, ҡарабойҙай һәм тары бутҡаһы, эремсек ҡулланыла. Һыуҙа тиҙ тарала торған ем марля тоҡсайға һалып төшөрөлә.

Оҫта балыҡсы балыҡ ҡармаҡлау өсөн бер ваҡытта ла яңы соҡоп алынған селәүсен тотонмай, сөнки уға балыҡ насар эләгә. Селәүҙәрҙе таҙартырға, ә бының өсөн бер-ике тәүлек һалҡынса урында (йылы ерҙә ул боҙола) ас тоторға кәрәк. Киндер йәки етен майында бер төн тотолған селәүсен бик яҡшы таҙара. Был майҙарҙың еҫен дә балыҡ ярата.

Ҡайһы берәүҙәр балыҡты көндөҙ генә ҡармаҡлай ҙа ҡайтып китә. Был бик үк дөрөҫ түгел. Ажау — ҡояш байығандан һуң, ҡорман балыҡ, алабуға һәм сабаҡ — көн буйы, опто — болотло көндәрҙә һәм иртә таң менән, табан балыҡ, бәрҙе һәм суртан иртәле-кисле яҡшы ҡаба. Ҡалҡыуыста ла хикмәт бар. Ажау һәм бөгәрсә балыҡтарын тотоу өсөн ҡалҡыуыс та, батырғыс та кәрәкмәй, сөнки уларҙы ағын һыуҙа ҡармаҡлайҙар, икенсенән, ажау ҡалҡыуыстан ҡурҡып ҡасыусан. Алабуға, ҡорман, табан балыҡтарын тотоу өсөн емле ҡармаҡ һыу төбөнә үк төшөрөлә, ә опто өсөн ем һыу төбөнән 4—9 сантиметр өҫтәрәк йөрөтөлә.

Ҡыҫҡа ғына яҙмала балыҡ тотоуҙың бөтә ғилемен һөйләп биреүе ҡыйын, әлбиттә, сөнки һәр төр балыҡтың үҙенең яратып йәшәгән һыуы, оҡшатып ашаған еме бар. Балыҡтың эләгеү-эләкмәүенә һыуҙың кимәле лә (артҡанда хөрт ҡаба), һауа торошо ла (селләлә иртә-кис кенә алыусан), балыҡ тотоу кәрәк-яраҡтарының йыһазландырылыуы ла, күк көмбәҙендәге айҙың ҡасан ҡалҡып, ҡасан байыуы ла (тулы айҙа насар сиртә), хатта балыҡсының кейеме лә йоғонто яһай (сағыу төҫтә кейенергә ярамай).

Бер һүҙ менән әйткәндә, оҫталыҡ, ә уға эйә булыу өсөн балыҡтар тураһында күп уҡырға, байтаҡ белергә кәрәк.

***Ш. Сабиров***

## КӘҢӘШТӘР

Балыҡ ҡармаҡларға барырға йыйынһаҡ, беҙ, ғәҙәттә, бөтә ҡорамалдарыбыҙҙы тәртипкә килтерәбеҙ, ниндәйерәк ем алыу тураһында хәстәрлек күрәбеҙ. Ә өҫ һәм аяҡ кейеме, аҙыҡ тураһында уйлап та ҡарамайбыҙ. Ни тура килһә, шуны эләктереп алабыҙ ҙа ысҡынабыҙ. Тәжрибәле балыҡсылар кәңәшенсә, бында ла уйлабыраҡ эш итергә кәрәк икән.

*Өҫ кейеме.* Ғәҙәттә көндөң үҙгәреп китеү ихтималын иҫтә тоторға кәрәк: йә бик ҡыҙҙырып, йә бик һыуытып ебәреүе, ямғыр яуырға тотоноуы бар. Шуның өсөн балыҡсы үҙенә теләһә ни ваҡытта иркен, уңайлы һиҙерлек кейем-һалым һайлап алырға тейеш. Мәҫәлән, спиннинг менән эш итеүсе кеше күп йөрөй. Уға ямғыр үткәрмәй торған туҡыманан тегелгән куртка кейеү уңайлы. Синтетик кейем балыҡсыларға бармай. Кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән костюм һәйбәт була. Һыу үткәрмәй торған плащ йәки накидка алыу яҡшы.

*Аяҡ кейеме.* Йәй көнө резина итек кеймәҫкә кәрәк, яр буйының ниндәй булыуына ҡарап, ботинка, ҡата (тапочкалар) кейергә тәҡдим ителә.

*Баш кейеме.* Ныҡ ҡыҙҙырған ҡояш аҫтында көн оҙоно ултырған кешегә эҫе ҡабыуы ихтимал. Шуның өсөн башҡа һалам эшләпә йәки аҡ башлыҡ кейергә кәрәк. Уныһын гәзиттән булһа ла яһап ебәрәһең.

*Көн режимы.* Ҡайһы бер балыҡсылар һыу буйында мөмкин тиклем оҙағыраҡ булырға тырышалар. 14—16-шар сәғәт буйына кәмәлә ултырған кешеләрҙе осратырға мөмкин. Ул ял түгел, организмды интектереү генә була түгелме?

## **Ҡайһы йылға йомартыраҡ?**

Билдәле булыуынса, спиннингка күберәк суртан, алабуға һәм башҡа шундай йыртҡыс балыҡтар эләгә. Улар һыу төбөндәге тамыр-томор аҫтына, ғәҙәттә, һыу ситендә үҫкән ҡамыш, томбойоҡ, үлән араһында, яр ситендәге ҡуйы таллыҡтар күләгәһенә йәшеренеп ята һәм үҙ ҡорбанына шунан ташлана. Тимәк, суртан тотам тиһәң, йылғаның йәки күлдең ошондай урынын һайлап алырға кәрәк. Ә шәп ағымлы ҙур йылғаларҙа бындай урындар бик һирәк. Ҡариҙел йәки Ағиҙел йылғаларында бындай урындарҙы табыу өсөн яр ситендәге кеше бейеклек үҫкән үләндәрҙе, кесерткәнлектәрҙе, ҡуйы таллыҡтарҙы йырып, байтаҡ юл үтергә кәрәк.

Икенсенән, оло йылғаларҙа һыу күп, һәм спиннинг һелтәгән майҙанда йыртҡыс балыҡтарҙың бөтөнләй осрамауы ла мөмкин.

Ә Ағиҙелдең һәм Ҡариҙелдең ҡушылмалары булған бәләкәй йылғаларҙа эш бөтөнләй башҡаса. Бәлкем, уларҙа балыҡ тотоуы еңелерәк тә, табышлыраҡ та.

Ни өсөн? Беренсенән, аҙ ғына тәжрибәһе һәм балыҡтарҙың йәшәү шарттары менән бер ни тиклем таныш булған кеше ҡайҙа ниндәй балыҡ йәшәгәнен белә. Әгәр алдындағы ятыу (сөңгөл) сите ҡамыш, томбойоҡ, таллыҡ менән ҡапланған икән, өҫтәүенә, һыу төбөндә ҡайһы бер балыҡтарҙы өркөтөп ағас тамырҙары


КӘТҮК
ТӨРЛӨ ЯЛТЫРМАЛАР
КҮБӘЛӘКЛЕ ҠАРМАҠТАР
ҠЫШҠЫ ЯЛТЫРМА
ҠАРМАҠ СЫБЫҒЫ
ОҘОН ҠУҢЫСЛЫ РЕЗИНА ИТЕКТӘР
ЙӘТМӘ (САҠ)
КӨЖНӘ (БАЛЫҠ КӘРЗИНЕ)
ҠАРМАҠТАР
БЕР ЙӘПЛЕ
ИКЕ ЙӘПЛЕ
ӨС ЙӘПЛЕ
ОШО КҮЛДӘ ЙӘШӘЙ ТОРҒАН ҠОРТҠА ОҠШАТЫП ЯҺАЛҒАН ҠАРМАҠ
КӨЖНӘ (БАЛЫҠ ҺАУЫТЫ)
БУРМАШ БАЛЫҠТЫҢ ИҢ ЯРАТҠАН АҘЫҠТАРЫНАН
ТӘБӘЛДЕРЕК МЕНӘН ЙЫЛТЫРҒЫ

ла ятһа, бында, һис шикһеҙ, суртан булырға тейеш. Уны эләктереп, тартҡылаша-тартҡылаша һөйрәп сығарыу балыҡсының оҫталығына бәйләнгән.

## Ҡыш та ҡыҙыҡ

Ысын балыҡсы бер ваҡытта ла балыҡты күпләп тотоуға йәки уның ҙурырағын эләктереп ҡалыуға ҡыҙыҡмай. Балыҡҡа ул баҙарға сығарып һатыу өсөн дә йөрөмәй. Балыҡсы балыҡҡа йөрөүҙән бары тик йәм, ләззәт ала, тәбиғәт ҡосағында ял таба. Бигерәк тә ҡышҡы осорҙа балыҡ ҡармаҡлап ултырыуы күңелле. Ғөмүмән, балыҡсының тормошо ҡыҙыҡлы. Теләһә кем балыҡсы була ла алмай бит әле. Уның өсөн үҙенә күрә ҡыйыулыҡ кәрәк, йоҡонды ҡыҙғанмаҫҡа, ихласлыҡ һәм саҡ ҡына булһа ла һәләтлек кәрәк. Ул ғына ла етмәй, балыҡтарҙың холҡон биш бармаҡ һымаҡ белеү талап ителә.

Хуш. Бөтә ошо сифаттар ҙа һиндә бар, ти. Тағы ла ни кәрәк һуң?

Үҙ-үҙен саҡ ҡына ихтирам иткән кешелә мәке уйыу өсөн һөймән йәки боҙ тишкес булырға тейеш. Билдәле, тәүҙәрәк бүтәндәрҙеке менән дә файҙаланырға була. Балыҡсылар йомарт бит улар. Алдатҡыс емде лә ҡыҙғанмаҫтар. Ҡышын ем урынына ҡамыр, тауыҡ үпкәһе, йәйҙән әҙерләнгән күбәләк ҡорттары ҡулланыла.

Балыҡсыға ҡышын иң мөһиме — йылыраҡ кейенеү. Боҙ өҫтөндә елһеҙ көндә лә ел өрә ул. Ҡыймылдамай, оҙаҡ ҡына ултырыу өсөн бик түҙемле булыу ҙа мотлаҡ. Аяҡҡа бийма өҫтөнән калуш кейеү шулай уҡ мөһим. Боҙ өҫтө боҙ өҫтө инде ул, бик тиҙ аяҡтар боҙға йәбешә. Ҡармаҡ һабы урынына ебен урау өсөн махсус ҡулсаһы булған кескәй таяҡ та ярай. Батырғысты ла эшләүе еңел. Берике ҡышҡы алдатҡыс, ялтамбай булғанда бигерәк тә һәйбәт. Ҡалҡыуыс бик ҙур булмаһын. Нигеҙҙә, бына шулар. Урынға барғас, бер аҙ оҫтара төшкәс, үҙең үк нимә алырға йәки алмаҫҡа икәнен асыҡ күрәһең инде. Тора-бара һинән дә яҡшы, һинән дә уңған балыҡсыны табыуы ла ауырлашыр. Эйе, эйе, был шулай. Тимәк, дуҫым, хәйерле сәғәттә! Әле ҡышҡы айҙарҙа шамбы, алабуға ярайһы ҡаба. Тынғыһыҙыраҡ балыҡсылар төндә шамбыға йөрөй башлағанға байтаҡ ваҡыт булып килә инде. Ул талымһыҙ балыҡ: ем итеп тауыҡ эсәге, ваҡ сабаҡ, шырт балыҡ алһаң да ярай — барыбер эләгәсәк...

Балыҡтың сиртеүен ҡышҡы мәлдә теләһә кем һиҙә лә алмай. Балыҡта йөрөп, теше төшкәндәр генә һыу өҫтө йыйырылыуҙан уҡ нимә булғанын аңлап ала. Ана, таныш ағай бер сабаҡты тартып та алды. Унан ҡуйынындағы ҡапҡа үрелде. Ҡапта ҡанҡорт (мотыль): һыуыҡта уны ҡармаҡҡа эләктереүе лә мәрәкә, уны теләһә кем эләктерә алмай. Палаткаһы булған балыҡсыға рәхәт — ел дә үтмәй, һыуыҡ та ҡурмай.

## Боҙ һәм балыҡ

Күлдәрҙең өҫтө боҙ, ҡар менән ныҡ ҡапланғанға, балыҡтар һауа етешмәүҙән тонсоға башлай, күпләп һәләк була. Шуға күрә тәбиғәт яратыусы һәр кем был хәлгә тыныс ҡарарға тейеш түгел.

Күлдәрҙә күпләп мәке уйырға йәки, мөмкинлек булғанда, мотор менән һауа өрҙөрөргә кәрәк. Ә инде мәке уйыуҙы һәр кеше булдыра ала.

Бынан һуң балыҡтар тонсоҡмаҫ, ә киреһенсә, уларға күпләп үрсергә мөмкинселек тыуыр.


ҡышҡы ҡармаҡтар
йерә йәки ҡарлыҡҡыс
һөймән (бөрөз)
Боронғо ҡорамалдар
А
Б
В
Г
Д
Е
Ж
З
И
К
Л

##ҺИН БЕЛӘҺЕҢМЕ?

Кислород күләме һәр литрға 1,5—5 кубик сантиметр тура килергә тейеш. Кислород норманан тыш күп булһа, балыҡ ябыға, ә аҙ булһа — үлә.

Контроль итеү өсөн уйылған мәкеләр ауыҙында ҡуңғыҙҙар һәм башҡа бөжәктәр барлыҡҡа килһә, был, балыҡтарҙың тонсоғоу ҡурҡынысы бар, тигән һүҙ.

Балыҡ ошо мәкеләргә күтәрелһә һәм күп хәрәкәт итә башлаһа, был нормаль булмаған күренеш тип ҡарала.

## Шамбы оҙаҡ көттөрҙө

Февраль урталарына тиклем шамбы «һунары»на ике ялыбыҙҙы әрәм иттек. Ғәҙәттә, ул ғинуар аҙаҡтарында ыуылдырыҡ сәсеп бөтә лә мәсекәйләнеп ашарға тотона, тимәк, ҡармаҡҡа ла ихлас ҡаба башлай торғайны. Ә быйыл, ғәжәп, ике юлы ла буш ҡайттыҡ.

Балыҡсы ятып сыҙаймы һуң?! Өсөнсө ялда, февралдең һуңғы аҙнаһында, йәнә киттек. Көн йылы, тик һауа баҫымы юғары — 762. Юлыбыҙ уңырына ла, шулай булғас, әллә ни өмөт юҡ.

Димдең бер ышығыраҡ ҡына ҡултығын һайлап, шамбы ҡармағын емләү өсөн шырт балыҡ тоторға тырышабыҙ. Юҡ та юҡ. Төшкә яҡын дуҫым Алексей ҡысҡырып ебәрҙе: «Тоттом!» Минең ҡармаҡты ла сиртте. Шырт балыҡ бер-бер артлы ҡаба ғына. Эләккән береһен йыуан епле ҙур ҡармаҡҡа ҡаптырып, шамбыға һала барабыҙ. Шулай, «һә» тигәнсе, ун бер ҡармаҡ ҡуйҙым шамбыға. Алексей ҙа «эшен» бөтөрҙө. Инде төндө көтөргә генә ҡалды. Шамбы ҡараңғы төшкәс кенә «һунар»ға сыға.

Термостарыбыҙҙы, аҙыҡтарыбыҙҙы алып, ирәүәнләп төшкөлөккә ултырабыҙ. Өҫтәл урынына — балыҡсы йәшниге, ашъяулыҡтар — гәзит. Салт аяҙ. Тирә-яҡ һип-һил. Яр буйындағы мөһабәт тирәктәрҙә һирәк-һаяҡ ҡына ҡарға ҡаҡылдап ҡуя. Ана, өҫтөбөҙҙән һайыҫҡан шыҡырыҡлап үтте. Ҡала ығы-зығыһы теңкәһенә тейеп бөткән кешегә боҙ өҫтөндә һалҡын колбаса менән икмәк кимереп термостан боҫорап торған эҫе сәй һемереү үҙе ни!

Ял итеп алғас, тағы ҡармаҡ тотабыҙ... Кис ҡаршы ярҙағы ауылға йүнәләбеҙ. Йоҡо туйҙырып, иртән иртүк боҙға төштөк. Шамбы ҡармаҡтарын тикшерәбеҙ. Тәүгеһен ебенән ҡалҡыта башлайым. Ауыр, дерт-дерт тартҡылаша: ҡапҡан бит шамбы! Ун бер ҡармаҡтың һигеҙенә эләккән. Алексей ҙа бер-бер артлы шамбы сығара.

Оҙаҡ көттөрҙө быйыл шамбы. Әле ыуылдырыҡ сәскәс, бушап ҡалған ҡорһағын әрһеҙләнеп тултырырға тотонған. Мартта ла, апрелдә лә ҡыуандырасаҡ ул балыҡсыны.

Алексей кисә өйөмә шылтыратты. «Боҙ барҙа йөрөп ҡалайыҡ. Алдағы ялда барырбыҙ»,— ти. Бармаған ҡайҙа ул!

*Ү. Ғәтиәтов*

* * *

Ялтанбайсылар бер урында ултыра алмай. Мәке уялар ҙа алдатҡысты һалалар, әгәр «тартмай» икән, ары атлайҙар һәм яңы урында тишәләр. Алабуға өйөрөнә эләккәнсе шулай сәйәхәт итәләр.

...Бына балыҡсылар бер-бер артлы мәке уя. Шунда уҡ палаткалар ҡоралар, мәкеләрҙе емләп, бер йәки ике һәм өс ҡармаҡҡа ем эләктереп, уларҙы 8—10 метр тәрәнлегенә төшөрәләр.

Бөтә балыҡсыларҙың ла күҙҙәре мәкелә. Хатта улар бер-береһе менән һөйләшмәйҙәр ҙә. Оҙаҡ та үтмәне ҡартыраҡ балыҡсы бер сабаҡты боҙ өҫтөнә тартып та сығарҙы һәм: «Эләкте!» — тип ҡысҡырып та ебәрҙе.

Иҙрис менән Әхтәмдәр алабуға, суртан тоторға ҡарар итте. Вағыраҡ сабаҡ ҡапҡас та, уларҙы ҡармаҡҡа эләктереп, күлгә һалдылар. Бер аҙҙан Иҙристең ҡармағына ҙур бер суртан ҡапты. Ләкин ҡыл нәҙек, мәке бәләкәй булғанлыҡтан, ул ҡармаҡ ебен өҙөп китте. Иҙристең үкенгәнен күрһәгеҙ ине! Шулай ҙа ул 2,5—3 килограмлы ике суртан эләктерә алды. Әхтәм дә 3—3,5 килограмм ауырлығындағы ике суртан, 800 грамлы бер алабуға тотто.

Зәкигә һан яғынан тиңләшеүсе кеше булманы, ул 109 сабаҡ алды. Шулай ҙа башҡалар ҙа күп кенә балыҡ тотто, алыҫтан килгән балыҡсылар ҙа буш ҡул менән ҡайтманылар.

## Ҡышын ҡаптырыу

Мәкенән балыҡ ҡаптырыу йәйгенән ныҡ айырыла. Был ваҡытта балыҡтарҙың күбеһе ярым йоҡоға тала, шул сәбәпле бик һүрән сиртә, хатта йәй көнө балыҡ бик шәп ҡапҡан ем ярарлыҡ булмай. Шуға күрә лә ҡышын балыҡ тотоу ҡорамалдары икенсе төрлө була.

Беҙҙә ҡыш балыҡ ҡармаҡлаусы һәүәҫкәрҙәр һаны артҡандан-арта бара. Һәр кемгә билдәле, ҡыш балыҡ ҡармаҡлау кешенең сәләмәтлеген нығыта, сөнки балыҡсы ҡышҡы һалҡын һауала йәйәү йөрөй, тәнен сыныҡтыра, саф һауа һулай.

Боҙ өҫтөндә һаҡ булырға кәрәк. Боҙ 5—6 сантиметр ҡалынлыҡта булғанда ғына, уның өҫтөндә йөрөргә ярай. Шишмәләр урғылған урында боҙға инеү, балыҡ ҡармаҡлағанда бер-беренә яҡын ултырыу бик хәүефле.

Ҡыш балыҡ тотҡанда ниндәй ҡармаҡ ҡулланыуҙың әһәмиәте бар. Тәжрибәле балыҡсы ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән балыҡ тотҡанда 0,15—0,17 миллиметр йыуанлыҡтағы ептәрҙе файҙалана. Ҡармаҡ ҡыуалыҡна 12—15 метр оҙонлоҡло еп уратып ҡуйыла. Ҡалҡыуыс һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөмәҫкә тейеш, сөнки ул һыу өҫтөндә тиҙ туңа. Шуға күрә ҡалҡыуыс һыуға 2—3 сантиметр батырға һәм күҙгә күренеп торорға тейеш. Был ниндәй ауырлыҡта батырғыс ҡулланыуға ҡарап хәл ителә.

## Ҡорамалдар

Ҡышҡы ҡармаҡ һабы бик ҡыҫҡа, ғәҙәттә 40—50 сантиметр, ә ебе — 0,15 сантиметр нескәлегендә була. Ҡармаҡтарҙың бик вағы (ташбаш ҡармаҡтары) алына. Батырғыс йәйге ҡармаҡтағынан бөтөнләй айырыла. Ул ептең осона, ҡармаҡтан түбән тағыла. «Закидушка»ның бындай бәләкәй формаһы, балыҡтың

бик насар ғына сирткәнен дә тойорға мөмкинлек бирә. Ҡалҡыуыс та бик бәләкәй була. Быңдай махсус ҡышҡы ҡалҡыуыстар кибеттәрҙә һатыла, пробка киҫәгенән үҙеңә яһап алырға ла мөмкин.

Балыҡ ҡаптырыу менән таныш булмаған кешегә башта фабрикала эшләнгән берәр ҡармаҡ һатып алыу яҡшыраҡ (хәҙер бындай ҡармаҡтар магазиндарҙа йыш ҡына һатыла). Сөнки, берҙән, әҙер ҡармаҡ менән балыҡ ҡаптырыу «серҙәрен» тиҙерәк үҙләштерергә мөмкин. Икенсенән «өлгө»гә ҡарап артабан үҙеңә ошондай ҡармаҡтар яһап алырға мөмкин.

Ҡыш көнө ҡармаҡ менән балыҡ тотоуҙың икенсе төрө — «мормышка»ға ҡаптырыу. «Мормышка»ға ҡаптырыу бигерәк тә Уралда ныҡ таралған. Был ҡорамал ғәҙәттәге ҡышҡы ҡармаҡтан шул яғы менән айырыла — ҡармаҡ урынына епкә бәләкәй генә ялтырма — ҡармаҡтар тағыла (мормышка шулай уҡ спорт тауарҙары кибеттәрендә һатыла). «Мормышка» булғанда батырғыс һәм ҡалҡыуыс ҡулланылмай. «Мормышка» менән ҡаптырғанда ҡармаҡ һабының осона нәҙек пружина киҫәге беркетелә һәм ҡармаҡ ебе шунан аша үткәрелә. Балыҡ ҡармаҡҡа саҡ ҡына ҡағылыу менән тимер сым тирбәлеп, был турала «хәбәр итә».

«Мормышка» менән ҡаптырыу ябай ҡармаҡ менән ҡаптырыуҙан ныҡ айырыла. Ҡалҡыуыслы ҡармаҡты һыуға һалып ҡуялар. «Мормышка»ға тотоусы иһә ҡармағын вертикаль хәлдә тирбәтеп тора. Һыу төбөнән үк аҡрын ғына тирбәтә-тирбәтә, ул ҡармаҡты өҫкә күтәрә, унан шул уҡ юл менән өҫтән кире төпкә төшөрә. Былай эшләгәндә, мормышканың һыуҙа ялтырап уйнауы балыҡты алыҫтан йәлеп итә.

## Мәке уйыу

Бының өсөн ғәҙәттә һөймән, йәғни ағасҡа һапланған осло тимер ҡулланалар. Бынан тыш, хәҙер боҙ тишкес бырау эшләп сығарыла. Һөймәндең ҡулай яғы — мәкене киң итеп уйырға мөмкинлек бирә, яйһыҙ яғы — боҙ уйғанда балыҡты ҡурҡыта, бигерәк тә йоҡаҡ боҙҙа. Тишкес бырау менән боҙҙо бырауылау бик еңел, әммә мәкене ҙур уйып булмай, шуның өсөн бер юлы нисәмә тишек тишергә тура килә.

Балыҡ тотоу өсөн ҡалын боҙҙа конусҡа оҡшаш соҡор ҙа уйыу уңайлы. Соҡорсаның өҫкө яғы киң, ә аҫҡы яғы тарыраҡ итеп яһала. Аҫҡы өлөшөндә түңәрәктең диаметры 12—15 сантиметр.

## Емләү

Сабаҡ, ҡараҡанат, ҡыҙылғанат кеүек балыҡтарҙы ҡаптырғанда ябай ҡышҡы ҡармаҡты, ғәҙәттә, ҡамыр, икмәк менән һалалар. Йыртҡыс балыҡтарҙы ҡаптырғанда (алабуға, ҡушбаш һ. б.) «ҡыҙыл ҡорт» (мотыль) менән емләнә. Был бәләкәй генә ҡыҙыл ҡорт — серәкәйҙең оҙон моронло төрөнөң ҡарышлауығы. Башынан түбән (икенсе быуынынан) эләктерелгән ҡыҙыл ҡорт һыуға төшөү менән ҡармаҡта уйнай башлай, шуның менән һүлпән балыҡтың күҙен ҡыҙҙыра. Мормышкаға балыҡ ҡаптырғанда, ҡамыр һымаҡ ем ҡулланылмай, төп ем — ҡыҙыл ҡорт, бурмаш, ағас ҡорто һ. б. Эре балыҡтар булған йылғаларҙа (Иҙел башында, Танып, Һаҡмар буйҙарында) ҡармаҡты ғәҙәттәге




селәүсен менән дә емләйҙәр. Әгәр йылға йәки күлдә ҡышын эре балыҡ тотолмай икән, ул саҡта селәүсен менән емләү ыңғай һөҙөмтә бирмәй, сөнки ваҡ-төйәк балыҡ ҡышын селәүсенгә ҡабып бармай.

Бынан тыш, ҡыш көнө балыҡты шулай уҡ ялтырмаға ҡаптыралар. Ҡышҡы ялтырма спиннингтыҡынан ныҡ айырыла, ул бик бәләкәй була һәм уны ырғытмайҙар, бәлки, мормышка һымаҡ уҡ һыуҙа вертикаль торошта тирбәтәләр, йәғни, бер өҫкә күтәрәләр, бер түбән төшөрәләр.

Ҡармаҡҡа ҡатыу өсөн емде алдан әҙерләү талап ителә. Быны өсөн күбәләк ҡарышлауығы, селәүсен, ҡыҙылғорт һәм башҡалар файҙаланыла. Ҡуяндың йәки йорт ҡуяныының үпкәһенән киҫеп алынған ит киҫәге, шулай уҡ тоҙланмаған суҫҡа майы киҫәге һәм башҡалар ҙа емгә яраҡлы.

* * *

Үҙенән-үҙе билдәле, ҡышын балыҡсыға боҙ өҫтөндә ултырырға тура килгәс, ул йылы кейенергә тейеш. Башҡа ҡолаҡлы бүрек, аяҡҡа быйма, өҫкә тире тун, һырылған салбар кейергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта кейем хәрәкәт итеү өсөн уңайлы булырға тейеш. Һырма кейем эсенән туҡыма күлдәк һәйбәт була. Иң өҫтән ҡыҫҡа тун йә плащ кейергә лә мөмкин. Ә аяҡҡа калушлы быйма кейеү яҡшы.

Боҙ өҫтөндә ҡармаҡ һалғанда, ултырыр өсөн йәшник йәки ултырғыс та булырға тейеш. Ултырыу өсөн бәләкәй сананы ла файҙаланып була. Былар҄ан

башҡа, боҙ уйыу өсөн балта-лом, соҡорсаны боҙ киҫәктәренән таҙартыу өсөн иләкле сүмес кәрәк. Ҡармаҡлағанда ҡул һәр ваҡыт ҡоро булһын өсөн, сепрәк менән йыш һөртөргә тура килә. Шуға күрә сепрәктәр ҙә әҙерләргә кәрәк.

Бөтә нәмәләр етеш булғанда ғына балыҡ ҡармаҡлау уңышлы үтәсәк.

Бөтә кәрәкле ҡорамалдар була тороп та балыҡты ҡаптыра алмауың мөмкин. Сөнки ҡыш көнө ниндәй балыҡтың ҡайҙа ҡышлауын, ҡайһы мәл һәм ниндәй емгә ҡабыуын алдан уҡ яҡшы белергә кәрәк. Быныһы инде тик тәжрибә аша ғына бирелә. Тәү мәлдәрәк ул турала тәжрибәле балыҡсыларҙан һорашырға һәм кәңәш алырға мөмкин.

## ТАРИХ БИТТӘРЕНӘН

С. Т. Аксаков әле бала сағында сиге булмаған тулҡынланыу менән Дим йылғаһынан кескәй бер балыҡ алғандан башлап, ҡартайғанға тиклем балыҡсылыҡ менән мауығыуынан туҡтамай.

1847 йылда уның «Балыҡ тотоу тураһында яҙмалар»ы баҫылып сыға.

«Тәбиғәттең бөтәһе лә яҡшы, ләкин бөтә тәбиғәттең күрке — һыу» тип яҙҙы С. Аксаков.

Башҡортостан йылғаларында һәм күлдәрендәге бөтә төп балыҡтарҙы яҙыусы бик ентекләп тасуирлай һәм характерлай. Түбәндә уның «Багров ейәненең балалыҡ йылдары» тигән автобиографик китабынан (1858 йыл) бер өҙөк биреп үтәйек:

«Атайым, иртәгә Дим буйында туҡтарбыҙ, тип вәғәҙә итеп, унда балыҡ тотоуҙы күрһәтергә булды, ә балыҡ тотоу тураһында мин хәҙергә тик унан ишетеп кенә беләм әле. Ял иткән ваҡытта, крәҫтиән лапаҫы аҫтында, атайым миңә лә, үҙенә лә ҡармаҡ яһаны. Был да минең өсөн яңы бер ҡыҙыҡ эш булды. Ат ҡойроҡтарынан ҡыл өҙөп алдылар ҙа ҡармаҡ ебе ишә башланылар, ә мин бер-береһенә ялғанған ҡылдарҙың осон тотоп торҙом, атайым иһә нәҙек кенә итеп еп иште. Беҙгә мине бик ныҡ яратҡан крепостной крәҫтиән Ефрем Евсеич булышты. Евсеич ишмәне, ул эре балыҡ тотор өсөн билдәләнгән йыуан епте, тубығы өҫтөнә һуҙып һалып, нисектер сиралтты ғына; алдан уҡ әҙерләп ҡуйылған батырғыстар һәм ҡармаҡтарҙы ныҡлап бәйләнеләр, шунан һуң мин ғүмеремдә беренсе тапҡыр күргән был ҡоралдарҙы, бәләкәй генә таяҡ киҫәгенә урап, ҡағыҙға төрҙөләр ҙә, юғалмаһын тип, минең тартмама һалып ҡуйҙылар».

* * *

Антон Павлович Чехов Димдә ҡымыҙға килгәндә балыҡ ҡармаҡларға бик яратҡан.

## Һөйләшеү

— Әйҙә, тышҡа сығабыҙ! Икмәк ал да, тышта ашарбыҙ! Ҡармаҡтарымды ла күрһәтермен,— тине Ирек.

— Әйҙә.

Мәрзиә апай:

— Сәй эскәс тә өлгөрөр инегеҙ әле,— тип ҡараһа ла, Ирек менән Фәниә урындарынан тороп киттеләр. Өй алдына сыҡҡас, Ирек Фәниәне үҙенең ҡармаҡ һаптарын теҙеп ҡуйған ситән янына алып килде.

— Бына улар, минең ҡармаҡтар. Былар менән, маҡтанып әйтмәйем, теләһә ниндәй балыҡты ҡаптырырға була. Бына быныһы, ҙурыһы — алабуға ҡармағы. Бына быныһын беҙ, балыҡсылар, суртан ҡармағы, тип йөрөтәбеҙ. Ана телдәрен күрәһеңме, ниндәй үткер. Ә бына быныһы менән сабаҡты ла, йылтырҙы* ла, ҡушбашты ла тотоп була.

— Ҡушбаш ике башлы буламы әллә? — тип һораны балыҡтарҙың үҙҙәрен дә, исемдәрен дә айыра белмәгән Фәниә, ҡыҙыҡһынып.

— Һи-и-й, йүләр ҙә икәнһең үҙең. Ҡушбашты ла белмәйһең икән әле. Ике башлы балыҡ була тиме ни? Уның башы бик ҙур. Шуға беҙ уны ҡушбаш тибеҙ. Һин алабуғаны ла танымайһыңдыр әле, моғайын, эйеме? — Ирек, йөҙөнә ололоҡ төҫө сығарырға тырышып, Фәниәгә ҡараны.

— Танымайым шул. Берәй көндө мине лә балыҡҡа алып барырһың әле, яраймы?

— Балыҡ тотоу ир-ат эше ул. Ҡыҙҙар менән йылға буйында мәшәҡәт кенә... — тип яуап ҡайтарҙы Ирек, эре генә. Унан: — Ярай, әсәйҙәргә һөйләнмә! Берәй көндө эйәртермен. Миңә сиңерткә булһа ла тотоп килтерерһең,— тип өҫтәп ҡуйҙы.

*(Фәнил Әсәновтан)*

## Булған хәл

Бер балыҡсы менән ҡыҙыҡ хәл булды. Ул бер мәке ҡырында бик оҙаҡ ултыра. Ләкин бер балыҡ та сиртмәй. Шунан һуң ул мәкегә ҡармаҡҡа сабаҡ емләп һала ла үҙе икенсе мәкеләге ҡармаҡтарын ҡарарға китә. Шул арала һалып ҡалдырған ҡармағына ҙур суртан килеп ҡаба һәм ҡармаҡ ҡыуалын мәкегә өҫтөрәй башлай. Балыҡсы, был хәлде күреп, кире борола. Килеп етеп, ҡармаҡ ҡыуалын тоттом тигәндә генә, суртан ҡыуалды боҙ аҫтына алып инеп китә. Ул шул тиклем үкенеп, йүгергеләп ҡараны, ләкин суртандың ҡойроғо ла күренмәне.

Балыҡсылар, бер-береһен мәрәкәләшеп, көлөшөп, сатлама һыуыҡта ла һәйбәт ял итеп ҡайттылар.

## Маҡтаныштылар

Һунарсы менән балыҡсы осраша.
— Эштәр нисек?
— Ҡотла: ике аршындай шамбы эләкте!
— Ҡайҙа һуң ул?
— Ҡармаҡтан ысҡынып китте...
— Ә мин айыу осраттым...
— Үлтерҙеңме һуң?
— Юҡ, үҙем ҡасып ҡотолдом...

*(Башҡортса календарҙан)*

* Боҙаяҙ яҡтарында күкйөнгә ҡарата әйтәләр.— Ш. Нафиҡый.

## Беҙҙәге балыҡтар

Башҡортостан һыу ятҡылыҡтарында 1957 йылға саҡлы 42 төрлө балыҡ үрсей ине. Улар 11 төркөмгә бүленә: 1) Һаҙан төркөмөнә 21 төр, 2) Эт балығы төркөмөнә — 3, 3) Йәйен төркөмөнә — 1, 4) Суртан төркөмөнә — 1, 5) Алабуға төркөмөнә — 4, 6) Тәрәс һымаҡтарҙан — 1, 7) Һөмбаш балыҡтарынан — 4, 8) Бәрҙе төркөмөнән — 1, 9) мәрсен һымаҡтарҙан — 3, 10) үгеҙ балыҡтарҙан — 1, 11) йылан балыҡтар төркөмөнә 2 төр инә һәм башҡалар. Аҡ балыҡ, мәсәлән, Ағиҙел йылғаһына ыуылдырыҡ сәсергә йыл һайын күтәрелә ине. Өфө балыҡ үрсетеү заводы хеҙмәткәрҙәре был ыуылдырыҡты йыя һәм, яһалма аталандырып, завод шарттарында инкубация үткәреп, Ағиҙелгә ебәрә торғайны. Ошо балыҡтарҙың Каспий диңгеҙенә төшөүҙәре күҙҙә тотола ине. Был эш 1922 йылдан 1937 йылғаса, йәғни Куйбышев ГЭС-ы ходҡа ебәрелгәнсе, барҙы.

Ләкин, әйтергә кәрәк, аҡ балыҡтың Ағиҙелгә һәм уның тармаҡтарына күтәрелеүе Куйбышев ГЭС-ы төҙөлгәнгә саҡлы уҡ кәмегәйне инде. Бының төп сәбәбе Ағиҙел йылғаһының нефть ҡалдыҡтары менән бысраныуынан килеп сыҡты. Шул уҡ сәбәп менән, шулай уҡ һыу ятҡылыҡтарының сүпләнеүе, бысраныуы арҡаһында сөгә балығы ла бөтөнләй бөтә яҙҙы.

Мәктәп балалары һыу ятҡылыҡтарын күҙәтеү, уларҙың сүпләнеүенә һәм бысраныуына юл ҡуймау, яҙын һәм йәйен һыу ҡайтҡандан һуң бүленеп ҡалған селбәрәләрҙе ҡотҡарыу буйынса бик мөһим эш эшләй ала, ҡыш көнө йылғаларҙа һәм күлдәрҙә балыҡ тонсоҡҡан саҡта, мәкеләр уйып ҙур файҙа яһау иһә һәммәбеҙҙең ҡулынан килә.

### ТАШБАШ

Һәр беребеҙгә бала саҡтан таныш ташбаш (ҡомай, ҡомоҡа, ҡомҡорһаҡ) йылғаларҙа, күл һәм быуаларҙа йәшәй.

Ташбаш һоро, йомро, сыбар, осло моронло балыҡ. Ташбаш беҙҙә бик күп һыуҙарҙа таралған балыҡ, балыҡсылар ғынамы, уны һәр бер кеше таный. Был балыҡтың исеме хатта бәғзе урындарҙа кешегә ҡарата ла әйтелә. Шулай, Учалы, Белорет төбәктәрендә ташбаш тип бер аңра, төшөнмәгән кешегә әйтәләр.

Ташбаш иң киң таралған һәм һәр кемгә билдәле балыҡтарҙың береһе. Беҙҙең илдә ташбаш һәм уның төрҙәре, Европа өлөшөнән башҡа, бөтә Себерҙә тиер-



лек таралған. Һәр балыҡсы белгәнсә, ташбашты бигерәк тә Башҡортостандың ваҡ йылғаларында осратып була. Бындай йылға-инештәрҙә ташбаштан башҡа тағы тик бөгәрсәне һәм һирәкләп бәрҙене йәки сағалаҡты күрәһең. Көнсығышта нәҡ бындай ваҡ йылғаларҙан Краснахты тигәнен күрһәтеп була. Ул Уйға ҡояр йылға (Учалы төбәгендә). Көньяҡта шундайҙарҙан Инәк, Абысҡан, Наҡаç, Урманка һәм бүтән ваҡ йылғаларҙа ташбаш айырыуса күп. Өршәккә ҡойған Үҙән дә — ҡомай төйәге.

Был ваҡ балыҡ, ғәҙәттә төбө ҡомло булған урындарҙа йәшәй. Шулай ҙа ташбаштар ҡырсынташлы йә төбө ташлы булған йылға-күлдәрҙә лә булалар. Әммә ләкин был ваҡ балыҡ йәшәгән урында һыу төбө ҡомло булмаçҡа ла мөмкин. Миçал — Шәмәк быуаһы һ. б. Төрлө төбәктәрҙә ташбашты төрлөсә атап йөрөтәләр: тосмохар, тостый, ташаҡа... Йәмғеһе беҙҙең илдә ошо балыҡ 50-шәр атамаға эйә!

Ташбашҡа ентекләберәк ҡараһаң, ул үҙенең һыны һәм төçмөрләнеше менән йәшәгән урынға бик камил йәрәшкән: балыҡтың кәүҙәһе өçтән ҡарараҡ, яняҡтары тимгел-тимгел.

Уның өсөн һыу таҙа булырға тейеш. Әммә ҡомай артыҡ һалҡын һыуҙы ла яратмай. Ул затлы балыҡ түгел. Үҙе һымаҡ уҡ балыҡтар менән бергә көтөү-көтөү булып йөрөй. Ҙурлығы 7—20 сантиметр, ян-яҡтарында айғолаҡҡа яҡын уҡ башланып ҡойроғона тиклем теҙелгән 12-шәр ҡара тап, аçҡа ҡараған ауыҙында ҡуш мыйыҡсаһы бар. Ул һыу төбөндәге ҡомға һыйынып ята, шуның өсөн дә уны ҡомай, ҡомоҡа, ҡомбәрә тип тә йөрөтәләр. Башҡортостанда ҡомайҙың ике төрө осрай.

Ташбаш бик үк йылғыр балыҡ түгел. Шулай булыуға ҡарамаçтан, шаҡтай тиҙ үçә. Ашаған аҙығы — бөжәк ҡарышлауыҡтары, һыуҙағы ҡорт-маҙар. Ҡайһы берҙә үҙенең һәм башҡа балыҡтарҙың ыуылдырығынан да баш тартмай. Ә үҙе ыуылдырығын яҙ аҙағынан алып август тиклем сәсә. Ташбаш көндөҙ генә йөҙөп йөрөй, төндә йөҙгөстәренә таянған хәлдә һыу төбөндә ята.

Ҡомайҙы ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән май аҙаҡтарында ҡаптыра башлайҙар. Ҡармаҡ өслө-дүртле, ебе нәҙек, ҡалҡыуысы ҡауырһындан булырға, дроб бөртөгөндәй генә ҡурғаштан батырғыс ҡуйылырға тейеш. Ташбаш көндөҙ генә шәп ҡаба, эңер төшөү менән сиртеүе туҡталып ҡала. Яҙ һәм йәй уны селәүсенгә,

себенгә, ҡортҡа ҡармаҡлайҙар. Ҡара көҙ еткәс, һалҡындар төшкәнсе ул ҡыҙыл ҡортҡа ҡаба. Ҡармаҡ һыу төбөндә ятырға тейеш. Ташбаш сиртмәй башлаһа, һыуҙы болғатып алырға кәрәк, шунан ул йәнә яҡшы ҡаба башлай. Был кескәй балыҡтың ите тәмле һәм файҙалы.

Ташбаш балыҡтың исеме нисәү? Хисаплап ҡарайыҡ әле: 1) ҡомтой, 2) ҡомоҡа, 3) ҡомтөрткөс, 4) һөмбаш, 5) ташбаш, 6) тәрбе, 7) таран һәм Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә йәнә утыҙлап исеме билдәле.

## Мажара

Бөгөн майҙың урталары булғанға, ҡояш йыраҡ, ләкин тура һәм матур ҡарай. Бөтә ер йөҙө яҙҙың гүзәллеге менән солғана, һәр ерҙә тын ғына, аҡрын ғына бер шатлыҡ һиҙелә...

Ярҙың аҫтына тауыш-тынһыҙ ғына керҙек тә, төрлө ергә урынлашып, ҡармаҡтарҙы әҙерләй башланыҡ. Һәммәбеҙ тын, һәммәбеҙ ашыға, ҡабалана ине. Үҙебеҙсә, балыҡтың күңеленә бик оҡшарға тейеш булған емдәрҙе ҡуйҙыҡ та: — Ҡармаҡ һалдым, йүгереп ҡап, яр башында ялтырап ят! — тип, ҡармаҡтарҙы һыуға ырғыттыҡ.

Бында иң башлап алыуҙың артыҡ бер ҡыҙығы, мәртәбәһе бар. Шунлыҡтан һәр кемдең иптәштәрҙән алдараҡ эләктерәһе килә.

...Ах... булманы!

Иптәштәрҙән береһе, ялтыратып, яр башына ниҙер атты... Һәммәбеҙ ҡармаҡтарҙы ташланыҡ та шул бәхетле иптәшебеҙ янына килдек.

Ул, һыу ситенә үләнгә төшкән балыҡтың өҫтөнә йығылып, тоторға маташа. Үҙе биҙгәк тотҡан кеүек ҡалтырай, ҡабалана ине. Уның балығын күреү менән, барыбыҙҙың да эсенә хәсрәт уты ҡабынып, шул балыҡтың үҙебеҙгә эләкмәүенә эстән көйөндөк. Минең күңелемә: «Мин балыҡ булһам, гелән миңә генә ҡабыр инем!» — тигән бер уй килде.

Теге малай йәш, өйрәнмәгән булғанға, балығын һаман урынлаштырмаған, күҙен ала алмай ҡыҙығып, уйнатып тора ине.

Бына бер ваҡыт «шалт-шолт» иткән бер тауыш ишетелде.

Ҡараһаҡ, малайыбыҙҙың йөҙө ағарған, ике ҡулын тығып, һыу ситен бутап ята: ай, бисараҡай, балығын ысҡындырған...

Гонаһты йәшерер хәл юҡ, тыштан: «Ну һуң, ҙур ине, әй, бер көн Шаһи ҡарттың мурҙа менән алған суртаны саҡлы бар ине!» — тип, эсебеҙҙән шатландыҡ.

Икенсе балыҡты мин алдым. Ләкин иң кескенә һәм иң ҡәҙерһеҙ бер яман бәрҙе* ине.

Иптәштәр һәммәһе бер тауыштан:

— Ҡарағыҙ әле. Салихҡа сәнсә бармаҡтай ҙа бер балыҡ ҡапманы! — тип көлөштөләр...

Мин, эсемдән янһам да, тыштан һыр бирмәнем:

— Һы, улаймы ни?.. Күҙегеҙ ҡыҙамы ни?.. Һеҙгә ул да юҡ бит әле! — тинем.

***Ғәлимйән Ибраһимов***

---

* *Ерле халыҡ ташбашты Дим, Ауырғазы яҡтарында шулай тип йөрөтә. Ш. Нафиҡый.*



## КҮКЕН

Ҙурлығы менән күкен ташбаштан ары китмәй. Күкен (уны күкйөн, күкәс, күксәй һәм башҡа исемдәр менән дә атап йөрөтәләр) кескенә, етеҙ, ныҡ ҡыҫылған кәүҙәле, өҫкә ҡайтарылған аҫҡы яңаҡлы — беҙҙә киң таралған балыҡтарҙың бер төрө ул. Күкендең арҡа өлөшө йәшкелт төҫ сағылышында, ә ҡорһағы менән ҡабырғалары көмөш һымаҡ ялтырап тора.

Күкен тәрән һәм һай йылғаларҙа, шулай уҡ саф һыулы күлдәрҙә лә тереклек итә. Йәй айында һыуҙың өҫкө ҡатламдарынан ары китмәй, һыу өҫтөнән йөҙөп барған аҙыҡ менән туҡлана. Күкендәр бигерәк тә быуаларҙан тыш, йылғала инештәр ҡойған һайғаҡ урындарҙа йыйыла. Күкен йылғаның ағыны өҫтөндә йөҙгән балыҡ ул, бер һүҙ менән әйткәндә.

Күкендең ыуылдырыҡ сәскән мәле һыу 15 градусҡа ҡәҙәр йылынғас, май— июнь айҙарына тура килә.

Быңдай төр балыҡты яҙҙан алып көҙгә саҡлы иң еңел һыйғыр сусаҡлы ҡармаҡ һаптары менән ҡармаҡлайҙар, ҡалҡыуыс урынына пробка киҫәген беркетеп ҡуйһаң да була, ҡурғаштың был осраҡта файҙаһы юҡ. Күкенгә төрлө алдаҡҡыстар хеҙмәт итә — тиҙәк селәүсендәре, яңы ҡырмыҫҡа йомортҡалары, ваҡ ҡармаҡҡа ҡамыр йәки икмәк киҫәген йомарлап ҡуйһаң да була. Күкен иң яратҡан аҙығын — ҡармаҡтағы себенде эләктереп кенә алып китә. Ошо ваҡыттан файҙаланып, уны һирпеп тә алаһың, бер эләгә башлаһа, күпләп ҡаба был бәләкәс, ите тәмле, һимеҙ балыҡ.

## Ә БЫНЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

— Күкйөндөң төрлө органдарынан һығып алған шыйыҡсаның да бактерияларҙы үлтереүе билдәле, тәңкәләрендә гуанин тигән көмөш һымаҡ матдә бар.

— Ауыҙҙары өҫкә ҡарап торған балыҡтарға бөжәктәрҙе тотоу еңелерәк. Бөжәктәр менән туҡлана торған күкйөндөң ауыҙы нәҡ шундай.

— Күкйөнгә бөжәктәрҙе тоторға, нигеҙҙә, күҙҙәре ярҙам итә, ләкин шул уҡ ваҡытта бөжәктәр һыуға килеп төшкәндә барлыҡҡа килгән тулҡындарҙы ян һыҙыҡтары менән һиҙеп алалар. Балыҡтар өйөрөнән ситтәрәк һиҙҙермәйенсә генә һыу өҫтөнә берәр юнысҡы ташлап ҡарағыҙ, күкйөндәр шунда уҡ юнысҡы янына килер.

## Ғәжәп!

Үҙе һыуҙа, ә аҙығы күктә... Был ғәжәп хәл балыҡтар донъяһында нисек инде булһын ти. Әкиәт бит был! Дөрөҫ, әлбиттә, тик күкйөнгә тап шулай әйтеп була икән... Был балыҡ эркеүен сөсө һыулы һыу ятҡылыҡтары өҫтөндә еңел күҙәтеп була. Улар ҡояшлы көндә ғәҙәттән тыш матур. Уның һырты йәшкелт ялтырауыҡлы һорғолт зәңгәр төҫтә. Ҡабырғалары менән ҡорһағы ялтырауыҡлы аҡ көмөш төҫөндә. Был балыҡ бик шәп йөрөй, әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа тайшанып һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашыға. Әлбиттә, аҙыҡ эҙләптер инде. Эйе, аҙыҡ эҙләп шулай ашыға. Ә уның аҙығы себен, серәкәй, ваҡ ләпәктәр. Бына шунда һорау тыуа ла инде: балыҡ һыуҙа, ә аҙығы һауала! Әммә яуап үтә ябай. Серәкәй һәм ләпәктәр һыу өҫтөндә көтөүе менән осоп йөрөгәндә, күкйөндәр, көмөш нур кеүек бер-бер артлы һыуҙан һикереп сығалар ҙа, аҙыҡтарын эләктереп, һыу сәсрәтеп кире һыуға ырғыйҙар.

## Ваҡ

Өйрәктәр өҙлөкһөҙ,
Баҡ, тиҙәр, баҡ, тиҙәр.
Ҡайтҡанһың балыҡтан,
Балыҡ тап, тап, тиҙәр.

Беҙҙең бик асыҡҡан
Саҡ, тиҙәр, бир, тиҙәр,
Туйманыҡ — балығың
Ваҡ, тиҙәр, ваҡ, тиҙәр.

*Финат Шакир*

## КӨЛӘМӘС

— Әле генә минең ҡармаҡтан ысҡынып киткән балыҡ, ай-һай, ҙур ине, шайтаның! Ғүмеремдә лә ундай ҙур балыҡты күргәнем юҡ ине,— ти Рөстәм.

— Ихлас ышанам,— тип яуап бирә дуҫы.— Бигерәк тә һуңғы һүҙҙәреңә...

## САБАҠ

*Боғаҙҙаҡай күлгә ҡармаҡ һалдым,*
*Ҡармағыма сабаҡ ҡапманы.*
*Сабаҡ ҡына кеүек килеп ҡаптым,*
*Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым.*

(Башҡорт халыҡ йырынан)

Был көмөш төҫөндәге күҙе ҡыҙыл, алһыу ҡанатлы ҙур булмаған балыҡ һәр кемгә билдәле.

Ул беҙҙең барлыҡ йылға-күлдәрҙә тиерлек осрай.

Ҡармаҡҡа эләккән сабаҡ һирәк-һаяҡ осраҡта ғына эре була. Күбеһенсә уның ауырлығы 100—200 грамм ғына тарта.

Иртә яҙын сабаҡ ярҙың ситенә яҡынлай. Һуңынан үләндәр морон төртөү менән ул йылға ҡултыҡтарына, ҡуйы ҡамыш үҫкән ылымыҡтарға күсә.

Эре сабаҡ яй ғына аҡҡан өңөлгән урындарҙы яҡын күрә.

Сабаҡты, ғәҙәттә, төбө ҡомло, ҡырсынлы, ташлы даръя-йылғаларҙа, шулай уҡ талғын ғына ағымлы текә яр буйында шаршыларҙан түбән тымыҡ сөмбөлдәрҙә, һыу өйөрөлөп ятҡан урындарҙа һәм тыныс йылға ҡушылдыҡтарында ҡармаҡлайҙар һәм күбеһенсә сабаҡты быуа-күлдәрҙә яр буйындағы ҡуйы ҡамышлы урындарҙа тоталар.

Йәй сабаҡ төрлө тәрәнлектә йәшәй: йә һыу уртаһында, йә иһә һыу өҫтөндә. Аҙыҡ эҙләп ул һай урында ла йөрөй.

Сабаҡты ҡаптырыр өсөн алдатҡыс емдәр байтаҡ. Яҙ миҙгелендә ул ҡыҙыл һәм тиреҫ селәүсенде, ҡыҙыл ҡортто, ҡабыҡ ҡуңыҙҙарының ҡарышлауыҡтарын ашарға ярата. Ә йәй сиңерткәләрҙе, йорт себендәрен, уларҙың ҡорттарын, икмәк киҫәген, йәшел үҫемлектәрҙе һәм йылға ҡарышлауыҡтарын артыҡ күрә. Сабаҡты иң һәйбәт ҡаптырыу мәле — таңдан алып кискә ҡәҙәр. Яҙғы яҡты төндә лә, шулай уҡ болотло көндә лә ҡармаҡларға була.

### ҺИН БЕЛӘҺЕҢМЕ?

Сабаҡ 3 градустан алып 30 градусҡа ҡәҙәр температурала йәшәй ала.

Сабаҡ яр буйындағы усаҡ яҡтыһына йыйыла. Ул шаҡтай оҙаҡ (8—15 йыл) йәшәй. Сабаҡтар бәләкәй генә өйөрҙәргә йыйылып йәшәй. Балыҡтар ни хәтлем ваҡ булһалар, өйөр шул хәтлем ҙур була.

***Мостай Кәрим***

## АҠ САБАҠ

Һеҙ балыҡтарҙың телен аңлайһығыҙмы? Мин бер аҙ төшөнәм. Теге быяла ҡумтаға ҡойолған һыу эсендә йөҙөп йөрөгән туҙғаҡ ҡойроҡло, ялбыр ҡанатлы ҡупшы балыҡтарҙы әйтмәйем. Уларҙың эреһе лә, вағы ла бары бер генә һүҙ белә: «Мәм, мәм, мәм»,— тип ауыҙҙарын аса ла яба. Ем һалһаң, эләктереп алып, тиҙ генә ситкә ҡаса. Рәхмәт тә әйтеп тормай. Шунан, моронон берәй мөйөшкә



терәп, мөнтәргә керешә. Үҙҙәре ризыҡ табып ашамағас, уларҙың тештәре ҡамырға әйләнгән икән. Шуға күрә сәйнәй алмайҙар, тик мөнтәйҙәр генә. Былар менән һүҙ йәбешмәй минең.

Мин Димдәге балыҡтар менән әңгәмәләшергә яратам. Һөйләшеү күберәк Тирәк аҫты тигән урында була. Ошо тәңгәлдә Димгә сылтырауыҡ ҡына Назияз һыуы килеп ҡоя. Назияз тамағында төрлө-төрлө балыҡтар йыйыла. Ҡорман да, ҡушбаш та, түбәнауыҙ ҙа, йылтыр сабаҡ та, ҡарағанат та бар бында. Вағыраҡтары ситтә генә урала, ҡайһы берҙәре морондарын ярға ышҡып тора. Сығып килгән тештәре ҡысыталыр, күрәһең. Эрерәктәре эстәрәк йөҙә. Ә суртан менән һыла тәрән ерҙе байҡай. Мин яр башына килеп баҫам да:

— Шәпмеһегеҙ, балыҡтар! — тим.

— Сәп, сәп, сәп! — тип тәүҙә бәләкәстәр сәпелдәй. Улары әле «Ш» өнөн әйтә белмәй, шуға күрә «шәп» урынына «сәп» килеп сыға.

Унан һуң өлкәнерәктәре:

— Шәпбеҙ, шәпбеҙ! — тип шаптырҙап алалар.

Иң ахырҙа эре суртандар һыуҙан һикереп сығалар ҙа, шамбыр-шомбор килеп, сәләм ҡайтаралар:

— Һиңә шатбыҙ! Һиңә шатбыҙ,— тиҙәр.

Бер көндө шундай мәрәкә булды. Яр башына килеп ултырғас та, кескәй генә радиоалғысымды ҡабыҙҙым. Унан ифрат моңло боронғо көй ағылды. Моң тәүҙә һауаға ашты, шунан яй ғына түбән төшөп, һыу өҫтөнә таралды. Бер мәл ҡараһам, минең ҡаршыма көтөү-көтөү балыҡтар йыйылып алған. Ҡойроҡтарын яй ғына болғап, ҡанаттарын саҡ ҡына ҡыймылдатып, музыка тыңлайҙар. Бер ҡарт суртан башын һыуҙан яртылаш сығарған. Ахырыһы, ҡолаҡҡа ҡатыраҡтыр. Өлкәндәр кеселәрҙе ҡыйырһытмай, уҫалдар йыуаштарға ташланмай. Моң кешеләрҙе генә түгел, балыҡтарҙы ла татыулаштыра икән. Ҡалай һәйбәт.

Икенсе килгәнемдә сәй ҡайнатырға ниәтләнем. Димдән һыу һоҫоп алам тигәндә, котелогыма бер аҡ сабаҡ һикерҙе лә керҙе.

— Һиңә ҡунаҡҡа барғым килә,— тине.

— Әйҙә, рәхим ит, киттек,— тинем мин. Ул ҡыуанысынан ике тапҡыр сумып сыҡты.

Котелогымды тотоп, мин өйгә йүгерҙем. Баҡсалағы ҙур ялғашҡа һалҡын һыу тултырып, балыҡты шунда ебәрҙем. Әй йөҙҙө, әй уйнаны был. Мин уға тәмле-тәмле емдәр һиптем. Радиоалғыстан бейеү көйө уйнаттым. Аҡ сабаҡ, борғаланып-борғаланып, бейергә тотондо. Балыҡтар тыпырҙатып бейемәй, ойотоп ҡына бейей икән.

Бер көн уҙҙы. Ике көн уҙҙы. Ҡунағымдың хәрәкәттәре һүлпәнәйҙе. Тәңгә тартылды. Күҙҙәре төпкә батты. Бер саҡ ҡабырғаһына ята башланы. Ниндәй генә һыйҙар бирһәм дә ашамай.

— Һиңә тағы ниндәй генә хөрмәттәр күрһәтәйем икән? — тим.

— Күрһәтмә,— ти аҡ сабаҡ.— Үҙем хәстәрләп тапмаған аҙыҡ тамағыма аш булып бармай. Һин мине кире үҙ төйәгемә илтеп ҡуй. Үҙ көнөмдө үҙем күрәйем...

Мин уны тиҙ үк Димгә илтеп ебәрҙем. Айырылышыу яманһыу булды, әлбиттә. Ул кескәй генә башын һыуҙан һоноп, миңә өндәште:

— Һау бул, рәхмәт!

— Һау бул, аҡ сабаҡ! — тип мин ҡул болғаным.

## АЛАБУҒА

*Яҙ көнө балыҡ тотҡанда алабуға менән юрыш күберәк тотолһа — бойҙай, арпа, арыш уңыр.*

(Һынамыш)

Был матур, арҡаһында сәнскеле йөҙгөсө, ҡара арҡыры һыҙаттары булған, ҡыҙыл ҡанатлы балыҡ һәр ерҙә йәшәй.

Уны йыл әйләнәһенә тиерлек, ҡыш уртаһын ғына алмағанда, ҡармаҡларға була.

Алабуғаны тотоу өсөн иң яҡшы урындар былдай: талғын ғына ағымлы, һирәк һыу аҫты үҫемлектәре үҫкән уртаса тәрәнлектәр, ҡамыштар һәм күгә үҫкән һыу ситтәре, һыу өҫтөнә ауышҡан ҡыуаҡтар үҫкән текә яр буйҙары, күпер аҫтары, кәрәгәле соҡорҙар, һыу аҫты таштары тирәһе, әрекмәндәр үҫкән бәләкәй келәгәләр һәм алабуғалар йәшәргә яратҡан бүтән ышыҡлы урындар.

Ҡаптырыуға иң һәйбәт сәғәттәр — иртә таң менән һәм кискә табан. Йонсоу көндә был балыҡ көнө буйы яҡшы сиртә.

Алабуғаларҙы ғәҙәттә ике-өс ҡармаҡҡа тоталар. Уларҙы йә ярға ҡаҙап, йә кәмәлә тарҙайтып ҡуялар.

Алабуға емдәре: бөтөн ямғыр йәки тиҙәкселәүсене, ҡыҫала муйынсығы, ҡыҙыл ҡорт, энәғараҡ ҡарышлауығы. Селәүсендәр эре булырға тейеш. Уларҙың ҡойроғо иректә бормаланып ҡалдырыла. Эре алабуғалар бәләкәс балыҡты



ихлас эләктереп алыусан. Уларҙы ҡармаҡҡа арҡа йөҙгөсө аҫтынан кейҙереп ҡуялар.

Үҙенең ҡәрҙәше шырт балыҡҡа ҡарағанда, алабуға эре балыҡ ул. Ауырлығы менән алабуға 2—3 килограмға етә.

## Былар ҡыҙыҡлы

Алабуғаның айғолаҡ өҫлөгө уның кәүҙә өҫлөгөнән 30 тапҡыр ҡалынараҡ. Был балыҡ 3 градустан алып 30 градусҡа саҡлы температурала йәшәй ала.

Балыҡтарҙың был төрө һалҡынға сыҙамлы була. Туңған һәм бөтөнләй боҙ булып ҡатҡан алабуғаны аҡрынлап иреткәндә, ул терелә һәм йөҙә башлай.

Алабуға һыу температураһы 7—8 градусҡа еткәс тә ыуылдырыҡ сәсә башлай.

Уның ваҡ балыҡтарҙы ҡыуып тотоуын һыу өҫтөнән ҡарап күҙәтеп тороу бик ҡыҙыҡ. Хәлдән тайған балыҡ ахыр сиктә һыуҙан һикереп сыға, әммә алабуға уның артынан бер тотам да ҡалмай, һыуға кире уҡталған мәлендә эләктерергә самалай. Ә ҡайһы бер осраҡта балыҡ яр буйындағы ҡомға һикереп сыға, һәм уның артынан ҡыуып килеүсе алабуға ла аңғармаҫтан шунда ташлана.

Алабуға ҡорбанын йәшерен рәүештә аулай, ә уның арҡаһында буй-буй һыҙыҡтары һыу үҫемлектәр араһында йәки таш грунтта йәшенеп ҡалыу өсөн хеҙмәт итә.

Алабуға селбәрәләр артынан ҡыуа төшкәндә, һыуҙан моронон сығарып, һауа йотҡанда йыш ҡына «супылдау» тауышын сығара. ...Яр буйында ултырған балыҡсының ҡармағына алабуға балығы эләгеп кенә тора. Бына бер ҙур ғына алабуға ҡармаҡтан ысҡына, шунан һуң бер балыҡ та сиртмәй башлай. «Эх, балыҡтарҙы өркөттө!» — тип уфтана балыҡсы. Уның уйы дөрөҫлөккә сыға. Сөнки ҡармаҡҡа эләккән алабуғаның һис нәмәгә ҡарамайынса һыпыртыуы шунда туҡланып йөрөүсе башҡа балыҡтарҙы ҡурҡыта. Алабуға емһеҙ ҡармаҡҡа боролоп та ҡарамай, әммә ҡармаҡҡа селәүсен йәки балыҡ киҫәге кейҙерелгән булһа, уға алыҫтан уҡ атлығып килеп етә.

## Балыҡ тотҡанда

Балыҡ ҡармаҡлау менән мауыҡмаған кеше бик аҙҙыр. Ял тураһында һүҙ барғанда:

— Балыҡҡа йөрөүҙән дә яҡшы ял юҡ инде,— тигән һүҙҙе бик күптәрҙән ишетергә тура килә: күптәр һөйләнеп кенә ҡалмай, шәмбе йәки йәкшәмбе көндәре еттеме, ҡармаҡ алалар ҙа һыу буйҙарына ашығалар. Быңдай хәлде бигерәк тә йәйге көндәрҙә йыш осратырға була.

Ә ҡыш көнө? Балыҡ спортын һөйгән кешеләр ҡышҡы бурандан да, сатлама һыуыҡтан да ҡурҡмай. Улар йылғаларға, күлдәргә барып балыҡ ҡармаҡлайҙар. Боҙ аҫтынан балыҡ ҡармаҡлау йәйгегә ҡарағанда ла ҡыҙыҡлыраҡ була.

Бына бәләкәйерәк кенә мәке. Ҡыҫҡа ғына ҡармаҡ һабына кәләпләнеп ҡуйылған ҡылдың осондағы ҡармаҡты емләйһең дә боҙ аҫтына төшөрөп ебәрәһең, күп тә үтмәй, алабуғалар йәки йылғыр сабаҡтар һинең ҡармағыңды шаярта башлайҙар. Ҡармаҡ таяғының осон эйгәнсе ҡайһыһылыр тартып ала. Шуны ғына көтөп ултырған сос балыҡсы шунда уҡ ҡармаҡ ҡылын кәләпләй башлай һәм алабуғаны тартып та сығара.

Балыҡсы боҙ өҫтөндәге тыпырсынып ятҡан балыҡҡа ҡарап йылмая һәм ҡармағын ҡабаттан емләп, тағы ла боҙ аҫтына төшөрөп ебәрә.

Ниңә шатланмаһын балыҡсы, ул бит ҡайтҡас тәмле итеп балыҡ һурпаһы ашаясаҡ. Ә балыҡ эләкмәһә? Ысын балыҡсы быныӊ өсөн һис тә ҡайғырмай, сөнки ул ҡасан да булһа балыҡты тотоуына ышана. Уның ҡарауы, ул саф һауала рәхәтләнеп ял итеп ҡала.

## ШЫРТ БАЛЫҠ

*Тырнаҡтары һыртында,*
*Үҙе йәшәй ул һыуҙа,*
*Тик тормай үҙе бер ҙә,*
*Арҡаһында тырнағы —*
*Суртан да янамай уны.*

*(Балыҡсы таҡмағынан)*

Шырт балыҡты кемдәр генә белмәй икән! Ул Европа һәм Себер, Башҡортостан йылғаларында, күлдәрҙә ныҡ таралған. 20—50 грамм ауырлығында була, ә инде 100 грамм ҙурлығында осраһа, уның иң олоһо тигән һүҙ. Шулай булһа ла балыҡсылар уны бик теләп ҡармаҡлай. Ни өсөн тиһәң, ошо лайлалы, сәнскеле балыҡтың һурпаһы (һалау) тәмле. Шамбы менән суртанды ҡармаҡлар өсөн ем итеп тә файҙаланалар үҙен.

Был ҡаты ҡанатлы, ҡылсыҡлы алабуғаға оҡшаған лайлалы ҙур булмаған балыҡ һәр кемгә билдәле һәм төрлө урындарҙа төрлө исемдәр менән йөрөтөлә. Әйтәйек, Ҡырмыҫҡалы башҡорттары уны эт балығы тип әйтә, ә Ҡариҙел буйҙарында ошо сәнскеле балыҡты этюрыш тип исемләйҙәр.

Урал һыуҙарында юрыш сабаҡ, алабуға менән суртандарҙан бер рәттән — иң киң таралған, күп һанлы һәм һәр кемгә билдәле балыҡтарҙың береһе. Йылғаларҙа ла, күлдәрҙә лә — Поляр түңәрәгенән башлап Көньяҡ Уралға тиклем, унан да көньяҡтараҡ осратырһың уны.



Сәнскеләрен тырпайтып юрыш үҙенең дошмандарын ҡурҡыта һәм шуның менән уларҙан һаҡлана ла.

Иң эре юрыштар Башҡортостандың Урал арты төбәктәрендә, шулай уҡ хәҙерге Силәбе һәм Свердловск өлкәләрендә осрай. Л. П. Сабанеев хәбәр итеүенсә, бер ҡаҙаҡлыҡ юрыштарҙы унда элек ботлап тоталар ине һәм үткән быуатта ошондайҙары күп кенә күлдәрҙә осрай торғайны.

Шырт балыҡ күбеһенсә соҡор-саҡырҙы, төбө мәтеле тәрән урындарҙы ярата, һай ерҙәргә һирәк сыға. Селәүсен, ҡарышлауыҡ, ҡыҙыл ҡорт, бурмаш менән туҡлана, күпләп башҡа балыҡтарҙың ыуылдырығын да ашай. Апрель аҙаҡтарында — май баштарында һыуҙарҙың иңкеү һәм асыҡ урындарында өлөшләп-өлөшләп ыуылдырыҡ сәсә, күпләп үрсей. Ыуылдырыҡ сәскән сағында ғына насар ҡаба. Артабан ул йыл әйләнәһенә элгә. Уны селәүсенгә һәм ҡыҙыл ҡортҡа йәйге һәм ҡышҡы ҡалҡыуыслы ҡармаҡтар менән тоталар.

Ерле халыҡ телендәге исемдәре: бағыр, силәмтәй, сураҡа, сураҡай, үгеҙ балыҡ, хәрәмсе (Һаҡмарҙа), дүрмән (Һүрәмдә), юрыш, этеш, этекәй (Әйҙә), йәреш, ташбай, эт балыҡ, эт балығы (Эйек-Юшатырҙа), юрыш, маңҡа балыҡ, һуҡа бысағы (Арғаяшта, Миәстә), йәгүр (Иҙел башында), йыртлас (Йүрүҙәндә), гүҙгәнәк, ташаҡа (Инйәрҙә, Еҙемдә), ҡаты сырт (Өршәктә), ләлем, һыла, шырт (Ҡыҙылда), сүмесбаш (Бөрйәндә), ташаҡай, ташҡый, яр алабуғаҫы (Димдә).

## Аңла һин алабуғаны!

Тәүге боҙ быйыл балыҡсыны оҙаҡ көттөрҙө. Октябрь байрамына, ғәҙәттә, күл-быуалар туңып, боҙ өҫтөндә «байрам» итә торғайныҡ. Быйыл иһә ул бәхеткә ай уртаһы үткәс кенә өлгәштек.

Алексей дуҫым менән шәмбе көн иртүк автовокзалда инек. Һигеҙ тулыуға бараһы урыныбыҙға еттек тә. Алда күл. Көн йылы. Алыҫтан уҡ ике күҙ һыуҙа: туңдымы икән?

Туңған! Таяҡ менән боҙға төртә-төртә күл ситенә төшәбеҙ. Ныҡ, уйылырҙай түгел. Боҙ тишә һалып, ҡышҡы ялтырма төшөрәбеҙ. Алабуға был ваҡытта тап шуны ярата. Тик был юлы, ғәжәп, сиртмәй ҙә. Төрлө урындан ҡармаҡлап ҡарайбыҙ — юҡ, ҡапмай. Күлде арҡыры-буйға йөрөп сыҡтыҡ. Икебеҙгә бер алабуға тотһаҡсы, исмаһам. Үәт һиңә тәүге боҙ, балыҡтың иң ихлас ҡапҡан сағы...

Шулай күңелебеҙ һүрелеп, ҡармаҡтарҙы йыйып, ҡайтып китергә әҙерләнә башлағайныҡ, янибыҙға күрше күлдән ике һәүәҫкәр балыҡсы килде.

— Өҙлөкһөҙ ҡаба! Тик ваҡ, бына ҡарағыҙ,— тип тотҡан балыҡтарын күрһәттеләр.— Уны йәлләмәй тотоуы ла.

Беҙ ҙә хәлде һөйләп бирҙек. Шулай ҙа тегеләрҙең береһе беҙҙең уйымға мормышка төшөрҙө һәм тиҙҙән көйлө генә алабуға тартып сығарҙы.

— Тәрәнлеген самалау өсөн емләмәй ҙә төшөргәйнем,— тип, тағы аптыратты беҙҙе. Алексей менән мин дә мормышкаларҙы сығарабыҙ йәшниктән. Емләй һалып, һыуға төшөрәбеҙ — ҡапмай. Теге егеткә лә эләкмәй. Ниндәй хикмәт был?

Ахырҙа, уның «емләмәй ҙә төшөргәйнем» тигәнен иҫкә алып, бәләкәй генә һары мормышка таҡтым епкә һәм емһеҙ-ниһеҙ ҡармаҡлап ҡарарға булдым. Мормышка төпкә төшөп еткәс, ҡалтырандыра-ҡалтырандыра өҫкә күтәрә башлауым булды, алабуға килеп тә бәрҙе. Арыу ғына. Һәр хәлдә, бармаҡ буйы түгел. Тағы төшөрәм. Емһеҙ генә. Йәнә ҡапты. Алексей ҙа шулай итергә тотондо. Китте бит эш яйға!

Тик шуныһы ғәжәп: ни эшләп ул алабуға ялтырмаға бәрелеп тә ҡараманы, мормышканың ҡымырйып торған ҡып-ҡыҙыл емен дә алманы? Ә бәләкәй генә ҡоро мормышканы хуп күрҙе. Нилектән? Аңла һин алабуғаны! Бәлки, йонсоу көндә хатта мәсекәй алабуға ла ҙур емгә ынтыла һалып бармай, тигәндәре дөрөҫтөр.

***Ғ. Шәмсетдинов***

## Былар́ҙы ла бел

Шырт балыҡ — Башҡортостандың күп кенә һыулыҡтарында суртан һәм алабуғаның төп аҙығы. Аҡкүлдә һыла ҡаптырыу өсөн шырт балыҡ иң яҡшы ем һанала.

*Һыу буйында ҡармаҡ һалһаң,*
*Тынлыҡ һаҡларға кәрәк —*
*Икеһе лә ҡабатлайҙар,*
*Икеһендә бер теләк:*
*«Ҡап, ҡап, балыҡ, ҡап,*
*Яр башында ялтырап ят».*

## Еҙем буйында

Ринат менән Мөнир кистән үк Еҙем йылғаһына балыҡҡа барырға һөйләшкәйне. Мөнир иртәрәк уяныр өсөн соланға ятты. Тик урынын алмаштырғанғамы, төнө буйы йоҡлай алманы. Йортта ҡаҙ бәпкәләренең сипылдашыуы, ҡайҙалыр алыҫта тәлмәрйендәрҙең баҡылдауы, төн уртаһында әтәстәрҙең һөрәнләп ҡысҡырыуы — барыһы ла Мөнирҙе һиҫкәндерҙе, йоҡоһон бүлде. Шуға күрә ул таң атыр саҡта ғына йоҡлап китте.

Мөнир, ниндәйҙер тауышҡа һиҫкәнеп күҙҙәрен асһа, ни күрһен — көтөү әллә ҡасан киткән, ҡояш инде арҡан буйы юғары күтәрелгән. Ә эргәһендә асыулы Ринат баҫып тора. Мөнир йәһәт кенә һикереп тороп, кейенде лә аласыҡҡа инеп юғалды. Көтә-көтә түҙемлеге бөткән Ринат асыуланып китеп барҙы. Мөнир, ҡармаҡ сыбыҡтарын эләктерә һалып, уның артынан йүгерҙе.

Йылға буйына барып ултырғас, тәүҙә уларға балыҡ бик оҙаҡ эләкмәй торҙо. Ринат быны сәбәбен Мөнирҙән күргән кеүек:

— Иртә килһәң генә балыҡ эләгә ул,— тип мығырҙаны.

Мөнир уға ҡаршы әйтергә бер һүҙ ҙә таба алманы.

Һуңғараҡ Ринатҡа балыҡ эләгә башланы, ә Мөниргә, үс иткәндәй — юҡ. Етмәһә, балыҡ урынына ҡармағына ботинка эләгеп сыҡты. Уны күргәс, Мөнирҙең йәне көйҙө. «Нисек итеп был балыҡтарҙы алдатырға? Ауылға ҡайтҡас, Ринат был турала малайҙарға һөйләп көлөр инде»,— тип уйланы.

Төш тә етеп килә. Әҙерәк асыҡтырған да. Мөнир Ринатҡа юрый ғына: «Әйҙә, балыҡтарҙы таҙартайыҡ та һурпа бешереп алайыҡ»,— тип тәкдим яһаны. Үҙе эстән генә: «Риза булмаҫ. Минең балыҡ бик аҙ. Етмәһә, һуңға ла ҡалдыҡ»,— тип уйлап алды.

Ринат шунда уҡ риза булды.

— Кискә тиклем тағы тоторбоҙ әле,— тип йыуатып ҡуйҙы.

Шулай итеп, дуҫтар, һуңлап килһә лә, балыҡ та тотто, һурпа ла бешереп ашаны, ял да иттеләр. Мөнир Ринаттың йомартлығына, үс һаҡламауына ҡыуанды. Ә Ринат иһә дуҫының үпкәләй белмәүенә һөйөндө. Улар кис күтәренке кәйеф менән ҡайтты.

## СУРТАН

*Бөркөт күктә,*
*Суртан һыуҙа тере...*
*Мәҡәл*

Суртан — илебеҙҙә киң таралған балыҡтарҙың бер төрө. Ул оҙаҡ йәшәй, уңайлы шарттарҙа уның ауырлығы 35—40 килограмм тәшкил итә, ә оҙонлоғо метр ярымдан ашыу. Суртан — ашауға талымһыҙ балыҡ. Ваҡ селбәрәләрҙе, тәлмәрйендәр, хатта үҙ ҡәрҙәштәрен дә аяп тормай ул. Яйы тура килгән мәлендә ул өйрәк бәпкәһе йәиһә көшөл менән дә тамаҡ ялғап алырға тартынмай. Һунарҙа йөрөп арығас, суртан аулағыраҡ урындарҙа ял итеп ала һәм ҡайтанан ауға — бер йә булмаһа өс тәүлек үткәндән һуң ғына сыға. Дошманын күреүе була, ваҡ балыҡтар ян-яҡҡа һирпелә, хатта ярға ла атылып сыға.

Суртан — ҡиммәтле балыҡ төрө. Уның сиртеүе һүлпәнерәк, әммә ҡеүәтле. Суртанды маймысҡа, һирәк-һаяҡ селәүсенгә ҡаптыралар. Иң мөһим ҡорал —



ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән ергә һыу төбөнән тота торған ҡармаҡ. Ҡалҡыуыс тағып ҡармаҡлау күпкә ҡыҙығыраҡ. Ҡармаҡ һабы ҡаты осло, оҙонлоғо 3—4 метр, ә ебе 0,4—0,5 мм булырға тейешле. Ҡармаҡтың 5—7 һанлыһын һайлап алаһың.

Июнь баштарында суртандың сиртеүе таң атыу мәленән башлап эңер төшкәнгә ҡәҙәр дауам итә. Айҙың икенсе яртыһынан алып август урталарына саҡлы сиртеүе һүлпәнерәк.

Суртан балығы соҡор-саҡырлы, үҙе һунар ҡылған һәм ял иткән иң тәрән урындарҙа йөрөргә ярата. Йыш ҡына үлән ситендә, йылға шаршыларынан түбән урындарҙа осрай. Суртан иртәле-кисле шәп сиртә, шулай уҡ йонсоу көндәрҙә лә ҡармаҡҡа ҡаба. Ем өсөн иң ваҡ балыҡтарҙы файҙаланырға мөмкин. Суртан был осраҡта һемәйеп ҡала.

Ҡомһоҙ суртан балыҡты ғына түгел, тура килгәндә, ҡош-ҡортто ла бушҡа ебәрмәй. Әйтәйек, ем эҙләп, күлгә оҙон суҡышлы көйөлдө осоп килеп төштө, ти. Ул һыу эсенә инергә лә өлгөрмәй, шуны ғына аңдып торған суртан уны эләктереп тә ала.

Суртанды йыртҡыслығы һәм ҡомһоҙлоғо яғынан бүрегә тиңләргә мөмкин булыр ине. Үҙенең ауырлығын йөҙ грамға арттырыу өсөн суртан уртаса 1000 грамм тере балыҡ йота, тиҙәр.

Суртан хәйләкәр балыҡ ул. Ҡамыш араһына инеп йәшеренеп тора, сөнки уның төҫө ҡамыш һабағының төҫөнә бик оҡшаған. Табан балыҡтар, уны-быны уйламай, ҡамыш япраҡтарын өҙөргә киләләр. Ләкин улар ауыҙ асырға ла өлгөрмәй ҡала, ҡамыш араһынан суртан атылып килеп сыға ла тегеләрҙең берәүһен тотоп та ала, йотоп та ебәрә. Күрәһегеҙ, суртанды, бер ҙә икеләнмәйенсә, «һыу бүреһе» тип атарға мөмкин икән.

Әммә ғалимдар, уның биологияһын яҡшылап өйрәнгәндән һуң, «һыу бүреһе» бер ҙә зарарлы түгел, киреһенсә, ул бик файҙалы икән, шуға күрә, башҡа файҙалы балыҡтар менән бер рәттән, уны ла һаҡларға кәрәк, тигән һөҙөмтәгә килгәндәр.

* * *

Суртандың ерле атамалары төрлө-төрлө. Бына Туҡ һыуының (Ырымбур яҡтарын һыулай) уң ярында ултырған Кесе Юлдаш башҡорттары суртандың йәшенә ҡарап бирелгән исемдәрен ошолай аңлатып бирҙеләр.

— Беҙҙә был йыртҡыс балыҡтың төп исеме — «Суртан».

— Мысы — беренсе йәшендә.

— Сурағай — икенсе йәшендә, ҡышлап сыҡҡандан һуң.

— Шүкә — ике йәше тулғас, ике ҡыш ҡышлағас.

— Суртан — ике йәше тулғас, уҫал йыртҡыс булып әүерелгәс.

Ә һеҙҙә суртанды нисек йөрөтәләр?

Суртан 15—16 градуста яҡшы туҡлана.

Суртандарҙың да ҙурҙары була. Уларҙың оҙонлоғо 2,5 метрға, ә ауырлығы 60—70 килограмға етә. Иң эре суртандар Төньяҡ йылғаларҙа һәм Днепрҙың түбән ағымында йәшәй.

Эре суртан бер миллион самаһы ыуылдырыҡ сәсә. Хәҙерге ваҡытта ихтиологтар суртанды 100 йәшкә ҡәҙәр йәшәй ала тип иҫәпләйҙәр. Себер һыуҙарында йәшәй торған йыртҡыс суртан хатта өйрәктәр йәиһә йылға кисеүсе тейендәр менән һыйланырға ла ярата.

Суртандың аңҡауында ла тештәре бар. Ҡорбанын еңел йотоп ебәрер өсөн, суртандың аңҡау тештәре һыртҡа табан иңкәйә.

Суртан ыуылдырыҡ сәскәндән һуң ике аҙна бөтөнләй ашамай.

Ҡайһы бер һыуҙарҙа суртан ҡармаҡҡа ултырған үле балыҡты йота. Ләкин, әгәр ҙә балыҡ түше менән салҡан әйләнгән булһа, йәки һыу төбөндә ятһа, суртан уға яҡын да килмәй. Шуға күрә тәжрибәле балыҡсы үле балыҡты ҡармаҡҡа ултыртҡансы, уның эсенә ауыҙы аша оҙонса ҡурғаш киҫәге индереп ҡалдыра.

Элек суртан балығына бер килограмға артыу өсөн 25 килограмдан артыҡ тере балыҡ ашарға кәрәк тип иҫәпләйҙәр ине. Әммә ул дөрөҫ булып сыҡманы. Хәҙер суртан балығына бер килограмға артыу өсөн 3—3,5 килограмм балыҡ кәрәклеге раҫланды.

Суртандар үҙҙәренең селбәрәләрен үҙҙәре үк иҫе лә китмәй ашайҙар.

## Суртан эмере буйынса

Был хәл Херсонда булды. Ял көнө ремонт-механика заводының электросварщигы Вячеслав Александров ҡатыны Лариса һәм ҡыҙы Галя менән Днепр йылғаһында кәмәлә йөрөй ине. Вячеслав суртанға ҡармаҡ һалды, ә Лариса, ҡыҙынмаҡсы булып, ҡулындағы сәғәтен систе лә тотоп торорға ҡыҙына бирҙе. Ә тегеһе сәғәтте һыуға төшөрөп ебәрҙе. Тәрән һыуҙа уны эҙләү менән да файҙа булмаҫ ине. Шул саҡта ҡармаҡтың ебе бик ныҡ тартылды һәм кәмәне кире яҡҡа һөйрәй башланы. Был ауыр алыш бер нисә минут дауам итте. Ҡармаҡҡа 3 килограмлы суртан эләккән икән. Йыртҡыс шул тиклем ҡомһоҙ булып сыҡты, хатта ҡармаҡ ебен дә байтаҡ ҡына йотҡан, ә ауыҙында тутығып бөткән тағы ла ике ҡармаҡ бар ине. Ләкин иң ҡыҙыҡлы сюрприз өйгә ҡайтҡас булды: суртандың эсен ярып ебәрһәләр, унан баяғы сәғәт килеп сыҡты. Ул әле һаман да йөрөй һәм беренсе 16 минутты күрһәтә ине. Ә Галя уны сәғәт 11-ҙә һыуға төшөргәйне.

*(«Труд» гәзитенән)*

## ЙӘШӘМЕШ СУРТАН

Суртан үҙенең ҙурлығы, йыртҡыслығы һәм йылғырлығы менән ни бары йәйен балығынан ғына ҡалыша. Суртандың ҡылығы хаҡында хатта әкиәттәрҙә лә һөйләнә.

Суртан ифрат ҙур булып үҫә. Уның ғүмере оҙон. Ул йөҙ йылдар самаһы йәшәй. Ауырлығы 2—3 бот һәм унан да күберәккә, ә оҙонлоғо өс аршынға етә.

XIX быуатта Көнбайыш Европала бик ҙур суртандар осраған. 1862 йылда уҡ әле Брегенцияла (Италия) 145 ҡаҙаҡ ауырлығындағы суртан аулағандар.

Уҙған быуат аҙағында Мәскәү янында батша быуаларын таҙартҡан саҡта яңағына алтын балдаҡ тағылған өс аршынлы суртан тотҡандар. Балдаҡҡа: «Батша Борис Федорович кейҙерҙе» тип яҙылған булған. Уны дүрт бот самаһы ауырлығында тип иҫәпләйҙәр. 1610 йылда Маас йылғаһында ла (Голландия) яңағына еҙ балдаҡ тағылған бик ҙур суртан тотҡандар. Уның балдағына: «1448 йыл» тигән билдә яһалған булған.

## Ҡомһоҙлоҡ бәләһе

Суртандың йыртҡыслығын һәм ҡомһоҙлоғон балыҡсылар яҡшы белә. Ҡомһоҙ кешенең бармағы үҙенә кәкре, тигәндәй, суртандың тештәре лә ауыҙ эсенә ҡарап тора. Уның тештәренә эләккән ҡорбандың ысҡынырға маташыуы файҙаһыҙ, суртан уны үҙе лә кире сығара алмай. Был тештәр хатта тәжрибәле балыҡсыларға ла күп мәшәҡәт тыуҙыра, ә тәжрибәһеҙҙәре тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Улар ҡармаҡты ысҡындырам тип суртан ауыҙына тығылдымы — бөттө, бармаҡтарын ҡара ҡанға туҙҙырмайынса ҡотола алмайҙар.

Үҙ ҡәрҙәштәренә лә һөжүм итә суртан. Был уның ҡомһоҙлоғон раҫлаусы йәнә бер асыҡ дәлил. Ҡайһы ваҡыт йылғаларҙа ике ҡойроҡло суртан да осрап ҡала. Аптырарһың: ҡойроҡ яғында ла ҡойроҡ, баш яғында ла ҡойроҡ. Ҡарт суртан кеүек йәшәү тәжрибәһе булмаған йәш суртан, ҡомһоҙланып, үҙе ҙурлыҡ балыҡҡа ташлана ла, йотоп бөтөрә алмай. Шулай итеп, суртан ике ҡойроҡло булып ҡала. Ындай суртан яй йөҙә, хатта ҡурҡыныс тыуғанда ла ҡаса алмай. Ҡомһоҙлоҡ бәләһе инде...

## Сабағын йотто

Күл буйына килде лә Вил
Боҙҙо сапҡылап ҡуйҙы.
Һәм атып бәрҙе балтаһын,
Ҡармағына ем ҡуйҙы.
Сеү-сеү, сиртте! Тартты ҡапыл,
Ялтырап сыҡты сабаҡ.
Балығын ул алып тормай
Һыуға ырғытты ҡабат.
Эй ғәрләнә: бармаҡ буйы
Балыҡ килеп ҡапҡан, ти,
Әйтерһең, мин бала-саға.
Уйнар кеше тапҡан, ти.
Шулай һөйләнеп торғанда
Сабағын суртан йотто.
Вил суртанды тартып алып
Бына ҡулына тотто.
Ашыҡты ул өйгә таба:
Аяғы теймәй ергә,
Балтаһы ла ятып ҡалды
Мәкене уйған ерҙә!

***Шакир Ғәлин***

## Үәт һемәйҙек!

Бер таныштың «Жигули»йы менән Татарстандың Аҡтаныш районындағы Атай ауылына барып сыҡтыҡ. Балыҡсыға 250 саҡрым юл юлмы ни ул?!

Ауылға туҡтап торманыҡ, туп-тура күлгә йүнәлдек. Мин әйтәм: «Бында ҡатындың туғаны йәшәй, кисләтеп бер юлы килер ҙә ҡуйырбыҙ. Әле ваҡыт барҙа балыҡ тотайыҡ». Иптәштәр ҙә хупланы.

Күлгә инде еттек тигәндә, ят юлдан киткәнбеҙ. Байтаҡ барғас ҡына кире боролдоҡ. Шулай йөрөп, төш ауҙарҙыҡ. Ярға яҡынлағас, машина һүнде — искраһы юғалды. Өсәүләп шуны эҙләйбеҙ. Юҡ та юҡ. Балыҡсылар күренеп кенә ултыра. Ләкин машина хужаһын бер үҙен ҡалдырып китеү ҙә уңайһыҙ.

Маташа торғас, теге искра тигәндәре, ҡәһәрең, табылды. Ҡайһы ерендә торғандыр, уныһын үҙебеҙ ҙә аңламаныҡ. Хәйер, беҙгә ул тиклемен белеү хәжәт тә түгел. Иң мөһиме — йәйәү ҡалманыҡ.

Боҙға күҙ һалабыҙ. Халыҡ таралыша башланы. Беҙ ҙә ауылға кире китергә булдыҡ: кис тә яҡынланы, өшөнөк тә. Хужа ҡоласын йәйеп ҡаршыланы. Әмәлгә баҡҡандай, мунса ла өлгөрткән икән. Эй, рәхәтлеге! Йылы мунса һалҡын боҙ өҫтө түгел инде. Балыҡ ҡаптырмаған икәнбеҙ, йәнә бер көнөбеҙ бар, алабуға әллә ҡайҙа ҡасмаҫ.

Иртән иртүк эләгә-тәгәрәй күлгә йыйнала башланыҡ. Хужа бер күнәк эре алабуғалар алып ингән соланынан.

— Ал,— ти,— күстәнәс булыр. Беҙгә балыҡ моң түгел ул, тағы тотормон, эргәлә генә бит.

— Үҙебеҙ тотабыҙ уны, рәхмәт,— тип баш тарттым. Балыҡҡа бар ҙа ни намыҫың етеп кеше тотҡан әҙерҙе алып ҡайтаһың?!

Күлдә ултырабыҙ, балыҡ сиртмәй. Бер мәл машина хужаһы байтаҡ юҡ булып торҙо. Ситкәрәк, ҡамышҡа яҡын, суртанға тип ҙур ҡармаҡҡа тере балыҡ ҡаптырып һалған да шуны ҡарарға барған икән. Ах та ух итеп килеп етте.

— Тартып ҡараһам, суртан эләккән. Боҙ тишегенә башы инә бирә лә артабан һыймай. Уй, ҙур ине. Кәмендә ике кило бар. Ахырҙа яҡындағы балыҡсы эргәһенә йүгерҙем. Ломын алып килеп боҙ тишеген киңәйттем. Инде ҡармаҡ ебенән тартһам, суртаным ысҡынып киткән. Ну һемәйтте бит,— тип әсенеп һөйләй был.

— Ниңә беҙҙе саҡырманың? Суртанды ысҡындырмай бауынан тотоп торор инек,— тибеҙ.

— Ҙур суртан алып килеп, һеҙҙе шаҡ ҡатырырға уйлағайным,— ти был үкенеп.

Алабуға ла ҡапманы. Мин дә хужаның әҙер балығын алмағанға үкендем. Шулай һемәйеп, буш ҡул ҡайттыҡ. Хәйер, уға әллә ни бошонманыҡ та. Икенсе килгәндә ҡабыр. Суртаны ла, башҡаһы ла. Ҡыҙығы ни тора!

***Ғ. Шәмсетдинов***

## ТАБАН

Табан бер нисә төрҙә осрай: түңәрәк, ҡалҡыу кәүҙәлеһе лә, ян-яҡтары ҡыҙыл баҡыр төҫләһе, шунан оҙонса, тәпәшерәк кәүҙәле, көмөш тәңкәлеһе һәм



ҡара ҡыҙыл йөҙгөстәре булғаны һәм быуа-күл табаны — оҙонса кәүҙәле, ҡара төҫтәге һәм киҫә юғарыға ҡайтарылған аҫҡы яңаҡлы булғаны.

Табандар барлыҡ мәтеле күлдәрҙә, иҫке йылғаларҙа иң бәләкәс, яй ғына ағып ятҡан һәм һыуы аҡмай торған мәтеле быуаларҙа ла тереклек итә. Ғәҙәттә, һыуҙа үҫә торған үләндәр араһында бер-ике метрға тиклем тәрәнлектә йәшәй. Ярға яҡыныраҡ та сыға.

Табанды эре балыҡ тиһәң дә ярай, ҡайһы осраҡта уның өс килограмлыҡтары ла осрай, күбеһенсә 100—200 грамлыҡтары эләгә. Яҙын табанды һыу йылынғас, сама менән май аҙаҡтарынан тота башлайҙар. Уға ҡармаҡ һала торған иң шәп ваҡыт июнь менән июль айҙары, көҙгә табан сиртеүе һүлпәнәйә... Ҡышҡылыҡҡа табан ләм араһына инеп ята, быныһы бигерәк тә һары табан балығы өсөн хас нәмә. Ә аҡ табанды һыуҙар туңғансы ҡаптырып була икән.

Табанға алдатҡыс емдәр: ваҡ тиҙәк селәүсендәре (ул тоташ теремек селәүҙе артыҡ күрә, уны инде инәлтмәй-нитмәй эләктереп ала), ҡыҙыл ҡорт, ваҡ себен ҡорттары, ҡара икмәктән йоморсалар (уларға тәмләү өсөн еҫе сығып торған киндер йә әнис майын һөртәләр).

Ҡара таңдан иртәнге 10—11 сәғәттәргә тиклем һәм төштән һуң сәғәт 4—5 тирәһенән эңер төшкәнсе табанға ҡармаҡ һалыр өсөн иң һәйбәт ваҡыт инде. Көҙгә ҡарай ул көнө буйы ла эләгә. Табан тотоуға уңайлы саҡ — йылы һәм тымыҡ көн.

## АҠ ТАБАН

Аҡ табан беҙҙең яҡтарҙа һары табан һымаҡ киң таралмаған — ул республикабыҙҙың ҡайһы бер һыуҙарында ғына осрай. Табандың был төрө йәһәтерәк үҫеүе менән ҡиммәтле. Өсөнсө йәшендә 500 грамға хәтле етә. Шулай итеп, беҙҙең һыуҙарҙа аҡ табан һирәгерәк осрай.

Табан Яйыҡ йылғаһының күлдәрендә һәм иҫке йылғаларында таралған, иң баштарына хәтлем бар (мәҫәлән, Учалы төбәгендә).



Бәғзе урындарҙа аҡ табанды үрсетәләр ҙә. Әйтәйек, 1969 йылдан уны балыҡлы Шәмсетдин күленә ебәрҙеләр.

Табандың төрлө исемдәре бар. Аҡ табан тип күберәк көньяҡта әйтәләр, Силәбе өлкәһендә — һалйот башҡорттары — аҡтаван ти, Инйәр буйында йолпашҡа тип йөрөтәләр. Йүрүҙәндә табан балығы тиҙәр, Эйек — Һаҡмарҙа, Димдә, Әйҙә, күп урындарҙа табан балыҡ тиҙәр.

Табан — төп промысла балыҡтарҙың береһе, ул быуаларҙа, күлдәрҙә киң үрсетелә.

Был килбәтһеҙ һәм ялҡауыраҡ балыҡ. Уның ялҡаулығы һәм яй ҡыланышы уның һәр бер урында мул табыла торған аҙыҡ менән туҡланып йөрөүе менән аңлатыла.

Табан балыҡ бик әрһеҙ. Ул башҡа бер балыҡ та түҙеп тормаҫлыҡ һыуҙарҙа йәшәй ала. Һауа етешмәгән, ләм, үлән баҫҡан күлдәрҙә, хатта бәләкәс кенә күләүектәрҙә йәшәй ала.

* * *

Табан төбөнә тиклем боҙлана торған быуала ла иҫән ҡала, ә йәй көнө ул һыуҙың 40 градусҡа ҡәҙәр йылыныуын да күтәрә. Сөсө һыуҙа йәшәй торған беҙҙәге балыҡтарҙың иң йәйпәк булғаны алтын табан балыҡ; ҙур табан балыҡтың арҡырыһы менән оҙонлоғо бер тиерлек.

Табан балыҡ һары төҫтө: лимон һәм әфлисун төҫтәрен яҡшы айыра.

Табан балыҡтың артыҡ ҙур булмағанлығын беләһегеҙ инде. Ә ул 70 000 бөртөк ыуылдырыҡ сәсә.

Урал арты күлдәрендә дүрт һәм хатта биш килограмлы табан балыҡтар осрай. Дөрөҫ, аҙыҡ етешмәгән бәләкәй быуаларҙа йәки унда балыҡ «мискәләге селедка» кеүек күп булғанда, табан балыҡ кәрлә була.

Табан балыҡты дымлы үлән менән кәрзингә һалһаң, ул унда ун ике сәғәт йәшәй ала.

Табан балыҡтар ике төрлө була: алтын һәм көмөш табан балыҡ. Алтын табан балыҡ йәйпәк, шуға күрә уның «арҡырыһы ла, буйы ла бер»,— тиҙәр. Көмөш балыҡ тарыраҡ, ләкин алтын балыҡтан ҙурыраҡ була. Ул аҡмай торған болғансыҡ һәм бөтөнләй тиерлек кислороды булмаған һыуҙа ла йәшәй ала.

Табан балыҡ һалҡынды яҡшы кисерә.

Алтын балыҡтың ата бабаһы — табан балыҡ. Унан X быуатта Ҡытайҙа алтын балыҡ үрсетелгән.

Ҡараһыу төҫтәге табан балыҡтарын ҡармаҡҡа кейҙерер алдынан бер нисә сәғәт буйына яҡшы яҡтыртылған аҡ һауыттағы һыуға һалып торалар. Был ваҡыт балыҡтар ағара һәм ҡармаҡҡа кейҙерелгәс, йыртҡыстар өсөн алыҫтан уҡ күренә.

## Күлдә

Яҙ, һыу ташҡан саҡта, күлгә алабуға, суртан, һаҙан балыҡтары һәм ике сөгә килеп инде. Ә табан балыҡтар бында электән үк бар ине. Бында тәлмәрйендәр ҙә йәшәй.

Килгән ҡунаҡтарҙың бөтәһе ла табан балыҡ менән тәлмәрйендәр өсөн яҡшы дуҫтар ине тип әйтеп булмай, әлбиттә.

Сөгә менән һаҙан табан балыҡтарға бөтөнләй ҡамасауламаны. Улар көн буйына һыу төбөндә шыуышып тигәндәй йөрөп ятты, оҙон морондары менән ләм араһынан ваҡ ҡорттар эҙләне. Һыу ҡайта башлағас, сөгәләр үҙҙәре килгән йылғаға кире сығып китте.

Һаҙандар табан балыҡ менән бергә ләм араһында соҡоноп ҡалды. Ләм араһына инеп күмеләләр, тик ҡойроҡтары ғына күренә. Йәки ҡамыш араһында ары-бире йөрөп, япраҡ менән туйыналар. Бында ҡыҫалалар йөрөп ята. Оҙон мыйыҡтары менән ҡыбырҙатып, үҙҙәренең табыштарын көслө ҡыҫҡыстары менән тотоп алалар.

Ә бына алабуға менән суртандар — насар күршеләр. Табан балыҡты күреү менән баҫтыра башлайҙар. Табан балыҡҡа суртандан ҡотолоу ҡыйын. Көн һайын бер-ике табанды тотоп ҡына тора ул.

## Ташбаш

*мәҙәк хәл*

Минең күршене белмәйһегеҙҙер әле. Белмәһәгеҙ, белегеҙ, исеме — Эфир, үҙе һөт комбинатында әсетәлер кефир. Өҫтәүенә, чемпион. Боксер-маҙарҙыр, көрәшсе-фәләндер тип уйлай күрмәгеҙ тағы. Кәүҙәгә яшыҡ ҡына ул Эфир. Мәгәр чемпион — балыҡ тотоу буйынса районда беренселекте алды бит быйыл.

...Март уртаһындараҡ Зәңгәркүлдә балыҡсылар ярышы ойошторола тигән хәбәр таралды. Үҙебеҙҙең күл, үҙебеҙҙең намыҫ тип, Эфирҙы ошо бәйгелә ҡатнашырға күндерҙек. Ә мине судьялар төркөмөнә тәкдим иттеләр.

Башланды бер заман ҡыҙыу ярыш. Көн һыуыҡ, ә балыҡсыларға «эҫе». Ярты сәғәттән күл өҫтө гүйә шәреле сандауға әйләнде. Ун минуттан ярыш тамамла-

нырға тора, ә Эфирыбыҙҙың балыҡ һауыты һаман буш. Ни булды быға? Бүтән саҡта әҙәм аптыратып бик мул тота торғайны лаһа. Ҡармаҡтары арыу, кистән үк үҙем әҙерләштем. Хәлен беләйем тип, эргәһенә яҡынлашҡас, урта бармаҡ буйлыҡ ҡына ташбаш тартып сығарған булды. Әллә ғәрлегенән, әллә ярһыуынан күршем мәхлүкте әрләй-һүгә алдындағы боҙло ҡар өйөмөнә бырҡтырҙы.

Баш судья «Ярыш бөттө, хәҙер балыҡтарҙы үлсәй башлайбыҙ!» тип әйтеп тә бөтөрмәне, Эфирҙың көр тауышы яңғыраны:

— Сабыр итегеҙ, әләккәнен алайыҡ инде — баянан бирле аҙапланам...

Көтөргә булдыҡ. Тиҙҙән бөтәһе лә шаҡ ҡатты: сусҡа балаһындай ҡорман! Валлаһи, терһәк буйы булыр. Ҡармаҡ ебе нисек түҙгәндер — аптырарһың.

Ярышыусыларҙы байҡап, иң тос тойолған өйөмдәрҙе үлсәүгә һалабыҙ. Төпкөл ауылдан килгән егет ал бирмәҫ, ахырыһы. Бер тиҫтер генә егермеләп алабуғаһы бар. Бизмәнгә һалдыҡ — бер килограм да туғыҙ йөҙ илле грамм. Анау пенсионер ҡарттыҡы күпме тартыр? Сабаҡтары, ҡарағойроҡтары байтаҡ кеүек. Һи-и, ун ике грамға ғына кәмерәк.

Халыҡ түҙмәй геү килә:

— Ҡорманды үлсәп ҡарағыҙ әле!

— Ике килолай барҙыр ул, да...

Тыңланыҡ: бер килограмм да туғыҙ йөҙ илле грамм. Шул саҡ күл яңғыратып ҡысҡырып ебәрмәмме!

— Бәй, ташбаш һуң, ташбашы бар бит уның.

— Ҡайҙа ул?

Эфир мәке яғына ымланы.

— Йәһәт бул,— тип шыбырҙайым үҙенә.— Тапап китмәһәләр ярар ине, их, үҙең ташбаш икәнһең дә. Приз шәп — электр самауыры!

Үлсәнек: теп-теүәл ун ете грамм!

— Ур-ра, йәшәһен ташбаш!

— 1 кг 950 г плюс 17 г — 1 кг 967 г., — пенсионер ҡарт арифметиканы шәп белеүен раҫланы.

— Йәшәһен ташбаш!

— Зәңгәркүлдәр бирешә тиме ни?!

Халыҡ әй көлөшә, әй сәпәкәй итә. Эфир ғына берсә маһайып елле ҡорманға, берсә сирылып бөрсәләй ташбашҡа күҙ һалғылап, ара-тирә йылмайғылап ҡуя ине был мәлдә.

***Сабир Шәрипов***

## ҠАРА БАЛЫҠ

Ҡара балыҡтың кәүҙәһе ҡалын, килбәтһеҙ. Уның тәне тығыҙ ултырған ваҡ тәңкәләр менән ҡапланған. Арҡа өлөшө ҡара йәшел, ныҡ лайлалы һәм ике яҡ ҡабырғаһы алтынһыу сағылышындағы ҡарағусҡыл төҫтә, ә күҙҙәре ҡараҡыҙыл.

Ҡара балыҡ түбәндәге урындарҙа тереклек итә: йылға тобаларында, ағым күлдәрҙә һәм төбөнә ләм ултырған мәтеле, ҡуйы үлән һәм ҡамыш үҫкән быуаларҙа.

Ҡара балыҡ батҡыл ләмдән соҡсоноп йөрөп селәүсендәрҙе һәм төрлө бөжәктәрҙең ҡарышлауыҡтарын ашай.



Май айында, быуаларҙа һыу имшегәс, ҡара балыҡҡа ҡармаҡ һалыу башлана. Йәй урталарында ул әллә ни ҡапмай, әммә августа сиртеүе яҡшыра төшә.

Ҡара балыҡҡа ҡыҙыл ҡорт, ямғыр һәм тиреҫ селәүсендәре даими аҙыҡ булып хеҙмәт итә. Ул ҡыҫала итенә, себен ҡортона, һәм мәнкегә лә апаруҡ ҡаба. Әммә балыҡты алдатыу өсөн иң яҡшыһы — селәүсен. Уны ҡармаҡҡа ҡойроғон ҡыҫҡа ғына итеп ҡалдырып, тоҡандап кейҙерәләр. Ҡара балыҡ 2—2,5 метр ярым тәрәнлектә йөҙөп йөрөй. Уны екән араһындағы асыҡлыҡтарға ем һалып, ярҙан тоталар. Был төр балыҡ һыуға ауған ботаҡ-сатаҡлы ағастар аҫтында ял итергә ярата. Ҡамыш, үлән баҫҡан күлдәрҙә һәм быуаларҙа кәмәнән ҡармаҡларға була. Быны өсөн һыу үҫемлектәре булмаған асыҡ урынды һайлайҙар һәм ҡара балыҡты эйәләштерәләр. Төпкә түпрә эремсек, туралған селәүсен киҫәктәрен ырғыталар. Яҙҙың матур көндәрендә уртаса ҙурлыҡтағы һәм ваҡ ҡара балыҡтар яр ситенә яҡынлай.

Ҡара балыҡҡа бик аҙ ғына кислород та етә. Ул йыш ҡына тоноҡ һыулы быуаларҙа йәшәй. Ҡара балыҡ айғолаҡ менән дә һәм тән тиреһе аша ла тын ала. Аквариумда оҙаҡ йәшәгән ҡара балыҡ һауа боҙолор алдынан борсола башлай, минут һайын һыу өҫтөнә күтәрелә.

## Ҡарағайлы күлдә

Атайым беҙҙән ситтәрәк бесән саба, ә мин Ҡарағайлы күл буйында ҡармаҡ һалам. Һеңлем Фәйрүзә лә минең эргәлә.

— Әһә, тағын берәү! — тип шатлана ул, мин балыҡ тартып сығарған һайын. Иплэп кенә ҡармаҡтан ысҡындырам да һыулы биҙрәгә һалам. Инде унлап булды. Фәйрүзә уларҙы йөҙҙөрөп уйнай... Ҡояш байығанын һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. «Әй, балыҡсылар, ҡайтабыҙмы?!» тигән тауыш ишетелә. Беҙ теләр-теләмәҫ кенә ҡуҙғалабыҙ...

Өйгә ҡайтып етеү менән: «Әсәй, беҙ ике алабуға, дүрт ҡыҙылғанат, биш суртан балаһы тоттоҡ!» — Фәйрүзә, ғорурланып, биҙрәне әсәйемә һуҙа.



## БӨГӘРСӘ

*Ағиҙелкәй һыуы ай тәрән һыу,*
*Аҡ сабаҡтар уны буйламай.*
*Аҡ сабаҡтар кеүек йәшәү ҡайҙа*
*Донъя ҡайғыларын уйламай.*

*(Башҡорт халыҡ йырынан)*

Бөгәрсә йәки йомро сабаҡ — күптәргә билдәле һәм киң таралған. Ул ҙур түгел. Төбө ҡомло йәки ағып ятҡан күлдәрҙе ярата. Ғәҙәттә һыу төбөндә көтөүе менән йөрөй. Күбеһенсә ҡырсын ташлы йә ҡомло, ярҙарында тал-тирәк ҡуйы үҫкән ҙур булмаған инештәрҙә осрай. Был балыҡ һыуҙың үтә күренмәле һәм саф булғанын оҡшата. Бөгәрсә иртән иртүк аҙыҡ эҙләп сөмбөл тирәләренә йәки бәләкәй шаршыларға ла барып сыға. Ул күбеһенсә һыуҙағы ваҡ ҡына зоопланктон, шулай уҡ һыуға төшкән себен-серәкәй, ләмдәге ҡыҙыл ҡорт-маҙар менән туҡлана. Яҙын бүтән балыҡтар сәскән ыуылдырыҡтан да ауыҙ итеүҙән баш тартмай. Үҙе иһә ыуылдырығын бик иртә — март аҙағында — апрель баштарында сәсә. Ыуылдырығы үткән йылғы ылымыҡтарҙа һәм таштарҙа һылашып тороп ҡала.

Был оҙонса ғына ҡарараҡ ҡанатлы, түҫө аҡ булған һаҙандар тоҡомона ингән йылғыр балыҡ беҙҙең төрлө һыуҙарҙа шаҡтай ныҡ таралған, шуның өсөн дә микән уның исемдәре лә бер нисә тиҫтәгә барып етә (дөрөҫ әйтелеше бер аҙ айырылып торғаны ла байтаҡ). Әйтәйек, табын башҡорттары (кәлсер табын һ. б.) — Ҡырмыҫҡалы төбәгендә был балыҡҡа буғарса тиҙәр, шунда уҡ рустар, башҡорттар уны ялчик, елес тигән ерле һөйләштәге атамалары менән исемләйҙәр...

Күптәр, хатта тәжрибәле балыҡсылар ҙа, бөгәрсәне йә күкйөн менән, йә оптосоҡ, йә ажау һәм хатта сабаҡ менән бутайҙар. Бөгәрсә ул нисектер ағыраҡ һымаҡ күренә. Беҙҙең һыуҙарҙа Европа бөгәрсәһе тигән төр йәшәй. Ә бына Урал артында сабаҡтың да, бөгәрсәнең дә Себер төрҙәре таралған. Ҙур булмағанлығы менән бөгәрсә күкйөнгә оҡшабыраҡ тора.

Оптонан бөгәрсә үҙенең йомораҡ кәүҙәһе менән айырыла. Ярҙағы ҡыуаҡтарҙан ямғыр-ел менән һыуға бөжәктәр бәрелеп төшкәндә, һыуҙың өҫкө ҡатламдарына күтәрелеп, бөгәрсә улар менән туҡлана.

Тап Уралда инде бөгәрсә үҙенең иң ҙур буйына етә — 25 см тиклем һәм ауырлығы менән 0,4 кг хәтлем. Миәс күлендә бөгәрсә өс йәштә 150 мм була, 26 грамм тарта. Сабанеев уйынса, өс йылдан бөгәрсә 18—20 сантиметрға етә.

Бөгәрсәне гел дә ҡыуаҡтар һәм ағастар үҫкән ярҙар янында табып була.

Бөгәрсәне Башҡортостандың бәләкәй тау йылғаларында осратып була, шулай уҡ Ҡүгәрсен яҡтарындағы Инәк, Абыҫҡан һыуҙарында күп ине. Л. Сабанеев яҙғанса Урал йылғаларында бөгәрсә үрләгән мәлдә уны мурҙаға бер көндә 10 ботҡа хәтлем тотҡандар.

Йомро сабаҡты (күп урында ул ошо йә аҡ сабаҡ тигән исем менән йөрөтөлә) һыу тоноу менән үк ҡаптыра башлайҙар. Ул инде иң өлгөр балыҡтарҙың береһе. Уны ҡалҡыуыс менән ҡармаҡлауҙа күнекмә кәрәк.

Ҡармаҡ бәләкәй өслө-дүртле, нәҙек епле (0,15—0,25 мм) булырға тейеш. Ҡармаҡты ваҡ селәүсен, себен ҡорто, күгәүен, ҡыҙыл ҡорт, ҡанатлы бөжәк ҡорто менән емләйҙәр. Бөгәрсәне алдан ашатмаһаң да була. Ул емде ҡапыл әләктереп ала, шуға күрә ҡармаҡты ваҡытында һирпеү кәрәк...

*Ҡадир Даян*

## Аҡ сабаҡтар

Беҙ барабыҙ балыҡҡа
Туғайҙарҙағы йылғаға.
Беҙҙең йылға тәрән ул,
Сылтырамай, тын ғына.
Аҡ сабаҡтар уйнайҙар
Һыу өҫтөнә үрелеп,
Йылтыр көмөш тәңкәләр
Ҡала саҡ-саҡ күренеп.
Беҙ, шауламай, тын ғына
Ташлы ярға киләбеҙ.

Ни ваҡытта сабаҡтар
Ҡапҡанлығын беләбеҙ.
Бик күңелле була шул,
Аҡ сабаҡтар ҡапҡанда,
Көмөш кеүек, йылтырап,
Биҙрәләргә ятҡанда.
Йәй көндәре саф һауала
Күңелле ял иттек беҙ.
Һағынышып мәктәпте,
Сентябрҙе көттөк беҙ.

## АЖАУ ЙӘКИ ҠУШБАШ

Ажау ҡармаҡлау өсөн бик тә үҙенсәлекле балыҡтарҙың бер төрө. Ауырлығы 5—6 килограмға еткән ажау балыҡтары йыш осрай. Улар йылғаларҙа, ағып ятҡан быуаларҙа көн күрә. Йәйге көндәрҙә йылға төбөндәге таш ҡалҡыулыҡтар янында, шаршыларҙа, күпер аҫтарында, быуаларҙан түбәндә, упҡындарҙа ла йәшәй.

Ажау — ҙур башлы, маңлайы киң балыҡ. Арҡаһы ҡара йәшел, ян-яҡтары көмөш төҫлө, эре тәңкәле. Арҡа һәм ҡойроҡ, ҡанат өлөшсәләре ҡуңыр, ә түш һәм ҡорһаҡ ҡанаттары ҡыҙғылт төҫтә.

Ваҡ ажауҙы беҙҙә ҡарағанат (ажаусыҡ), ә эрерәктәрен төрлө төбәктәрҙә ыжау, ажар, биртас йәиһә ҡушбаш тип йөрөтәләр.



Ажауҙы яҙҙан алып ҡара көҙгә саҡлы ҡармаҡлайҙар. Яҙын уны текә яр эргәһендә, шаршылар менән өңөлгән урындар янында, бәләкәй уйылғылар тамаҡтарында тота башлайҙар.

Алдатҡыс ем итеп эре ҡуңыҙ ҡарышлауыҡтарын, май ҡуңыҙын, селәүсендәрҙе, йомшаҡ сырҙы, макаронды, колбасаны файҙаланырға мөмкин. Ажауҙы шулай уҡ төндә лә, көндөҙ ҙә ҡаптыралар.

Ажауҙың ыуылдырыҡ сәскән мәле апрель аҙаҡтарында һәм май баштарына тура килә. Һуңға табан был балыҡ шәп сиртә башлай. Йәй көнө өҫтә йөҙөп йөрөүсән. Ошо мәлдә уларҙы ҡалҡыуысты ҡулланмайынса ла оҙон ҡыуалдар менән ҡаптырып була. Энәғараҡтар менән бергә башҡа ҡанатлы бөжәктәрҙе лә ем итеп файҙаланырға ярай. Бының өсөн бишле-алтылы ҡармаҡ кәрәк.

Көҙгә табан ажауҙар балыҡ селбәрәһенә, сүмесбаштарға ла ҡаба. Был балыҡты ҡышын да йылға ярындағы төпкөләрәк урындарҙа ҡаптырырға мөмкин.

## Ажауҙы нисек тоталар?

Беҙҙең һыуҙарҙа киң таралған ажауҙы ғына алып ҡарайыҡ. Ул теләһә ҡайһы йылғала (ләкин күлдә түгел) бар тиерлек. Ажау йылғаның тиҙ аҡҡан ҡомло ерҙәрендә, күпер, тамыр-томор, текә яр аҫтарында, ҙур таш тирәһендә, һыу сөгөрмәкләнеп ятҡан ерҙәрҙә йәшәй — ҡыҫҡаһы, ағын һыуҙы ярата. Эреһен тотоу өсөн һигеҙле-туғыҙлы ҡармаҡ ҡулланалар.

Июнь айында сиңерткә, төнгө күбәләк, селәүсен, аҡ икмәк, ҡыҫала ите һәм башҡа ем менән тоталар. Ем һыу төбөнән 10—15 см өҫтәрәк йөҙөргә тейеш. Балыҡтарҙы ҡармаҡ һалған ергә эйәләштереү өсөн һыуға бер аҙ ем (бигерәк тә бөрттерелгән ашлыҡ) һипһәң, яҡшыраҡ та, табышлыраҡ та була.

Эҫе көндәрҙә иртән, кис һәм төндә, ә һибәләп кенә яуған йылы ямғырлы көндәрҙә көнө буйы туҡлана. Ажау ямғыр аҙағына, ямғырҙан һуң, көн еләҫләнеп һыу өҫтө бер аҙ тулҡынланып торғанда, яҡшы ҡаба. Һалҡын иртәләрҙә, ҡояш сығып, һыу бер аҙ йылынғас эләгә башлай.

* * *

Күп кенә йылғаларҙа ҡушбаш балығы селәүсендәр, бөжәктәр һәм уларҙың ҡарышлауыҡтары, үҫемлектәр һәм ваҡ балыҡтар менән туҡлана. Ә бына Нева йылғаһына барлыҡ төр аҙыҡ ҡалдыҡтары ла килеп эләгә һәм унда ҡушбаш бөтә нәмәне лә ашаусы балыҡҡа әүерелә. Бында уны ҡармаҡҡа колбаса, сыр, хатта селедка киҫәге емләп тә ҡаптыралар. Ҙур ҡалаларҙан ситтәге йылғаларҙа йәшәүсе ҡушбаштар бындай емгә яҡын да килмәйәсәк.

Ҡайһы саҡтарҙа хатта йыртҡыс булмаған балыҡтар ҙа йыртҡыс булып китәләр. Мәҫәлән, ҡушбаш яҙ һәм йәй көндәрендә селәүсендәр, бөжәктәр һәм үҫемлектәр менән туҡлана, әммә көҙөн ташбаш йәки башҡа ваҡ балыҡтар менән дә һыйланғылай.

Күпер бағаналары янында йөҙөп йөрөгән ҡушбаш балыҡтары өйөрөн күҙәтеп ҡарағыҙ. Уларҙың ваҡтары өҫтә йөҙә, ә аҫтараҡ ҙурыраҡ балыҡтарҙың ҡараңғы шәүләләре күренә. Һыуға сиңерткә ташлаһағыҙ, уны күҙ асып йомған арала ҙурыраҡ балыҡ эләктереп алыр. Инде сиңерткәгә һалам киҫәге ҡаҙап, һыуға ташлап ҡараһағыҙ, ҙур балыҡ йөҙөп килһә лә, уны ҡапмаясаҡ, бары ваҡ балыҡтар ғына һалам ҡаҙалған сиңерткәне ян-яҡҡа тартҡылаясаҡ.

Ҡушбашты йәй көнө ярҙың елдән ышыҡ яғында эҙләргә кәрәк: ел яр буйындағы ағастар һәм ҡыуаҡтарҙан күп кенә бөжәктәрҙе һыу өҫтөнә төшөрә, ә балыҡтар бындай урындарға йыйылырға бик яраталар.

Ҡушбаш шаҡтай оҙаҡ (8—15 йыл) йәшәй.

## Йәмле Ағиҙел буйҙары

Йәкшәмбе көн, иртүк тороп, ҡармаҡтарыбыҙҙы иңбаштарыбыҙға һалып, иптәштәр менән бергә балыҡ тоторға Ағиҙел буйына киттек. Көн иртә булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең кеүек һәүәҫкәр балыҡсылар юлда байтаҡ күренә ине. Ағиҙелгә тиклем ара алыҫ ҡына булһа ла, һөйләшеп көлөшә-көлөшә бара торғас, килеп еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ.

Үҙебеҙгә уңайлы урынды һайлап алғас, кем уҙарҙан ҡармаҡтарыбыҙҙы рәткә килтерә башланыҡ. Күп тә үтмәне: «Ҡармаҡ һалдым, тиҙерәк ҡап — яр башында ялтырап ят»,— тип Әхтәм ҡармағын һыуға ырғытты. Уның артынан ҡалғандар ҙа:

— Ҡулың еңел булһын,— тип ҡармаҡтарын шулай уҡ һыуға ырғыттылар.

Беренсе булып балыҡ Заҡуанға эләкте. Унан башҡалар ҙа бер-бер артлы ярға балыҡ сығара башланы. Шунда көтмәгәндә Әкрәмдең: «Егеттәр, ярҙамға!» — тигән көслө тауышы яңғыраны. Ҡараһаҡ, ул биленә хәтле һыуға төшөп ҡармағының ебенән тарта ине.

Уның ҡармағына ҙур бер балыҡ эләккән дә, ҡапыл тартып ҡармаҡ һабын һындырған икән. Ләкин Әкрәм ҡаушап ҡалмаған, тиҙ генә һыуға төшөп, ҡасып барған ҡармаҡлы балыҡты ебенән эләктереп алған. Ярҙамлашып тартып сығарғас, ни күҙебеҙ менән күрәйек, алдыбыҙҙа бер метрлы суртан...

— Вәт, был балыҡ, исмаһам,— тип шатланышып Әкрәмде күмәкләп өс тапҡыр күккә сөйҙөк.

Һауыттарыбыҙ балыҡ менән тулғас, ҡармаҡтарыбыҙҙы йыйып, һыу инеп, ҡомда ҡыҙынып яттыҡ. Беҙҙең менән килгән Ғиниәт ағай тәмле итеп балыҡ

һурпаһы бешерҙе. Балыҡты маҡтай-маҡтай ашап, сәй эскәс, кисләтеп кенә ҡайтырға сыҡтыҡ.

Болон аша ҡайтҡанда киске һалҡында төрлө сәскәләр хуш еҫ бөркә, ҡоштар һайрай ине. Бына ниндәй йәмле бит ул беҙҙең Ағиҙел буйҙары!

## ТАРАНСАБАҠ ЙӘКИ КҮСТЕРӘ-ҠОРМАН

Был балыҡ ҡалҡыу «томшоҡло», көмөш төҫлө, ҙур күҙле булыр, уның арҡа һәм ҡойроҡ ҡанаттары ҡарабуҙ, түш ҡанаттары һарғылт йәиһә ҡыҙғылт төҫтә. Дөйөм алғанда, ул тотошлайы менән күкһел төҫтә булыр.

Тарансабаҡ — промысла балығы. Ул төбө ләмле йәки мәтеле һыуҙың тыныс һәм тәрән урындарында эркеүе менән йөрөй, май аҙағында, вағыраҡтары иртәрәк, эреләре һуңғараҡ, үләнле һәм һай ҡултыҡтарҙа ыуылдырыҡ сәсә. Шунныһы ҡыҙыҡ: ыуылдырығын ул бер юлы сәсә, йәғни бик кисләтеп кенә башлай ҙа таң менән сәсеп бөтә. Ыуылдырығынан бушап ҡалғас инде эркеүгә кире әйләнеп ҡайта, һәм эркеү тәрәнгә китә.

Был балыҡ Башҡортостан һыуҙарынан ары китмәй — тарансабаҡ Урал һыртынан көнсығышҡа табан осрамай тиерлек.

Ул Ағиҙел менән Ҡариҙелдә байтаҡҡа күп һанлыраҡ. Яйыҡ йылғаһы тамаҡтарында ул ғөмүмән бик күп һанлы балыҡтар рәтенә инә.

Тарансабаҡтың, ҡормандың, күкәнәштең оҡшашлығы (айырыуса йәш саҡта) шул тиклем ҙур, хатта тәжрибәле балыҡсылар ҙа уларҙы гелән бутап йөрөтә.

Урындағы балыҡсылар тарансабаҡты ҡормандың йәштәре менән йыш бутайҙар — дөйөм *таранcай* кеүек исем менән йөрөтәләр, айырым төр булараҡ ул хатта мәғлүм дә булмай китә...

Тарансабаҡ кәүҙә-һыны менән ҡорманға оҡшаш, ләкин ҡанаттарының ҡыҙғылтыраҡ төҫө менән, шулай уҡ эрерәк тәңкәләре менән дә айырыла. Уның



ауыҙы аҫҡа ҡарап тора, бауырында, түш йөҙгөстәренән арыраҡ тәңкәһеҙ бер осло һырт үтә.

Был яй үҫеүсән, ялпаҡ кәүҙәле, тупаҡ моронло, арҡаһы буҙ-күгелйем, яняҡтары көмөш һымаҡ төҫмөрләнешеп алған ҙур булмаған балыҡ. Ҡанаттары буҙ төҫтә була.

Таранcабаҡ Европа илдәренең күпселек өлөштәрендә таралған. Ул Ҡара, Балтик, Азов диңгеҙҙәре бассейндарына ҡараған йылғаларҙа һәм күлдәрҙә йәшәй. Ул яй ағып килгән, төбө мәтеле булған йылғаларҙы ярата, һалҡын һыуға һырыҡмай. Йыш ҡына ярҙарға яҡынлап ҡуйы эркеүҙәр менән йөҙөп йөрөүсән.

Күстерә-корман төрлө бөжәк һәм үҫемлек менән туйына. Ул балыҡтарҙың ыуылдырығын да ашай, шуның менән ныҡ зыян да килтергеләй.

Һеҙгә кәңәшем шул: йәй көнө ебе 0,2—0,3 мм, ҡыш көнө 0,15—0,2 мм булған өслө-бишле ҡыҫҡаҡ ҡына ҡармаҡ менән таранcабаҡты ҡармаҡлайҙар. Тәүлек араһында уның иң һәйбәт сирткән сағы — ҡояш байығас та тамам ҡараңғы төшкәнсе булған мәл. Йөҙөп барған ҡалҡыуыслы ҡармаҡҡа ла шәп ҡаба.

## Көлкө лә, яҙыҡ та...

Бер саҡ иртә менән мин йылғаға барҙым. Унда пеләш башлы бер кеше ултыра ине. Ул һыуға өс ҡармаҡ ташлаған да хыяллы уйға сумған. Беҙ уның менән ярты сәғәт самаһы бергә ултырҙыҡ.

— Хөрмәтлем, балыҡ ҡапмай булһа кәрәк,— мин әйтәм.

Ә ул миңә уҫал иттереп ҡарап алды ла:

— Ә нимә ҡабырға тейеш һуң? — тип һораны.

— Нисек инде ул нимә? Балыҡ.

— Өс йыл инде бында бер балыҡ та юҡ.

— Ә нимә бар һуң?

— Фенол бар. Балыҡ бөтөнләйгә ҡырып бөтөрөлгән.

— Кем һуң уны ҡырҙы?

— Эшләп сығарыу ҡалдығынан таҙартмайынса, һыуҙы йылғаға түккән фабриканың дирекцияһы ҡырҙы.

— Әгәр әйткәнегеҙ ысындан да дөрөҫ булһа, ниңә һуң был йылғала балыҡ ҡармаҡларға килдегеҙ?

— Сельд ебетәм.

Аптыраштан мин пеләш башлынан бер нисә аҙым артҡа тайпылдым һәм әйтә ҡуйҙым:

— Һуң бит был һыуҙа ебетелгән балыҡты ашап булмайҙыр бит?

— Был балыҡты мин ашау өсөн түгел, ә ҡомаҡтарҙы ағыулау өсөн ебетәм.

— Ә был йылғала ағыулап буламы һуң?

— Нисек ағыулап була тағы? Ҡомаҡтың ебетелгән балыҡты тәмләп кенә ҡарауы — ул шул ыңғайы дөмөгә.

— Тимәк, был йылғаның ниндәй булһа ла файҙаһы ҡалған икән әле!..

*(Сит ил юморынан)*

# ОПТО

*Ҡап-ҡап, опто, ҡармаҡҡа,*
*Эреһе — баҙарға,*
*Вағы — балаларға.*

*(Балыҡсы теләгенән)*

Опто сабаҡтан кәүҙәһенең ҡалынлығы һәм төҫө менән айырылып тора. Уның арҡаһы ҡара көмөш төҫтә, ә ян-яҡтары асыҡ төҫтәге тәңкәләр менән ҡапланған. Күҙҙәре иһә алтынһыу төҫтә, ә ҡанаттары ҡыҙыл йә һарғылт таптары булған ҡыҙыл.

Опто тымыҡ йылғаларҙа, күләүектәр менән ылымыҡтарҙа йәшәй. Был балыҡты шарлауыҡ, шаршы тирәһендә, йылға тамағында, таш ҡалҡыулыҡтар менән быуылған урындарҙа ла осратырға мөмкин. Күлдәрҙә ул яңғыҙаҡ тормошто артығыраҡ күрә. Төндә аҙыҡ эҙләргә сыға.

Яҙ айында оптоны һыуға ауып төшкән ҡыуаҡ-ағас, шаршы һәм быуылған урындарҙа ҡаптыралар. Муйыл сәскә атҡас та, ҡармаҡҡа шәп эләгә.

Оптоға ямғыр селәүсене, ҡабыҡ ҡуңыҙҙары, башҡа төрлө ҡуңыҙҙар, ҡарышлауыҡтар һәм май ҡуңыҙы менән себен ҡортонан «аҙыҡ» әҙерләйҙәр.

Йәй көндәрендә һеүән, йылға тупһаларында ҡармаҡлайҙар. Быҡтырылған борсаҡ, сиңерткә, күгәүен һәм энәғараҡтарҙы ла файҙаланырға була.

Ваҡ оптолар (оптосоҡтар) быуа-күлдәрҙә, ҡамыш араһында һәм ылымыҡтарҙа эләгә. Иң шәп алдатҡыс ем — энәғараҡ ҡарышлауығы.

Балыҡсы әҙәбиәтендә опто йыртҡыс балыҡ түгел, шулай ҙа һирәк-һаяҡ спиннингҡа ла эләгә, тип әйтелә.

Опто көндәр һалҡынайта төшкәс тә ҡаба. Әйтәйек, ноябрь айында, йылға өҫтө боҙ менән ҡапланғас та, ямғыр селәүсененә яҡшы сиртә. Ҡышын да уны йылғаның иң тәрән урындарында ҡыҙыл ҡортҡа йәиһә селәүгә ҡармаҡларға мөмкин.



## Балыкта

Ҡыҙып балыҡ ҡармаҡлайбыҙ
Яр аҫтында күләгәлә.
Ҡалҡыуыстар бата-ҡалҡа,
Иллә балыҡ эләгә лә!

Ялтырашып сыға балыҡ,
Ана ҡапты, тағы, ана.

Ҡармаҡҡа эш тығыҙ бөгөн,
Эш күп ҡармаҡ һабына ла.

Һауыт тулғас, ауыҙ йырып,
Тиҙ-тиҙ генә өйгә сабам.
Балыҡ көтөп ҡалған бесәй
Арығандыр инде тамам.

***Ф. Шакир***

## БУРЫШ

*Ҡап-ҡап, бурыш, ҡап,*
*Яр башында ялтырап ят.*
*Яңы емгә иҫке балыҡ, ҡап-ҡап!*

*(Балыҡсы теләгенән)*

Фәҡәт ағында тереклек итеүсе балыҡ. Йылға тамағында, таҙа ҡом һәм ташлы урындарҙа осрай. Яр ситенә бөтөнләй тиерлек яҡын юламай. Кәмәлә йөҙгәндә, ҡармаҡты ағымға һалып ебәреү менән ҡаба был балыҡ. Ярҙан, шаршыларҙан түбән ятҡылыҡтарҙа ауыр ҡалҡыуыстарҙы файҙаланып та ҡармаҡларға була. Аҙыҡты йылғаның пароход, кәмә йөҙөп йөрөй алырлыҡ тәрән урындарына ырғыталар.

Бурыштың кәүҙәһе оҙонса, ауыҙы кимерсәкле мороно аҫтындағы ҡыуышлыҡҡа урынлашҡан (шунлыҡтан уны түбәнауыҙ тип тә йөрөтәләр). Арҡаһы һоро, йәшкә ҡарағусҡыл, түше менән ян-яҡтары аҡ төҫтә. Һырты менән ҡойроҡ йөҙгөстәре буҙ, ҡарағусҡыл, ҡалған өлөштәре — һарғылт йәшкә



ҡыҙғылтыраҡ төҫтә була. Кәм тигәндә бурыштың ауырлығы бер килограмға етә, ә оҙонлоғо 50 см, һирәк-һаяҡ эрерәктәре лә осрай. Бурыштың ыуылдырыҡ сәскән мәле май айҙарына тура килә. Балыҡтарҙың был төрө һыуҙың буръяҡланыуын тиҙ һиҙемләй. Таҙа һыуҙа йөҙөргә ярата. Ҡояшлы көн оҙоно тиерлек бурыш бик яҡшы сиртә. Уға селәүсен ҡойроғо, себен ҡорто һәм ҡыҙыл ҡортто ем итеп файҙаланалар. Бурышты шулай уҡ үҫемлек емдәргә лә ҡармаҡларға була. Бурыштар эркеү-эркеү йөрөүсән.

Таҙа һыу яратҡандан бурыш балығы Урал йылғаларында йыш осрай. Мәҫәлән, Йылайыр һыуында, Яйыҡ башында, Ҡыҙыл йылғаһында (унда бурыс тиҙәр) һәм башҡа урындарҙа.

## ҠАРМАҠ ҺАЛҒАНДА

Һыу өҫтө тып-тын. Өф иткән ел дә юҡ. Балыҡтар бик яҡшы сиртә. Ҡармаҡты һис кенә лә тик тотмайҙар. Булаттың атаһы балыҡтарҙы тартып сығара. Булат балыҡтарҙы биҙрәгә һала бара. Бына уларҙың биҙрәләре лә тулып килә.

## ҠЫҘЫЛҒАНАТ

Ҡыҙылғанат — һаҙандар тоҡомона ҡараған балыҡ — беҙҙә ныҡ таралмаған тиерлек. Ҡыҙылғанат, бөтә һаҙандар ғаиләһенә ингән балыҡтар һымаҡ, күберәк йылыраҡ һыуҙарҙы ярата. Шуның өсөн дә ҡыҙылғанаттар Башҡортостандың көнсығышында юҡ тиерлек, Себерҙә уларҙы йүнләп осратмаҫһың да. Беҙҙә шулай ҙа, көнсығышта ятҡан Өргөн күлендә, ҡыҙылғанат балығы йәшәй, ләкин ул унда күп түгел. Ә инде көньяҡҡа табан ҡыҙылғанат йышыраҡ осраштырғылай.



Мәҫәлән, Яйыҡтың башында (шул уҡ Учалы төбәгендә) ошо төр балыҡтар осрамаһа ла, инде Орск ҡалаһы янында булған Яйыҡтың иҫке аҡҡан урынында (үле йылға, ҡылы тип тә әйтәләр бындай урындарға) элек, бынан 20—25 йыл алда ҡыҙылғанаттар һирәк осрай торған балыҡтарҙан һаналмай торғайны.

Ҡыҙылғанат матур балыҡ, ҡанаттары ҡып-ҡыҙыл, арҡаһы ҡара йәшел, эреләренең тәңкәләре һарғылтыраҡ төҫтә була. Тыныс балыҡ, бөжәк-фәлән менән туйына.

Ошо балыҡтар халыҡта урындағы исемдәре менән аҙ йөрөй, күберәк ҡыҙылғанат атамаһы ла билдәле.

***Әсхәл Әхмәт-Хужа***

## Балыҡ ҡаптырғанда

*Балтай:*
— Ҡармағыңды иплэп һелтә,
Элэгэ күрмә үҙең...

*Ҡалтай:*
— Суртан тотам бит,
Шаулама!
Күрмәйме әллә күҙең?

*Балтай:*
— Елле суртан ҡаптымы ни,
Ник болғайһың ҡыуалды?

*Ҡалтай:*
— Суртан түгел шул.
Тәлмәрйен...
Ҡармаҡтан төшөп ҡалды...

## ШАМБЫ

*Шамбы шыма, ҡулдан тота ла шыуа.*

(Әйтем)

Шамбы башҡа балыҡтарҙан ныҡ айырыла. Уның ҡылыҡтары ла бик ҡыҙыҡлы. Түңәрәк рәүештәге кәүҙәһе шыяланып тора, төҫө ҡараһыу, ян-яҡтарында асыҡ тимгелдәр бар. Шамбының башы ялпаҡ, ауыҙы киң, ә тештәре күп һәм ваҡ ҡына. Шамбының ауырлығы бер нисә килограмға етә.

Шамбы — ҡомһоҙ, йыртҡыс балыҡ ул. Төнөн ул ваҡ балыҡтар аулай, кәрәгәләр аҫтында һыйынып, боҫоп ята, таш аҫтарына инә, йәиһә һыу төбөнә һырығып, тик кенә ҡыймылдамай тора.

Ҡышын һыу аҫтында бик хәрәкәтсән була. Бүтән балыҡтар, ҡышын һүлпән булғанлыҡтан, шамбыға анһат ҡорбанға әйләнәләр.

Шамбы сентябрҙәрҙә ҡармаҡҡа яҡшы эләгә, сөнки көҙгә табан һыу һалҡынаяя төшкәс тә аҙыҡ эҙләп унда-бында йөҙөп йөрөй башлай.

Сатнама һыуыҡтарҙа шамбы ташлы йә төбө ҡомло булған тәрән урындарға йыйыла һәм шунда үҙенең йәбешкәк ыуылдырығын сәсә. Бер инә балыҡ миллионға хәтлем ыуылдырыҡ бөртөгө бүлеп сығара.

Ыуылдырыҡ сәскәндән һуң шамбы бик ихлас ҡаба башлай ҙа инде.



Ташҡын һыуҙар ярҙарына тартыла башлау менән шамбыны ҡармаҡларға тотоналар. Уны ҡаптырыу бик еңел. Ҡармаҡ һабы ҙур булмаһын, 1—1,5 метрлығы етә. Шундай ҡармаҡтарҙың бер нисәһен алалар, төптән селәүсенгә, йә эрерәк ҡармаҡты балыҡ менән емләп тоталар. Шамбы төндәрен шәберәк эләгә.

* * *

Һалҡын һыу ярата торған шамбы балығы, эҫе көндәрҙә һыу бик йылынғас, йыуылған яр аҫтындағы ояға инеп йоҡоға талғандай хәрәкәтһеҙ ҡала.

Туңған һәм бөтөнләй ҡатып ҡалған шамбы балыҡтарын да әкренләп ирет-кәндә, улар терелә һәм йөҙә башлай. Ләкин балыҡтың ҡаны һәм айғолаҡтары боҙға әйләнмәүен күҙәтергә кәрәк.

Шамбы һыуҙың температураһы 12 градустан юғары булғанда ашамай башлай.

Һыуҙың температураһы 0 градус самаһында ыуылдырыҡ сәсә.

Шамбылар башҡа балыҡтар ҡышын ыуылдырыҡ сәскәндә, уларҙың ыуылдырыҡтары менән һыйланыу өсөн генә ҙур төркөмдәргә йыйылалар.

Һалҡынды яҡшы кисерә.

Ҡайһы бер балыҡсылар шамбы балығын тауышлы «емгә» лә тоталар. Улар ҡармаҡ ебенә металл ҡулсалар йәки кескенә ҡыңғырауҙар тағалар. Ҡармаҡ ебен тартҡылағанда улар шылтырай һәм шул тауышҡа килгән балыҡ ҡармаҡҡа эләгә.

Шамбы балығының аҫҡы иренендәге мыйыҡсаһы һиҙемләү ағзаһы хеҙмәтен үтәй.

Был балыҡ ғүмеренең күп өлөшөн яңғыҙ үткәрә.

Һалҡындар башланғансы бөтөнләй ашамай торған һалҡын яратыусы шамбы был ваҡыт һай ерҙәргә сығып рәхәтләнеп ашай башлай.

Шамбыны йылы һыуҙа бөтөнләй тота алмайһың.

Шамбы балыҡтарын ҡара төплө аквариумдан аҡһыл төплө аквариумға күсергәндә, улар тиҙ арала төҫтәрен үҙгәртә.

## Ғәҙәт буйынса

Дүшәмбе көн ике балыҡсы осраша.

— Йә нисек, балыҡ тота алдыңмы? — тип һораша берәүһе.

— Юҡ,— тип яуап ҡайтара тегеһе,— бер шамбы эләккәйне лә ысҡынып ҡалды. Ә һинең эштәр нисек?

— Минең суртан да кире һыуға төшөп китте. Ләкин ул һинең балыҡтан ҙур ине.

## ЙӘЙЕН

*Сөмбөл төбөнә хужа*
*Йәйелеп ята шунда.*
*Алағайым ауыҙы,*
*Саҡ күренәләр күҙе.*

*(Халыҡ теленән)*

Беҙҙең яҡтарҙа иң ҙур балыҡ — йәйен. Ул Ағиҙелдә, Ҡариҙел, Өршәк, Танып һәм Башҡортостандың башҡа йылғаларында йәшәй. Талғын ағымлы тәрән урындарҙы ярата, соҡорҙарҙа һәм ҡумырыҡ аҫтарында ята.

Йәйен — ашамһаҡ балыҡ. Ул йылға төбөндә йәшәй, таш, үлән аҫтына йәшеренеп, түҙемлек менән балыҡ йәки ҡыҫала һағалап ята. Ул, үҙенең табыштарын алдау өсөн оҙон ике мыйығын оҫта файҙалана. Мыйыҡтарын ҡыбырҙатһа, улар селәүсендәргә оҡшай, был иһә ҡурҡыныс һиҙмәгән ваҡ балыҡтарҙы ылыҡтыра.

Йәйен тышҡы күренеше менән ялҡау, әшәүәтһеҙ һәм әкрен ҡуҙғалыусан һымаҡ. Әммә асыҡһа, ғәжәп етеҙ һәм аныҡ эш итә. Ул аҙыҡ эҙләп һыу төбөнән өҫкө һунарға сыҡҡанда, осраған бар нәмәне етеҙ һәм рәхимһеҙ юҡ итә. Һыуҙа



өйрәк йәки ҡаҙ йөҙөп йөрөгәнен күреп ҡалһа, һиҙҙермәй генә аҫтан йөҙөп килә лә тиҙ генә эләктереп, тәрәнгә алып төшә, тотош килеш йота.

Башҡортостан йылғаларында оҙонлоғо ике метрҙан ашыу һәм ауырлығы 100 килограмм самаһы йәйендәр һирәкләп булһа ла осрай. Ә илебеҙҙең ҙур йылғаларында, Волгала һәм Днепрҙа, ҡайһы бер йәйендәрҙең оҙонлоғо 3—4 метр һәм ауырлығы 300 килограмға етә. Ауырлығы буйынса — был үҙе бер һыйыр тигән һүҙ. Бындай йәйендәрҙең эттәрҙе, быҙауҙарҙы, хатта балаларҙы алып киткән осраҡтары булғылаған.

## Ҡыҙыҡ бит!

Йәйендәр ыуылдырыҡтарын селбәрәләре яралғансы һаҡлай.

Сөсө һыуҙа йәшәүсе балыҡтарҙың иң ҙурыһы — беҙҙең Европа йәйене. Йәйен балыҡтары яр буйындағы усаҡ яҡтыһына йыйылалар.

Йәйен ҡырҡ йәшкә тиклем йәшәй.

Йәйен балыҡтары ғүмерҙәренең күп өлөшөн яңғыҙ уҙғара. Йәйендәрҙе бергә сөңгөлдә яртылаш йоҡлаған хәлдә ҡышын ғына, һирәк кенә аҙыҡ айырыуса күп булған — быуа аҫтында һәм балыҡ эшкәртеү пристандары янында осратырға мөмкин.

Беҙҙең сөсө һыу балыҡтарынан кеше өсөн ҙур йәйен балыҡтары ҡурҡыныслы. Л. П. Сабанеев үҙенең «Рәсәй балыҡтары» тигән популяр китабында Иҙелдә аяғын һыуға тығып һалда ултырған бер малайҙы өс ботло йәйен һыу аҫтына алып китеүе тураһында яҙа.

Кавказда йәйен тиреһен киптереп барабанға тарттырғандар.

Тәжрибәле балыҡсылар йәйен балығын һыуға махсус бәргес менән һуҡҡылап тауыш сығарыу юлы менән алдап тоталар.

Һауа боҙолор алдынан беҙҙең йылғаларҙа йәшәй торған балыҡтарҙан йәйен, һыу өҫтөнә үк күтәрелеп, һыуҙы көслө шапылдата.

Йәйен ауға төнөн сыға. Йәйен балыҡтарының аҙ ғына яҡтыны ла һиҙә торған махсус нерв бәйләмдәре бар.

Йәйен һыуға батҡан ағас артына йәшеренеп, алға табан мыйыҡтарын сығарып ҡалдыра. Балыҡтар уларҙы селәүсен тип белеп, туранан-тура йәйен ауыҙына эләгә.

Йәйен промысла балыҡтары араһында иң эреләренән береһе ул. Был йыртҡыстың күҙҙәре бәләкәй генә, кәүҙәһе оҙон, шыма, ҙурлығы 4 метр булғанда, ауырлығы 3 центнер тарта. Ите тәмле һәм туҡлыҡлы. Беҙҙең илдә йылына уртаса алғанда 10—12 мең тонна йәйен тотола.

Был балыҡ бик көслө, тештәре үткер, башы ла, ауыҙы ла ҙур, мыйыҡтары оҙон. Ҡиммәтле бикре һәм һөмбаш һымаҡ балыҡтар йәшәгән йылғаларҙа улар өсөн зарарлы йыртҡыс балыҡ. Ошо балыҡтарҙың кеселәрен генә ашамай ул. Бүтән балыҡтарҙы ла ҡаҡшата. Таш йәки берәй кәрәгә ышығына йәшеренеп, һыу төбөндә ята ла, үҙенең селәүсенгә оҡшаған мыйыҡтарын ҡыймылдатып, балыҡтарҙы алдаштыра башлай. Тегеләр уға яҡын уҡ килеү менән, йәйен уларҙы «һә» тигәнсе йотоп та ебәрә! Эре йәйендәрҙең һыу ингән кешеләргә һәм йорт хайуандарына ташланған саҡтары ла булған. Йәйен күбеһенсә балыҡ, ҡыҫала, тәлмәрйен, һәр төрлө үләкһә менән туҡлана. Һыу ҡоштары һәм ҡырағай имеҙеүсе хайуандарҙың итенән дә баш тартмай ул.

Йәйен шәп йөҙә алмай. Ҡышҡылыҡҡа ул йылға төбөндәге соҡорға инеп ята. Бындай ятыуҙарға улар унарлап, ҡайһы берҙә йөҙәрләп йыйыла.

Йәйенде аулар өсөн иң яҡшы ваҡыт йәй һәм иртә көҙ. Уны күберәк кис менән йәки төндә тоталар. Ҡармаҡтың һабы ла, ебе лә ныҡ һәм сыҙамлы булырға тейеш. Ҡармаҡ ебе, мәҫәлән, 0,4 миллиметрҙан да нәҙек булмаһын. Йәйен бит ҡармаҡҡа эләгә ҡалһа, ныҡ ҡаршылаша, еллеләре хатта балыҡсыны кәмәһение менән һөйрәтеп алып та китә!

* * *

Йәштәр араһында күптәр ял көнөн балыҡ тотоуҙа үткәрә.

Шәмбе көнөндә Хәлиҙәр һәм Зәки, ғәҙәттәгесә, Ағиҙел буйына ҡуна киттеләр. Кистән улар ҡармаҡтарын емләп һыуға ырғыттылар ҙа балыҡ сиртеүен түҙемһеҙлек менән көттөләр. Күпме ваҡыт үткәндер, ҡапыл ҡармаҡ ебе тартылып китте. Зәки шунда уҡ ҡармаҡ һабына тотондо. Ләкин ҡармаҡты тартып сығарырға уның көсө етмәне. Йәйен!

— Егеттәр, тиҙерәк килегеҙ! — тип иптәштәренә ҡысҡырҙы, үҙе ҡармаҡты һөйрәгән балыҡ артынан яр буйлап китә башланы. Балыҡ сәбәләнә, ҡармаҡтан ысҡынырға тырыша, ҡойроғо менән һыуҙы тирә-яҡҡа сәсрәтә. Зәки балыҡты һаман һайыраҡ ергә сығарырға тырыша. Иптәштәре килеп еткәс кенә Зәкиҙең йәйенен ярға һөйрәп сығарҙылар.

Балыҡсылар өйҙәренә ҡайтышлай уҡ, магазинға инеп, йәйенде үлсәп ҡаранылар. Ул бот ярым тартты.

Бына балыҡ, исмаһам!

## Йәйендәр менән алыш

Был хәл Үзбәкстанда булған. Колхозсы Мөшәрип Мадрәхимов күлгә ураҡ менән ҡамыш урырға бара. Ул билдән һыуға инеп, ура башлай. Ҡапыл кемдер уны ҡолата һуға.

Һыуҙан ҡалҡып сыҡҡас, Мөшәрип тирә-яғына ҡарай. Бер кем юҡ. Ураҡ менән эйелеүе була — тағы бәрәләр. Тик шул саҡта ғына ул үҙенә һөжүм иткән ифрат ҙур йәйенде күреп ҡала. Йәйен Мөшәриптең аяғынан эләктерә һәм күлдең эсенә табан һөйрәй башлай. Мадрәхимов йәйендең башына ураҡ менән бербер артлы ҡундыра. 20 минут алышҡандан һуң ғына, колхозсы аяғын йәйендең ауыҙынан ысҡындыра. Хәлһеҙләнгән Мөшәрип ярға сығып йығыла.

Мөшәрип Мадрәхимовты иптәштәре күл буйында иҫтән яҙған хәлдә табалар. Аңына килгәс, ул йәйен менән алышыуы хаҡында һөйләй. Тәүҙә уға ышанмайҙар. Үлгән йәйен тиҙҙән һыу өҫтөнә ҡалҡып сыға. Үлсәйҙәр — 140 килограмм тарта!

...Воронеж дәүләт заповедниге музейында дүрт ботлоҡ йәйендең һөлдәһе һаҡлана. Был экспонаттың тарихы былай.

Балыҡсы Н. Ракитин Усманка йылғаһында ҡыш көнө капрон ептәрҙән үрелгән мурҙа һала.

— Ҡарарға килһәм,— тип һөйләй Ракитин,— мурҙала ниндәйҙер ҙур нәмә күрәм. Тәүҙә ул миңә түңәрәк һымаҡ тойолдо, ныҡлабыраҡ ҡараһам, ул ҡыбырҙай һәм оҙонайа башланы. Əһә, мин әйтәм, йәйен бит был. Әйҙә, сыҡ әле бында.

Ләкин йәйен сығырға теләмәй. Балыҡсы менән йәйен араһында оҙаҡҡа һуҙылған алыш башлана.

Ракитин йәйендең ирененән тота. Йәйен иһә үҙе балыҡсының дүрт бармағын әләктереп ала. Кем кемде?

Балыҡсының һалҡын ҡанлы булыуы ғына ҡурҡыныслы алышта еңеп сығырға мөмкинлек бирә.

## ҠОРМАН

*Һыуҙа ҡорман йөҙәлер*
*Балыҡсыны һиҙәлер...*

*(Йылымсылар ауыҙынан)*

Ҡормандың кәүҙәһе бейек, ян-яҡтан ныҡ ҡыҫылған. Йәш ҡормандар (ҡараҡанат тип йөрөтөлә) көмөш кеүек ялтырап торған аҡ-һорғолт төҫтә булһа, ә ҙурыраҡтары иһә алтын сағылышындағы көрәнһыу төҫкә инә.

Йылғаларҙа ҡорман тәрән келәгәле, тобалы урындарҙы, шулай уҡ текә яр аҫтындағы эре ҡомло, балсыҡлы соҡорҙо һайлай. Уны күпер бағаналары араһында, тирмән сөмбөлдәрендә, йәйгесә көпләнгән йөк кәмәләре һәм һал аҫтында ла осратырға мөмкин.

Күлдәрҙә тәрәнерәк урындарҙы һайлай. Йәнә таҙа соҡорҙары булған тобаларҙа, ҡамыш менән ҡуға сиктәрендәге урындарҙа йыш осрай.

Һыу ташҡандан һуң, йылғаның ярына ҡайтыу мәлендә ҡорман балығына яҙғы ҡармаҡ һалыу башлана. Иң ҡулай осор — ыуылдырыҡ сәскәс тә, май аҙаҡтарынан һәм июнь баштарынан, ҡармаҡларға мөмкин. Йәй уртаһында сиртеүе самалы, август айында ҡармаҡҡа йәтеш эләгә. Көндәр салт аяҙ торһа, уның сиртеүе октябрь аҙаҡтарына саҡлы дауам итеүсән.

Йәй айында ҡорманды ҡыҙыл тиреҫ селәүсене менән ҡармаҡларға мөмкин. Күпселек осраҡта селәүсендә суҡ рәүешле ҡуйып, ем әҙерләргә була. Шулай уҡ



йылға-күлдәрҙә ҡабыҡ ҡортона, һыу сәнскәге ҡарышлауыҡтарына, себен ҡортона һәм быҡтырылған борсаҡ менән әүәләнгән икмәккә тиҙ алданып, ҡармаҡҡа ҡаба.

Тауыштан ныҡ ҡурҡа!

* * *

Ҡорман шаҡтай оҙаҡ (8—15 йыл) йәшәй. Һыуҙың температураһы 12—14 градуста ярты миллион самаһы ыуылдырыҡ сәсә.

Ҡорман балыҡ ләмле һыу төбөнән аҙыҡ эҙләй. Ләмдәге ҡарышлауыҡтарҙы һәм селәүсендәрҙе табып алыу еңелерәк булһын өсөн, ҡорман балыҡтың ирендәре гармун күреге кеүек һуҙыла ала.

Беҙҙә йәшәй торған иң һаҡ балыҡтар араһында ҡорман балыҡ та бар.

Йылымға эләккән ҡорман балығы көтөүенең үҙен нисек тотоуы айырым иғтибарға лайыҡ. Йылым эсендәге бүтән балыҡтар башта нимә эшләргә белмәй тыпырсына. Ләкин әгәр берәр балыҡ арҡандың икенсе яғына сыға алһа, уға көллө балыҡтар эйәрә. Ҡорман балыҡ кәүҙәһе киң булыу сәбәпле йыртҡыстар ауыҙына һирәк эләгә.

Ҡорман балыҡ, ҡармаҡ ебе буйлап өҫкә күтәрелеп, балыҡсыны күреү менән тиҙерәк тәрәнгә төшөп йәшеренеү яғын ҡарай.

Ҡорман балыҡ ауға төнөн сыға. Ҡорман балыҡ күҙенең селтәр ҡатламында яҡтыға һиҙгер матдәләр бар.

## МАТУР ҘА ҺУҢ!

Мин төнгө Ағиҙелде яратам. Саҡ ҡына ла ел иҫмәй. Тик Ағиҙелдә кәмәлә йөрөгән кешеләрҙең йыры аҡрын ғына ишетелә. Ағиҙелгә ҡарап торһаң, тегендәбында балыҡ ҡарпығанын күрәһең. Күктә ай йөҙә. Ҡаланың уттары Ағиҙелдә һәм йылғала йымылдаша.

Бына Дим йылғаһы. Уның буйында беҙҙең ауыл урынлашҡан. Дим дә матур. Кис, бесәндән ҡайтҡас, рәхәтләнеп һыу инәһең. Ул һиңә яңы көс бирә. Бик тә матур беҙҙең йылға-күлдәребеҙ!

## ҺАҘАН

*Һаҙан балыҡтың башын аша,*
*Йәйен балыҡтың ҡойроғон аша.*

*(Ҡарттар һүҙенән)*

Һаҙан — эре, көслө һәм һаҡ балыҡ. «Һаҙан» һүҙе ҡаҙаҡ теленән алынған («Һаҙ» — ләм, «ан» — хайуан тигәнде аңлата). Атамаһы тап килә — балыҡтарҙың был төрө һыу төбөн артыҡ күрә. Һаҙан менән карпты бер үк балыҡ тип иҫәпләргә мөмкин.

Һаҙанды аулауы ҡыйынырак, ул һаҡ эш итеүҙе, түҙемлелекте һәм тырышлыҡты талап итә. Юҡҡа ғынамы «Һаҙан ҡаптырған» тигән ҡушамат балыҡсының иң юғары оҫталығына баҫым яһай! Иртә һәм кис балыҡты ҡармаҡлау өсөн иң уңайлы ваҡыт ул. Уның сиртеүе лә һаҡ. Балыҡты бер аҙ көтөбөрәк алғас ҡына һирпеп алырға мөмкин, сөнки һаҙан ҡармаҡтағы емде оҙаҡ ваҡыт еңелсә



генә имеп-тешләргә ярата. Эләккән балыҡ, ян-яҡҡа тулап, ситкә тайпыла ла һыуҙың төпкөлөнә атлыға. Күпселек балыҡсылар һаҙанды «тиле балыҡ» тип юҡҡа ғына атамай. Ҡармаҡҡа эләккәс, ул ҡармаҡты ныҡ һелкетә, шунлыҡтан бер генә балыҡсы ла һаҙанды кәжнәһенә һалып ҡуймайынса тороп, уны тоттом тип, әйтә алмай.

Һаҙан ашауға талымһыҙ балыҡ. Ул һәммәһен дә: ваҡ йән эйәләрен, үҫемлек ҡалдыҡтарын, борсаҡ, бешкән бәрәңгене һәм башҡа күп төрлө аҙыҡтарҙы ашай. Нәҡ ошо үҙенсәлеге өсөн һаҙанды балыҡсылыҡ хужалыҡтарында үрсетәләр ҙә инде.

Һаҙандың йәтеш кенә йәшәү урыны — текә яр аҫтындағы соҡор менән ҡамыш араһындағы асыҡлыҡ. Ҡармаҡлағанда ебе ныҡ, 0,5—0,8 мм булған һәм 7—10-лы ҡармаҡ ҡуйылған йыһаз кәрәк. Һаҙанды һағалап, ҡармаҡҡа ҡаптырғас та, үҙеңде хәс тә ысын балыҡсы итеп тояһың.

## БЫЛАР ҠЫҘЫҠЛЫ

Һауа боҙолор алдынан беҙҙең күлдәрҙә һәм йылғаларҙа йәшәй торған балыҡтарҙан һаҙан, һыу өҫтөнә үк күтәрелеп, һыуҙы көслө шапылдата.

Һаҙан балығы бөтә тәне менән тиерлек һиҙемләй. Ғәҙәттә, үҫемлек аҙыҡтар һәм моллюскылар менән туҡлана, ләкин быңдай аҙыҡ етешмәһә, балыҡтан да баш тартмай.

Һаҙан кеүек карптың да ауыҙ тештәре бөтөнләй булмай. Уның тештәре йотҡолоҡта урынлашҡан. Шундағы ҡаты мөгөҙ һымаҡ «сар» менән бергә улар аҙыҡты ваҡлайҙар һәм иҙәләр.

Һаҙан яҡтыны яратмай.

Һаҙан айырыуса оҙон ғүмерле. Элек уны 100 һәм хатта 200 йылға ҡәҙәр йәшәй тип уйлағандар. Ләкин хәҙер ихтиологтар ҡулында теүәлерәк мәғлүмәттәр бар, улар һаҙандың 40—45 йыл ғүмер итеүен күрһәтә.



Һаҙан 20—28 градуста яҡшы туҡлана, ә һыуҙың температураһы 10—12 градусҡа еткәс кенә ем ҡаба башлай.

Һаҙан 15 градус һәм унан юғарыраҡ температурала ыуылдырыҡ сәсә — бер ярым миллион самаһы.

Һыуҙың температураһы 5—6 градусҡа ҡапыл түбәнәйгәндә карп балыҡтарға һалҡын тейеүе мөмкин. Ғәҙәттә, уларҙың тиреләре зарарлана.

Тын һауала һаҙандың һыу үҫемлектәрен ауыҙын супылдатып ашауын шәйләргә мөмкин.

Беренсе йорт балығы карп булған. Һәммә нәмәне лә ашап бик тиҙ һимергәнлектән, балыҡ үрсетеүселәр уны «һыу дуңғыҙы» тип атағандар. Ул иң файҙалы һәм талымһыҙ балыҡ.

Төньяҡта үрсетеү өсөн, Амур һаҙаны менән карпты ҡушып, ҡышҡа сыҙамлы гибрид табылған.

* * *

Иҫәпләүҙәр шуны күрһәтә: бер сантиметр карп балығының үҙкиммәте сусҡа һәм һыйыр итенә ҡарағанда 2 ярым тапҡырға осһоҙораҡҡа төшә.

* * *

Шаран районы Мичурин исемендәге Йомаш бүлексәһе быуаһында карптың ауырлығы 9—12 килограмға тиклем барып етә.

*Ринат Хәйри*

## Иртә торҙоҡ

Бөгөн иртә торҙоҡ беҙ
Көн килгәндә яҡтырып,

Ултырабыҙ күл буйында
Инде балыҡ ҡаптырып.

Ултырабыҙ шым ғына,
Ҡалҡыуыстан күҙ алмай.
Әһә, сиртте бер балыҡ
Ултырғанда түҙалмай.

Ҡармаҡ сыбығы бейей,
Дөп-дөп тибә йөрәк тә:
Белер инем ни һорарға,
Алтын балыҡ эләкһә!

Минең ниҙәр һорарҙы
Әллә инде белдеме?
Дыҡ иттереп тартты ла
Өҙҙө ҡармаҡ ебемде.

Илар сиккә етешеп,
Тешләнем бармағымды:
Суртан түгел, Алтын балыҡ
Өҙҙө бит ҡармағымды!

Ҡармағымды ҡайтарһа,
Мин һис иламаҫ инем,
Шунан башҡа мин унан
Бер ни һорамаҫ инем!

## ҠЫЛЫС БАЛЫҠ

Ҡылыс балыҡ беренсе ҡарашҡа һәр кеше белгән сельд балығына оҡшаған. Был балыҡтар көтөү менән йөрөй. Улар күберәк ҙур йылғаларҙа йәшәй, ләкин һыуҙарҙан вағыраҡ инештәргә лә керәләр. Мәҫәлән, беҙ уны Әйгә ҡойған Ыҡ йылғаһында ла тотҡан бар (Мәсетле төбәге).

Ҡылыс балыҡ ҙур ғына буйға етә, ҡайһы ваҡыт уның оҙонлоғо 30—40 сантиметрлап та була. Ындай ҙурлыҡтағы балыҡтар ваҡ селбәрәләрҙе лә аулай башлай, йәғни йыртҡысҡа әйләнә.

Ҡылыс балыҡтың ауыҙы өҫкә ҡарап тора, түш ҡанаттары оҙон, үҙе яп-ялтыр, һыуҙа ҡылыс һымаҡ ялтлап күренә.

Был балыҡ һаҙандар тоҡомона ҡарай, беҙҙә был төр балыҡтар бигерәк тә Ағиҙелдә байтаҡ таралған. Ҡылыс балыҡ бик ҡурҡып барған балыҡ түгел, уны хатта Өфө һымаҡ ҙур ҡаланың күперҙәре янында ла ҡаптырып була, күбе-



рәк ҡылыс балыҡтар селәүгә эләгеүсән. Ҡармаҡта улар, һыуҙан сығарғансы, ныҡ ҡына ҡарыша.

Уның ерле һөйләштәрҙә эллә ни атамалары юҡ. Ләмәз йылғаһында — сабаҡ, һәр ерҙә тиерлек ҡылыс балыҡ.

Күргәнегеҙ барҙыр: көмөш тәңкәләрен көн яҡтыһында ялтыратып ҡарпыған сағында был балыҡ ҡылысҡа оҡшап ҡала. Арҡаһы төҙ, ә ҡорһаҡ яғы осланып барып бөткән кәкре ҡылыстың йөҙө һымаҡ. Халыҡ уға исемде лә кәүҙәһенә ҡарап биргән.

Ҡылыс балыҡты иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем осратырға мөмкин. Ул көтөү-көтөү булып эркелеп йөрөй. Ғәҙәттә ағын һыулы ҡомлоҡтарҙы, шаршыларҙы ярата, шул уҡ ваҡытта татырлы һыуҙа ла йәшәй. Апрель—май айҙарында уйнай. Вағыраҡтары ыуылдырығын иртәрәк сәсә, эреләре һуңғараҡ ҡала.

Буйы ярты метрға тиклем, ауырлығы кило ярым самаһына еткән был балыҡ ҡармаҡты ағым ыңғайына һалғанда, теләһә ниндәй емгә лә шәп ҡаба. Уны һай ерҙә лә, тәрәндән дә ҡаптыралар. Ҡортҡа ҡармаҡлағанда, ҡармаҡты ҡапыл тартып ала. Ҡылсыҡлы булыуына ҡарамаҫтан, киптерелгән йә иһә ыҫланған ҡылыс балыҡтың ите ярайһы уҡ тәмле була.

Эркеүенә тап булһаң, ҡылыс балыҡты бер-ике сәғәт эсендә бик күп ҡармаҡлап була.

## КЕҪӘЛӘГЕ БАЛЫҠ

Балыҡ һүрәте сигелгән
Күлдәгем кеҫәһенә.
— Шул балыҡты тотоп бирсе! —
Ти Илгиз әсәһенә.

Әсәһе уға:
— Ҡармағым...
Юҡ шул,— тип яуап бирә.
Илгиз дә аптырап ҡалмай
Ҡармағын алып килә.

Беҙ генә түгел, балыҡ та
Илгизгә ҡарап көлә,
Һаман күлдәк кеҫәһендә
«Йөҙөп» йөрөүен белә.

Һыуҙа йөҙә алмай бит ул
Ысын балыҡ шикелле.
Тимәк, уның ҡармаҡҡа ла
Эләгеүе икеле!

## КҮЛГӘ «ФОРТОЧКА» УЙҘЫҠ

Ҡулымда — үткер бәке,
Тишмәксе булам мәке.
Атай әйтә:
— Лом ал,— ти.—
Йәһәтерәк
Ҡуҙғал,— ти.
Атай менән икәүләп,
Күлдә беҙ мәке уйҙыҡ:
Балыҡтар тын алһын тип,
«Форточка» эшләп ҡуйҙыҡ!

***Р. Хәйри***

## АҒАРСАҠ

Күпселек осраҡта шәп ағымлы йылғаларҙа тереклек итә. Таш аҫтында хасил булған ағымдарҙа, ярҙағы суҡаҡтан китеп барған ағымда ул ваҡ балыҡ, сабаҡ, ташбаш аулап йөрөй.

Ағарсаҡ оҙонса балыҡ, ауыҙы ҙур, әммә йыртҡыстарға хас булған ҡаҙыҡ тештәре юҡ. Һаҙан балыҡтарыныҡы кеүек йотҡолоҡ тештәре генә бар, аҫҡы яңағы ҡалҡып сығып тора, ә үҙенең суҡағы менән өҫкө яңағы күҙлегенә терәлгән. Томшоғона яҡын торған асыҡ төҫлө күҙҙәре сағыштырмаса бик үк ҙур түгел. Ян-яҡтары көмөштәй аҡ, ҡараһыу осло арҡаһы менән ҡойроҡ йөҙгөстәре буҙ, ҡалған өлөштәре бер аҙ ҡыҙғылт төҫтә. Арҡаһы күгелйем, ҡорһағы көмөш төҫлө була. Буйы 80 см. Иң эреһе 12 кг-ға етә. Ағарсаҡ һыуҙың өҫкө ҡатламдарында йөрөй, төнгөлөккә генә ул төпкөл урынға китә.

Ыуылдырыҡ сәскән мәле апрель—май айҙарына тура килә. Көн тотош яҡтырғас ауға сыға. Ағарсаҡ үтә һиҙгер балыҡ. Уны кәтүкле ҡармаҡ менән ҡармаҡлағанда, йылтырғыны етеҙ генә һыу өҫтөнә яҡын йөрөтөргә лә иң алыҫҡа, ағарсаҡ «сирткән» тәңгәлгә һалырға кәрәк. Һыу өҫтөнә яҡын йөҙгән балыҡ балыҡсыны алыҫтан уҡ шәйләгәнлектән, ағарсаҡты ышыҡланып тороп ҡына ҡармаҡларға була.

Ҡояшлы, һыу өҫтө бер аҙ быжырланып торған көн — балыҡ ҡармаҡлау өсөн иң уңайлы мәл. Был иһә ағарсаҡҡа ҡорбандарын күреүгә ҡамасаулай.

* * *

Йылға ағымында йәшәй торған ағарсаҡтың кәүҙәһе оҙон орсоҡ һымаҡ була. Был уға көслө ағымлы һыуҙа йәшәргә, буҫағалы һәм һай урындарҙы кисергә, оҙаҡ йөҙөргә мөмкинлек бирә.

Ағарсаҡ һыу өҫтөнән үк аҡрын ғына йөҙөп бара, ҡайһы саҡта һырт йөҙгөстәре лә һыуҙан күренеп тора. Бына ул күкйөндәр өйөрөн күреп ала ла ҡапыл ыр-



ғыла — көтөүҙә бер балыҡ кәмей. Ағарсаҡ йыш ҡына һыуҙы сапылдатып өҫкә һикереп сыға. Балыҡ тотоусылар, ағарсаҡ бәрҙе, тиҙәр.

Ағарсаҡ ҡорбанын ҡыуып барған саҡта һыу өҫтөнә сығып, һыуҙы шаҡтай көслө «шапылдатып» ала.

Йәй уртаһында ағарсаҡ бик һәйбәт ҡаба.

## ЭЛӘКТЕ...

Ҡармаҡ һалдым да
Ултырам тып-тын,
Ярға бәрелә
Ваҡ ҡына тулҡын.
Ҡапыл ҡалҡыуыс
Ҡалтырап китә,
Ҡармаҡты балыҡ
Һөйрәй бит төпкә.

Эләкте буғай,
Мин әйтәм, суртан,
Епте өҙөр, тип
Үҙем бик ҡурҡам.
Тартып сығарам
Һыуҙан ҡармаҡты,
Тик күреп ҡалам
Ялтыр сабаҡты!

***Файыҡ Мөхәмәтйәнов***

## ҺЫЛА

Таҙа һыулы иркен аҡҡан йылға-күлдәрҙә йәшәй. Һыла — Европа, Азияла шаҡтай киң таралған балыҡтарҙың бер төрө. Ул оҙонса балыҡ, яңаҡтары менән аңҡау һөйәктәрендә аҙау тештәре бар. Ике яҡ сикәһе яланғас, әммә өҫкө өлөштәре генә тәңкәләр менән ҡапланған. Арҡа йөҙгөсө ҡаты, осло, сәнскеле, ә арҡа менән ҡойроҡ йөҙгөстәрендә сәнскеләр араһындағы яры пәрҙәләргә ҡараһыу төҫтәге ваҡ ҡына тимгел таптар төшкән. Арҡаһы һоро йәшел, ә ҡабырғаларында буй-буй һыҙаттар бар. Һыланың иң эреләре 130 см, ә ауырлығы 12 кг тәшкил итә. Ыуылдырығын июнь—июль айҙарында сәсә. Бер метр самаһы тәрәнлектә үҫкән ҡыуаҡлыҡтарҙы һыу баҫҡан урын — ыуылдырыҡ сәсеү майҙаны.

Ваҡ һыла балыҡтары ҡабырсаҡлы йән эйәләре, ҡыҫалалар һәм селәүсендәр менән туҡлана. Ҙур балыҡ булып етлеккән һыла йәш балыҡтарҙы ашай.

Һылаларҙы маймыс балыҡтар менән йылтырмаға албырғатырға була. Йыртҡыс һыланың ауыҙы ҡаты, ныҡ эләктереп ала. Сирткән ваҡытында ҡармаҡты көс һалып тартып алаһың.

Һыла таң алдынан һәм ҡояш байығанға ҡәҙәр (әгәр көн яҡты булһа) яҡшы сиртә. Йонсоу көндәрҙә лә ҡабыусан. Ошо мәлдә уның сиртеүе лә оҙайлы. Ҡармаҡҡа эләккән был кәрһеҙ балыҡ селтәрле көжнәлә тиҙ тонсоғоусан. Уны бер-ике тәүлек буйына махсус рәүештә һаҡлап була: аҫҡы яңағын тишәһең дә нәҙек кенә сым үткәреп бәйләп ҡуяһың, ошо уҡ бау менән һыланы ағым урында һыу төбөнә ҡаҙап ҡуйылған ҡаҙыҡҡа бәйләп тоталар.

* * *

Һыланың ҡылығында ла балыҡтарға бик үк хас булмаған сифат барлығы беленде. Күпселек балыҡ, ыуылдырыҡ сәскәс, үҙ тоҡомо тураһында башҡаса ҡайғыртмай. Ә бына һыла ныҡ хәстәрлекле атай булып сыҡты. Ул үҙ ыуылдырығын һаҡлап тора, уның менән һыйланырға теләүселәрҙе ҡыуып ебәрә. Кем дә кем булһа ыуылдырыҡҡа яҡын килһә, һыла шунда уҡ үҙенең үткер тештәре



менән саҡырылмаған ҡунағын тешләй ала. Һыланы ояһы янынан ҡыуып ебәрһәң, ул шунда уҡ кире әйләнеп килә, ыуылдырыҡҡа ләм һәм бысраҡ теймәһен тип тә тырыша. Бының өсөн ул йөҙгөстәре менән көслө хәрәкәттәр яһап, ыуылдырыҡ тирәһендә һыу ағымы булдыра ла, шул юл менән уны таҙарта.

## ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

Һыла һыуҙың кислородҡа бай булыуына айырыуса мохтаж.

Һыла ауға төндә сыға. Һыла күҙенең селтәр ҡатлауында яҡтыға һиҙгер матдәләре бар.

...1965 йылда Ҡомаста (Дим буйындағы күл) һигеҙ килограмлыҡ һыла балығын тоттолар.

Аҡкүлдә һыла ҡаптырыу өсөн шырт балыҡ иң яҡшы ем һанала.

Йәш һыла түбән төҙөлөшлө ҡыҫала һымаҡтар менән туҡлана, шуға күрә уның айғолаҡтарында ла тешсәләре бар. Әммә үҫеп етеп балыҡтар менән туҡлана башлағас, айғолаҡ тешсәләре урынына балыҡты эләктереп алырға ярҙам итә торған сәнскеләре үҫеп сыға.

## ШУЛАЙ ҘА БУЛА!

Сентябрь башындараҡ Йүрүҙән йылғаһында булды был хәл. Салауат төбәге үҙәгенән бер саҡрым самаһы түбәнерәк Ярғарағай тип йөрөтөлгән урын бар. Бейек кенә тау, ул тик ҡарағай урманы менән ҡапланған. Шуға ла уны Ярғарағай тип атағандар ҙа. Уның нәҡ аҫтынан һылыу Йүрүҙән аға. Йылғаның тау яғы тәрән, ҡамышлы, ә ҡаршы яғы һайыға бара. Бер көндө кискә табан мин ошо урынға дүрт ҡармаҡ ҡуйҙым. Уларҙа — тере ташбаш. Алдан уҡ әйтәм: шәп тотҡайным. Ҡармаҡтарҙы бер-береһенән 2—2,5 метр аралыҡ менән йылға-

ның тәрән ере башланыр тирәгә ултырттым. Көндөҙ һыла тәрәндәрәк йөрөй, ә кис менән һунарға һайға сыға. Был хаҡта үҙен аҙ-маҙ ғына булһа ла «балыҡсы» тип атаған кеше беләә. Кис һайға сыҡҡан һәр бер һыла минең ҡармаҡтарҙағы тере ташбаштарҙы күрмәй үтмәһен тип, һыу төбөнөң таҙараҡ урындарын һайланым.

Икенсе көндө иртүк ҡармаҡтарҙы ҡарарға килдем. Йәшермәйем, һәр ҡармаҡҡа берәр һыла эләкһә, тимәк, дүрт һыла, һәр береһе кәмендә берәр килограмлыҡ ҡына булһа ла, дүрт кило балыҡ, бик һәйбәт һурпа була бит был, тип уйлап, бик ҡанатланып барҙым.

Бына беренсе ҡармаҡ ... буш. Хатта ташбашы ла юҡ. Икенсе ҡармаҡҡа киләмен. Унынһында үҙем ҡаптырған ташбаш ҡына ята. Хуш, мин әйтәм, һурпа шыйыҡыраҡ булырға оҡшай. Өсөнсө ҡармаҡҡа килһәм, йөрәгем терт итеп китте — ярты метрҙай ҙурлыҡта һыла ята. Әле тере. Арҡанлап ҡуйылған шикелле, тулай. Айғолаҡтарынан һаҡлыҡ менән генә тоттом да күтәреп алдым. Ҡараһам, ни күҙем менән күрәйем, бер ҡармаҡта... ике балыҡ. Һыланың ауыҙынан ҙур ғына алабуға яртылаш сығып тора. Ярға сығып, ентекләп ҡараһам, эштең ниҙә булыуын аңланым. Ҡармаҡтағы ташбашты алабуға йотҡан. Ә алабуғаны аҙаҡ килеп һыла ҡапҡан. Баш яғынан ҡапҡан да кире сығара алмаған. Алабуғаның һыртындағы сәнскеләре уның ауыҙына ҡаҙалған. Дүртенсе ҡармаҡты ҡарап, унан да бер һыла алдым. Ошолай итеп, һурпам бер ҙә шыйыҡ булманы.

## АҠКҮҘ

Аҡкүҙ йыш осрай, ләкин күп урындарҙа был балыҡ төрө үрсеп бармай. Рустар был балыҡҡа сапа йә сопа тип әйтәләр. Был балыҡ йәш ҡорманға (ҡараҕанатҡа) бик оҡшаған. Урал артында ул юҡ.

Уның күп балыҡтарҙан айырмаһы шул: ҡабарынҡы күҙҙәре ифрат ҙур, мороно тупаҡ, ҡорһағындағы һәм арҡаһындағы ҡанаттары оҙон, тәңкәләре эре, ҡыҙғылт-көрән арҡаһы зәңгәр булып йымылдай. Был ҡормандар тоҡомона ҡараған балыҡтың тағы ла сағыр күҙ һәм таран тигән исеме лә бар.

Аҡкүҙ Азов диңгеҙендә, Каспий менән Аралда ла бар, көтөүе-көтөүе менән йылғаларға үрләй. Ул промысла әһәмиәтендәге балыҡ. Йылғаларҙың шәп аҡҡан тәрән урындарын ярата, бәләкәй йылғаларҙа һәм күлдәрҙә осрамай. Был балыҡ ыуылдырығын да йылғалар шәп аҡҡан тәрән урындарҙа апрель айы аҙаҡтарында сәсә башлай. Бөжәктәр, селәүсендәр, ҡуш ҡапҡаслы ҡабырсыҡтар менән туйына.

Аҡкүҙ Ағиҙел менән Ҡариҙелдә күп һанлы, әммә ләкин йылға баштарында һирәгәйә.

Яйыҡта Ырымбурҙан саҡ ҡына өҫкәрәк үрләй. Был балыҡтың төҫө күкшел көмөшһыу, үҙе аҡ күҙле, был билдәгә ҡарап уны беҙҙә сәгергүҙ тип тә атайҙар.

Уртаса оҙонлоғо 15—20 сантиметр самаһында, һирәк саҡта ул 30 сантиметрға һәм ауырлығы менән 0,8 килограмға тиклем етә.

Аҡкүҙ төптә йәшәүсе, эркеү менән йөрөүсе балыҡ, уны башлыса йылғаларҙың түбәнерәк ағымында осратып була. Уның аҙығы тулыһынса төптә йәшәүсе йән эйәләренән, айырата әкәм-төкәмдәрҙән тора. Был балыҡ күберәк ярҙарға һырығыусан, ыуылдырығын апрелдә — майҙа сәсә. Хужалыҡ һәм спорт яғынан артыҡ ҡиммәтле түгел.



Сәгергүҙҙе һыу төбө ҡармағы менән селәүсенгә ҡаптыралар, июнь айында ыуылдырығын сәсеп бөткәс, йөҙҙөрөп һалынған ҡармаҡ менән ҡыҙыл ҡортҡа ла ҡармаҡлайҙар.

Башҡортостандың йылға-күлдәрендә аҡкүҙ сабаҡҡа, таран сабаҡҡа, ҡорманға, оптоға ҡарағанда һирәгерәк осрай, ә бына инде уға оҡшаған күк балыҡ (күкәнәш) менән сағыштырғанда, уны йышыраҡ тап итергә мөмкин.

## МАЙМА

Был балыҡ бик ваҡ, әммә матур, орсоҡҡа оҡшаған кәүҙәһенең беленербеленмәҫ тәңкәһе аллы-гөллө йылҡылдай. Бәләкәс кенә ауыҙы аҫҡа ҡарап тора. Бына ошо сифаттары менән ул башҡа бөтә һаҙандар тоҡомонан айырыла.

Майманы Бөрйән яҡтарында селтей тип тә йөрөтәләр. Уралдың башҡа төбәктәрендә сибәр майма тигән атамаһы билдәле.

Башҡортостан һыуҙарында майма сағыштырмаса киң таралған. Ғәҙәттә ул күлдәрҙең, вағыраҡ йылғаларҙың ташлы һәм ҡомло ярҙарына һырығып, көтөүкөтөү булып эркелеп йөрөй.

Был балыҡтың күл маймаһы тигән төрөн күлдәрҙә, быуаларҙа, хатта карьерҙарҙа ла осратып була. Был ҡыйыу, ҡомһоҙ, бәйләнсек һимеҙ балыҡ көнө буйы теләһә ниндәй емгә лә сиртә. Шуның менән ул табан балығын ҡаптырғанда ифрат ҡамасаулай.

Йылға маймаһы һалҡын һәм таҙа һыу ярата, йәй көндәрендә һыуҙың өҫтөндәрәк булырға тырыша, селәүсендәр, себендәр, ҡорт-фәлән менән туҡлана.

Ваҡ булғанға күрә майманы һәүәҫкәр балыҡсылар һирәк ҡаптыра. Унда ла алабуғаны, һыланы, ағарсаҡты, ажауҙы һәм айырыуса шамбы тотҡанда ем итеп кенә файҙаланалар. Элек майманы ваҡ мурҙалар менән күпләп тотор булғандар. Ваҡ булһа ла ите тәмле был балыҡтың.

Сөсө һыуҙа йәшәгән һаҙан балыҡтары араһынан майма балыҡтың таралыш сиктәре иң киңе. Ул бөтә Европа һәм бар төньяҡ Азия буйлап һуҙылған. Ләкин шуныһы бар — майма балыҡтарҙың 8 төрөнән 7 төрө Алыҫ көнсығыш менән Себер һыуҙарында ғына йәшәй.

Иң сағыу төҫкә ата балыҡтар инә, улар муйын аҫтындағы ҡыҙғылт тап менән айырылып тора. С. Т. Аксаков маймаларҙы тик Ырымбур губернаһында ғына күргәнем бар тип яҙҙы, улар унда бик ишле була торғайны, ти. Әммә ләкин, халыҡ һаны артыу менән, ундағы хозур шишмәләрҙең һәм бәләкәй йылғаларҙың сафлығы китә барыу менән маймалар байтаҡҡа аҙайҙылар, ти ул. Әле лә ҡайһы бер тау һыуҙарында майма иң күп һанлы балыҡ, әйтәйек, Шүлгән йылғаһында шулай, ул Усолка, Еҙем һыуында ла ишле.

Силәбе өлкәһенең күп кенә күлдәрендә майма бар, был да ваҡ ҡына балыҡ, ҡарабалыҡҡа ныҡ оҡшаған, ләкин, ҡомай һымаҡ, ул 3—4 сиректән артыҡ үҫмәй. Пермь өлкәһенең төньяғында бер ҙур булмаған күл бар, унда тик маймалар йәшәй, шуға уны Майма балыҡ күле тип йөрөтәләр икән, Силәбе менән Свердловск өлкәләре сигендә Бағараҡ тигән күлдә лә тик күл маймаһы күп.

Тап Уралдың бәләкәй йылғаларында майма үҙенең иң ҙур буйына етә — 12,5 см тиклем. Йылғалағы ла, күлдәге лә майманың эсе ҙур ғына була — шуға уны Егән буйында, мәҫәлән, быуаҙ майма тиҙәр.

* * *

Бармаҡ саҡлы балыҡ —
Донъя ҡәҙәр шатлыҡ!
Сөнки был ысын балыҡ,
Алтын балыҡ ҡына түгел,—
Тере балыҡ!

Ана ята йәшел сирәмдә,
Күҙҙең яуын алып.
Ышанмаһаң,—
Ҡара алып!

***Р. Фәйзуллин***





### ЭТ БАЛЫҒЫ

Унының кәүҙәһе ян-яҡтан ҡыҫылған оҙонса рәүешендә. Ҡойроҡ йөҙгөсө дуға формаһында. Тәңкәләре ваҡ. Арҡаһы һары-көрән, ян-яҡтары буйлап киң ҡараһыу төҫтәге нәҙек кенә ҡара буй һыҙылып үткән. Бөтә тәне ваҡ ҡына ҡара тимгел менән ҡапланған. Ауыҙының ике ситендә мыйыҡса тырпайып тора. Оҙонлоғо 25—30 см. Ыуылдырығын май айҙарында сәсә. Итен ашамайҙар.

Эт балыҡ илебеҙҙең Европа өлөшөндә йыш осрай, һаҙлы йылғаларҙа, инештәр төбөндә, шулай уҡ быуаларҙа йәшәй. Ҡабырсыҡлы ваҡ йомшаҡ тереклектәр, ҡорт ҡарышлауыҡтары, селәүсендәр, бүтән балыҡ ыуылдырыҡтары һәм ҡыҙыл ҡорт менән туҡлана. Ул табан балыҡтарын ҡалҡыуыслы ҡармаҡ менән ҡаптырғанда килеп эләгеүсән.

Эт балыҡ йәйен менән суртан аулағанда иң яҡшы ем булып хеҙмәт итә. Эт балыҡты ҡармаҡ һалмайынса ла аулап була. Быны өсөн үлән-ләмде күберәк йолҡоп сығарһаң — эт балыҡ ҡапты тигән һүҙ. Ылымыҡтар саҡ ҡына кибеп өлгөрҙөмө, эт балыҡтар етеҙ рәүештә бәләнән ҡотолоу яғын ҡарай һәм һыу ятҡылығына ысҡынырға самалай — ошо мәлдән файҙаланып уларҙы тиҙ генә сүпләп тә була.

### ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

Эт балығы (вьюн) — һаҙлыҡлы һыуҙарҙа йәшәй торған бәләкәй генә балыҡ. Ул айғолаҡтары менән дә, тән тиреһе аша ла һәм эсәктәре ярҙамында ла тын ала, һаҙлыҡ кибеү менән, ул йоҡоға тала, ә йоҡо кислородҡа булған талапты тағы ла кәметә. Бик ҡоро саҡтарҙа эт балығы ләмгә күмелә. Ләм өҫтөндә йыш ҡына ҡаты ҡабыҡ яһала, хатта унын өҫтөнән арба менән уҙырға ла мөмкин. Ә эт балығы быны һиҙмәй ҙә. Ямғырҙан һуң ул яңынан һыуға сыға.



## ЕҘМЫЙЫҠ

Беҙҙә башҡорттар ашамай торған йәнә бер балыҡ бар. Ул — еҙмыйыҡ. Йыш ҡына уны эт балығы тип тә йөрөтәләр.

Еҙмыйыҡтың тәңкәләре бик ваҡ, шунлыҡтан тәне шаҡтай шыма, хатта яланғас һымаҡ күренә. Ә төҫө йәшәгән урынына ҡарап үҙгәреүсән. Һыу төбө ҡомло йәки ташлы булһа, ул да һарғылтлана. Быуаларҙа — тоноғораҡ төҫлө. Йәш балыҡтар өлкәндәренә ҡарағанда сыбарыраҡ була.

Еҙмыйыҡ бик үҙенсәлекле тормош кисерә: йә таштар, һыуға батҡан сатаҡ-ботаҡ ағастар аҫтында йәшәй, бик булмаһа ләмгә, ҡомға күмелеп ята, яр аҫтына һыйына, ярыҡҡа йәшеренә. Күлдәрҙә эркелеп йөрөһә лә йылға һыуҙарында еҙ балыҡтың бергә тупланғанын бик һирәк осратырға мөмкин.

Еҙмыйыҡ селәүсен, бөжәктәр менән туҡлана, башҡа балыҡтарҙың ыуылдырығын ашай торған ғәҙәте лә бар. Быны менән ул балыҡсылыҡ хужалығына байтаҡ зыян килтерә. Еҙмыйыҡты тиреҫ селәүсененә, ҡыҙыл ҡортҡа, ҡамырға ҡаптырып була. Оҫта балыҡсылар уны һурпаһы өсөн тота — бик тәмле була, тиҙәр. Күптәр шамбы кеүек йыртҡыс балыҡтарға алдатҡыс ем өсөн аулай.

Еҙ балыҡты аквариумда ла аҫрап була. Тик һыуы йылы булмаҫҡа, йыш алмаштырылырға тейеш.

Еҙмыйыҡ шамбы тоҡомонан булған оҙон мыйыҡлы балыҡ, шамбы һымаҡ таш аҫтында йәшәй, йыуаш була, тәне лайлалы. Был ваҡ балыҡ, ғәҙәттә, ҡараҡ төҫтә булыусан, үҙе йылғыр хәрәкәтле теремеклеге менән айырылып тора, йылғаның һай урындарын кисеп йөрөгәндә уларҙы ташбаш-фәләндәр менән йыш ҡына күрәһең — еҙмыйыҡ таш аҫтынан икенсе урынға ҡасыу юлын ҡарай.

Еҙмыйыҡ бик киң таралған балыҡ төрө: бөтә Европа буйлап тиерлек таралған һәм Азияның ярайһы уҡ ҙур өлөшөндә осрай. Беҙҙә был балыҡты төрлөсә атайҙар — Димдә уның багра, күбәләк ырыуы башҡорттарында — бағыр, Нө-

гөштә — һарысай, көнсығыштың ҡайһы бер урындарында шүкә, тағы — йоморҡаш, лаҡы, эт балыҡ тигән атамалары бар.

Буйға еҙмыйыҡ 12 сантиметрға етә, ҡомайға оҡшаған, ләкин уның бер нисә мыйыҡсаһы бар, тәне асыҡ төҫтәрәк була.

Был балыҡ төрө киң таралған — ул хатта Башҡортостандағы ҡайһы бер һалҡын һыулы тау шишмәләрендә осрай, мәҫәлән, Оло Эйеккә ҡойған Урман йылғаһында бар. Әммә ләкин былдай һыуҙарҙан күберәк еҙмыйыҡ бәләкәй дала йылғаларында, быуаларҙа (мәҫәлән, Әлшәй районы Ташлы ауылының ҙур быуаһында), иҫке йылғалар менән күлдәрҙә һ. б. үрсей.

Күпселектә еҙмыйыҡ шаҡшы балыҡ булып иҫәпләнә. Был балыҡтарҙы хаҡлы рәүештә ҡоротҡостар тип тә атайҙар, сөнки улар ҡиммәтле балыҡтарҙың ыуылдырыҡтарын ҡыра.

## Һыу буйында

Сеү! Һыу сайпылып ҡуйҙы түгелме? Әйләнә-тирәмә күҙ йүгертәм. Әһә, сабаҡтар уйнай икән! Ҡапыл ғына күҙгә күренәләр ҙә һыу аҫтына ҡояш нурҙарын алып төшөп китәләр. Алығыҙ, әйҙә, сабаҡтар, ер өҫтөндә нурҙар етерлек. Кешеләргә лә, үҫемлектәргә лә, хайуандарға ла, балыҡтарға ла етерлек ул беҙҙең ер өҫтөндәге нурҙар.

## Сағалаҡ

Сағалаҡ — эт балыҡтарҙың иң вағы — ҙурлығы 9—10 сантиметр ғына була. Ул киң таралған балыҡ — бөтә Европала тиерлек бар. Себерҙә Поляр түңәрәгенә тиерлек. Обь, Йәнәсәй, Лена йылғаларына тиклем таралған балыҡ был. Илебеҙҙең Европа өлөшөндә, Төньяҡ боҙло океан бассейнынан башҡа, һәр



урында ла осрай, Амурҙа, Сахалинда ла бар. Уның ян-яҡтарында эре сағыу ҡарараҡ таптар төшкән.

Сағалаҡ исеме уға кәмһетеп бирелгән исем. Шуға балыҡ итеп тә иҫәпләнмәй ул.

Ҡышын күлдәрҙә балыҡ тонсоға (үләтләй) башлағанда, сағалаҡ күпләп мәкеләргә ҡалҡып йөҙөп сыға һәм балыҡсылар уны ашарға ярамаған балыҡ булараҡ ҡарға быраҡтыра (ташлай).

Был ташбашҡа оҡшашлы балыҡтың атамалары байтаҡ — Еҙемдә, Ләмәздә эталабуға, әмөкө, Ҡыҙыл буйҙарында этыжык, Эйек — Һаҡмарҙа — эт балығы, балыҡсы ырыуы башҡорттары этлек тип атай, Миәс йылғаһында әлем, мәйкәм тиҙәр, ғәйнә башҡорттары бәймәт тип йөрөтә, Димдә — сарағай.

Сағалаҡтың кәүҙәһе йоморо, башы бәләкәй, ян-яҡтарынан һығылған, ул 6 мыйыҡлы, икеһе ауыҙының мөйөштәрендә, икеһе эйәгендә һәм тағы икәү өҫкө иренендә тора. Ә инде күҙҙәре эргәһендә оло ғына сәнескестәр бар, улар менән ул, ярайһы уҡ ауырттырып, сәнсеп ала.

## ЯЛТЫР САБАҠ

Ялтыр сабаҡ — бәләкәй генә бер балыҡ ул: ҙурлығы 7 сантиметрҙан ашыуыраҡ, ә ауырлығы бер нисә грамм ғына тарта. Табан балыҡ ҡайҙа йәшәй ала, ул да шундай йылға-күлдәрҙә, быуаларҙа, һыу ятҡан ҙур соҡорҙарҙа осрай. Оло йылға-күлдәрҙә был кәрлә балыҡ, ҡайһы берҙә ҙур-ҙур эркеү булып, башын берсә һыуҙан күрһәтеп, берсә ҡабырғаһын ҡояшҡа ялтыратып, бер туҡтауһыҙ арлы-бирле йөҙөп йөрөй. Өҫкә ҡарап торған ауыҙы менән ул күбеһенсә һыуға төшкән төрлө бөжәкте ашай, шулай уҡ нимә тура килһә, шуны ла эләктереп ала, йыш ҡына планктон менән дә туҡлана. Тағы ла шуныһы, ялтыр сабаҡ табан балыҡтың ыуылдырығын ашарға ярата, шуға күрә ул быуалар өсөн үтә зарарлы.

Был бәләкәс апрель—июндә ыуылдырыҡ сәсә, таҫма-таҫма булып һуҙылған ыуылдырыҡ ылымыҡтарға йәбешеп ятып ҡала. Селбәрәләр яралғас инде, уларҙы ата балыҡ тәрбиәләй.

Ялтыр сабаҡ ҡармаҡҡа шәп ҡапмай һәм уны ашар өсөн тотмайҙар ҙа. Эре алабуғаны ҡаптырам тиһәң, иң йәтеш ем — ялтыр сабаҡ.

Ялтыр сабаҡ балыҡсылар араһында күкйөн менән буталып йөрөтөлә, уға ул ысынлап та оҡшаған. Ул Урал һыртынан ары күсеп китмәй. Кама йылғаһы тармаҡтарында балыҡсыларға ул мәғлүм түгел тиерлек һәм уның ерле атамаһы юҡ. Әммә ҡайһы бер һәүәҫкәр балыҡсылар һүҙенә ҡарағанда, ялтыр сабаҡ Ҡариҙел менән Ағиҙелдә шаҡтай ҡәҙимге һәм билдәле балыҡ ул.

Кәүҙәһе оҙонса, нәҙек кенә, ян-яҡтарҙан шаҡтай ҡыҫылған һымаҡ. Ауыҙы бер аҙ өҫкә ҡарап тора, бәләкәй. Бауыры ҡорһаҡ ҡанатынан алып артҡы юлына тиклем ослайған. Ҡабырға һыҙаты тулы түгел. Өҫкө яғы ҡуңыр йәшелдән алып көрән төҫкә тиклем үҙгәреүсән, ян-яҡтары менән бауыры, күҙҙең яуын алып торған көмөш һымаҡ төҫтә. Кәүҙәһенең артҡы өлөшөндәрәк буйға киткән бер тимер күк төҫтәге һыҙыҡ башлана, ул ҡойроҡ үҫкән тапҡырҙан шаҡтай киңәйеп бөтә. Ҡанаттары төҫһөҙ, күренмәле йәки еңелсә һарғылт төҫтә.

Ата балыҡтарҙы эстәре нығыраҡ бөлтәйеп тороуынан еңел танып була.



Ялтыр сабаҡ үҙенең эркеү-эркеү йөрөүе менән билдәле, ул бәләкәйерәк тымыҡ йә булмаһа яй ғына ағып ятҡан һыуҙарҙа йәшәй. Уның аҙығы һыуҙағы ваҡ йән эйәләренән, үле үҫемлектәр өлөштәре һәм ылымыҡтарҙан тора. Түңәрәк-түңәрәк таҫма ыуылдырығын ул үҫемлектәргә, мәҫәлән, ҡамышҡа элә һәм ата ялтыр сабаҡ уларҙы һаҡлай.

### ЙӘЛӘЙ САБАҠТЫ ЙӘЛЛӘЙ

Тулҡын өҫтөнә ташланды,
Елдәй елеп, аҡсарлаҡ.
Унан өҫкә күтәрелде —
Эләктереп аҡ сабаҡ.

Ҡоштоң батырлығын күреп,
Һоҡланып ҡуйҙы Йәләй,
Ләкин үҙе тыпырсынған
Сабаҡты бик тә йәлләй!

***Файыҡ Мөхәмәтйәнов***

### Балыҡ донъяһында... кем хаким?

Ысын балыҡсы бер ваҡытта ла бойоҡмай. Хатта балыҡ ҡапмағанда ла.

Өфө районы Алексеевка ауылы эргәһендәге Ломоносов күлендә ултырабыҙ. Былай ҙа бик «тиҫкәре» күл ул. Бигерәк тә ҡыш көнө балыҡ ялындырып ҡына сиртә. Күрәһең, был күлдә уға аҙыҡ мул. Өҫтәүенә, бөгөн һауа баҫымы ла юғары — 760.

Балыҡ ҡапҡан көн күл өҫтө тып-тын тигәндәй була. Һәр кем мөкиббән китеп, алабуға, сабаҡ эләктереү менән мәшғүл. Һөйләшергә форсат теймәй. Бөгөн иһә өйкөм-өйкөм йыйылып, гәп һаталар. Ниндәй генә мәҙәк, ниндәй генә көләмәс ишетмәйһең ундай саҡтарҙа.

— Бындай көндә ни өсөн ошондай «матросиктар» ғына эләгә? — тип һорай Алексей, эргәһендә ятҡан ике-өс алабуғаға күрһәтеп. (Алабуғаның арҡыры һыҙаттарын матростар күлдәгенә оҡшатып шулай әйтәләр).

— Әлләсе,— тим. Үҙем белеп торам: тиккә генә һорамай ул, хәҙер әллә ниндәй фәлсәфәгә төшөп китәсәк, шул «матросиктар»ға ялғап. Тап шулай булды ла.

— Балыҡ таҙартҡанда иғтибар итәһеңдер, моғайын: йонсоу көндә тотҡан балыҡ араһында ыуылдырыҡлыһы осрамай, гел ата балыҡ, етмәһә, ваҡ була,— тип дауам итә дуҫым, фекерен артабан үҫтереп.

— Раҫ һөйләйһең,— тип йөпләйем тегене.— Ысынлап та, шулай.

— Яҡшы көндә алабуғаның гел эреһе һәм ыуылдырыҡлыһы эләккәнен дә байҡағанһыңдыр? — тип ҡуйыртыуын белә был.

— Хаҡ әйтәһең,— тип йәнә дәртләндерәм дуҫты. Үҙем тегенең тел төбөнөң нимәгә барып төртөлөрөн һис шәйләй алмайым.

— Яҡшы көндә инә балыҡ үҙе тамаҡ туйҙырып ҡала. Ата балыҡтарға өлөш тәтемәй. Ваҡ балыҡты яҡын да ебәрмәй,— тип, һүҙен ослап уҡ ҡуйғандай, туҡтап ҡалды Алексей. Фекеренең дауамы, иң мөһиме тороп ҡалғанын һиҙеп ултырам, ләкин өндәшмәйем. Ғәҙәте шулай уның: һине уйландырып, көттөрөп ултыртыуҙан йәм таба, ләззәт ала. Шуға ла сабырлыҡ менән көтәм, барыбер әйтеп бөтөрәсәк, уйына һығымта яһап ҡуясаҡ ул.

— Тимәк... — тип фәлсәфәһенең йомғаҡлау өлөшөнә күсте ахырҙа минең дуҫ, тик ҡарпайған ҡолаҡтарым ымһынып ҡына ҡалды. Һүҙен ҡырт киҫеп, тәмәке ҡабыҙырға тотондо был. Нисәмә йыл балыҡҡа бергә йөрөйбөҙ, һәр саҡ шулай интектерә. Минең сабырлыҡты тикшерәме ни.

— ...Балыҡтар донъяһында инәләре хужа, йәғни ҙә матриархат! — тип һис көтмәгәнсә йомғаҡланы Алексей.

Асҡан ауыҙымды ябырға ла онотоп, байтаҡ аптырап ултырҙым. Бала сағымдан балыҡ ҡаптырҙым, иллә мәгәр ошоғаса ундай уй башҡа ла килмәгән. Уйлап ҡараһаң, ысынында шулай бит. Боҙ өҫтөндә ятҡан өс-дүрт балыҡтың һәммәһе лә ваҡ, ыуылдырыҡлыһы берәү ҙә булмаясаҡ. Был, ысынлап та, кешеләрҙең тәү тормош йәмғиәтендәге һымаҡ, балыҡтарҙа ла матриархат хөкөм һөрә тигәнде аңлатмаймы икән?! Моғайын, шулайҙыр.

***Ғ. Үзбәков***

## АСЫ БАЛЫҠ

Башҡортостандың көнбайышында, мәҫәлән, Ырғыҙ, Кәрәлек йылғаларында сәнсәй бармаҡ оҙонлоғондағы, сабаҡ йәки ҡорман балыҡ селбәрәләренә оҡшаған ваҡ ҡына балыҡ йәшәй. Тәме уның бик үк тәмле түгел — асы. Шуға күрә уны асы балыҡ тип атағандар ҙа.

Асы балыҡтарҙың ике ҡапҡаслы моллюскалар булған күлдәрҙә һәм йылғаларҙа йәшәүен бик күптән белгәндәр.

Ҡабырсаҡты ҡапҡас, инә балыҡ күкәй һалғысын моллюскыларҙың айғолаҡ ярығына батыра һәм шунда бер аҙ ыуылдырығын ебәрә лә күкәй һалғысты



ҡайтанан тартып ала; ата балыҡ шунда уҡ үҙенең орлоҡтарын — балыҡ һөтөн бүлеп сығара, ыуылдырыҡ аталана һәм шунда уҡ үҫә башлай. Асы балыҡтың ыуылдырыҡтары һәм селбәрәләре дошмандарынан ҡабырсаҡ ҡапҡастары менән ҡаплана (селбәрәләр донъяға килгәс тә моллюскаларҙың айғолаҡ ярыҡтарында күпмелер ваҡыт йәшәйҙәр әле), моллюсканың айғолаҡ ярыҡтары таҙа һыу менән йыуылып торғанға күрә, уларға кислород етәрлек инә. Күрәһең, ҡабырсаҡҡа бынан бер ниндәй ҙә зыян юҡ.

Ыуылдырыҡ сәскән мәлдә ата асы балыҡ үҙе бик матур сағыу төҫтәргә инә — быны аквариумда күреп була.

## Яңы йыл күстәнәсе

(мәҙәк)

Шамил менән Камил — күршеләр. Яңы йыл байрамына күстәнәс булһын әле тип, киттеләр балыҡҡа. Шамил олатаһының быймаһын, Камил өләсәһенең итеген кейҙе.

Тиштеләр былар мәке. Һалдылар ҡармаҡтарын. Көттөләр-көттөләр — балыҡ эләкмәне. Былар тағы ла көттөләр.

— Шаулашмайыҡ,— тине Шамил.

— Шулай шул,— тине Камил,— улайһа, балыҡ ҡаса.

— Һелкенмәйсә ултырһаҡ, бер ҡабыр, исмаһам.

Малайҙар ҡармаҡтарын тағы ла һалдылар. Һалдылар ҙа бүкән кеүек ҡатып ҡалдылар. Көттөләр-көттөләр — балыҡ ҡапманы.

— Шаулайыҡ,— тине Шамил.

— Шулай шул,— тине Камил,— беҙҙең тауышҡа килһендәр. Ҙурыһы ҡапһын, вағы ҡасһын.

Малайҙар ҡармаҡтарын ҡабаттан һалдылар, ҡысҡырып һөйләшеп тә ҡаранылар.

Шамил алды ҡармағын — ул буш сыҡты. Камил алды ҡармағын — уның эше «икелətə» шəберəк булып сыҡты, балығы ла юҡ, ҡармағы ла юҡ.

— Мин киттем,— тине Камил, һикереп торҙо, һуңынан лып итеп йəшнигенə ултырҙы.

— Мин дə,— тине Шамил, һикереп торҙо. Ул да лып итеп йəшнигенə ултырҙы.

— Ҡапты,— тине Шамил,— ҡапты, олатайымдың быймаһы боҙға ҡатты!

— Минеке лə ҡапҡан,— тине Камил,— өлəсəйемдең итеге боҙға ҡатҡан!

Оҙаҡ маташтылар малайҙар. Итектəрен йолҡтолар-тарттылар, боҙ өҫтөндə дүрт олтан ҡалдырып, арып-талып өйҙəренə ҡайттылар.

*Р. Мөхəмəҙиев*

## ЭНƏ БАЛЫҠ

(көтөлмəгəн ҡунаҡтар)

Диңгеҙ төпкөлөндə генə тереклек итеүсе энə балыҡты Башҡортостан күлдəрендə осратыу хəҙер күп балыҡсыларҙы ғəжəпләндермəй ҙə. Шырт балыҡ, табан, алабуға йəки суртан кеүек, энə балыҡ та Урал төбəге өсөн ҡəҙимгегə əйлəнде. Ə быға тиклем энə балыҡ тоҙло һыулы тропик диңгеҙҙəрҙə генə йəшəй, тип иҫəплəйҙəр ине. Йөҙгəн саҡта был ғəжəйеп балыҡтың ҡойроғо өҫтə була. Энə балыҡ Башҡортостанда элегерəк бөтөнлəй булмаған. Күрəһең, уның ыуылдырығы тропик яҡтарҙан татыр һыулы Асылыкүлдəге промысла балыҡтарын туҡландырыу өсөн тəғəйенлəнгəн планктон бөрсəлəре менəн бергə килгəндер. Хəҙер энə балыҡ Башҡортостанға яраҡлашты, башҡа йылға-күлдəрҙə лə ишəйə башланы.

Республикабыҙ һыуҙарында тағы ла бер «ҡунаҡ» — Каспий һəм Ҡара диңгеҙҙəрҙə йəшəүсе тюлька ла күренгелəй.

Шуныһы ҡыҙыҡ, был балыҡтар тоҙло һыуҙа ла, сөсө һыуҙа ла йəшəй ала.

*(Башҡортса календарҙан)*





## Аулай ҙа, үрсетә лә беләләр

Башҡортостандың һыу байлығы дөйөм оҙонлоғо 4,5 мең километрға һуҙылған йылғаларҙан, өҫкө йөҙө 20 мең гектарлыҡ күлдәрҙән һәм 18 мең гектарлыҡ һыу һаҡлағыстарҙан тора.

Башҡортостан балыҡ комбинаты бер үк ваҡытта балыҡ тотоу, менән дә, балыҡ үрсетеү менән дә шөғөлләнә. Комбинаттың балыҡ ҡабул итеү буйынса һигеҙ пункты бар. Һыу ятҡылыҡтары фонды ҙур ғына. Комбинат тәбиғи һыу ятҡылыҡтарында йыл һайын 5 мең центнер балыҡ тота.

Балыҡ тотоу менән бер рәттән, республикала балыҡ үрсетеү эше лә алып барыла. Тәбиғи һыу ятҡылыҡтарында балыҡ ресурстары кәмей, шуға күрә уларға селбәрәләр ебәрелә. Башҡортостан балыҡ үрсетеү заводы йыл һайын республика күлдәрен 10 миллион ала балыҡ селбәрәһе менән тулыландыра. Һыу ятҡылыҡтарына ала балыҡтан тыш, пелядь, рипус, киңмаңлай (толстолобик) һәм башҡа ҡиммәтле балыҡ селбәрәләре ебәрелә. Балыҡсыларҙың тырышлығы арҡаһында 8000 гектарҙан ашыу күлдә балыҡ запасы байтаҡҡа артты. Әбйәлил районының бөтә күлдәрендә лә ала балыҡ күбәйҙе.

Балыҡсылыҡты үҫтереүгә республикала 8000 гектар быуа бар. Унда нигеҙҙә карп үрсетелә. Быуалар йылына 450—480 тонна балыҡ бирә.

Һәүәҫкәр балыҡсылар ҙа балыҡсылыҡ хужалығы проблемаларынан ситтә тормай. Улар үҙ йәмғиәттәренә беркетелгән һыу ятҡылыҡтарында балыҡ запасын арттырыу буйынса үткәрелгән сараларҙа әүҙем ҡатнаша.

Элегерәк Өфө балыҡ заводының кескәй генә коллективы аҡ балыҡ үрсетә ине. Ә был балыҡ быға саҡлы Каспий диңгеҙендә генә осрай торғайны. Ете йәшкә еткәс, аҡ балыҡ үҙе яралған йылғаға ыуылдырыҡ сәсеү өсөн үрләй.

Профессор А. Подлесный Ағиҙелдә, Ҡариҙелдә һәм уның тармаҡтарында аҡ балыҡ үрсетеү юлдарын тикшерҙе. 1908 йылда ул Өфөләге балыҡ үрсетеү заводына нигеҙ һалған кеше ине. Революция һәм граждандар һуғышы йылдарында завод ябылып тора. 1921 йылда ул яңынан эшкә башлай һәм республикабыҙҙың иң ҙур йылғалары — Ағиҙел менән Ҡариҙелде аҡ балыҡ менән тәьмин итә.

Волгоград гидроэлектростанцияһы эш башлағас, ыуылдырыҡ сәсеү өсөн аҡбалыҡтар Башҡортостан һыуҙарына үрләй алмай. Ләкин завод коллективы



эшен туктатмай, ак балыктарҙы тәбиғи күлдәрҙә үрсетеү эшенә тотона. 1958 йылда Ладога күленән самолет менән килтерелгән 29 миллион рипус һәм ала балык ыуылдырығы, инкубатор ярҙамында ялрадырып, Туймазы төбәгендәге Кандракүлгә, Әбйәлил төбәндәге Мауыҙҙы күленә, Дәүләкән төбәгендәге Асылыкүлгә ебәрелә. Башка күлдәрҙе лә балыкка байытыу сараһы күрелә.

Хәҙер Асылыкүлдәге һәм Кандракүлдәге ала балыктың ауырлығы бер килограмдан да артып китә инде. Ә Мауыҙҙы күлендәге ала балык ыуылдырык сәсә.

Шуныһы бар: ала балык бик яй үҫә. Уны тота башлау өсөн иң кәмендә биш-алты йыл үҫеүен көтөргә кәрәк. Ә рипус балығы артык ҙур булмай, әммә бик тиҙ үҫә. Йыл ярым, ике йыл эсендә уны тоторға ярай. Ошо ике төр балыктан ҙур ҙа һәм тиҙ үҫеүсән тәмле балык алып булмаҫмы, тигән һорау тыуа. Һынап карарға булалар. Тәүҙә рипус ыуылдырығын ала балык ыуылдырығына кушалар. Ләкин был бер ни ҙә бирмәй. Унан ала балык ыуылдырығын рипус орлоғо менән аталандыралар. Ахырҙа, көткән һөҙөмтә килеп сыға. Ике төр балыктан яралған гибрид тәүге йылда ук 250—300 грамм үҫеш бирә, тәменә лә зыян килмәй. Инде хәҙер ала балыктың ҙурайыуын биш-алты йыл көтөргә кәрәкмәй. Гибрид ике-өс йыл эсендә бына тигән балык булып өлгөрә. Шуға күрә лә завод коллективы гибрид балыктарҙы күпләп үрсетеүгә керешә.

Балык үрсетеүселәр ала балыктың ыуылдырығын Мауыҙҙы күленән йыйып алды. Ә рипустың ыуылдырығын Ладога күленән самолет менән килтерҙе. Бөгөнгө көндә заводтың инкубаторында миллионлаған гибрид яраландырыла. Улар инде йәнләнеп, йөҙөп йөрөй. Тиҙҙән уларҙы Әбйәлил төбәгенең Атауҙы, Дәүләкәндәге Асылыкүл, Учалы төбәгенең Калкан күлдәренә ебәрҙеләр.

* * *

20-ләп күле, унлап быуаһы, бер нисә тиҫтә йылғаһы булған Учалы төбәге. Күлдәре ниндәй бит әле! Таҙа, тәмле һыулы Өргөн күле үҙе генә 800 гектар майҙанды биләп ята. Учалы, Карағайлы һәм башка күлдәрҙең майҙаны 300-ҙәр гектарҙан ашып китә. Уларҙа ҙур уңыш менән күп төрлө балыктар үрсетергә мөмкин.

Йылғаларыбыҙ-күлдәребеҙ балыклы булһын өсөн халык байлығын һакларға, браконьерҙарға каршы аяуһыҙ көрәш алып барырға ла кәрәк.

Беҙҙең йылға-күлдәрҙә промысла балыҡтарының һанын арттырыу өсөн уларҙы һаҡлап ҡына ҡалмайҙар, ә икенсе климатҡа ла яраҡлаштыралар, йәғни уларҙы ундай балыҡтар булмаған урындарға килтереп үрсетәләр. Мәҫәлән, Алыҫ Көнсығыштағы сөс һыу ятҡылыҡтарында йәшәүсе киңмаңлай һәм аҡ амур балыҡтарын беҙҙең Башҡортостанда үрсетә башланылар. Был балыҡтар һыу ылымыҡтары, ваҡ моллюскалар, ҡарышлауыҡ, бөжәктәр менән туҡлана. Улар бик тиҙ үҫә, яҡшы үрсем бирә. Аҡ амурҙың ауырлығы 30 килограмға, киңмаңлай балыҡтыҡы 16 килограмға етә. Тәмдәре буйынса улар һаҙанға оҡшаған.

## АҠ АМУР

Исеменә иғтибар итегеҙ. Тимәк, был балыҡ Амур йылғаһында йәшәй. Бәс, Амур Ҡытай сигендә булғас, аҡ амур Ҡытай йылғаларында ла үрсей. Ә һуң уның Башҡортостанға ниндәй ҡыҫылышы бар, тип һорарһығыҙ? Бар икән шул. 1971 йылдан башлап аҡ амур республикабыҙҙың күл-быуаларында климатлаштырылған промысла балығы. Бигерәк тә Ҡарман ГРЭС-ы һыу һаҡлағысында ныҡ үрсегән.

Амур балыҡ 7—8 йәшендә өлгөрә, июнь—августа, һыу 26—30 градусҡа тиклем йылынғас, өс өлөшкә бүлеп ыуылдырыҡ сәсә. Инкубация осоро — 32—40 сәғәт. Уның селбәрәләре бер айлыҡ булғансы планктон менән туҡлана, артабан өлкән балыҡтар шикелле һыуҙағы йәшеллекте, һыу ебәге, һыу тағанағы (элодея), мөгөҙьяпраҡ, тәлмәрйен тәңкәһе (ряска) һәм башҡа шундай йөҙөп йөрөгән, шулай уҡ һыуҙа үҫкән ылымыҡтарҙы ашарға тотона. Һыу төбөндәге мүкте, екән менән йәш ҡамышты ла ятһынмай. Ауырлығы 260 грамм, ә инде һыуҙың йылылығы 30 градустан да арта икән, амур балыҡтың тәүлеккә ашаған аҙығының ауырлығынан да ашып киткәнлеген күрә-күрә киткәнлеген кәт тә тор.



## «Ҡыҙыл китап» балыҡтары

Башҡортостан һыуҙарында ҡырҡлап балыҡ төрө йәшәй. Уларҙың күбеһе — кәҙимге, йыш осрай торған балыҡтар. Әммә «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгәндәре лә бар. Уларҙың һаны 12-гә етә: рус мәрсене (осетр), уҡбалыҡ (стерлядь), йылға бағрыһы (форель), ҡыҙыл балыҡ (таймень), хариус (бәрҙе), сөгә (сиг), пелядь, шаршы күкене; күкәнеш (синьга), әнәле балыҡ, береш, зөгәй (подкаменщик).

*(Башҡортостандың «Ҡыҙыл китабы»нан)*

### ҠЫҘЫЛ БАЛЫҠ

Һорораҡ, суртанға оҡшаған, туҡмаҡ башлы, ваҡ тәңкәле, ҡанаты ҡыҙыл ҡара булған ҡыҙыл балыҡ ҡиммәтле һөмбаш балыҡтарға ҡарай. Уралда ҡыҙыл балыҡтар Ҡариҙел, Ағиҙел, Еҙем баштарында һәм уларҙың ҡушылдыҡтарының ҡайһы берҙәрендә ҡалған.

Башҡортостан киңлектәрендә Ырымбур яҡтарынан Пермь яҡтарына хәтле, башҡортта ҡыҙыл балыҡ үҙенең исеме менән йөрөтөлә, шулай уҡ ҡыҙыл суртан, шүкә һәм крәсүлә тип тә әйтәләр. С. Т. Аксаков та һуңғы атама менән яҙған.

Был төр балыҡ әле Яйыҡ йылғаһы тармаҡтарында осрай. Ләкин унда ла шаҡтай һирәк. Заманында крәсүлә Кесе Эйектә күренгеләгән.

Ул ваҡытта башҡорттар ҡыҙыл балыҡты йә ҡармаҡлай торғайнылар, йә һыбай һалдау менән төртәләр ине. Ни өсөн һыбай, сөнки йәйәүлене ул яҡын юлатмай, ә һыбай уға яп-яҡын барып булған. Иҙел башында ҡыҙыл суртанға башҡорттар йыш ҡармаҡ һалыр булғандар. Ҡармаҡ ебе ат ҡылынан үрелә торғайны, емгә сиңерткә ҡаталар ине, ҡурғаш ни — юҡ. Зоолог Н. Навозов хәбәр итеүенсә, үҙе шаһит булғанда бер балыҡсы башҡорт ябай ҡылдан ишелгән ҡармаҡ ебенә Ағиҙелдә 10 ҡаҙаҡ самаһы ҡыҙыл балыҡ тотҡайны. Бәғзе ваҡытта башҡорттар ҡараңғы төндәрен крәсүләгә йылға ярына сыраҡҡа төшөп уны һалдау менән төртөп ала торғайны.

Затлы ҡыҙыл балыҡ шәп аҡҡан, таҙа, һалҡын һыулы йылғаларҙа йәшәй. Унда ул иң ағын булған урындарҙы һайлай. Ҡыҙыл балыҡ (тәлмин дә тиҙәр),



Л. П. Сабанеев яҙғанса, Миәс йылғаһында (Силәбе өйәҙендә) үтә һирәк булмаған. Бик ҙур балыҡтар шулай уҡ Пермь, Өфө губерналарының ҡайһы бер завод быуаларында осраған.

Ҡыҙыл суртан хатта һирәкләп Волгала (Һамар эргәһендә лә) осраштырғылаған. Ул башлыса Себер яҡтарында йәшәүсе балыҡтың иң көнбайыштағы сиген билдәләгән.

Сабанеев һүҙҙәренә ҡарағанда, әле 1886 йылда Златоуст янындағы Ҡуҫала, ҙур булмаған тау йылғаһында, 48 ҡаҙаҡлыҡ ҡыҙыл балыҡ тотолған.

20-се йылдарҙа, А. Подлесный күҙәткәнсә, крәсүлә октябрь айында Миәс йылғаһынан Арғужа күленә күсенә. Арғаяш яҡтарында, ғөмүмән, Уралда, ҡыҙыл балыҡты крәсүлә тиҙәр.

Ихтиолог ғалимдар белдереүенсә, ҡасандыр ҡыҙыл балыҡ Ҡара диңгеҙ бассейнынан Себер аша Тымыҡ океан бассейнына тиклем таралған булған. Хәҙер көнбайыштараҡ һыуҙарҙа ул бөткән.

XIX быуат аҙаҡтарында уҡ Кама менән Ҡариҙелдә ҡыҙыл балыҡ һирәкһаяҡ осраштыра. Ә инде үткән йөҙҙөң 60-сы йылдарында Ағиҙелдә был балыҡ ҡаҙағы бер тәңкәнән һатылған, йәғни мул ауланған.

Беҙҙең көндәрҙә ана шул һирәк осрай торған ҡыҙыл балыҡ Иҙел башында әле лә һаҡланып ҡалған. Зоолог Г. Парамонов мәғлүмәттәре буйынса, Ағиҙелдә 8—12 килограмға хәтле тартҡан ҡыҙыл балыҡтар тотҡандар. Әммә был балыҡтың һаны кәмегәндән кәмей бара.

Ҡыҙыл балыҡ хатта әкиәттәргә лә ингән. Берәү Еҙем буйында уҡ атҡан икән, ул һыуға төшөп, ҡыҙыл балыҡҡа тейгән булған, ти.

Һуғыштан элек Бөрйән яҡтарындағы Һеүәнәккә — Көньяҡ Уралдың саф һыулы бәләкәй йылғаларҙың береһенә — Ағиҙелдең ыуылдырыҡ сәсергә тип ҡыҙыл балыҡтар күп үрләй. Хәҙер инде Көньяҡ Уралда ҡыҙыл балыҡ тик Ағиҙелдә һәм уның инештәрендә (уларҙың да һирәгендә) күренгеләй.

Ҡыҙыл балыҡ ыуылдырығын һай урындарҙа, ҡомдарҙан оя өйөп, һала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был ыуылдырыҡ оялары ҡыуғын ҡыуғанда һәләк тә була.

Эҫе көндәрҙә Салажыла (Ҡана йылғаһының ҡушылдығы), ҡайһы бер балыҡсыларҙың малай саҡтағы хәтирәләре буйынса, суртанды тотҡан һымаҡ ҡыҙыл балыҡтарҙы һиртмәкләп тота торғайнылар. Балыҡ тиҫтәләп эләгә. Эреләре ни тора! Уларҙы хатта эйәр ҡанъяғаһына бәйләргә тура килә ине. Һалдау менән дә дәү тәлминдәр төртәләр ине. Ҡойроғон күрһәтеп кенә ярым ботлоҡ ҡыҙыл балыҡтың ҡармаҡ ебен өҙә һуғып ҡасып киткәне лә булғылаған.

## БӘРҘЕ

*Оло Һүрәм буйы ағын-ағын*
*Ағымдарҙан килә күк бәрҙе.*

(Халыҡ йырынан)

Көньяҡ Уралдың үтә күренмәле саф һәм һалҡын һыулы, ҡаты ағымлы, шаршылы йылғаларында етеҙ, көслө һәм бейек һыртлы көмөш һымаҡ балыҡтар осрай. Ошо ҙур ғына, оҙонса, йомро балыҡ бәрҙе була ла инде. Ҡиммәтле һөмбаш балыҡтары төрөнә ингән бәрҙе әллә ни эре булмай. Уның оҙонлоғо бик һирәк осраҡтарҙа 55 сантиметрға, ауырлығы 2 килограмға етә. Бер ваҡыт ғалимдар Башҡортостан заповедниғында бәрҙе балығын үлсәп ҡарағандар. Шуларҙың 25 см буйлыһы — 170, 34 сантиметрлығы — 424 грамм тартты. Балыҡсылар әйтмешләй, элек эре бәрҙе көҙгө сыуаҡта ғәләмәт шәп эләккән.

Иң зирәк һәм иң көслө балыҡтарҙан һаналған бәрҙе балығы күберәк тау йылғаларын төйәк итә. Һалҡын һыулы ағым йылғаларҙың төп хужалары —



ошо бәрҙе һәм бағыр. Әммә был балыҡтар Кама, Ағиҙел, Ҡариҙел йылғаларына ҡойоусы инештәрҙә лә осрай. Мәҫәлән, Ейәнсуралағы Ергәйештә, Нөгөштә, Еҙемдә. Бәрҙе бигерәк тә Яйыҡ йылғаһының үрге ҡушылдыҡтарында боронораҡ ишле күренгән. Тәме буйынса ла бәрҙе бағырҙан ҡалышмай, көс-етеҙлектә лә уға бирешмәй. Бәрҙе — бик сос балыҡ, һағыраҡ йөрөмәһәң, тотормон тимә. Ә элек, балыҡ күп булған ваҡытта, бәрҙене хатта бәләкәй малайҙар ҙа анһат тота ала ине.

Бәрҙе балыҡтары ер ҡорттары, һыу сәнескәге, ҡарышлауыҡ һәм башҡа төрлө шундай бөжәктәр менән туҡлана. Ярып ҡараған бәрҙеләрҙең ашҡаҙанында селәүсендәр, йәшел ләм һәм үҫемлектәр табылды.

Әйтергә кәрәк, бәрҙеле йылғалар һаны кәмегәндән кәмей. Мәҫәлән, элек Күгәрсен төбәгендәге Иртөбәк йылғаһында бәрҙе балығы үрсей торғайны. Күп төбәктәрҙә лә шулай. Бына Ауырғазы яҡтарындағы Сит йылғала кәгеттең (ерле атама) нәҫеле күптән ҡороған.

Бәрҙеләрҙең яратҡан урыны — шаршы һәм йылға тупһалары. Кис етеүгә улар йәшеренгән урындарынан сыға ла һыу өҫтөндә осоп йәки йөҙөп барыусы бөжәктәрҙе ауларға тотона. Эре бәрҙеләр ғәҙәттә өсәрләп-бишәрләп тәрәндәрәк, йәшерәктәре иһә кескәй төркөмдәргә ойошоп һыуҙың өҫтөндәрәк йөҙә.

Бәрҙе һыуҙар боҙҙан арыныу менән (йәғни апрель, май айҙарында) ыуылдырығын сәсә. Был ваҡытта ул ваҡ балыҡтар менән дә туҡлана.

Бәрҙеләрҙе яһалма үрсетеү хәҙергә алып барылмай, ә йыртҡыстарса тотоуға юл ҡуйыла. Башҡортостанда бәрҙе тотоу тыйылған. Сөнки бәрҙе балығы беҙҙә һаҡлауға мохтаж. Ысынлап та, был балыҡтарҙы күпләп үрсетәйек тиһәк, Көньяҡ Урал йылғаларында ла бәрҙене йыртҡыстарса ҡырыуға кәртә ҡуйырға кәрәк.

## Диккенс һәм ҡарт балыҡсы

Бөйөк инглиз яҙыусыһы Чарлз Диккенс бер ваҡыт, йылға буйында дуҫы менән йөрөгән саҡта, бәләкәй генә йорт эргәһенә барып сыға. Уның ишек алдында ниндәйҙер бер ҡарт төрөпкә төтәтеп ултыра икән.

— Һин,— ти дуҫы Диккенсҡа,— төрлө әкиәттәр уйлап сығарырға оҫтаһың, ләкин был ҡарт балыҡсы һинең бер һүҙеңә лә ғәжәпләнмәҫ. Был тәңгәлдә ул үҙе оҫта!

Диккенс үҙ-үҙенә ышанған рәүештә йылмая һәм ҡартҡа яҡынлаша.

— Хәйерле көн, дуҫҡай! — ти ул.— Был йылғала балыҡ тотоуы шәп бит. Дөрөҫ түгелме ни?

— Эйе, сэр, бында ятыуҙар бик шәп!

— Беләм! Былтыр йәй мин ошонда балыҡ тотҡайным, минең ҡармаҡҡа бик ҙур бағыр эләкте. Ул шул тиклем ҙур ине, ҡармаҡ ебен бик еңел генә өҙҙө. Мин уны нисек булһа ла тоторға булдым,— ти Диккенс. — Еп урынына мин йыуан сылбыр таҡтым һәм шул уҡ бағырҙы ярға һөйрәп сығарҙым.

— Шулай, шулай.— ти ҡарт балыҡсы.— Беҙҙең бағырҙы бары тик сылбыр менән генә һөйрәп сығаралар.

— Балыҡты өйгә алып ҡайтыу өсөн, — тип дауам итә Диккенс,— миңә дүрт кеше һәм ике ат ялларға тура килде!

— Шулайҙыр шул, сэр! Беҙҙең бағырҙы бары тик бер нисә кеше, ике ат һәм ныҡ арбаға һалып ҡына алып ҡайтырға мөмкин.

Диккенстың тәкәте ҡорой, ләкин бирешмәй!

— Бағыр табаға ятырға ризалашмаҡас, мин уны һыйырҙар менән бергә көтөүгә ҡыуҙым!

— Ә беҙ бағыр менән һәр ваҡыт шулай эшләйбеҙ, сэр! — ти бик тыныс ҡына ҡарт.

— Ләкин бына иң ҡыҙыҡлыһы: өс айҙан һуң был бағырға мөгөҙҙәр үҫте! Нәҡ һыйырҙыҡы шикелле!

— Нимә?! — тип ҡысҡырып ебәрә ҡарт балыҡсы һәм күгәүен тешләгәндәй һикереп китә.— Өс айҙан һуңмы?

— Эйе, эйе! — ти Диккенс, көлөп.— Ә нимә?

— Хөрмәтле сэр, һеҙ бында хәҡиҡәттән бер ни тиклем ситләштегеҙ буғай... Беҙҙең бағыр мөгөҙҙәре ыуылдырыҡтан сығыу менән үк үҫә башлай... Хе-хе-хе...

*(Инглиз юморынан)*

## БАҒЫР

Башҡортостандың таулы төбәктәрендәге ҡайһы бер йылғаларҙа бағыр балығы бар. Атап әйткәндә, ул Белорет районының Наяҙы, Быуғанаҡ йылғаларында, Маҡар янындағы Һикәҙе йылғаһында, Бөрйән, Ейәнсура төбәгендә һәм башҡа ерҙәрҙә осраштыра. Әле Белорет төбәгендәге Оло һәм Кесе Апшаҡ шишмәһе — бағры балығы резервтары (йәғни тәбиғи байлыҡтар дәүләт тарафынан махсус һаҡлауға алынған урын).

Бағыр резерваттары итеп йәнә түбәндәге урындар алынды: Ғафури төбәгендә, Һыуяҡты йылғаһы (Усман ауылы эргәһендә), Күгәрсен төбәгендә — Оло һәм Кесе Инәк йылғалары. Билдәле булыуынса, бағыр бик тәмле балыҡ һәм ул тик беҙҙең республикала ғына түгел, бәлки бөтә донъяла иң ҡиммәтле балыҡтарҙың береһе. Халыҡ уны юҡҡа ғына «батша балығы» тип атамаған.



Бағыр — йыртҡыс балыҡ. Эрерәк бағыр астан ваҡтарын ашай башлай. Бағыр тик һалҡын һәм таҙа һыуҙа ғына йәшәй. Ул боҙ аҫтында ла һәйбәт ҡышлай ала.

Ул үтә һаҡ балыҡ, уның ғәҙәттәге ауырлығы 300—400 грамм, бик һирәк осраҡтарҙа ғына 1,3 килограмм ауырлыҡтағы бағры осрай.

Ауға көндөҙ сыға торған йыртҡыс балыҡтарҙан бағры иң яҡшы көрәүселәрҙән һанала.

Бағыр балығы Кавказдағы Севан күлендә, Памир йылғаларында һәм башҡа тау йылғаларында ғына аҙмы-күпме тотола һәм сауҙа нөктәләренә ебәрелә. Башҡортостанда иһә был балыҡ бик аҙ һәм ул һатыу өсөн тотолмай. Әммә ҡайһы бер илдәрҙә — Данияла, мәҫәлән, бағырҙы быуала үрсетәләр икән. Шуның арҡаһында тип-тигеҙ урында ятҡан йылғаларға, күлдәргә ярлы булған был илдә йыл һайын 600 мең тонна самаһы бағыр балығы тотола.

## БЫЛАР ҠЫҘЫҠЛЫ

Сөсө һыуҙарҙың чемпионы — бағыр. Ул сәғәтенә 35 км тиҙлек менән йөҙә.

Бағры 10—12 градуста яҡшы туҡлана, әгәр һыуҙың йылылығы 3 градустан түбәнерәк йәки 18 градустан юғарыраҡ булһа, бағры бөтөнләй ашамай китә.

Бағырҙы быуала үрсетергә мөмкин. Бында бағрының йәйғор төҫлө төрө үрсеүсән. Уның тыуған иле — Төньяҡ Америка.

## Тәүҙә ышанмағайным

Йәмле Һаҡмар буйында тыуып үҫтем. Йәғни лә, балыҡ тотоу рәтен беләм, тимәксемен. Асылда иһә белмәгәнмен.

Дүртөйләнән арыраҡ Ағиҙелдә, Марьино ауылы тәңгәлендә, шамбы ҡармаҡлайбыҙ, тип һөйләнеләр. Ниндәй ҡармаҡҡа тотоуҙарын һораштым.

Өйрәтеүҙәренсә, ҙур ҡармаҡты алаһың да, һап яғын ағаста өңөлгән ояға ҡуйып, өҫтөнә ирегән ҡурғаш ҡояһың. Урта өлөшөндә еп бәйләү өсөн тишек йә нәҙек сымдан элмәк ҡалдыраһың. Ҡатҡас, шамбы ҡармағың әҙер ҙә була.

Шулай эшләнем. Бик ауыр тойолдо — кәмендә 30—40 грамм тартыр. Ҡарға йомортҡаһы дәүмәллек. Тик ялпашыраҡ. Шуны 0,4—0,5 мм йыуанлыҡтағы лескаға тағаһың да, ҡармағына шырт балыҡ ҡойроғо эләктереп, төндә шамбы ҡармаҡлайһың, имеш.

Нисек ҡармаҡлайһың бит әле! Боҙҙо тишәһең дә теге ауыр ҡурғашлы ҡармаҡты ҡапыл һыу төбөнә төшөрәһең, унан кеҫкенерәк хәрәкәт менән 15—20 сантиметрға күтәрәһең. Тағы ҡабатлайһың. Тағы...

Йәнәһе, шамбы теге ҡурғаштың һыу төбөнә бәрелгәндәге тауышына ылыға һәм килеп шырт балыҡ ҡойроғон ҡаба. Билдәле, ҡармағын да ҡуша эләктерә.

Нисек инде ул? Һәммә балыҡ тауыш, хәрәкәттән өркә. Ә шамбы — тап киреһенсә.

Бына Дим буйындабыҙ. Эңер төштө. Теге ҡармағым менән һыу төбөн дөмбәҫләп ултырам. Дөп тә дөп киләм. Тауышы хатта һыу өҫтөндә ултырған үҙемә ишетелә. Уйымса, барса балыҡ ҡасып бөткәндер. Ҡайҙан шамбы эләкһен?! Күрәләтә ахмаҡ булмаһа.

Шулай шик-шөбһәләнеп ултыра торғас, ҡармағыма нимәлер эләгә биреп ысҡынып ҡалды. Ҡулға тойолоуынса, ҙур балыҡ емде яҙа-йоҙа һәрмәгәндәй

итте. Шигем таралғандай булды, күңелгә йылы йүгерҙе. Дәртләнеберәк тотондом эшкә. Яңынан өс-дүрт ҡат һуғып алыуым булды һыу төбөнә, теге балыҡ деңкелдәтә бәрмәһенме — ҡапыл ҡармаҡ һабы ҡулдан ысҡынып китә яҙҙы. Шул ыңғайҙан туҡтатмай һөйрәп тә сығарҙым. Былай-алаймы шамбы! Ҡайтҡас, үлсәп ҡараным — килонан ашыу тартты.

Хаҡ һөйләгән икән тәжрибәле балыҡсылар. Шулай балыҡ ҡаптырыуҙың ғәжәп бер ысулын өйрәндем. Бик ҡыҙыҡ ысул. Әле шамбы шәп ҡапҡан мәл. Алдағы ялда тағы бармаҡсымын.

*Ғ. Үзбәков*

## Ала балыҡ үҙ итте

Балыҡсылыҡ белгестәре ҡайһы бер затлыраҡ балыҡтарҙы республикабыҙ тәбиғәтенә яраҡлаштырырға ынтыла.

Йылғаларҙағы һәм күлдәрҙәге балыҡ запасын арттырыуҙа балыҡтарҙың яңы төрҙәрен беҙҙең тәбиғәт шарттарына яраҡлаштырыу ҙур әһәмиәткә эйә. Был эште хужалыҡта әһәмиәте әҙ булған балыҡтарҙы эре, тиҙ үҫә торған ҡиммәтле балыҡтар менән алмаштырыу юлы менән атҡаралар. Ундай балыҡтарға ҡиммәтле промысла балығы — ала балыҡ (сига) инә. Ала балыҡтың бер нисә төрө бар: лудога, пелядь (сырок), рипус һәм башҡалар.

Чуд күле ала балығы, мәҫәлән, тәү башлап 1933 йылда Әбйәлилдәге Мауыҙҙы (Яҡтыкүл) күленә ебәрелде. Туймазы төбәгендәге Ҡандра күлендә иһә был төр ала балыҡ 1958 йылдан башлап үрсетелә. Уның төп йәшәгән урыны — Чуд, Ладога күлдәре ине. Ниндәйерәк һуң улар, ала балыҡтар?

...Әбйәлил районындағы саф һыулы Мауыҙҙыға барһағыҙ, һаҙанға оҡшағаныраҡ һимеҙ, бик тә тәмле, итле, көмөш һымаҡ аҡ, күркәм балыҡты күрерһегеҙ. Уның эреләренең оҙонлоғо 50—55 сантиметрға етә, ауырлығы 4—5 килограмм була. Был балыҡты урындағы башҡорттар сиға, сиғом тип атайҙар, ә ғалимдар Волхов ала балығы тип йөрөтә. Уның 2 миллион ыуылдырығы бында 1932 йылда Волхов ҡалаһындағы (Ленинград өлкәһе) балыҡ заводынан килтерелгән. Ләкин ул бик аҡрын үрсегән. Бары тик һуңғы йылдарҙа ғына уны тотоуҙы тыйыу арҡаһында башҡа балыҡтар һымаҡ ишәйеп киткән.

Мауыҙҙыла үрсегән был балыҡ башҡа күлдәрҙә лә үрсей алмаймы икән тип уйланылар Өфөләге балыҡ үрсетеү заводы эшселәре.

1958 йылдың апрель айы аҙаҡтарында Ҡандракүлгә тәжрибә рәүешендә 500 мең ваҡ ала балыҡ сырҙыларын ебәрҙеләр. Был күл тәрәнлеге һәм таҙалығы менән ала балыҡ өсөн яраҡлы булып сыҡты. Уларҙың ҙурлығы тәүге йылда уҡ 10—15 сантиметрға етте. Икенсе йылында 25 сантиметр оҙонлоғондағы балыҡтар ҙа күренә башланы. Алтмышынсы йылдар башында күлгә тағы ла 10 миллион ҡиммәтле балыҡ ебәрелде. Хәҙер бында сига күпләп үрсей.

Ала балыҡ Башҡортостан һыуҙарын үҙ итте — бик яҡшы үрсеп китте. Был балыҡ беҙҙә хатта эрерәк тә булып үҫә. Ала балыҡҡа беҙҙең күлдәр хуш килде. Ладога күлендә ошо балыҡ төрөнөң иң ҙуры ике килограмм самаһы тартһа, Мауыҙҙыла иһә 5 килограмғаса ауырлыҡты тәшкил итә.

1960 йылда Баймаҡ районының данлы Талҡаҫ күлендә миллиондарса ала балыҡ сырҙылары ебәрелде, ә 1965 йылда Ладоганан 27 миллион ала балыҡ ыуылдырығын Өфө балыҡ заводына самолет менән алып ҡайттылар.



1960 йылда Асылыкүлгә рипус һәм Урал аръяғындағы б̆айтаҡ ҡына күлдәргә пелядь ала балыҡтары килтерелеп ебәрелде. Пелядь шулай уҡ Әбйәлилдәге Атауҙы, Үләнде күлдәренә лә төшөрөлдө. Ҡандракүлдә лә үрсетелә. Әле һыуы таҙа, ем күп булған Мауыҙҙыла, Ҡандра һәм Атауҙы күлдәрендә төрлө ала балыҡтарҙың һаны ишәйгән.

Пелядь балыҡтары ла беҙҙә йылдам үҫә — ярты йылдан һуң улар бер килограмм самаһы тарта.

Шуныһы ҡыҙыҡлы: ала балыҡтар яҙын түгел, ә ҡара көҙҙә — 6—8 ноябрҙә, бик һуң булһа, 9 ноябрҙә һары ыуылдырыҡ һала.

Ала балыҡ менән рипус балығы бергә ҡушыла ла яңы бер төр — тәмле итле балыҡ барлыҡҡа килеүсән, уларҙы табала үҙҙәренән сыҡҡан майына ғына ҡурып алалар.

Өфө балыҡ үрсетеү заводы хәҙер Мауыҙҙыны үҙенең заповеднигы итеп тота. Бында һәр йыл көҙҙән ала балыҡ ыуылдырығы йыйып алынып, башҡа урындарға оҙатыла. Унда октябрь айҙарында көн һайын бер нисә центнер ала балыҡ тотолоп, уларҙың ҡиммәтле ыуылдырыҡтары алына ла бер нисә ай махсус ҡоролмаларҙа кислородҡа бай, гел алмашынып торған һыуҙа һаҡланып, беҙҙең ҙур-ҙур күлдәргә ебәрелә. Шулай итеп, пелядь һәм башҡалар Учалының Ҡалҡан, Өргөн күлдәрендә, Ирәмәл һыуятҡылыҡтарында йылдан-йыл үрсей һәм күбәйә.

Эйе, элек илебеҙҙең төньяҡ һәм көнбайышындағы һыу ятҡылыҡтарында ғына үрсегән ҡиммәтле ала балыҡтар хәҙер республикабыҙҙың 1000—1720 гектар һыу майҙаны булған тиҫтәләгән күлдәрендә үрсей. Киләсәктә башҡа күп кенә күлдәрҙә ла үрсетеләсәк улар.

## ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

Республика һыуҙарында быға ҡәҙәр булмаған, йәки булһа ла һирәк осрай торған сөгә, һыла балыҡтары Павловка яһалма күлендә үрсетелә.

# РИПУС

Рипус тигән балыҡ ала балыҡтар тоҡомона ҡарай. Был балыҡтар Поляр өлкәһендә булған бар йылға-күлдәрендә тип әйтерлек йәшәй. Ала балыҡтар тоҡомо һөмбаш балыҡтарға ҡәрҙәш. Тәүгеләрҙең бер нисә айырма билдәләре бар: уларҙың тәңкәләре эре, яңаҡтарында теште булмай, ауыҙҙары бәләкәй, ҡойроҡтары ныҡ уйылған. Уларҙың төҫө көмөш аҡ, һыу аҫтында ҡояш төшкәндә ала булып та күренә, шунлыҡтан исемдәре лә шулай.

Беҙҙең Асылыкүлгә рипус 1962 йылдан алып ебәрелгәйне. Балыҡтың латинса (фәнни) исеме шаҡтай оҙон: Coregonus albula! Был ала балыҡтың ауыҙы өҫкәрәк ҡарай һәм томшоғоноң иң осо ҡара.

Рипусты беҙҙең илдә төрлө урындарға эйәләштереп ҡаранылар. 1960 йылдан уны хатта Көнсығыш Себерҙәге Витим йылғаһы эргәһендәге бер нисә күлгә ебәргәндәр, унда уларҙы беҙҙең Урал яҡтарынан килтерҙеләр.

Тотолғандан һуң рипус тиҙ боҙолоп бара. Рипус — шәп өлгөрә торған балыҡ, уның ыуылдырығы ла мул була, үҙе планктон менән күберәк туҡлана. Үрсетеү өсөн был балыҡ төрө ҡиммәтле объект булып тора. Шуның өсөн дә рипусты Карелия, Белоруссия, Грузия һәм Ленинград, Новгород, беҙҙә Свердлов, Силәбе өлкәләрендәге күлдәргә күсертеп ебәргәндәр.

Рипус һыуҙа кислород бер литр 4 миллиграмдан ашыу булһа ғына үҙен һәйбәт тоя. Ата балыҡтарҙың тәнен тотоп ҡарағанда, ыуылдырыҡ сәскән ваҡытта ул ҡытыршы була.



## МӘРСЕН

Мәрсен, йәки бикре — ҙур балыҡ, ул ҡиммәтле промысла балыҡтарға ҡарай һәм мәрсен һымаҡтар балыҡтарҙың төп вәкиле булып иҫәпләнә. Уртаса ауырлығы 24 килограмм, ә буйға 2 метр 30 сантиметрға ла етә, йәғни кешеләрҙән дә оҙонораҡ үҫә.

Мәрсендәр үткенсе балыҡтар төркөмөнә инә, йәғни былдай балыҡ төрҙәре ыуылдырыҡ сәсер өсөн диңгеҙҙән сөсө һыуҙарға үрләйҙәр. Плотиналар һалыныр алдынан мәрсен һымаҡтар Камаға, уның ҡушылдыҡтарына, Ука һәм башҡа Волга бассейны йылғаларына инер булғандар.

Беҙҙең Ағиҙелдә бәғзе ваҡытта әле уҙған быуат аҙаҡтарында эре мәрсен балыҡтар эләккән.

Бикре Яйыҡҡа ла күпләп инә торғайны, унда ул Һаҡмар тамағына тиклем күтәрелгән.

Мәрсен һымаҡтар кимерсәкле балыҡтарға ҡарайҙар, былдай балыҡтар үҙҙәренең ҡоролошонда акулаларға бер нисә билдә менән яҡынлаша. Уларҙың кәүҙәләре орсоҡҡа оҡшаш, ҡойроҡҡа табан нәҙегәйә, 5 рәт һөйәк пластинкалар менән ҡапланған, былар араһында тегендә-бында ваҡ һөйәктән торған сәнскәктәр осрай. Баш һөйәктәре, бөтә һөлдәһе һымаҡ, кимерсәктән тора, умыртҡа һөйәктәре булмай. Томшоҡтары оҙонса һәм осланып тора, оста 4 мыйыҡса бар. Ауыҙҙары ла аҫта тора, үҙе арҡыры урынлаҙҡан. Яңаҡтары инеп-сығып тора (һуҙылырлыҡ була). Тештәре юҡ. Мәрсен һымаҡтар Европала, Урта Азияла, Себерҙә һәм Төньяҡ Америкала таралғандар. Илебеҙҙә 13 төрө бар: ҡырпа балыҡтар, мәрсен балыҡтар — уларға аҡ бикре, уҡбалыҡ, рус мәрсене, себер мәрсене, амур мәрсене, немец йәки атлантик мәрсене (БДБ-ның «Ҡыҙыл китабы»нда), сахалин мәрсене (шунда уҡ), уҡморон, көрәкморондар ҡарай.



## ҠАРА ЫУЫЛДЫРЫҠ

Атаҡлы ҡара ыуылдырыҡтың даны бөтә донъяға таралған. Табибтар уны иң туҡлыҡлы, ә күптәр иң тәмле ашамлыҡ тип һанай.

Каспий диңгеҙендә һәм Иҙел тамағында бикре һымаҡ бик эре балыҡтар йәшәй. Бында ҡырпа, бикре, уҡбаш балыҡтары тотола. Ыуылдырыҡтарын алғандан һуң, был балыҡтар «Каспрыба» ыуылдырыҡ-балыҡ берекмәһенең кәсепханаларына эшкәртергә ебәрелә.

Бөртөклө һәм яҫтыҡлы ыуылдырыҡ һалынған банкылар Мәскәүгә, Һамарға һәм илебеҙҙең башҡа ҡалаларына, шулай уҡ сит илдәргә оҙатыла.

Ихтимал, был татлы ризыҡты ашағанығыҙ барҙыр. Эрерәк бөртөклө ыуылдырыҡ ҡырпа балығынан, уртасаһы — бикренән һәм иң вағы уҡбаш балығынан алына. Шуларҙың иң тәмлеһе аҡһыл таплы була.

## КҮКӘНӘШ

Күкәнәш, күк балыҡ. Урал алды өлөшөндә был уғата һирәк осраған балыҡ. Беҙҙә уны белмәйҙәр — бүтән ҡорманға оҡшаш балыҡтар менән бутап йөрөтәләр.

Яйыҡ йылғаһында Ырымбурҙан өҫкәрәк осрамай. Ә бына инде Ырымбур өлкәһенең көнбайышын һыулаған Туҡ йылғаһында был балыҡ бар. Күренекле башҡорт теле белгесе Т. Баишев күкәнәштең Туҡ йылғаһы буйында йәшәгән башҡорттар телендәге атамалары тураһында былай тип яҙған:

«Русса «синец, сопа» тип атала торған, 13—14 см ҙурлығында була торған... балыҡтың төп исеме «сырйым йәки серйем» була. Уның йәшенә ҡарата ике исеме бар:

Күкен — беренсе йәшендә.

Сырйым — бер йәшен тултырғандан һуң.

Һаҡмарҙа, Димдә, Инйәрҙә был балыҡты күкем тиҙәр, Димдә тағы күк ҫырт тигән атама билдәле. Еҙем һыуында күкәнәште кәгет тип тә йөрөтәләр.

Күкәнәш — башҡа төбәктәрҙең йылға-күлдәрендә таралған балыҡ төрө. Был балыҡ таралған географик зоналар көнбайышта Рейн йылғаһына барып етә, ә көнсығышта беҙҙең Урал менән сикләнә.

Күкәнәш — саҡ ҡына йәшкелт күгелйем сағылышы булған, ҡабырғалары менән ҡорһағы һарғылт аҡ балыҡ. Түш йөҙгөстәре һарғылтыраҡ, ә бүтәндәре буҙ төҫтә, кәүҙәһе ян-яҡтарҙан ялпаҡ, шаҡтай киң, башы ослайған, ауыҙы өҫкә күтәрелгән, арт юл ҡанаты бик оҙон. Ҡойроғо ғәҙәттән тыш йоҡа, үтә күренеп торған һымаҡ.

Оло күкәнәштең ҙурлығы — утыҙ сантиметрға тиклем. Күкәнәш ыуылдырығын апрель аҙағында, майҙа сәсә, төньяҡтараҡтағы төбәктәрҙә — июндә.

## ШАРШЫ КҮКЕНЕ

Күкен — сабаҡ төҫлө йоҡа балыҡ, Һаҡмар һәм Яйыҡ һыуҙарында осрай.

Күкен — шаршы өҫтөндә уйнай торған ваҡ балыҡ.

Шаршы күкене күкйөнгә бик оҡшаған һәм уның менән йыш бутала. Был бәләкәй балыҡ, бәләкәй башлы.



Ағиҙелдә һәм уға ҡояр йылғаларҙа ла осраштырғылай. Шаршы күкененең ҡабырға һыҙатында булған ваҡ ҡына тишектәр өҫтән дә, аҫтан да ҡара нөктәләр менән ҡаймаланған, шуға күрә ҡабырға һыҙаты буйлап ике ҡатлы тар һыҙат һыҙылған. Ауыҙы томшоғоноң уртаһында тора.

Был балыҡ төрө таҙа, шәп аҡҡан йылғаларҙа йәшәй, бәләкәй генә һыу йәнлектәрен ашай, ыуылдырығын май, июнь айҙарында сәсә, ошо эркеү менән йәшәүсе балыҡтың тәңкәләре уртаса, ләкин улар еңел ҡубып бара.

Шаршы күкененең арҡаһы күк йәшел, ҡабырғаһының өҫкө яҡтарында беленер-беленмәҫ һыҙыҡтар була торған. Ҡорһаҡ яғынан төҫө һарғылт көмөш кеүек, уңдағы йөҙгөстәре ҡыҙыл-һары төҫкә буялған һымаҡ, ыуылдырыҡ сәскән мәлендә бар төҫтәре сағыуыраҡ күренә. Ыуылдырығын ҡырсын ташлы һайлыҡтарҙа, таштар араһында ҡуя. Башҡортостанда ла, бүтән урындарҙа ла был балыҡ майма менән уртаҡ һыуҙарҙы төйәк итә, шул иҫәптән шәп ағып ятҡан инештәрҙә йыш осрай.

## ЭНӘЛЕ БАЛЫҠ ЙӘКИ ТЕРПЕ БАЛЫҠ

Башҡортостанда энәле балыҡтың кесе туғыҙ энәле тип аталған төрө йәшәй. Быныһы иһә төньяҡта ятҡан бар ҡитғаларҙа бар: Евразия менән Америкала ла. Беҙҙә улар Мауыҙҙы күлендә һәм Яйыҡ башында осрай.

Яҙ көнө энәле балыҡ үҙенең ыуылдырыҡтарын һыуға һипмәй, ә улар өсөн оя яһай. Барыһы ла эшкә бара: һыу аҫтындағы ваҡ (бер бөртөк) үләндәр ҙә, төптән сүпләнгән бәләкәс кенә ағас киҫәге лә — бөтәһен дә энәле балыҡ йомро ояға ҡушып үрә. Энәле балыҡ берсә оя әйләнәһендә йөҙөп йөрөй, берсә уға ҡабырғаһы менән ышҡылып ала — ныҡ микән тип һынап ҡарай! Бер эре балыҡ күрһә энәләрен ҡапыл тырпайтып уға ташлана.

Бына инде оя әҙер һәм энәле инә балыҡ уға ни бары иллеләп ыуылдырыҡ һала. Ләкин ата энәле балыҡ ояла бер генә ыуылдырыҡ бөртөгө, бер селбәрә лә һәләк булмаһын тип, уны ҡарауыллай.



Энәле балыҡ тигәнебеҙ бик ваҡ балыҡ ул, уның оҙонлоғо 4—10 сантиметр ғына (ә ата балыҡтар инә балыҡтарҙан вағыраҡ). Йәшенә килгәндә өс йылдан ары йәшәмәй.

Туғыҙ энәле балыҡ татыр һыуҙа ла рәхәтләнеп йәшәй, мәҫәлән, Төньяҡ менән Балтик диңгеҙҙәре һайлыҡтарында.

Уның кәүҙәһе өс энәле балыҡҡа ҡарағанда нескәрәк. Был балыҡ яланғас (тәңкәһеҙ) тиерлек, йәки ҡойроҡ яғында бер нисә һөйәктән торған пластиналар була. Арҡа ҡанаты алдында 9—10 энә тора. Балыҡтың һырты һоро-йәшелдән алып ҡуңыр төҫкә тиклем була, ян-яҡтары асығыраҡ, һарыраҡ, йыш ҡына тоноҡ ҡына ҡараңғы таптар менән йә ҡыйыш һыҙаттар менән ҡапланған, ҡорһағы көмөш төҫтә. Ыуылдырыҡ сәсер ваҡытҡа ата балыҡтарҙың муйыны менән күкрәге ҡап-ҡара бер төҫкә инә, һирәгерәк иркәк балыҡтар тотошлай ҡараға әйләнә. Ояһы һыу үҫемлектәрендә эленеп тора.

## ХӘСТӘРЛЕКЛЕ АТАЛАР

Хайуандар донъяһы менән яҡыныраҡ танышһаң, балалар тәрбиәләүҙә бары тик ата ғына хәстәрлек күргән осраҡтарҙы ла осратырға мөмкин. Ҡайһы берҙә инә хайуандарҙың үҙ балаларына ҡарата бөтөнләй вайымһыҙ, хуш күңелле булыуы сәйер тойола.

Бер нисә миҫал килтереп үтке килә. Төньяҡ диңгеҙҙәрҙә, сөсө һыуҙарҙа ла ваҡ ҡына терпе балыҡтар (сәнскеле балыҡтар) йәшәй. Ата терпе әкәмәт һуғышсан балыҡ, башҡа ата терпеләр менән ыҙғышып ваҡытын үткәрә. Инә терпеләргә лә бик яғымлы түгел ул.

Уйнай торған саҡтары еттеме — ата терпе балыҡ ҡапыл үҙгәрә лә ҡуя: унан да тыныс, аҡыллы балыҡты осратырмын тимә. Ул эшкә сума — үлән тамырҙарын һәм бүлбеләрен таҙа ҡомло, тымыҡ урынға ташый йә оя һарға тотона.

Ояһы тамам әҙер булғас, ул «кәләш» һайларға китә, китә тип улары ла шул ата терпеләр янында уралалар инде. Ата балыҡ үҙенә оҡшаған инә терпене

ҡойроғо менән ҡыуып, кәрәк осраҡта, һыртындағы энәләре менән ҡаҙап, ояһына индерә. Инә балыҡ шунда ыуылдырыҡ сәсә һәм оянан сығып ҡала. Ата терпе балыҡ иһә икенсе «кәләшен» алырға китә, унан өсөнсөһөн... ыуылдырыҡ етерлек күләмдә йыйылғас, уларҙы аталандыра һәм башҡаса инә сәнскеле балыҡтарҙы ояға яҡын ебәрмәй, сөнки инә балыҡтар әсәлек тигән нәмәне белмәйҙәр, үҙ ыуылдырыҡтарын ашайҙар. Инде хәҙер ата өсөн яңы хәстәрлектәр арта. Ояны әленән-әле ул төҙәтеп тора. Оя эсенә инеп, йөҙгөстәре менән тонсоған һыуҙы, аҡрын ғына тулҡынландырып, саф ағым менән алмаштыра.

Ун-ун ике көндән ояла кескәй балыҡтар тыуа. Ата уларға кислородлы, саф һыу хәстәрләй. Бының өсөн ул ояның түбәһен аса. Берәй балаһы оянан ситкә сыҡһа, хәстәрлекле ата уны шунда уҡ ауыҙына ҡабып кире алып инә һәм ояға ебәрә. Бына шулай ата иркәләүендә селбәрәләр үҫеп етә. Шунан һуң ғына ваҡ терпе балыҡтар иректә көн итә башлай...

## ЗӨГӘЙ

Был «Ҡыҙыл китаб»ыбыҙҙа теркәлгән балыҡтың исемдәре бер нисә — Йүрүҙәндә һыла, сабатабаш, Һаҡмарҙа ташбаш, Әйҙә сүмесбаш, Миәстә сәскәкте балыҡ, Бөрйәндә ташпаҡа...

Зөгәйҙең кәүҙәһе ғәҙәттә яланғас була, башы сағыштырмаса ҙур.

Әле мәшһүр Л. Сабанеев күҙәтеүенсә, Уралдың Көнбайышында зөгәй уғата күп һанлы була торғайны.

Был балыҡ төрө бөтә Европала, Себерҙә киң таралған һәм таҙа тау, ялан шишмәләрендә осрай. Оҙонлоғо менән 17 сантиметрға етә.

Кәүҙәһе уның оҙонса, алда түңәрәкләнеп тора, сит-ситтәре ялпағыраҡ. Башы уғата ҙур, яҫы. Ауыҙы ла шаҡтай ҙур, киң иренле. Яңаҡтарында елле генә сәскәктәр бар. Тәңкәләре иһә юҡ, тик ҡабырға һыҙатында ғына ваҡ-ваҡ тәңкәләргә оҡшаш нәмәләр теҙелеп киткән. Был балыҡта ҡыуыҡ та юҡ! Ҡорһаҡтағы йөҙгөстәре тырпайып тора. Арҡала беренсе менән икенсе йөҙгөсө бер аҙ тоташа. Балыҡтың төҫө бик үҙгәреүсән һәм төптөң төҫөнә эйәрә, шулай уҡ һыуға күпме яҡтылыҡ төшкәне менән дә бәйле ул.

Был балыҡ гел таштар аҫтында тора (шуға ташбаш тиҙәр ҙә), йә үҙенә ҡомлоҡта өңдәр уя.



Ҡариҙелдең ҡушар йылғаларында зөгәй бик ҡәҙимге балыҡ, ләкин уны хәрәм тип ашамайҙар.

Көньяҡта ла булған был үгеҙ балыҡ төрө. Быуатыбыҙ баштарында ул, мәҫәлән, Саған йылғаһында осраған (Яйыҡтың уң яҡ ҡушылдығы).

Хәҙер зөгәй Бөрйән, Белорет төбәктәренең саф һыулы йылғалар менән шишмәләрендә шаҡтай киң таралған. Уның йәшәр урындары сағалаҡ менән ташбаштыҡы һымаҡ, ә һан яғынан был балыҡ күп түгел.

## АҠ БАЛЫҠ

Аҡ балыҡ элек беҙҙә ауланған промысла балыҡтарының иң затлыһы булған моғайын. Ян-яҡтары бер ниндәй тапһыҙ-ниһеҙ ялтырап торғанға уға аҡ балыҡ тип әйткәндәр ҙә инде.

Аҡ балыҡ XX быуат урталарына хәтле әле Каспий диңгеҙенән меңдән ашыу саҡрым үрләп килеп ыуылдырығын ул ваҡыттағы саф ағын һыуҙарында һибер булған.

Әүәл, XIX һәм унан да алдағы быуаттарҙа аҡ балыҡ бөтә Оло Иҙел (Волга) буйлап тиерлек тотола ине. Күпләп Камаға ла инеп, унан инде башҡа Урал йылғаларына ла, мәҫәлән, Пермь яҡтарындағы Чусовойға керә ине. Был хаҡта әле атаҡлы Л. Сабанеев яҙып ҡалдырған.

Мөһәбәт Волга ағымдарын үрләп аҡ балыҡ, әйткәнебеҙсә, Кама аша Ағиҙелгә инеп Ҡариҙелдең Красная Горка, Красный Ключ тирәһендә үҙенең төп ыуылдырыҡ сәсеү урындарын һайлаған.

30-сы йылдарҙа унда экспедициялар ойошторолдо, Ҡариҙелдәң Өфөләге балыҡ үрсетеү заводына аҡ балыҡтарҙан алынған ыуылдырыҡ килтергәндәр.

Беҙҙең быуаттың беренсе яртыһында, әйткәнебеҙсә, Ағиҙел менән Ҡариҙелдә аҡ балыҡ һиҙелерлек промысла әһәмиәте тотҡан. Иң күп ауланған ун йылға балыҡтары араһында аҡ балыҡ уҡ балыҡтан ҡала, 9-сы урында торған. Замананда Ағиҙелдә аҡ балыҡтың ыуылдырыҡ сәсеү урындары Бөрөнән алып Стәрлегә тиклем билдәле булған.

Оло Иҙелде бер нисә урындан быуғас, аҡ балыҡтың үрләүе туҡталды (1957). Хәҙерге көндә был балыҡты һаҡлау өсөн Оло Иҙелдең тамағында айырым балыҡ үрсеткес булдырылды. Бында аҡ балыҡтың селбәрәләре үрсетелә, билдәле ваҡыттан һуң улар Оло Иҙелгә ебәрелә, Иҙелдән улар Каспий диңгеҙенә баралар.





## Аквариум тураһында

Балыҡтар тураһында уҡыуы бик ҡыҙыҡ, ә уларҙы күҙәтеүе тағы ла ҡыҙығыраҡ. Өйөгөҙҙә йәнле тәбиғәт мөйөшө ойоштороп ҡарағыҙ әле. Был эште бөтәһенән элек яҙын йәки көҙ көнө башлау яҡшы, был ваҡытта кәрәкле хайуандарҙы һәм уларға аҙыҡты табыуы еңелерәк.

Балыҡтарға иң ябай аквариум яһарға мөмкин. Бының өсөн өс-биш литрлы таҙа быяла банка алырға кәрәк. Уның төбөнә 2—3 сантиметр ҡалынлығында эре йылға ҡомо һалығыҙ. Болғансыҡ булмаһын өсөн ҡомдо яҡшы итеп йыуығыҙ. Ҡомға 2—3 ботаҡ һыу үҫемлеге ултыртығыҙ ҙа банкаға әкрен генә ҡайнаған таҙа һыу һалығыҙ. Трандесканция ла ултыртырға ярай. Тәүлек үткәс, уға 2—3 ваҡ балыҡ ебәрегеҙ, ҙур булмаған иң ябай балыҡтарҙы, мәҫәлән, эт балыҡ, еҙмыйыҡ, табан балыҡ ебәрергә мөмкин. Шунда уҡ бер һыу ҡусҡары, быуа ҡусҡары һалыу файҙалы, ул аквариумда йәшел ҡуныҡ рәүешендә йыйылған һыу үҫемлектәре һәм ылымыҡтары менән туҡлана.

Аквариумды ҡарауы ҡыйын түгел. Уны тәҙрә янына ҡуйығыҙ. Балыҡтарға көнөнә ике тапҡыр ҡоро һыу бөрсәһе ашатығыҙ. Һыу бөрсәһе бик ваҡ (2—3 миллиметр) бөжәктәр. Уны күлдәрҙән һәм быуаларҙан капрон йәки марлянан эшләнгән бәләкәй генә сүмес ау менән һөҙөп тоторға мөмкин. Ҡағыҙға һалып киптереп, ябыҡ һауытта һаҡларға кәрәк. Балыҡтарға манный ярмаһы йәки сохари төйөп бирергә мөмкин. Шундай аҙыҡтың бәләкәй генә бер семтеме көн буйына етә. Ҡайһы берҙә айына 2—3 мәртәбә тере һыу бөрсәләре йәки сей ит (уны тары ярмаһы кеүек итеп ваҡлап) биреү яҡшы. Һыуҙы даими өҫтәп торорға кәрәк. Ләкин уны мөмкин тиклем һирәк, йылына 1—2 тапҡыр ғына: һыу буръяҡланһа, йәшәрһә йәки балыҡтар ауыҙҙары менән тын ала башлаһа, алмаштырырға кәрәк.

Балыҡтарҙы һәм ҡусҡарҙы күҙәтегеҙ: улар нисек хәрәкәт итәләр? Нисек тын ала һәм туҡлана? Әгәр ашатҡан һайын һәр ваҡыт бармаҡ менән әкрен генә быялаға сиртһәң, балыҡтарҙы шул сигнал буйынса ашарға килергә өйрәтергә мөмкин.

## МАТУР ҘА, КҮҢЕЛЛЕ ЛӘ

Бүлмәләге аквариумдарҙа балыҡтар үҫтереү бик күңелле ул. Һәүәҫкәр генә түгел, бәлки балыҡ үҫтереү менән бер ҡасан да шөғөлләнмәгән, хатта аквариумды беренсе тапҡыр ғына күргән кеше лә унан тиҙ генә айырылып китә алмай.

Бына дүрткел быяла һауыт. Уның эсендәге йәшкелт саф һыуҙа төрлө үләндәр үҫеп ултыра, ә үҫемлектәр араһында ҡояш нурҙарына сағылып, төрлө төҫтәге эреле-ваҡлы балыҡтар йөҙөп йөрөй. Балыҡтарҙың берәүҙәре аҡрын ғына, яңғыҙ ғына йөҙөп йөрөй. Икенселәре бер урындан икенсе урынға күтәүҙәре менән күсә. Өсөнсөләре үҫемлектәрҙең япраҡтары аҫтынан яй, ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ ҡына йөҙөп йөрөй.

Тәбиғәтте һөйөүсе күп һәүәҫкәрҙәр үҙҙәрендә аквариум тота һәм ваҡыттарын тәбиғәт күренештәрен күҙәтеп үткәрә. Улар аквариумда ниндәй үҫемлек үҫкәнен һәм ҡайһы төр балыҡ ниндәй үләнде яратҡанын өйрәнә. Шуға ҡарап кәрәкле үҫемлектәрҙе һайлап үҫтерәләр, балыҡтарҙың төрҙәрен үҙгәртеү өлкәһендә лә ижади эш алып баралар.

## Балыҡсы ҡарт килә...

Халыҡ ижадында балыҡтарҙы иҫкә алалармы, юҡмы? Бар, әлбиттә.

Халыҡтың иң яратҡан жанрҙарының береһе — йыр. Айырым халыҡ көйҙәрендә беҙҙең тема ла иҫкә алына. Мәҫәлән, «Өфө» тигән халыҡ йырында:

«Өфөнөң аҡ һыуҙарында
Ваҡ балыҡтар уйында.
Алма кеүек матур ҡыҙҙар
Үҫә Өфө буйында»,— тиелә.

Һирәгерәк башҡарыла торған «Ғүмәров» тигән башҡорт йырында бындай юлдар бар:

«Боғаҙаҡҡай күлгә ҡармаҡ һалдым,
Ҡармағыма сабаҡ ҡапманы.
Сабаҡ ҡына кеүек килеп ҡаптым,
Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым...»

Бер нисә танылған композитор, шағир балыҡсыларҙы йырҙа йырлай. Шулай, Мәксүд Сөндөклө һүҙҙәренә Камил Рәхимов яҙған «Йәйге иртә» тигән йырҙа:

«Балыҡсы ҡарт килә,
Һыуға емдәр һибә,
Һикерешеп һыуҙа уйнайҙар
балыҡтар»,— тиелә.

Икенсе бер киң таралған жанр — йомаҡтарҙа халыҡ балыҡтарҙы иҫкә алмай ҡалмай. Сисеп ҡарағыҙ, былар нимә булыр икән: «осмай ҙа, йырламай ҙа, ә сиртә»? Дөрөҫ, әлеге шул балыҡ та баһа! Ә быныһы кем була?

Тырнаҡтары һыртында,
Үҙе йәшәй ул һыуҙа.
Тик тормай үҙе бер ҙә.
Арҡаһында тырнағы —
Суртан да йотмай уны.

Быныһы инде һәр кемгә таныш юрыш (шырт балыҡ) була.

Бына һеҙгә йәнә бер йомаҡ:

Боҙ аҫтында баҙ —
Унда бер сөгөлдөр,
Ашағым килә, төшкөм килмәй.

*(Боҙ аҫтында балыҡ)*

Балыҡтар беҙҙең иң боронғо эпостарҙа ла тасуирлана. Бына дан тотҡан «Урал батыр»ҙан бер нисә юл:

Күлдә ятҡан балығы
Ялтүш, сабаҡ, суртаны.
Бергә йөҙөп уйнайҙар,
Бер-береһенә теймәйҙәр.

Ә һәр кеше, бигерәк тә балалар яратҡан әкиәттәрҙә балыҡтар иҫкә алынамы? Алына икән, бына «Тырышҡан табыр» исемле әкиәттә (Бөрйән районының Байназар ауылында Н. Шоңҡаров яҙып алған) геройҙарға: «Етәүегеҙ ете (был фольклорҙа киң таралған тылсымлы һан) балыҡ булып таралып бөтөгөҙ!» тигән әмер бирелә...

Мәҡәлдәр хаҡлы рәүештә иң халыҡсан жанрҙарҙан һанала. Бында ла балыҡтар ингән бит! «Суртан сыраҡсыны күрмәҫ», «Даръялай һыу ҡәҙерен баҡа менән йәйен белер» (Ырымбур өлкәһендә теркәлгән), «Һыуына күрә балығы, ауылына күрә халығы», «Балыҡ тотҡан туҡ булыр, аяҡ быуыны ныҡ булыр», һ. б.

Борондан килгән ҡобайырҙарҙа ла балыҡсылар һирәк булһа ла йырлана:

Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған — балыҡсы.

Балыҡсылар араһында тағы ла халыҡ телендәге имеш-мимештәр, ырымдар йөрөй. Әйтәйек, тотолған балыҡты һанамаҫҡа кәрәк, һанаһаң, насар эләгә. Бәғзе берәүҙәр, бигерәк тә балалар, былай һамаҡлай: «Балыҡ ҡап-ҡап! Яр башында ялтырап ят!»

Балыҡсыларҙың ғәҙәттәрендә маҡтаныу ҙа иғтибарһыҙ ҡалмаған бит. «Сабаҡ ҡапһа, суртан тиеп, эй маҡтана балыҡсы!» (Йырҙан.)

Ауланған балыҡҡа табыныу һымаҡ ырымдар фольклорсылар яҙып алған күҙәтеүҙәрҙә сағыла. Балыҡсылар араһында ауҙы, ҡыуалды аша атлап сығыу ярамай тигән ышаныу бар. «Ашаҡлама ҡармағыңды!» Сөнки электән килгән ҡараш буйынса был осраҡта ҡыуалға кеше еҫе һеңеп ҡала һәм балыҡ һиҙеп ҡасып бөтә, имеш. Айырыуса балалар араһында тотҡан тәүге балыҡты «атаәсәңде табып ят», тип ярға һуғыу ғәҙәте лә бар.

## ДҮРТ ЙОМАҠҠА БЕР ЯУАП

1. Башы бар, сәсе юҡ
Күҙе бар, ҡашы юҡ,
Йөрөргә аяғы юҡ,
Һыуыҡҡа туңмай,
Эҫегә көймәй.

2. Ҡанаты бар, йөнө юҡ,
Үҙе бара, юлы юҡ.

3. Ҡойроғо ергә теймәҫ,
Һырты көнгә көймәҫ,
Ул нимә?

4. Арымай-талмай, йөрөһә өнһөҙ,
баҫһа эҙе юҡ, йөрөһә юлы юҡ.

* * *

5. Бер ере — ҡола дуға,
Бер ере — ала дуға,
Был балыҡтың ана шуға
Исеме — ?

6. Нимә ул һыуҙа?
Ҡарасы, ҡара:
Алға барам, тип,
Ул артҡа бара!
*(ҡыҫала)*

***Р. Тимершин***

ҠАСЫШЛЫ УЙНАУСЫЛАРҒА ҺАНАМЫШ

— Алабуға ҡайҙа бара?
— Тоҙға бара.
— Ҡасан ҡайта?
— Яҙ ҡайта.
Яҙ ҡайтмаһа, көҙ ҡайта.
— Ул сыҡ, был сыҡ,
Һоро ҡуян бар сыҡ!

## Йылан менән балыҡ

*(Әрмән әкиәте)*

Йылан менән балыҡ дуҫлашып киттеләр, ти.

— Һеңлекәш,— тине, ти, йылан балыҡҡа,— мине арҡаңа ултыртып, әҙерәк диңгеҙҙә алып йөрөмәҫһеңме?

— Яҡшы,— тип яуап биргән балыҡ,— арҡама ултыр, мин һиңә үҙебеҙҙең диңгеҙҙе күрһәтәйем.

Йылан балыҡҡа уралып ала ла улар диңгеҙ өҫтөнән йөҙөп китәләр. Күп тә үтмәй, йылан балыҡтың арҡаһынан тешләп алған, ти.

— Апаҡай, һин ниңә мине тешләйһең? — тип һораған балыҡ.

— Аңғармай ҡалдым,— тип яуап бирә йылан.

Тағы ла әҙерәк йөҙәләр, йылан тағы ла балыҡты тешләп ебәрә.

— Апаҡай, һин ниңә тешләшәһең? — ти балыҡ.

— Башыма һауа үткән,— тигән, ти йылан.

Тағы йөҙәләр, тағы йылан балыҡты тешләй.

— Апай, ниңә һин мине тешләйһең дә тешләйһең? — тип аптырай балыҡ асыуланып.

— Минең ғәҙәтем шулай... — тигән йылан.

— Беләһеңме, минең дә бер ғәҙәтем бар,— тигән балыҡ һәм диңгеҙ төбөнә сума. Йылан һыуға сәсәгән дә батып үлгән, ти.

* * *

Төңгөлөккә ҡармаҡ һалдым
Быйыл йәйен;
Бер мәл ҡапты... үҙем буйлыҡ
Һуйыл йәйен!

*(Һүҙ уйнатыу)*

* * *

Минең беренсе ижегем
Туп шикелле нәмәлер.
Ҡалған икеһе йылғала
Балыҡ булып йөҙәләр.

*(йәйен)*

Барыбыҙҙы табып алып,
Әгәр бергә ҡушһағыҙ,
Аҙнаның шунда бер көнө
Булабыҙ ҙа ҡуябыҙ.

*(шамбы)*

## Арбауҙар

Ҡояш болот аҫтына инеп китһә:

Сыуағым минең, баҡ, баҡ, баҡ,
Балыҡ башын бирәм һиңә,
Түш-ҡабырға булһын миңә,
Сыуағым минең, баҡ[3]!.. —
тип ҡояшты арбайҙар.

Ҡармаҡты селәүселәгәндә:

Селәүсенде бейетәм,
Биште бирһәң, мин көтәм.
Ялмап йот, ялтырап сыҡ! —

тип емләп: — тфү, минең ҡулым түгел, Сәлим-Нәркәстең ҡулы,— тип ҡармаҡ-ҡа төкөрәләр.

Төкөрөп һалдым,
Тиҙерәк ҡап!
Яр башында
Ялтырап ят!
Ҡанаттарың
Ҡалтырап ят!

* * *

Ҡап-ҡап
Балығым,
Ауыҙыңа керһен
Ҡармағым!

* * *

Ялт-йолт
Үтеп кит,
Яр башына
Менеп кит!
Ҡармаҡ һалдым
Тиҙерәк ҡап,
Яр башында ялтырап ят,
Ишеңә иш тап!

* * *

Төкөрөп һалдым, һикереп ҡап
Яр башында ялтырап ят!
Ялтырамаһаң, ҡалтырап ҡат!
Сирт, сирт, сирттермә бирәм,
Эләк, эләк, эләктермә бирәм,
Ҡап, ҡап, ҡаптырма бирәм.

* * *

Бәрҙе, һәрҙе,
Тиҙерәк ҡап!
Яр башында
Ялтырап ят!




Балыҡ ҡармаҡлауға йәтеш урындар.

* * *

Ҡап-ҡап,
Балыҡ, ҡармаҡҡа,
Эреһе — баҙарға
Вағы — балаларға.
Ҡара балыҡ, ҡап, ҡап,
Ялтыр балыҡ, ҡалҡ, ҡалҡ.

* * *

Ҡыҙылғанат, ҡап-ҡап,
Яр башында ят, ят.
Ҡап-ҡап, балыҡ, ҡап,
Атайыңды саҡыр,
Әсәйеңде саҡыр.

* * *

Ҡап, ҡап, балыҡ,
Әсәйемә — ҙур балыҡ,
Атайыма — ҙур балыҡ,
Биш ҡустыма — биш балыҡ.

* * *

Ҡап-ҡап, балыҡ, ҡап,
Яр башында ялтырап ят.
Яңы емгә иҫке балыҡ, ҡап-ҡап.

* * *

Ҡыҙылғанат, Ғиҙелбанат, әсәйеңде
Саҡыр, атайыңды саҡыр, апайыңды
Саҡыр. Саҡыр ҡат-ҡат! Ҡыҙылғанат,
Ҡап-ҡап!

Ҡап-ҡап ҡармаҡҡа, эләгерһең
бармаҡҡа, эләкмәһәң ҡармаҡҡа,
әйләнерһең һармаҡҡа.

* * *

Малайҙар балыҡ һөҙгөс эшләйҙәр. Кемдең балығы төшөп китә, шуға:

«Ат башындай ҡомтороҡ,
Һинең ауыҙың йыртыҡ»,—

тип үсекләшәләр.

* * *

Төкөрөп һалдым, һикереп сыҡ,
бер сабағын алып сыҡ.

*(Ҡармаҡ сихырлағанда әйтелә. И. Ғәләүетдиновтан)*

* * *

Халыҡ — илендә, балыҡ — күлендә.

*(Боронғо мәҡәл)*

## Өс йомаҡҡа бер яуап

1. Башы бар, сәсе юҡ.
   Күҙе бар, ҡашы юҡ.
   Йөрөргә аяғы юҡ,
   Һыуыҡҡа туңмай, эҫегә көймәй.

2. Ҡанаты бар, йөнө юҡ,
   Үҙе бара, юлы юҡ.

3. Ҡойроғо ергә теймәҫ,
   Һырты көнгә көймәҫ.
   Ул нимә?
   Йәбешкәһе — һыуҙа, йәнле.

## ТАБЫШМАҠТАР — ЙОМАҠТАР

1. Башҡортостандағы ҡайһы балыҡ исеме ауыл исеменә тура килә? (Суртанүҙәк).
2. Осмай ҙа, йырламай ҙа, ә сиртә. (Балыҡ.)
3. Бер йәшелсә исеменең тәүге хәрефен үҙгәртһәң, балыҡ исеме килеп сыға. (Ҡабаҡ — сабаҡ.)

## БАШВАТҠЫС

Бында хәрефтәрҙең урындарын бутап һүҙҙәр яҙылған — ошо хәрефтәрҙе балыҡ исемдәре килеп сығырлыҡ итеп урынлаштырығыҙ.

Ниндәй балыҡтар?

Ҡабас (сабаҡ)
Әрҙеб (бәрҙе)
Антар (таран)
Ырпаҡ (ҡырпа)

Лысыҡ абҡыл (ҡылыс балыҡ)
Сенмәр (мәрсен)

Ыһал (һыла)
Мөһбаш (һөмбаш)

Мбыша (шамбы)
Ҙнааһ (һаҙан)
Енйәй (йәйен)
Набат (табан)

* * *

Бер әсәгә биш бала,
Был һуң нимә, туған?
Шуның «б-һын« «ҡ» итһәң,
Балыҡ тотоп та була.

*(Бармаҡ — ҡармаҡ)*

## ЙОМАҠ

Ҡараңғы өйҙә ҡарт ҡоҙа
Ҡармаҡ һалып ултыра.

*(Келә)*

## ҺҮҘ УЙНАТЫУ

Аяҡтың мин — аҫ өлөшө,
Тор ҙа һин баҫып ҡара,
Хәҙер мин — балыҡ исеме,
Уйла ла табып ҡара.

*(Табан)*

## Уйнап алайыҡ!

### *Йылым*

Был уйында ике бала «йылым», ҡалған уйынсылар «балыҡ» була. Ике бала етәкләшеп, «балыҡтар»ҙы тота башлай. Тотолған һәр бала уларға ҡушыла бара. Шулай итеп, ике кешенән генә торған «йылым» хәҙер ҙур булып китә, ҡалған «балыҡ»тарҙы ла тотоуы еңел була. Уйын барышында йылымды тәшкил иткән балалар, ҡулдарын ысҡындырмай ғына етәкләшеп йөрөргә тейеш.

Ҡайһы бала иң аҙаҡ тотола, ул иң шыйыҡ балыҡ булып иҫәпләнелә.

***И. Ғәләүетдинов***

## Балыҡ бүлешеү

Балыҡты бүлеү бик ҡыҙыҡ икән. Бының өсөн барлыҡ тотолған балыҡтарҙы бер йәки бер нисә рәткә теҙеп һалалар. Бында балыҡтарҙы ҙурлығына ҡарап теҙәләр. Тәүҙә иң ҙуры, унан ҙурырағы һәм артабан вағыраҡтары һалына. Ошолай теҙеп һалынғас, иң тәүҙә сығара баш (төптә йөрөүсе йылымсыға) — 4 балыҡ, ҡала баш (һайҙа йөрөүсе балыҡсы) — ике балыҡ һәм унан һуң өшкөтөүселәр берәр балыҡ алалар. Рәттәрҙәге балыҡтар бөткәнсе ошо тәртип сиратлаштырыла һәм бында хатта иң аҙаҡтан алған кешегә лә кәм тигәндә берике балыҡ тейә. Бына был ғәҙел бүлеү башҡорттарҙа бик күптән килә.

## ӨЛӨШ

### *хикәйә*

Йыуаташ малайҙары, атай-ағайҙарынан күрмәксе, йәйҙәрен һирәкләп һалдау менән төндә сыраҡҡа төшкөләйҙәр. Юҡ, боронғолар ише сайырлы түңгәк тумырып йонсомайҙар, иҫке биҙрәгә бер аҙ солярка ҡойоп алалар ҙа, осона сепрәк уралған сей таяҡты мансып, тар, урыны менән сөмбәйле йылғаны яҡтыртып

үрләйҙәр. Хәҙер элекке кеүек ҡыҙыл балыҡтар, бәрҙеләр юҡ инде ул, мәгәр малайҙарға балығынан бигерәк мәҙәге ҡиммәт.

Бына Әкрәм менән Рәшит шаптыр-шоптор йылға үренә факел яндырып бара. Төндә балыҡ ярға, һайға һыйыныусан. Таҙа һыуҙа әллә ҡайҙан күренә. Биш-алты сабаҡ, ике шамбы, өс ажау ғына осраны. Күбеһен Әкрәм ҡаҙап алды — ул мәргәнерәк, оҫтараҡ, тиҙ ҙә күрә. Хәйер, икеһенә бер тут баҫҡан һалдау инде. Ҡамышлы тобала Рәшит:

— Суртан! Елле суртан,— тип үрһәләнде. Әкрәм уға һалдау һондо, тик Рәшит яҙа сәнсте.

Сират — Әкрәмдеке. Ул ҡасҡан суртанды аръяҡлап тап итте. Елле тигән була Рәшит, ярай инде, терһәк буйы булыр-булмаҫ. Әмәлгә ҡалғандай, шул тирәлә йәнә бер суртан осраны Әкрәмгә. Уныһы ла эләкте. Ҡапыл уның эсе ҡайышты. «Рәшит юҫыҡ тота ла белмәй һалдауҙы. Шуның менән уртаҡлаш инде балыҡты... Бүлешкәндә бер суртанды үҙемдең өлөшкә тоҡ төбөндә йәшереп ҡалдырам...»

Ауылға етәрәк йоҡоларын саҡ еңеп балыҡты бүлештеләр, Әкрәмгә бер суртан, бер ажау артығыраҡ эләкте.

Аталары иртәнсәк малайҙарҙы һыу буйына балыҡ таҙартырға төшкәндә осратты — улар эшкә тимерлеккә юлланғайны. Туҡталдылар, күрҙеләр: Әкрәмдең өлөшө ниңәлер мулыраҡ, әммә өндәшмәнеләр, уландары килешеп бүлгәндәрҙер әле табыштарын, тип уйланылар. Шулай ҙа Әкрәмдең атаһы ҡайтҡас, һорамайса түҙмәне.

— Ниңәлер Рәшиттә балыҡ әҙерәксе. Ниңә ғәҙел бүлешмәнегеҙ?

— Бәй, һис төртә алмай бит. Йә тайып һыуға ҡолай, йә аяҡ аҫтында ятҡан балыҡты күрмәй.

— Дөрөҫ эшләмәгәнһең,— тине атаһы уйсан ғына.

Бесән бөткәс, күмәкләшеп ҡармаҡ менән балыҡсыларға киттеләр. Рәшиттең атаһы атын екте, арбала алыҫҡа ғына барҙылар. Көнө лә матур ине, төрлө балыҡ та ихлас ҡапты. Рәшиттең атаһы ат ҡараны, сәй ҡайнатты, Әкрәм, уның атаһы, Рәшит, Рәшиттең еүеш танау ҡустыһы Сабит бөгөлдән бөгөлгә йүгерекләп, ярты боттай балыҡ ҡаптырҙылар. Тәбиғи, иң күбен, иң эреләрен Әкрәмдең атайы эләктерҙе.

Күңелле мәл — балыҡ бүлешеү етте. Әкрәмдең атаһы уртаҡ табышты алты өйөмгә бер сама ғына айырып һалды. Шунан Рәшиттең атайын өйөмдәргә арҡаһы менән ҡуйҙы ла, ҡулына сыбыҡ алып, уйламаған өйөмгә төрәп, былай тип һораны.

— Быныһы кемгә?

— Әкрәмгә.

— Ә бынауһы,— сыбыҡ ситке өйөмгә төртөлдө.

— Рәшиткә.

— Был өйөм кемгә тейә?

— Үҙеңә.

— Быныһы һуң?

— Миңә.

— Быныһы?

— Сабитҡа.

Бүленмәйенсә, йәғни хужаһыҙ бер генә өйөм ҡалды. Әкрәмдең эсе бошто, әммә һиҙҙермәне: биш-алты бөртөк ваҡ сабаҡ ҡаптырған Сабитҡамы?

— Быныһы — аттың өлөшө,— тип ҡуйҙы бүлеүсе. Был да аптыратты Әкрәмде. Бәй, бер ғаиләгә — дүрт өлөш, иң күп тотҡан атаһы менән Әкрәмгә ике өлөш. Ай-һай... Улының кәйефен һиҙгәндәй, атаһы фәһемле генә һығымта яһаны.

— Беҙҙең башҡорт борондан һунарҙа ла, балыҡта ла табышты гәҙел бүлеп өйрәнгән! Хәҙер генә ул...

*Сабир Шәрип*

## Ер-һыу исемдәре һәм балыҡтар

Башҡортостанда, башҡа төбәктәрҙә лә, теге йә был балыҡ төрө күп булған бәғзе йылға-күлдәрҙе кешеләр балыҡ исемдәренә бәйләп йөрөтә. Шуға ҡарап ҡайҙа ниндәй балыҡ булған икәнлегенә фараз ҡылырға була.

Мәҫәлән, өлкән быуын хәтерләүе буйынса, Бүздәк станцияһы әүәлге заманда (50-се йылдарға ҡәҙәр) Табанлыкүл тип йөрөтөлгән. Киң таралған балыҡтың ошо исемен башҡа йылғалар ҙа йөрөтә: Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында йәйрәп ятҡан бер күлдең исеме — Ҡаратабан. Бында, ысынлап та, ҡара табан ғына йәшәй, уларҙың кәүҙәһе етлекмәгән (кәрлә формаһында) ҡап-ҡара төҫтә. Был яҡтарҙағы тағын бер атамаға туҡталып үтәйек: Табанкүл — Илмән күле төркөмөнә ингән бәләкәй күл, унда ла фәҡәт табан балыҡтарын ғына осратырға мөмкин, ә бына шул уҡ төркөмдәге күлдәрҙән Суртаныш тигәндәре 50 гектар майҙанды биләй. Миәс күленә бәләкәй генә Суртаныш тип аталған йылға ағып төшә. Алабуға күлендә, исеме үк әйтеп тора, ауланған балыҡтарҙың күбеһе — алабуға. Был күлдең яр буйына Алабуғазы ауылы урынлашҡан. Был төбәктә Ҡарабалыҡ тигән күл дә бар. Учалы районының Силәбе еренә һыйынып урынлашҡан Һөйөндөк ауылы осондағы ҙур булмаған Ҡарабалыҡ күлендә, ысынлап та, ҡарабалыҡтар күп үрсей.

Һанап үтелгән ер-һыу атамаларының күбеһе һаҡланған, ә балыҡтар үҙҙәре юҡҡа сыҡҡан. Мәҫәлән, Көнсығыш Башҡортостанда Бәрҙәшғол тигән йылға бар. Был атама беҙҙең йылғаларҙа әүәлерәк ифрат ҡиммәт булған бәрҙе балығының исеменә бәйле. Шуныһы ҡыҙыҡ: бында «ғол» тигән ялғау күпселек белгестәрҙең фекере буйынса монгол телендәге «ғол» — йылға тигән һүҙгә барып тоташа. Халгин-Гол йылғаһы тигәндә лә күрәбеҙ быны.

Әбйәлил яҡтарында бәләкәй Ҡыҙмаш йылғаһына ҡойған бер шишмәне Бағры тип тә атап йөрөтәләр. Был һалҡын һыулы шишмәлә (йәйге селлә көндәрендә лә һыу ҡойоноп булмай — 5 градустан артмай йылылығы), 50-се йылдарға ҡәҙәр иң ҡиммәт балыҡтарҙан бағрылар күп була торғайны.

Илдең башҡа төбәктәрендә лә балыҡтарҙың исеменә бәйле ер-һыу атамалары йыш осрай. Мәҫәлән, ҙур Волгаға ҡойған Ука йылғаһының 114 км оҙонлоғондағы ҡушылдығы Осетр тип атала (башҡортса мәрсен), ә Урал тауҙарының төньяҡ-көнбайышында ағып ятҡан Усьва йылғаһына ҡойған ике йылғаның исеме лә Большая Хариусная һәм Малая Хариусная тип аталып йөрөтөлә. Бында бәрҙе балыҡтары мул.

Башҡортостанда ла ошондай уҡ ер-һыу атамалары байтаҡ. Ҡариҙел районында Йүрүҙәнгә уң яҡтан ҡойған йылғаның исеме Оло Бәрҙәш — шулай уҡ Яңы Бәрҙәш ауылы ла бар. Ейәнсура районында Бәрҙәш тигән йылға аға,

Саҡмағош районында Бәрҙәсле ауылы, Ғафури районында Бәрҙәшле йылғаһы һәм Ейәнсура районында Ҡарабәрҙе тигән ауыл да барлығы мәғлүм.

Суртан балығына бәйле исемдәр ҙә йыш осрай. Йылайыр районында Суртанүҙәк, Балтаста Суртанлыкүл ауылдары, Саҡмағошта Суртанбаш, Стәрлетамаҡ районында Суртан тип аталған ауылдар ҙа бар. Шулай уҡ Дыуан яҡтарында Түбәнге һәм Үрге Суртан ауылдары булыуы билдәле.

Ҡара балыҡ исеменә бәйле күлдәр бер нисә төбәктә: Әбйәлил, Баймаҡ, Стәрлетамаҡ райондарында.

Саҙанлыкүл Шишмә ягында, Саҙан исемле поселок Баҡалы районында бар.

## ИСЕМДӘРЕ ҠАЙҘАН КИЛӘ?

*Сыбаргүл* — саҡ ҡына ел һирпелһә лә, күл өҫтөнә көмөш тәңкәләр һирпелеп китә.

*Яҡтыгүл* — төбөнә яңылыш энә төшөрөп ебәрһәң, уны ай яҡтыһында ла әллә ҡайҙан күреп алып була.

## **Йәй көнө — ҡышҡы ҡармаҡҡа**

Июнь аҙаҡтарында Нуриман районының Һалдыбаш буйына барырға дәртләндек. Балыҡ һурпаһы бешереп, ял итеп ҡайтырға ниәт.

Йылғаның Ҡариҙелгә ҡойған урыны бик йәтеш тойолдо. Шәп ағым килә лә, тамағына еткәс, киңәйеп, талғынлана. Һул яҡ яр аҫты сөм, өйөрөлөбөрәк ята. Ғәҙәттә шундай шаршы ҡуйынын ярата балыҡ.

Селәүгә лә, бүрттерелгән бойҙайға ла, икмәк ҡатыһына ла тотоп ҡарайбыҙ — йүнләп ҡапмай. Һалдыбаш аша һалынған иҫке, ташландыҡ күпер өҫтөндә ултырабыҙ. Эре-эре оптолар күренеп йөрөй, тик беҙҙең емгә яҡын да килмәй.

— Атай, ҡармағымды алып китте! — тип ҡысҡыра бер заман бәләкәй ҡыҙым. Күбәләк тотоп, шуның менән емләп һалған икән, ҡармағын оло ғына опто өҙөп алған да киткән. Үҙемдең ҡармаҡты бирергә мәжбүр булдым, әйҙә, маташһын, уға ла бер ирмәк бит. Үҙемә яңынан рәтләп алдым. Төҙ генә тал сыбығына еп таҡтым да батырырға ҡурғаш эҙләйем — юҡ. Ахырҙа епкә ҡышҡы ҡармаҡ (мормышка) таҡтым да ҡуйҙым. Уға батырғыс кәрәкмәй, үҙе бата, ауыр бит. Ҡыуал осона ла пружина кейҙерҙем, балыҡ сиртһә, беленһен тип. Шулай ҡалҡыуыс та кәрәкмәне.

Ҡармаҡ ҡуңыҙға оҡшатып эшләнгән. Һары төҫтә, ҡыҙыл таптары ла бар. Ялпашыраҡ. Селәү менән емләнем дә ағынғараҡ төшөрҙөм. Бер аҙ ағып барҙы ла батты. Еп тартылыбыраҡ тора. Төптә тик ятмаһын тип, ҡыуалды еңелсә ҡуҙғатыуым булды, теге һиҙгер пружина ҡапыл аҫҡа бөгөлдө. Әллә балыҡ? Һелкетә тарттым — балыҡ булһа, ҡармаҡ ауыҙына ҡаҙалһын.

Ысынлап та, ҡапҡан бит! Арыу ғына ҡорман. Һаҡ ҡына тартып сығарҙым күпер өҫтөнә. Тағы һалам ҡармаҡты. Тағы еңелсә генә уйнатам. Йәнә ҡорман! Балалар, ҡармаҡтарын онотоп, мине күҙәтә. Береһенә лә эләкмәй, ә мин бер-бер артлы сығарам.

Шулай уйламаған ерҙән йәй башында ҡышҡы ҡармаҡҡа байтаҡ балыҡ тоттом. Һәр хәлдә, биш-алты кешегә етте. Рәхәтләнеп балыҡ ашап, төтөн еҫе сығыбыраҡ торған һурпаһын эсеп ҡайтып киттек.

Аҙаҡ күп тапҡырҙар һынаным. Бигерәк тә күлдәрҙә, алабуға ҡаптырғанда. Ҡышҡы ҡармаҡ йәй ҙә табышлы булғылай. Хәҙер йылдың теләһә ниндәй миҙгелендә лә уны ҡалдырмайым.

***Ғ. Үзбәков***

## БАЛЫҠСЫ — АШНАҠСЫ

### Ҡаҡлау

Ҡаҡлаған балыҡ әҙерләү өсөн таранcабаҡ, ҡылыс балыҡ, ваҡ ҡорман балығы (ҡарағанат), ҡыҙылғанат һәм сабаҡты һайлап алыу яҡшыраҡ.

Ҡаҡлар алдынан балыҡтың эсен таҙартып, сей бәрәңге киҫәге батмаҫлыҡ ҡуйылыҡта әҙерләнгән тоҙлоҡҡа һалалар. Балыҡты ҙурлығына ҡарап һыуҙа 10—12 сәғәттән алып бер тәүлеккә ҡәҙәр тоталар. Бынан тыш балыҡты таҙа һалҡын һыуҙа сайҡаталар һәм күҙе аша үткәреп нәҙек бауға йәки сымға теҙәләр. Балыҡтарҙы бау буйлап шыуып йөрөмәһен, йәбешмәһен өсөн, бауҙы күҙ арҡылы ике тапҡыр һуҙып үткәрәһең. Балыҡтарҙы күләгә йәки ҡояш төшкән, еләҫ урынға, әйтәйек, ағас араһына, һарай башына элеп ҡуялар.

Киптерергә элгән балыҡты себендәрҙән һаҡлауы бер бәлә инде ул. Быны өсөн марлянан япма әҙерләйһең һәм уны көнбағыш майы менән аҡ һеркәнән торған ҡатнашмаға сылатып алаһың. Быға шыйыҡ ҡына (алһыу төҫтәге) марганцовкалы һыу ҙа бара. Элер алдынан балыҡтың айғолаҡтарын япһаң һәйбәт була. Себен бит ул иң тәүҙә ҡортон шунда һалып китә лә инде.

Балыҡ (ҙурлығына, көн торошона ҡарап) аҙна-ун көндән һуң ашарға яраҡлы.

### Киптереү

Яңы тотолған балыҡты һалҡын һыу менән йыуып айғолаҡтарын алалар ҙа, йәнә бер ҡат йыуғас, эмалле һауытҡа һалып өҫтөнә эрерәк тоҙ һибәләр, яҡшылап болғаталар ҙа бер-ике сәғәт һалҡын урында тоталар. Унан инде балыҡты таҫтамал маҙар менән ҡороталар ҙа майлы табаға теҙәләр. Табаны ҡуҙы алынған мейескә йәки духовкаға ҡуйып, балыҡтарҙы әйләндереп торалар. Кибеп еткәнен белеү өсөн балыҡты һындырып ҡарайҙар. Әгәр ул шатырлап һынды иһә — әҙер тигән һүҙ. Тоҙлау өсөн 1 килограмм балыҡҡа 600—700 (ҡаҙаҡ ярым) эрерәк тоҙ китә.

### Балыҡ ҡаҡлау

*икенсе ысул*

Балыҡты һалҡын һыуҙа һәйбәтләп йыуалар ҙа иләктә һарҡыталар, унан һуң башын, айғолаҡтарын, тәңкәле түшен тоҙ менән ыуып, эрерәк тоҙ һибеп эмалле һауытҡа тынҡыслап тултыралар. Һауыт тулғандан һуң өҫтөнә шына ябалар, ауыр нәмә менән (баҫтырыҡ, таш-маҙар) баҫтырып, һалҡыныраҡ урынға ҡуялар. Өс-дүрт көн уҙыуға балыҡ тоҙланып өлгөрөргә тейеш.

Быны белер өсөн һауытты асып ҡарайҙар, тоҙлоғо балыҡтың өҫтөнә сыҡҡан булырға тейеш. Икенсе бер һауытҡа аҡ һеркә һалып (1 литр һыуға 100—150 гр 9 процентлы һеркә) болғаталар ҙа тоҙланған балыҡты шунда йыуалар. Аҙаҡ 6—10 көн буйы һаҡлайҙар (элеп киптерәләр).

Ун килограмм вағыраҡ балыҡҡа бер килограмм тоҙ (малға бирелгәненең онталғаны ла килешә).

## ҺАЛАУЫҢ ӨЛГӨРҘӨМӨ?

Һалауҙың (балыҡ һурпаһы) бешеп еткәнен нисек белергә? Ҡайһы берәүҙәр балыҡтың күҙе ағарып сыҡһа, бешеп еткән тип уйлай. Ләкин башҡа ысул менән тикшереп ҡарап шуны әйтергә була: балыҡтың күҙе ағарғанын түҙемлек менән көтөп ултырып, оҙаҡ ҡайнаған һалауҙың тәме юғалыуы ихтимал. Ә бына алабуғаны, юрышты (шырт балыҡты) ҡайнар һыуға һалыу менән күҙҙәре ағарып сыға, ә үҙҙәре бешеп етмәгән була. Һалауҙың өлгөрөп еткәнен башҡасараҡ та белергә була.

Балыҡ бешерә торған суйынға (ҡаҙанға) балыҡ менән бергә ашҡа тураҡлаған кеүек уртаса ҙурлыҡтағы бер нисә киҫәк картуф һалып ебәрәһең. Балығың ваҡ булһа картуфты ла вағыраҡ турайһың. Картуф бешеп сыҡһа, һалау ҙа өлгөрҙө тигән һүҙ!

## БЕЛЕП ЭШЛӘ!

1. Кәстрүл төбөнә эре түңәрәкләп туралған һуғанды бер ҡат һалаһың да өҫтөнә таҙартылған ваҡ балыҡтарҙы теҙеп сығаһың. Уларҙың өҫтөн тағы ла бер ҡат һуған менән ҡаплайһың. Кәстрүлде утҡа ҡуйыр алдынан уға ярты стакан үҫемлек майы, ярты стакандан күберәк һыу, сирек стакан һеркә һәр кәрәгенсә тоҙ һалаһың. Кәстрүл ҡапҡасын ныҡлап ябып, аҡрын ғына янған һүрән утҡа быҡтырырға ҡуяһың. Өс сәғәттән һуң балыҡ әҙер була, һөйәктәре лә беленмәй.

2. Әгәр ваҡ балыҡтарҙы тағы ла тәмлерәк итеп бешерергә теләһәгеҙ, кәстрүл төбөндәге һуған өҫтөнә йоҡа ғына итеп туралған сөгөлдөр һәм кишер, унан һуң бер ҡат балыҡ, уның өҫтөнә лавр япрағы һәм борос, шунан һуң тағы ла бер ҡат балыҡ һәм иң өҫкә йәнә бер ҡат һуған һалырға кәрәк. Был осраҡта бер килограмм балыҡҡа бер стакан һыу, ярты стакандан күберәк үҫемлек майы, кәрәгенсә тоҙ һалына. Былар бөтәһе ҡапҡасы ныҡлап ябылған кәстрүлдә өс сәғәт буйы быҡтырыла.

Бындай аштарҙы әҙерләү өсөн ваҡ балыҡтарҙың эсен таҙартып, башын-ҡойроғон ҡырҡып ташларға һәм яҡшылап йыуырға кәрәк.

3. Ваҡ балыҡтарҙан (ташбаш, күкен-фәләндән) бик тәмле котлет та бешерергә була. Бының өсөн балыҡты таҙарталар һәм ит турағыс аша үткәрәләр ҙә, уға һыуҙа ебетелгән аҡ икмәк өҫтәйҙәр. Әҙер фаршҡа сей йомортҡа, май, һарымһаҡ, борос, тоҙ ҡушалар.

Шунан котлет яһайҙар һәм уны сохари вағына манып ҡуралар, 500 грамм балыҡҡа 150 грамм аҡ икмәк, бер йомортҡа, ике ҡалаҡ май һалына. Ә һарымһаҡ, тоҙ һәм боросто кәрәгенсә һалалар.

4. Балыҡты ла боҙолоуҙан һаҡларға була. Уның өсөн балыҡты һалҡын һыулы кәстрүлгә һалып, утҡа ҡуялар. Ҡайнап сыҡҡас, һалҡынса урында тоталар.

4 көндән һуң һыуын алмаштырып тағы бер ҡайнаталар, һыуытҡандан һуң, бер стакан аш һеркәһе өҫтәйҙәр ҙә, балыҡты йәнә шул һурпаға һалалар. Һурпа өҫтөнә аҙыраҡ үҫемлек майы һалғанда балыҡ 8—10 көн буйына боҙолмай.

5. Тәмһеҙләнгән йәки иҫкергән балыҡты бешереү өсөн кәстрүлгә тауыҡ йомортҡаһы ҙурлығында утын күмере һалалар, итте йәки балыҡты киҫәктәргә турап, һәйбәтләп йыуалар, һыуын һарҡытып баяғы кәстрүлгә һалалар. Унан балыҡ күмелгәнсе һалҡын һыу һалып, 2—3 сәғәт тоталар. Һуңынан күмерҙе алып ташлайҙар ҙа кәстрүлде утҡа ҡуялар.

## НИСЕК ҺАҠЛАРҒА?

Йәйге селлә айҙары башландымы, ҡомарлы балыҡсылар балыҡ тотмай ҡалмаҫтар, шулай булғас, уларҙы һаҡлай белергә лә кәрәк. Бында һүҙ балыҡты эҫе көндәрҙә ҡыҫҡа ваҡыт һаҡлау тураһында бара.

Балыҡты тотҡас та, берәй нәмә менән башына һуғып, нык ҡына иҫәнгерәтергә кәрәк, ләкин бәргеләргә, һыҡҡыларға ярамай. Тәңкәләрен ҡоймаҫҡа тырышырға кәрәк. Үтә эҫе көндәрҙә сабаҡ һымаҡ тиҙ боҙолоусан балыҡтарҙың эсен таҙарталар. Бының өсөн уның эсәктәрен айғолаҡтары менән бергә ауыҙ аша тартып сығаралар. Балыҡтың эсен ярмайҙар. Шунан һуң 2—3 минут һайын әйләндереп, уны ҡояшта елләтеп алалар.

Нык эҫе булмаған көндәрҙә һәм артыҡ оҙаҡ һаҡларға кәрәкмәгәндә, балыҡ таҙартмай-нитмәй генә кесерткәнгә йәки күрәнгә төрөп һалғанда ла яҡшы һаҡлана.

## **Кәңәштәр**

Һауыт-һабанан, бысаҡтан балыҡ еҫен бөтөрөү өсөн бер киҫәк сепрәк алып, уны һеркәгә манып һөртөргә, ә аҙаҡтан йылы һыу менән сайҡатырға.

## ИХ, ҺУРПАҺЫ!

Яңы балыҡтан әҙерләнгән һурпаны ашағаның бармы? Телеңде йоторлоҡ була бит ул, ә! Тәүҙә һәйбәтләп таҙарт, сайҡа. Шунан һуң ғына балыҡты кәстрүлгә һалып, өҫтөнә һалҡын һыу, аштәмләткестәр: һуған, тоҙ, лавр япрағы, төйөлмәгән ҡара борос, киптерелгән лимон йәки эфлисун ҡабығы һәм май өҫтәп, һүрән генә утта ҡайната башла. Ҡырҡ минуттан һурпаң әҙер. Инде хәҙер һөҙөп кенә алаһы ҡала. Балыҡ һурпаһына, бешерә башлағас уҡ, әрселгән картуф та һалырға мөмкин.

* * *

Табала балыҡ таралып ҡыҙҙырылмаһын өсөн уны бешерерҙән алда тоҙларға кәрәк. Ә балыҡты ҡыҙҙырғанда сыға торған еҫте бөтөрөү өсөн балыҡ араһына туралған сей картуф һалып ебәр.

## ТАБЫНҒА ТАНҺЫҠ УЛ!

Кибеткә диңгеҙ балығы килһә, әсәйем:

— Бар улым, алып ҡайт фәлән балыҡты, танһыҡҡа бешереп ашатырмын үҙегеҙгә,— ти.

— Балыҡтың нимәһе бар инде,— тим мин, кибеткә бармаҫ өсөн, йыбанып.

— Үҙең мәктәптә уҡып йөрөгән булаһың, ә балыҡтың файҙаһын белмәйһең,— тип асыулана әсәйем.

Дөрөҫ икән әсәйҙең һүҙе. Балыҡта файҙалы май бар икән. Ул майҙың ҡан тамырҙары һәм йөрәк сирҙәрен булдырмаҫҡа файҙаһы күп тиҙәр бит, хатта китапта ла шулай яҙылған. Шуға күрә балыҡ ашаусы эскимостар хатта европалыларға ҡарағанда ла тамырҙар һәм йөрәк ауырыуҙары менән һирәгерәк сирләйҙәр, ә итендә булған фосфор матдәһенең баш эшләтеүгә файҙалы булыуы әллә ҡасандарҙан билдәле икән.

## *АШНАҠСЫ ИҪКӘРМӘЛӘРЕ*

▲ Ҡаты тәңкәле балыҡты таҙартыуы бик ауыр булһа, уны бер генә секундҡа ҡайнап торған һыуға тығып алырға кәрәк.

▲ Балыҡ тәмле булһын өсөн, уны бер аҙ һөт эсендә тоторға, унан һуң онға тәгәрәтеп, ҡайнап торған үҫемлек майында ҡыҙҙырырға кәрәк.

▲ Ҡырмыҫҡалар йәйен ныҡ маҙаһыҙлай. Ҡырмыҫҡаны тоҙло балыҡ еҫе ҡурҡыта. Ҡырмыҫҡаның килгән юлын күҙәтергә лә селедканың бер киҫәген шунда һалырға кәрәк.

▲ Балыҡтан килә торған һаҙ еҫен бөтөрөү өсөн, бешерергә һалырға бер сәғәт ҡалғас, балыҡты һеркәле һыуға (бер литр һыуға 2 аш ҡалағы һеркә) һалып тоторға йәки тоҙло һыу менән йыуырға кәрәк.

▲ Балыҡтан ләм тәме килмәһен өсөн, уны һалҡын тоҙло һыуҙа йыуырға кәрәк.

▲ Балыҡты таҙартҡанда, ул ҡулдан шыуып төшөүсән. Бындай осраҡта бармаҡ остарығыҙҙы ваҡ тоҙға манып алығыҙ. Шул саҡта балыҡты таҙартыу еңел буласаҡ. Ә алабуға һымаҡ ҡаты тәңкәле балыҡтарҙы таҙартҡанда, уларҙы эҫе һыуға манып алһаң, тиҙерәк таҙартыла.

▲ Балыҡты ҡыҙҙырыр алдынан сепрәккә төрөп ҡоротһаң, ул ҡыҙарып бешә.

▲ Балыҡты ике-өс көн буйына иҫкертмәй һаҡлау өсөн уға эре тоҙ һибергә һәм шәкәр ҡатнаштырып, һеркә менән мансылған таҙа туҡымаға төрөргә кәрәк. Был ҡушымта бер стакан аҡ һеркәгә шаҡмаҡ шәкәр һалынып эшләнә.

***Сафуан Әлибай***



## Йылғаларыбыҙҙы таныйһыңмы?

Республика еренән Иҙел, Яйыҡ һәм Обь йылғалары системаһына ингән бик күп йылғалар аға. Балыҡ үрсей торған йылғаларҙың һаны 26-ға етә, уларҙың дөйөм майҙаны 3435 гектарҙан ашыу.

### Әй

Йырҙарҙа йырланған Әйҙең оҙонлоғо 549 километр, һыу йыйыу майҙаны 14730 квадрат километр тәшкил итә. Әүәлек һырты (бейеклеге 1020 метр) итәгендәге һаҙлыҡтан башланып, Көньяҡ Урал, Мәсәғүт тигеҙлеге, Өфө яҫы таулығы аша, Ҡариҙелдең тамағынан 400 километр өҫтәрәк урынға, һул яҡлап, килеп ҡушыла.

Әй балыҡҡа бай. Бында алабуға, ағасаҡ, ҡушбаш, сурағай, опто һәм башҡа балыҡтар үрсей. Йылға башында бәрҙе лә бар.

### Танып

Башҡортостандың төньяғында Ағиҙелгә ҡойоусы иң ҙур йылғаларҙың береһе — Танып. Таныптың дөйөм оҙонлоғо 500 километрға етә. Бормаланып-бормаланып аҡҡанлыҡтан, йылға тиҙ ағышлы урындар барлыҡҡа килтерә. Бына шуға күрә уны карталарҙа «Быстрый Танып» тип йөрөтәләр. Йылға балыҡҡа бай. Балыҡтарҙың күбеһе Ағиҙелдән үрләп менә.

### Сәрмәсән

Сәрмәсәндең оҙонлоғо 188 километр, ә һыу йыйыу майҙаны 4 мең квадрат километрға яҡын. Балыҡҡа ла бай Сәрмәсән. Ағиҙелдәге күп төрлө балыҡтар бында бар. Ләкин уларға үрсеү өсөн шарттар аҙ. Ағас ултыртыу эштәрен алып барғанда балыҡ өсөн аҙыҡ та, йылғала һыу ҙа артыр ине. Йылғалағы һыуға нефть ҡалдыҡтары индермәү, әлегә шәрә ярҙарға ағас ултыртыу, эрозия менән көрәш сараларын ойоштороу Сәрмәсәнде һаҡлауҙа төп шарттар булып тора.

## Ҡыҙыл

Оло Ҡыҙылдың оҙонлоғо — 186 километр, ә бассейны 1936 квадрат километрға етә.

Оло Ҡыҙыл суртан, сабаҡ, шамбы, бағыр балыҡтарына бай. Йылғаны балыҡ менән тулыландырыуҙа бәләкәй генә Сурталы күленең әһәмиәтен әйтергә кәрәк. Күлдән Һыулүҙәк тигән йылға ағып сыға һәм Оло Ҡыҙылға ҡушыла. Шул арҡала күл балығы күпләп йылғаға күсә.

Шуны әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа браконьерҙарҙың күбәйеүе балыҡтарҙың кәмеүенә килтерҙе. Йәнә күп кенә ауылдарҙа йылға буйына мал тиҙәге һәм сүп-сар түгелә. Ә был һыуҙың сифатын насарайта һәм бағыр кеүек таҙа һыу яратыусан балыҡтарҙы ҡырҡа кәметә. Хәҙерге ваҡытта бағыр балығын Оло Ҡыҙылдың ҡайһы бер тармаҡтарында ғына осратырға мөмкин.

* * *

Ағиҙелдең матурлығы һоҡланғыс! Саф һыуҙа балыҡтар йымылдаша. Ҡармаҡ һалғанда уларҙың сиртеүҙәренә текләп ултырыу — үҙе бер хозурлыҡ! Балыҡсыны балыҡ һурпаһына ҡарағанда йылға һыуын һулау, ҡармаҡ һалыу ләззәтен татыу күберәк ҡыҙыҡтыра. Ул балыҡ үрсетә, браконьерҙарҙы тота.

Ағиҙелдә ваҡытында сөгә, ҡырпа һәм аҡбалыҡтарға йәшәргә мөмкин булған. Ул заманда пароходтар һәм баржалар Мәләүез төбәгенең Бөгөлсән пристаненә тиклем күтәрелә алған. Ә хәҙер йылға төбөнә ултырған сүп-сар һәм йыйылған ҡом арҡаһында пароходтар хатта Табынға ла етә алмай.

Башҡортостанда Ағиҙел буйында ғына ла дөйөм майҙаны 25010 гектар самаһы 10 меңдән ашыу һыубаҫар күл бар.

## Ағиҙел

Әгәр картаға ҡараһаң, Башҡортостандың төп һыу артерияһы Учалыла башланған Ағиҙел икәнлеген күрәһең. Үҙенең оҙон юлында ул йөҙәрләгән ваҡ һәм эре йылға осрата ла улар менән ҡушыла һәм республика ерҙәрен йылғалар селтәре ҡаплап ала. Ағиҙелдең һәм уға ҡушылған йылғаларҙың оҙонлоғо 442350 километрға етә.

Ағиҙел үр яғында Урал тауҙары араһынан бормаланып-бормаланып аға. Бында уның һыуы таҙа, хатта тәрән урындарҙағы ҡырсынташтар ҙа ус төбөндәгеләй ап-асыҡ күренеп ята. Һыу эсендә үҫкән ҡамыш, һыу япрағы, ылымыҡ араһында һалмаҡ ҡына йөҙөп йөрөгән эре-эре ажауҙарҙы, аҡ сабаҡтарҙы аквариумдағы кеүек рәхәтләнеп ҡарайһың. Ләкин уларҙы тотоу еңелдер тип уйлама. Һаҡһыҙыраҡ ҡыландыңмы — вәссәләм, һинең алдыңдағы һыуҙа бер генә йән эйәһе ҡалмай. Емле ҡармағыңды һаҡ ҡына һыуға батырһаң да, әлеге ажауҙар, һинең күҙеңде ҡыҙҙырып, йөрәгеңде ярһытып эреләнеп кенә морон менән төртәләр ҙә ғорур йөҙөп ары китәләр. Уларҙы алдатыу өсөн инде оҫталыҡ кәрәк.

Беҙҙең Башҡортостан ерендә күл-йылғалар, быуалар күп.

*Павловка* һыу һаҡлағысы бер-бер ярым километр киңлек менән 150 километрға һуҙылып ята. Майҙаны 12 мең гектар, тимәк, майҙаны буйынса ул Ҡандра күленән ун тапҡырға ҙурыраҡ. Көньяҡ Уралдағы яһалма һыуһаҡлағыстар араһында Павловка тик Ырымбур өлкәһенең Яйыҡ йылғаһындағы

Ирекле һыу һаҡлағысынан ғына ҡалыша. Һуңғы йылдарҙа уға күпләп ҡорман, һыла, карп һәм уҡбалыҡ селбәрәләре ебәрелде. Павловка һыу һаҡлағысында балыҡсылар 10—15 мең центнер балыҡ биреп тора алыр ине. Был һандарҙы күҙ алдына килтереү өсөн хәҙерге ваҡытта Башҡортостандың барлыҡ күлдәрендә, быуаларында һәм йылғаларында 6—7 мең центнер балыҡ тотолоуын иҫкә алып китәйек.

## Яйыҡ

Яйыҡ — тау һәм тигеҙлек йылғаһы. Ул күккә күтәрелгән текә тауҙар аша ла, офоҡҡа барып тоташҡан күҙ күреме етмәҫлек тигеҙлектәр аша ла үтә.

Яйыҡ йәки Шыйыҡ Иҙел 1775 йылға тиклем тик Яйыҡ йылғаһы тип атап йөрөтөлгән. Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, был урындарҙа боронғо башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән. Хәҙер археологтар йылға буйҙарында убалы ҡәберлектәр тапҡан.

Яйыҡ Европа менән Азия араһында сик хеҙмәтен дә үтәй. Яйыҡ балыҡҡа ла бай. Бында бигерәк тә бикре, уҡбаш, майбалыҡ, һыла, йәйен, һаҙан, ҡорман, вобла, сабаҡ балыҡтары күп.

Яйыҡ, Башҡортостандың Учалы төбәгендә диңгеҙ кимәленән 860 метр бейеклектәге Уралтау теҙмәһенең, Нәтем тауы итәгенән башланып китә. Ошонда ул тиҫтәләгән шишмәләрҙән һыу алып йылғаға әүерелә.

### ҺИН БЕЛӘҺЕҢМЕ?

Башҡортостан заповедниғы йылғалары бағыр, бәрҙе, ҡыҙыл балыҡтарға, суртанға, зөгәй һәм башҡа һирәк осрай торған ҡиммәтле балыҡтарға бай. Бында 26 төр балыҡ йәшәй. Башҡортостан заповедниғы — тыуған илебеҙҙең гүзәл мөйөшө. Ул тәбиғәт һағында тора.

Урал тауы төпкөлдәрендәге саф һыулы йылғаларҙа бағры һәм бәрҙе балыҡтары осрай.

* * *

Башҡортостандағы йылғалар һәм күлдәр элек балыҡҡа бай ине: уҡ балыҡ, ҡыҙыл балыҡ, суртан, алабуға, сабаҡ, табан, ағасяңаҡ һ. б. таралған булды. Һуңғы йылдарҙа балыҡ тотоу эше ҡырҡа түбәнәйҙе. Быны сәбәбе билдәле: сәнәғәт предприятиеларынан сыҡҡан һәр төрлө ташландыҡтар йылғаларҙы, күлдәрҙе бысрата. Шул арҡала балыҡтар, бигерәк тә уларҙың ыуылдырыҡтары һәм селбәрәләре күпләп ҡырыла.

Бигерәк тә ҡыҙыл балыҡ, бәрҙе кеүек ҡиммәтле балыҡтар һаны ҡырҡа кәмене.

* * *

Өфө балыҡсылыҡ заводында балыҡты тоҙламайҙар ҙа, ыҫламайҙар ҙа, консерва ла яһамайҙар. Был — балыҡ үрсетеү заводы. Икенсе төрлө әйткәндә, балыҡ инкубаторы.

Быуаһы булһа, балығы булыр, тиҙәр. Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа күп быуалар бар, йүнле балыҡ юҡ. Ә бит был быуаларҙың һаны арта. Өҫтәүенә, яһалма

күлдәр, һыу һаҡлағыстар күбәйә. Уларға ебәреү өсөн балыҡ кәрәк. Бына ошо мәсьәләне хәл итеү әлеге балыҡсылыҡ заводы коллективына төшә. Мәҫәлән, көҙ көндәрендә ала балыҡ ыуылдырығы стадияһын үткән селбәрәләр балыҡ питомниктарына, быуаларға һәм күлдәргә ебәрелә.

Заводта гибрид та үрсетәләр. Ала балыҡ менән рипус балығы бергә ҡушыла һәм яңы төр — тәмле итле балыҡ барлыҡҡа килә.

## Учалы — данлыҡлы, күлдәре балыҡлы

Шулай юҡҡа ғына йырламайҙар икән. Ысынлап та, балыҡ үрсей торған ҙур-ҙур күлдәргә, һыу ятҡылыҡтарына, йылғаларға бай ул Учалы буйҙары. Учалы, Өргөн, Ҡарағайлы, Ҡалҡан, Миндәк, Оҙонкүл, Әүеш... Был күлдәрҙең һәр береһе йөҙҙәрсә гектар майҙанды биләп ята.

Ҙур Учалы күлендә бер нисә тиҫтә йыл элек балыҡ ифрат күп ине. Сәғәт тә үтмәй бер ашарлыҡ балыҡ алып була ине, һимеҙ табан балыҡ. Учалынан балыҡ заводы үҙенең йыллыҡ планын бына ошо күлдән тотоп тапшырған табан балығы менән тултыра торғайны.

Ҡалҡан күленең балығы ла һаман күҙ алдында тора әле. Эҫе көндәрҙә күл ситенә, һай ергә эркелеп килә торғайны ул. Балыҡсылар уны ҡул йылымы менән тоталар ине.

Ҡалҡан күленә 1962 йылда өс миллион ала балыҡ, 1963 йылда 20 мең һаҙан балығы һәм өс миллион рипус ебәрелгән булған.

Атаҡлы Өргөн күленең көмөш һыртлы сабағын балыҡҡа ла һанаманылар ул ваҡытта. Уныһы ла йылымға үҙе тығылып инә торғайны. Июнь айы етеп, дегәнәк сәскә атҡан мәлдә, ҡарабалыҡ ауға көтөүе менән эләгә ине.

...Ҡиммәтле балыҡтарҙың һанын һәм йәшәү урындарын арттырыу өсөн уларҙы бер йылғанан икенсе йылғаға, бер күлдән икенсе күлгә күсерәләр. Күлдәргә бай булған Учалы һәм Әбйәлилдә был эштәр айырыуса киң йәйелдерелгән. 1958 йылда ебәрелгән карптар Ҙур Учалы күлендә яҡшы шарттар тапты һәм хәҙер бында уларҙың 6—7 килограмм ауырлыҡтағылары ла осрай.

## БЫЛАР ҠЫҘЫҠЛЫ

Республикала 13 меңдән ашыу йылға, 1000-дән ашыу күл, 1500 самаһы быуа бар. Һыу ятҡылыҡтарының майҙаны — 130 мең гектар, самаһы.

Ағиҙелдең оҙонлоғо 1240, Ҡариҙелдең — 969 километр, Асылыкүл — 1800 гектар, Ҡандракүл — 1200 гектар майҙан алып тора.

### Оҙонкүл

Күлдең майҙаны бөтәһе 900 гектар, тәрәнлеге 1,5—2 метрға етә, 10 метр тәрәнлектәге урындары ла күп. Ул ағып ята, үҙенең артыҡ һыуын Өскүлгә ҡоя. Өскүл иһә Ҡыҙыл йылғаһы менән тоташа.

Оҙонкүл балыҡлы: суртан, алабуға, сабаҡ, ҡарабалыҡ, шамбы хәтһеҙ.

Ауыл кешеләренең һөйләүенә ҡарағанда, элек Оҙонкүлдә балыҡ иҫ киткес күп булған. Бер кеше, мәҫәлән, 40 килограмлы суртан тотоуы тураһында әле лә һөйләй.

Башҡорттар борон-борондан ошонан балыҡ тотоп, Мәскәү байҙарына һатҡан. Күл ниндәйҙер Мәскәү байыныҡы булып иҫәпләнгән. Әлбиттә, ул үҙе килмәгән, күлде һаҡларға кешеләр генә ҡуйған.

1962 йылда Оҙонкүлгә 20 мең карп балығы ебәрелгәйне. Ләкин улар ҡышын тонсоғоп үлеп бөттө. Хәҙер күл йылдан-йыл һайыға, ошо сәбәптән уның төбө үлән-мүк менән ҡаплана, ҡамыш, томбойоҡ баҫа.

## Талҡаҫ

Күлдең майҙаны — 4,8 квадрат километр.

Элек уның һыуы бик мул булған, хәҙерге кимәлдән 4,2 метрға бейек торған, әле лә ҡарттар шуны күрһәткән киртләстәрҙе табалар. Ҙур булғас, балығы ла күп булған. 1926—1927 йылдарҙа, мәҫәлән, бер һөҙөп сығарғанда тоннаға яҡын эләгә ине. Бөгөн инде күлдең күрке — балығы ла бөтөп бармаһын өсөн тәбиғәт байлыҡтарын һаҡлауға ныҡлы иғтибар бирергә ваҡыт.

## Аҡкүл

Башҡортостанда күлдәр аҙ түгел. Ләкин ҙур күлдәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Улары ла Урал артында урынлашҡан. Республиканың көнбайыш өлөшөндә өс кенә ҙур күл бар: Асылыкүл, Ҡандракүл һәм Аҡкүл. Был күлдәр бер-береһенән төҙөлөштәре, килеп сығыштары, һыу запастары менән айырылып тора. Был йәһәттән бигерәк тә Аҡкүл иғтибарға лайыҡ.

Аҡкүл Ғафури районының төньяҡ-көнбайышында ята. Ул төньяҡ-көнбайыштан көньяҡ-көнсығышҡа табан ете километрға һуҙылған. Бынан йөҙ йыл элек кенә күлдең майҙаны бик ҙур булған. Киңлеге 3,5 километрға, тәрәнлеге йәйге айҙарҙа 4 метрҙан алып 19 метрға тиклем еткән.

Хәҙер Аҡкүлдең иң тәрән ере 9 метрҙан да уҙмай. Күптән түгел генә әле күл бик балыҡлы булған. Унда ҡорман, һыла, опто, алабуға күп үрсегән. Хатта 75 килограмлыҡ йәйендәр ҙә осраған.

Хәҙер ҙә ҡорман балығы кеүек ҡиммәтле балыҡтар бында ыуылдырыҡ сәсә. Ләкин ау-фәлән менән күп тотҡанлыҡтан, балыҡтар үрсеп китә алмай. Тәбиғәттең был ҡомартҡыһын һаҡлау сараларын күрергә кәрәк.

## Асылыкүл — аҫыл күл

Асылыкүл — Башҡортостанда иң ҙур күлдәрҙең береһе. Һыуының тәменә ҡарап башҡорттар асылы (асы) тип атағандар уны.

1921 йылда күлдең һыуы бик ныҡ кәмене, тәрәнлеге 3—4 метр ғына ҡалды. Революцияға ҡәҙәрге йылдарҙа ҡышҡы мәлдә һәр көн өс йылым менән балыҡ тотолдо. Йылым һайын һәр көн 50—150 бот балыҡ сыға торғайны. Унан һуңғы йылдарҙа ла йәйҙәрен 6—7 йылым менән балыҡ тоттолар. Бөйөк Ватан һуғышы алдынан күл ҡамышлыҡтарҙан, үләнлектәрҙән бик алыҫ китте. Яҙ көндәрендә, балыҡ ыуылдырыҡ сәскән ваҡытта, ыуылдырыҡҡа һаҡланыр урын ҡалманы. Икенсенән, балыҡ ыуылдырыҡ сәскән ваҡытта ел-дауыл булып, ыуылдырыҡтың күбеһе тулҡын менән яр ситенә сығарылып һәләк булды.

1941—1942 йылдарҙа Өйҙөрәк йылғаһы Асылыкүлгә ҡушылғас, йылғанан күлгә суртан инеп, йәш балыҡтарҙы күпләп һәләк итте. Һуңғы йылдарҙа Асылыкүлгә ситтән ҡиммәтле балыҡтар килтерелде. Ләкин ситтән килтерелгән балыҡтарҙы суртан, алабуға, ҡыр өйрәге, аҡсарлаҡтар йәшәгән ҡамышлыҡтарға ебәрҙеләр. Был йыртҡыстар йонсоп килгән йәш балыҡтарҙың күбеһен ашап бөттөләр.

Айырым әйткәндә, Асылыкүлдең һыуы аҡ, таҙа, саф. Иң йыш осраған балыҡтары сабаҡ, алабуға, шамбы, суртан.

Хәҙер Асылыкүл артыуын дауам итә. Мәҫәлән, күлдән ярты километрҙан артығыраҡ ерҙә Өйҙөрәк йылғаһы үтеп, Дим йылғаһына барып ҡушыла. Шул Өйҙөрәк йылғаһындағы быуа Асылыкүлгә ҡушылып торҙо. Күлгә ебәрелгән һаҙан, ҡара балыҡ һәм башҡа төрлө балыҡтар быуаға инеп үрсене. Ләкин 1960 йылдың апрелендә быуа йырып ебәрелде. Шулай итеп, ташҡын һыуы менән йөҙәрләгән тонна балыҡ ағып китте. Әгәр ҙә күлдән ташып сыҡҡан һыуға аралы ҡойма ҡуйһаң, балыҡ ул хәтлем күпләп әрәм булмаҫ ине...

## Нуғаҙаҡ

Ағиҙел туғайҙары күлгә бай. Аҡкүлдән төньяҡтараҡ, Ағиҙелдең һул яғында, Нуғаҙаҡ күле ялтырап күренә.

Күлдең оҙонлоғо 2 километрға яҡын. Ул бик тәрән. 1957 йылдың йәйендә генә күл ентекләп тикшерелде. Һөҙөмтәлә күлдең көньяҡ өлөшөндәге айырым урындарҙың тәрәнлеге 57 метрға еткәнлеге беленде.

Күл балыҡҡа бай. Ҡорман, һаҙан, йәйен, суртан, һыла кеүек эре һәм ҡиммәтле балыҡтар менән бер рәттән, унда һирәк осрай торған аҡ балыҡ та булған. Ләкин күлдең тәрән булыуы балыҡ тотоуға ныҡ ҡына ҡамасаулай.

Көндәр йылына башлау менән, бигерәк тә марттың икенсе яртыларынан һуң, күлдең өҫтө йәнләнә төшә. Иртәнән кискә тиклем һәр көндө һәүәҫкәр балыҡсылар боҙ өҫтөнә мәке уйып, ҡармаҡ менән балыҡ тота. Был осорҙа эре генә сабаҡ һәм алабуға ҡармаҡҡа һәйбәт ҡабыусан.

Нуғаҙаҡ күле буйҙарында бик күп ваҡ шишмәләр сыға.

* * *

Көнбайыш Башҡортостандың карст соҡорҙарында иң эре күлдәр — Асылыкүл һәм Ҡандракүл, улар Европаның урман-дала бүлкәтендә шулай уҡ иң ҙур күлдәр булып һанала.

Уларҙан ҡала иң эре күлдәр — Сыбаркүл, Талҡаҫ, Мауыҙҙы, Оло Учалы, Ҡарағайлы, Әүеш, Өргөн, Сирғансы, Оло Атауҙы, Мулдаҡ. Улар ер ҡабығының уйылыуынан барлыҡҡа килгән.

## Ҡандракүл

Бәләбәй ҡалҡыулығындағы Ҡандракүл 15,6 квадрат километр ерҙе биләй, тәрәнлеге 12—15 метрға етә. Күлдең уртаһында утрау бар. Илдең Европа өлөшөндә башҡаса бер генә утраулы күл дә юҡ. Ләкин Ҡандракүлдәге берҙән-бер утрауға исем ҡушылмаған. Урындағы халыҡ уны «Утрау» тип кенә йөрөтә.

## КЕШЕ ЯҺАҒАН «КҮЛ»ДӘР

Нөгөш дињгеҙенең иңе ике саҡрымдан да артығыраҡ. Унда хәҙер 200 миллион кубометр һыу тупланды.

Башҡорт диңгеҙе — Нөгөш һыуһаҡлағысы ул. Был — тәрәнлеге менән 31 метрлы, оҙонлоғо 2 километрлы быуа, үҙе 2500 гектар майҙанлы.

* * *

Ҡарман быуаһы Беүә йылғаһында төҙөлгән, утыҙ километрға һуҙылған, 4700 гектар майҙан биләп ята.

## Шыға

Әбйәлил яғына ҡырҙан килгән кеше «шыға» тигән һүҙҙе ишетеп, мәғәнәһенә төшөнә алмай аптырап ҡала.

Шыға — был яҡтағы балыҡсыларҙың саф башҡортса балыҡ тотоу ысулы ул. Ул ҡармаҡ сыбығына оҡшаған ике оҙон ҡыуалдан ғибәрәт. Уларҙың береһенә сымдан мәскәү яһап беркетәләр. Ә икенсе ҡыуалдың осон ғына ярып, тере инә суртанды бәйләп ҡуялар. Шыға өсөн мәкене лә төбөн киңәйтеңкерәп, киҫелгән конусҡа оҡшатып уялар. Балыҡсы бәйле суртанды күл төбөнә төшөрә лә аҡрын ғына йөҙҙөрә башлай. Күп тә үтмәй, уның янына уйнарға икенсе (иркәк) суртан килә. Балыҡсы был суртанды мәскәү менән эләктерә лә, боҙ өҫтөнә тартып сығара... Билдәле, балыҡсынан ҙур оҫталыҡ, түҙемлек һәм хәйлә талап ителә.

Ҡарабалыҡты күлендә шыға март аҙаҡтарында һәм апрель башында өҫтөндәге ҡар иреп, боҙ аҫтына ҡар һыуҙары һарҡып бөткәс башлана. Күлдә суртан уйнаған мәлгә тура килә ул. Яҙҙың нисек килеүенә ҡарап, аҙна-ун көн самаһы һуҙыла. Шыға мәле — иң күңелле ваҡыт. Балыҡсылар күп ваҡытта ҙур табыш менән ҡайта. Ауырлығы ун килограмдан артыҡ тартҡан суртанды Ташбулат ауылының бер балыҡсыһы тотҡанын һаман да һөйләйҙәр.

Ҡарабалыҡты күле ер уйылыуҙан хасил булған уйпат ергә һыу тулыуҙан барлыҡҡа килгән, уның диаметры ике километрҙан саҡ ҡына артыҡ. Һыуҙың тәрәнлеге урыны-урыны менән ун метрға етә. Элегерәк күлдә тик ҡарабалыҡ ҡына булған. Шуға ла уға Ҡарабалыҡты тигән исем биргәндәр.

Ҡарабалыҡ — республикабыҙҙың башҡа күлдәрендә һирәгерәк осрай торған тәмле балыҡтарҙың береһе ул.

Беҙ һөйләгән күл балыҡҡа бай. Ҡарабалыҡтан башҡа суртан һәм алабуға күп, сабаҡ һәм ҡыҙылғанат осрай. Күлдә балыҡтарҙың башҡа төрҙәрен үрсетеү эштәре лә алып барыла. Мәҫәлән, күпләп һаҙан балығы ебәрелде. Ләкин күлдә алабуға һәм суртан кеүек йыртҡыс балыҡтарҙың күп булыуы ҡалған балыҡтарға үрсергә ирек бирмәй. Шуны әйтергә кәрәк, браконьерҙарҙың күбәйеүе күлдә ҡарабалыҡтың кәмеүенә килтерҙе. Хәҙер ул тик күлдең көнбайышында ғына һаҡланып ҡалған. Был ҡиммәтле балыҡты тотоуҙы ваҡытлыса тыйыу бик урынлы сара булыр ине.

...Әбйәлил төбәгендә тоҙло күлдәр ҙә бар. Уларҙа айырыуса табан балығы күп. Элек Мулдаҡ күле табан һәм ҡарабалыҡҡа бай булған. Ололарҙың һөйләүенә ҡарағанда, күл буйында тирмә ҡороп, йәйен-ҡышын төрлө ысулдар менән ба-

лыҡ тотоп, уны Яйыҡ буйындағы ауылдарҙа ағасҡа, дегеткә йә йәнлек тирелә-ренә алмаштырып йөрөүселәр ҙә булған. Мулдаҡ күлендә балыҡ күп булыуын раҫлаусы ҡарт балыҡсылар Әбйәлил төбәгендә әле лә бар. Тик улар: «Халыҡҡа үс итеп, бер бай ағыулап китте күлдең һыуын, шуға ла балыҡтар үлеп бөт-тө»,— тип аңлата.

## Йәнгел

Йәнгел йылғаһы Әбйәлил төбәгенең Күсем ауылынан алыҫ түгел Ҡырҡты тауының көнсығыш битенән башлана. Йылға ғәжәп үҙенсәлекле. Ул үҙ юлында Сыбаркүл һәм Мауыҙҙы күлдәре аша үтә. Был күлдәр йылғаны өс өлөшкә бүлә. Ата-олатайҙар, уларҙы айырым йылға тип иҫәпләп, һәр ҡайһыһына айырым исем биргәндәр.

Йәнгел йылғаһы сабаҡ, суртан, алабуға, ҡыҙылғанат, шамбы балыҡтарына бай. Ҡайһы бер йылдарҙа, ҡышҡы айҙарҙа, йылға һыуында һауа етешмәүҙән балыҡтарҙың күпләп тонсоҡҡан саҡтары ла булғылай. Ләкин йылғаның ба-лығы үрҙә әйтелгән күлдәрҙән тиҙ генә тулылана.

* * *

## Каспий диңгеҙе — Башҡортостанда

Башҡортостандың меңдәрсә йылға-инештәре Ағиҙел—Кама—Волга һәм Һаҡ-мар—Яйыҡ аша Каспий диңгеҙенә ҡоя.

Әгәр беҙ географик картаны алып ҡараһаҡ, Каспий диңгеҙенең Башҡорто-стандан бик алыҫта — көньяҡта ятҡанын күрәбеҙ. Ләкин ҡасандыр беҙҙең йыл-ғаларға диңгеҙгә ҡойоу өсөн оҙаҡ сәйәхәт итергә тура килмәгән. Сөнки ул ваҡытта Каспий диңгеҙенең төньяҡ сиге хәҙерге Башҡортостан тирәһендә ятҡан. Был хәл бынан бер ярым-ике миллион йылдар элек, геологтар телендә «аҡсағыл» тип йөрөтөлгән быуатта, булған.

Иҙел һәм Яйыҡ йылғаларының түбәнге өлөшөн диңгеҙ баҫҡан Каспий диң-геҙе аҡрынлап Кама, Һаҡмар һәм Ағиҙел буйҙарына килеп ингән. Ағиҙел буйын-дағы тау-уба итәктәрен меңәрләгән йылдар буйы диңгеҙ тулҡындары йыуған. Бында диңгеҙ балыҡтары йөҙгән, һыу төбөндә диңгеҙ ҡусҡарҙары үрсегән.

*Д. Бураҡаев*

## Ыҫлаусылар

Беҙҙең кибеттәребеҙҙә һатыла торған Каспий сельден, кета балығы һәм Аҡ диңгеҙ селедкаһын йәки башҡа диңгеҙҙәрҙең балыҡтарын һеҙ күп ваҡыт, улар урында уҡ шулай тәмле итеп ыҫланған рәүештә килә, тип уйлайһығыҙҙыр. Ләкин улай тип уйлау хата булыр ине. Сөнки бындай балыҡтар республика-быҙға ҡайһы диңгеҙҙән генә килтерелмәһендәр, нигеҙҙә, Өфө балыҡ ыҫлау заводында ыҫлана.

Тоҙланған килеш мискәләрҙә килтерелгән балыҡ завод лабораторияһында тикшерелә. Шунан һуң ғына уларҙы цехтарҙа эшкәртә башлайҙар. Барыһынан

элек тоҙло балыҡты ванналарға һалып һыу менән йыуҙыралар — тоҙһоҙландыралар һәм махсус мейестә киптергәндән һуң ғына ыҫлайҙар. Аҫылмалы юлдар буйлап элгестәренә бер тәртип менән балыҡтар теҙелгән бәләкәй генә вагондар ванна цехына бер-бер артлы сығалар ҙа киптереү мейесенә инеп китәләр. Ә икенсе мейестән шундай уҡ вагондарҙа ҡараһыу һарғылт төҫтәге яҡшы итеп ыҫланған балыҡтарҙы аҫылмалы юл буйлап сорттарға айырыу цехына алып китәләр.

## Таш эсендә — балыҡ һөлдәләре

Теге йәки был төбәктең йылғаларында, күлдәрендә ниндәй-ниндәй балыҡтар йәшәгәнен хәҙер әйтеүе ҡыйын түгел. Ә бынан ике йөҙ миллион йыл элек (!) Бүҙәк төбәге һыуҙарында нисәмә төрлө балыҡ йәшәгән — уныһын инде белеү мөмкин түгел һымаҡ. Ләкин фәнгә был да билдәле. Күптән үк үлеп бөткән йән эйәләрен һәм үҫемлектәрҙе өйрәнеүсе белгестәр (палеонтологтар), Пермь осоро тип аталған дәүерҙә беҙҙең яҡтарҙа йәшәгән балыҡтарҙың ун ете төрөн бынан илле йылдар элек үк асып, һәр береһенә исем ҡушҡайнылар.

Пермь дәүерендә Көнбайыш Башҡортостан йә һай ғына диңгеҙ төбө, йә диңгеҙ ҡултыҡтары, ҙур-ҙур күлдәр, йылғалар менән ҡапланған булған. Диңгеҙ, күл, йылға төптәрендә йыйылған мәте, ҡом аҡрынлап, миллион йылдар эсендә, ташҡа әйләнгән. Был таштарҙың эсендә боронғо балыҡтарҙың һөлдәләре һаҡланып ҡалған. Һөлдәләр үҙҙәре лә ташҡа әйләнеп бөткән тип әйтерлек, шулай ҙа асыҡ күренеп торалар, уларҙы хатта тау тоҡомонан айырып алырға мөмкин.

Бер ваҡыт көҙөн Башҡортостан геология идаралығының музейына Өфөләге бер заводтың эшсеһе килеп инде. Ул Бүҙәк төбәгенең Ҡаранай ауылы эргәһендә табылған ҡыҙыҡлы бер таш килтергәйне. Тау тоҡомо эсендә өс балыҡ һөлдәһе ята. Һөлдәләр, ташҡа әйләнһәләр ҙә, тулыһынса тиерлек һаҡланған. Балыҡтарҙың баш һөйәктәре, ҡылсыҡтары таш эсенә яртылаш батып, яртылаш өҫкә сығып торалар. Таш һынып сыҡҡансы балыҡ һөлдәләре тотош таш эсендә булғандар.

Геологтар был тау тоҡомоноң Пермь ҡатламдарынан булыуын, ҡомташ тип аталыуын, ә һөлдәләр — бынан ике йөҙ миллион йыл элек (!) йәшәгән балыҡтарҙыҡы булыуын әйттеләр.

Балыҡтар ун биш – егерме сантиметр оҙонлоҡта, ҙур башлы, яҫы ғына булғандар. Бындай төр балыҡтар фәнгә билдәлеме, юҡмы — уныһы хәҙергә асыҡланмаған әле.

Теге эшсе был балыҡтарҙы, тыуған яҡтарына ялға ҡайтҡанда, ауыл малайҙарынан ишетеп барып тапҡан. Таш киҫәген кирбес рәүешендә итеп бысҡы менән бысып алған. Бысҡы менән таш бысыу еңел булмағандыр инде, әлбиттә. Был хәл үҙе һоҡландырырлыҡ!

Боронғо балыҡтарҙың ҡалдыҡтары белгестәргә күптән һәм яҡшы билдәле булһа ла, был табыш шуның менән ҡыҙыҡлы: геология идаралығының музейында Пермь балыҡтарының был тиклем һаҡланған матур өлгөләре юҡ ине әле. Шуға күрә лә идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре эшсегә һәйбәт экспонат килтергәне өсөн ҙур рәхмәт әйттеләр. Хәҙер шул кешенең балыҡтары геология музейында республикабыҙҙың ҡаҙылма байлыҡтары, тау тоҡомдары, минералдары, ҡыҙыҡлы таштар өлгөләре араһында лайыҡлы урын алып тора. Бына шулай була икән ул — таш эсендә ҡыҙыҡлы палеонтологик Пермь балыҡтары...

## Ғәжәп балыҡтар донъяһында

Илле градуслы ҡайнар һыуҙа ниндәй йән эйәһе йөҙә алһын инде! Ә бындай эҫегә түҙә алған балыҡтар ҙа донъяла бар икән. Ҡытайҙың Юньнан провинцияһында ер аҫтынан сыҡҡан ҡайнар шишмәләрҙә балыҡтар рәхәтләнеп йәшәйҙәр. Улар үҙҙәре бик матур. Берәүҙәренең арҡаһы ҡыҙыл, ҡорһағы һары, икенселәренең, киреһенсә, арҡаһы һары, ҡорһағы ҡыҙыл, ҙурлыҡтары 15 сантиметр самаһы.

Яҡтыртыусы балыҡтар ҙа була. Был балыҡ башҡа яҡтыртыусы балыҡтарҙан айырыла. Уның башындағы прожекторы һунарға сыҡҡанда ғына яна. Прожектор өҫтөндә хатта «ҡармағы» ла бар.

Ғалимдар мәңге ҡараңғылыҡта йәшәүсе тағы бер ҡыҙыҡ балыҡты тапты. Уның күҙе ауыҙ өҫтөнә урынлашҡан. Был балыҡтың башы бүрәнкәгә оҡшаш. Бүрәнкәнең ҡапҡасы хеҙмәтен бик күп ваҡ тештәр менән ҡоралланған аҫҡы яңаҡ үтәй. Ошондай бер балыҡ менән ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәргәндәр. Океан өҫтөнә күтәрелгәндән һуң ул шартлаған. Был хәлде иң тәрән урындарҙа йәшәй торған балыҡтарҙың ҡалын һыу ҡатламының баҫымы аҫтында йәшәүҙәре менән аңлаталар ғалимдар. Баҫым кәмегән һайын улар өсөн ҡурҡыныс арта. Бөтөнләй кәмеһә, улар һәләк була. Балыҡ тәнендә һыу бик күп. Өҫкә сыҡҡас, баҫым юҡлыҡтан, балыҡ шартлай.

И, бахыр мәхлүк...

Ғалимдар диңгеҙ тәрәнлектәрен өйрәнеүҙе дауам итә. Яңыраҡ Тымыҡ океандың көнбайыш өлөшөндә урынлашҡан донъяла иң тәрән (11034 метр) булған урындан фәнгә билдәле булмаған тағы ла бер балыҡ табылды.

Ике мең метр тәрәнлектә табылған икенсе бер балыҡтың һаҡалы бар икән. Уның һаҡалы кәүҙәһенә ҡарағанда ун тапҡырға оҙон. Балыҡ өсөн һаҡалдың нимәгә кәрәк икәнен ғалимдар әлегә әйтә алмайҙар.

Ҡан урынына төҫһөҙ шыйыҡсаһы ғына булған Антарктика суртанын да тикшерҙеләр улар. Айғолағы уның аҡһыл һары төҫтә. Ҡанында гемоглобин да (ҡанға ҡыҙыл төҫ бирә торған матдә), эритроцит та (ҡыҙыл ҡан бөртөктәре) юҡ, ә беҙҙе, ҡыҙыл ҡанлы балыҡтарҙыҡына ҡарағанда, ун тапҡырға бәләкәй.

Элегерәк Тымыҡ океандың ҡояш нурҙары етмәгән иң тәрән ерендә бер ниндәй ҙә йән эйәһе юҡ, тип иҫәпләйҙәр ине. Курил—Камчатка уйынтыһын тикшереүсе ғалимдар 7578 метр тәрәнлектән ғәжәп бер балыҡ тоттолар. Быға тиклем фәнгә билдәле булмаған был йән эйәһенең тәңкәһе һәм үҙенә хас төҫө

лә юҡ. Ул йәшәгән тәрәнлектә яҡтылыҡтың булмауы уның күҙ төҙөлөшөнә лә тәьҫир иткән. Был балыҡты «псевдолипарис» тип атағандар.

## ЕР ЙЫЛЫНА

Тропик диңгеҙҙәрҙә һәм океандарҙа *осар балыҡ* бик күп. Бына ошо балыҡты һуңғы йылдарҙа уртаса йылылыҡтағы диңгеҙҙәрҙә лә күрәләр. Ә треска балығы быуаттар буйына йәшәгән урынынан 1800 километрға тиклем төньяҡҡа күтәрелә башлаған һәм Гренландия утрауының төньяҡ өлөшөнә тиклем барып еткән.

## ВӘТ ӘЙ, ДҮРТ КҮҘЛЕ!

Күҙегеҙҙе асып һыуға сумһағыҙ, һыу аҫты донъяһы тоноҡ күренер. Шуға нигеҙләнеп, һыуҙан сығарылған балыҡтар ҙа һауалағы күренештәрҙе тоноҡ күрә, тип раҫлай алабыҙ. Тик Мексикала һәм Көньяҡ Американың төньяҡ йылғаларында йәшәгән анаблес тигән балыҡҡа был ҡағылмай. Ул балыҡты халыҡ «дүрткүҙ балыҡ» ти ҙә ҡуя. Ул балыҡ ҡоро ерҙә лә һыуҙағы кеүек үк яҡшы күрә.

«Дүрткүҙ» тип йөрөтөлһә лә, был балыҡтарҙың да күҙе икәү генә. Уның күҙҙәренең мөгөҙ ҡатламы ике төрлө яры менән ҡапланған. Һыу төбөндә — аҫҡы яры аша, өҫкә ҡалҡһа, өҫкө «күҙлек» аша һәйбәт күрә.

Тупайып өҫкә сығып торған күҙҙәре ике төҫлө мөгөҙ һымаҡ яры менән һаҡлана. Был ярылар күҙ бәбәген икегә бүлә. Был балыҡ һыу аҫты донъяһын да, ер өҫтөн дә тигеҙ итеп асыҡ күрә. Күҙ бәбәгенең аҫҡы яғы ябай балыҡтарҙыҡы кеүек, өҫкө өлөшө аҫҡыһынан ҡалҡыуыраҡ кеүек һәм кеше күҙенә оҡшаш. Балыҡ серәкәй һәм башҡа бөжәктәрҙе тотор өсөн һыу өҫтөнә сығып тынып ҡала, кәрәк булһа, арыу ғына бейеклеккә лә һикереп ҡуя. Яр буйындараҡ йөҙөргә ярата, сөнки бында бөжәктәр ҙә күберәк һәм яр буйҙары ылымыҡтарға бай була. Уларҙың аҙығы шул ылымыҡ, һыу ҡайтҡанда ҡата башлаған ләм, мәте, төрлө ваҡ бөжәктәрҙән тора. Ғалимдар, анаблебстың күреү һәләте һауала һыуҙағынан да үткерерәктер, тип фараз итә, сөнки улар ерҙәге һәм һауалағы ваҡ ҡына бөжәктәрҙе лә бик алыҫтан күрә. Һауала оҙаҡ ҡына булырға тура килһә, әленән-әле башын һыуға тығып, күҙҙәрен сылатып ала.

Анаблестар көтөү-көтөү булып йылға ҡултыҡтарында, һайыраҡ урындарҙа йәшәй. Туҡланырға һыу өҫтөнә сыҡҡан саҡтарында дошмандары барлығын да онотмай. Ҡармаҡсымы, аусымы, балыҡсымы күренә ҡалһа, йылт итеп тиҙерәк һыу төбөнә ҡасыу яғын ҡарай.

***Рәшит Сабитов***

## Ышанмайһыңмы?

Барометр шторм булырын ике сәғәт самаһы алдан иҫкәртә. Ә диңгеҙ йәнлектәре штормдың яҡынлашыуын барометр теленә ҡарағанда күп сәғәттәргә алдан һиҙә. Балыҡтар тәрәнгә төшә, ә аҡсарлаҡтар борсола башлай. Дауылдың яҡынлашыуын улар нисек беләләр һуң? Уның сәбәбе шунда икән: диңгеҙҙә тулҡын күтәрелә башлағас, тулҡындарҙың һауаға ышҡылыуынан секундына 6—13 тирбәлеү йышлығындағы инфратауыш барлыҡҡа килә. Кеше бындай

йышлыҡтағы тауышты ишетеүҙән мәхрүм. Ә диңгеҙ йәнлектәре, балыҡтар һәм ҡоштар уны бик алыҫтан да ишетә ала. Ошо инфратауыш уларға дауылдың яҡынлашыуы тураһында алдан хәбәр итә лә инде.

Ә балыҡтарҙың һәм һыу хайуандарының һыуҙағы еҫте тойоу һәләтлеге! Был — һыу аҫтында радиобәйләнеш булдырырға мөмкин тигән һүҙ бит.

Балыҡтарҙағы һәм һыу йәнлектәрендәге инфратауыш локаторҙарына һоҡланырға мөмкин. Был уларға көндөҙ ҙә, төнөн дә, хатта болғансыҡ һыуҙа ла табыштарын тоторға мөмкинлек бирә.

Тәбиғәт ҡайһы бер балыҡтар өсөн локаторҙың бик ҡыҙыҡлы төрөн «уйлап сығарған». Был — электр локаторы. Уға Нил йылғаһында йәшәүсе мормирус тигән кескәй балыҡтар эйә. Уларҙың ҡойроҡ төбөндә махсус орган — юғары йышлыҡлы ток генераторы бар. Был генератор балыҡ тирәһендә электромагнит майҙанын хасил итә. Уға ниндәй ҙә булһа әйбер эләкһә, майҙан «боҙола» һәм мормирустың арҡаһындағы һиҙгер элемент быны шунда уҡ тойоп ала.

Бындай локатор үтә һиҙгер. Мормирусты йылым менән тотоп булмай. Дөм ҡараңғыла ла балыҡ кешенең аквариумға яҡынлашыуын һиҙә. Аквариум янында кеше сәсен тараһа, мормирус борсола башлай, сөнки сәсте тарағанда, бик аҙ ғына булһа ла, электр заряды барлыҡҡа килә һәм балыҡ быны һиҙә.

Ғалимдар фекеренсә, мормирус һәм уға оҡшашлы башҡа балыҡтар ниндәй ҙә булһа әйберҙең килеп эләгеүе арҡаһында һыуҙың электр үткәреү һәләтенең үҙгәреүен һиҙәләр. Ғалимдар, ошондай принципҡа нигеҙләнеп, һыу аҫтында радиобәйләнеш булдырыу өсөн ҡоролма, йәки әйтәйек, ерҙең тәрән ҡатламдарын өйрәнеү өсөн ҡоролма төҙөргә хыялланалар.

«Мин балыҡ кеүек телһеҙ булырмын йә ҡалдым» тигән һүҙгә ышанмағыҙ. Һуңғы йылдарҙа күп илдәрҙең ғалимдары, балыҡтарҙың барыһы ла һәм һәр ваҡытта ла телһеҙ түгел, тигән фекергә килде. Дөрөҫ, диңгеҙҙә йәшәүсе балыҡтарҙың тауыштарын бары тик махсус ҡоролма микрофон-гидрофон ярҙамында ғына ишетергә мөмкин.

Һәм бына ғалимдар күп кенә балыҡтарҙың тауыштарын ишетте. Ставрида тараҡ тештәре буйлап бармаҡ йөрөткәндә сыҡҡан тауышҡа оҡшаған ауаз сығара, ҡырпа һыҙғыра, ҡатран тигән акула мырылдай, ә диңгеҙ аттары бармаҡ шартлатҡан тауыш сығара.

Түңәрәк үгеҙ балыҡ зәғиф кенә баҡылдау, ырылдау йәки киҫкен шығырҙауҙы хәтерләткән тауыштар сығара.

Тәжрибәле, яҡшы күнеккән Көньяҡ Ҡытай диңгеҙе балыҡсылары балыҡтарҙың «һөйләшкәнен» тыңлай беләләр. Уларҙы «тыңлаусылар» тип атайҙар. Ундай тыңлаусы һәр балыҡ тотоу артелендә бар, ул алғы кәмәлә йөҙә, ваҡыт-ваҡыт башын һыуға тығып тыңлап ала. Ә инде балыҡ эркеүенең эҙенә төшкәс, ау һалырға кәрәк тигәнде аңлатып ишара бирә.

## КИТСЕ, ӘҘӘМ ЫШАНМАҪ...

Алыҫ илдәрҙең диңгеҙҙәрендә һәм йылғаларында, тропиктарҙа, алыҫ төньяҡта, океан тәрәнлектәрендә һәм джунгли йылғаларында ғәжәп ҡыҙыҡлы балыҡтар йәшәй.

Беҙҙең күлдәрҙең һәм йылғаларҙың, быуаларҙың һәм инештәрҙең балыҡ батшалығында ла шаҡтай ҡыҙыҡлы нәмәләр күрергә була.

Тәрәс һәм йыланбалыҡ 10 миллионлап ыуылдырыҡ, айбалыҡ — 300 миллион, суртан — 200 мең, һыла — 200—300 мең, шамбы — 1 миллионға яҡын ыуылдырыҡ сәсә.

* * *

Ҡылыс балыҡтың ауырлығы 660 килограмға, буйы биш метрға етә. Дошманына һөжүм иткәндә ул сәғәтенә 130 километр тиҙлек менән йөҙә, аҙыҡ эҙләп 800 метрғаса тәрәнлеккә сума. Уның ите бик тәмле.

* * *

Һикереү буйынса тарпон тигән балыҡ чемпион. Ул һыу өҫтөнән биш метр ярым бейеклеккә һикерә ала. Был балыҡтың үпкәһе бар, һыуҙан сыҡҡас, һауа менән һулай. Уның төйәге — Кариб диңгеҙе, Мексика ҡултығы һәм Куба ярҙары буйы. Тарпондарҙы нисек тотҡанын атаҡлы Америка яҙыусыһы Э. Хемингуэй үҙенең яҙмаларында тасуирлаған.

* * *

Шарбалыҡ та бик ҡыҙыҡлы. Ҡурҡыныс тыуған саҡта, йәки берәй йыртҡыс яҡын килә башлаһа, ул үҙ кәүҙәһенә ҡарағанда өс тапҡырға күберәк һыу йота һәм, бик ныҡ ҡабарып, сәнскеле ҙур шарға әүерелә.

* * *

Аляска һәм Чукотка һыуҙарында «даллия» тигән ғәжәп балыҡ үрсей. Һыу туңғанда был балыҡтар боҙға йәбешеп ҡаталар. Ә боҙ ирегәс, йәнә терелеп, йөҙөп китәләр.

Йыланбалыҡ еҫте һиҙгер эттән дә яҡшыраҡ һиҙә.

* * *

Кашалоттар (кит балығы һымаҡ диңгеҙ хайуандары) һыу аҫтында 160 минут (!) самаһы тора ала. Сумыр алдынан улар 60—70 тапҡыр тәрән итеп һулыш алалар, ә һыу төпкөлөнә 1 километрға тиклем төшә алалар икән.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

1938 йылдың 22 декабрендә Көньяҡ Африканың көнсығыш ярҙарына яҡын урында балыҡсыларға ғәжәп бер балыҡ эләгә. Оҙонлоғо 1,5 метр самаһы, ауырлығы 57,5 килограмм була уның. Балыҡты ғалимдарға күрһәтәләр. Ул бынан 50—60 миллион йыл элек үк үлеп бөткән суҡ ҡанатлы балыҡтар төркөмөнән булып сыға.

* * *

Диңгеҙ, шулай уҡ йылға ҡыҫалалары һәм һөлөктәрҙең йәше 20—30 йылдан ашмай.

* * *

Балыҡтар ҙа оҙон ғүмерле. Белгестәрҙең фекеренсә, суртандың ғүмере 70—80 йыл самаһы. Башҡа балыҡтарҙан ҡырпаның оҙаҡ йәшәүе билдәле. Уртаса уның ғүмере 100—150 йылдар самаһы, йәйен — 60, йыланбалыҡ — 55, алтынбалыҡ 30 йыл йәшәй.

* * *

Крокодил 700 көн, гөбөргәйел 500 көн, әрмәнде 400 көн, ҡорман балығы 150 көн ашамай йәшәй ала. Был осорҙа улар анабиоз хәлендә, йәғни йоҡола була, ә был осраҡта йәшәү өсөн энергия бик аҙ сарыф ителә.

## ҮЛМӘЙ ТОРҒАН ЙӨРӘК

Франция ғалимдары, тере балыҡтың — диңгеҙ этенең (ваҡ акулалар тоҡомонан) йөрәген алып ҡарағандар һәм уның йөрәге 230 сәғәт буйына тере хәлендә ҡалған.

Бөтә ҡалған организмдан айырып алынған йөрәк бер банкаға һалынған. Банкала шыйыҡлыҡ булған. Ләкин уның составы әйтелмәй. Был балыҡтың йөрәге сама менән баш бармаҡ тырнағы ҙурлығындай.

Банка эсендә тибеп ятҡан йөрәкте тәүлек әйләнәһендә бер туҡтауһыҙ киноаппараттар менән төшөргәндәр.

* * *

«Балыҡ-фонарь»ҙың башы фосфорлы була һәм үҙенең юлын яҡтырта, ә балыҡтың күҙҙәре юҡ.

## Шулай ҙа була икән!

Эҫе һыуҙа балыҡ йәшәй аламы? Юҡ, шунда уҡ тонсоға, тиерһегеҙ һәм ... хаталанырһығыҙ.

Ҡытайҙа көкөртлө күл бар. Уның температураһы 44—47 градус эҫелектә тора. Бер саҡ, бик көслө тулҡын ваҡытында, ошо күлдә ҙур йылғанан ингән бер-ике балыҡ тороп ҡала. Ваҡыт үтә. Улар яңы шартҡа бик тиҙ күнегә, үрсей, күбәйә. Һынамаҡ өсөн, шул балыҡтарҙың береһен һалҡын һыуға ебәреп ҡарайҙар. Ул шунда уҡ тонсоға.

Балыҡтар донъяһынан тағы ла бер мәҙәк миҫал. Губан (иренләс) тигән балыҡтарҙың инәһе ыуылдырыҡты һыуға сәсә. Ошо мәл ата балыҡтар ыуылдырыҡтарҙы ауыҙҙарына йыялар. Ыуылдырыҡтарҙан ваҡ балыҡтар тыуа һәм ата балыҡтарҙың ауыҙында йәшәй бирә. Үҫә төшкәс, ике-өс тиҫтә селбәрә сығып уйнай һәм йәнә ата балыҡтың ауыҙ ҡыуыšлығына инеп ята. Ә бит атаға еңел түгел. Балалар олоғайған һайын уның ауыҙ ҡыуышлығы ҙурая һәм килбәтһеҙ аҫылынып тора. Өҫтәүенә, нисәмә көндәр буйына ас йөрөргә тура килә. Бала хаҡына түҙә, күрәһең!

Тропик илдәрҙең ҡайһы бер йылғаларында куртус тигән балыҡтар үрсей. Уларҙың инә балыҡтары бала хаҡында бер төрлө лә хәстәрлек күрмәйҙәр.

Инә куртустар ике тәлгәш һымаҡ ыуылдырыҡ сәсәләр. Ата балыҡ шул тәлгәште һыртындағы элмәккә эләктерә лә, балалар ярылып сыҡҡансы өҫтөрәп йөрөтә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ата балыҡтарҙың һыртына был элмәк, улар енси яҡтан өлгөрөп еткәндә генә үҫә, ә инә балыҡтарҙа ундай элмәк ғөмүмән булмай.

Диңгеҙ атсыҡтары тигән ваҡ балыҡтарҙың тормошо тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ. Каспий, Балтик, Япон һәм Ҡара диңгеҙҙәрҙә улар йыш осрай. Ата балыҡтарҙың ҡорһағында махсус муҡсалары була. Улар шунда ыуылдырыҡ йөрөтә һәм бала үҫтерә. Шуныһы ғәжәп, муҡсаның диуарында ҡан тамырҙары күп. Ошо тамырҙарҙан шыйыҡса бүленеп сыға һәм һәр ыуылдырыҡты ҡаплап ала. Тәүге мәлдә селбәрәләр бары тик шул шыйыҡса менән генә туҡлана. Инде тамам нығынып еткәс кенә улар муҡсанан сығалар.

## ЙӘНӘ ҠЫҘЫҠЛЫ МӘҒЛҮМӘТТӘР

▲ Диңгеҙҙәрҙән һәм йылға-күлдәрҙән йыл да 59 миллион тоннаға яҡын балыҡ тотола.

▲ Ҡайһы бер ғалимдар, 6—7 мең метр һыу тәрәнлегендә бер ниндәй тереклектең булыуы мөмкин түгел, тип иҫбатлайҙар ине. Ә Рәсәй ғалимдары ете километрҙан да тәрәнлектә балыҡ булыуын билдәләнеләр. Ул әле иң тәрән ерҙә йәшәй торған балыҡтарҙан да түгел.

▲ Финляндияла спиннинг менән балыҡ тотоусылар өсөн махсус бассейн бар икән. Ләкин унда балыҡ тоторҙан алда бассейнға ингән өсөн һәм тотолған һәр балыҡ өсөн айырым-айырым аҡса түләргә кәрәк, тиҙәр. Ул илдең шәхси милеккә ҡоролған хужалыҡтарында ҡайһы бер ер хужалары балыҡты бушлай тоторға рөхсәт итә, ләкин тотолған бөтә балыҡты шул «изге күңелле» хужаға бирергә кәрәк була. Икенсе хужалар «киң» күңеллерәк икән: спиннинг менән балыҡ тотоусы тотҡан балығын хужанан баҙар хаҡы менән һатып ала икән.

▲ Тюлендәр һәм морждар, сикһеҙ күп балыҡтар, бигерәк тә һөмбаш балыҡтары, эскимостарға төп аҙыҡ булып тора.

Ер йөҙөндә бер генә халыҡ та, эскимостар һымаҡ, диңгеҙгә шул тиклем ныҡ бәйләнмәгән.

▲ Бынан бер нисә тиҫтә йыл элек Таиландтың көньяғында, Һинд океаны ярҙары буйындағы джунглиҙа, Чоу Лэй исемле ҡәбилә тапҡандар. Чоу Лэй «диңгеҙ кешеләре» тигәнде аңлата. Алдан уҡ әйтеп ҡуйайыҡ, был ҡәбилә кешеләре һыу аҫтында йәшәмәй. Тик уларҙың бөтә тормошо һәм ғәҙәттәре диңгеҙ менән ныҡ бәйләнгән. Тап шуға күрә уларҙы «диңгеҙ кешеләре» тип атағандар ҙа инде. Бынан йөҙҙәрсә йыл элек нисек булһа, ҡәбилә кешеләре әле лә шундай примитив ысулдар менән диңгеҙҙән аҙыҡ таба. «Диңгеҙ кешеләре» өсөн балыҡ аҙыҡ та, шул уҡ ваҡытта аҡса булып та йөрөй икән.

## Ә БЫНЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

Ҡайһы бер балыҡтар еҫкә бик һиҙгер була. Шундай ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәреп ҡарағандар: ваҡ ҡына йылан балыҡтарын аквариумға һалғандар ҙа уға бер нисә урындан торба үткәргәндәр. Торбаларҙың береһе аша аға торған һыуға

хуш еҫле әйбер һалғандар. Бер аҙ ваҡыттан һуң шул уҡ торба аша аҙыҡ биргәндәр. Балыҡтарҙа шартлы рефлекс тыуған. «Татлы еҫле» һыу һәр төрлө торба аша ебәрелһә лә, балыҡтар тәү башлап татлы еҫ килгән торба тирәһенә йыйылған. Балыҡтар шул тиклем еҫ һиҙеүсән була, хатта иң яҡшы һунарсы эт тә был тәңгәлдә улар менән тиңләшә алмай!

Ғалимдар ошондай фекергә килә: ыуылдырыҡ сәсеү урынына меңдәрсә километр алыҫлыҡҡа киткән балыҡтарға үҙҙәренә кире ҡайтыу юлын табыу ҙа тап ана шул еҫ һиҙеүгә зирәк булыуҙары ярҙам итәлер.

* * *

Уҡбаштың үҫеп етеүенә 8—10, ә мәрсен балыҡтарына — 12—15 йыл кәрәк.

* * *

Кит балығы 300—400 йәшкә тиклем йәшәй. Шулай уҡ ҡайһы бер балыҡтар ҙа оҙон ғүмерле була: карп балығы — 150 йыл, йәйен — 100 йыл самаһы йәшәй.

* * *

Тәбиғи шарттарҙа ыуылдырыҡ һәм селбәрәләрҙең 0,3—0,03 проценты ғына тере ҡала: уларҙың бер өлөшө һәләк була, бер өлөшөн башҡа хайуандар ашай. Балыҡ үрсетеү заводтарында ыуылдырыҡтың тере ҡалыуы йөҙҙәрсә тапҡырға арта һәм 10%-ҡа етә.

* * *

Дания, Норвегия, Шотландия кеүек илдәрҙә ямғыр менән бергә ваҡ балыҡтар, тәлмәрйендәр яуа. Беҙҙең илебеҙҙә лә быңдай хәл булғылай. 1933 йылда Алыҫ Көнсығыштың Тымыҡ океандан 510 километр алыҫлыҡта урынлашҡан Кавалер ауылы районында күктән диңгеҙ медузаһы яуҙы. 1949 йылдың йәйендә Яңы Зеландияның бер төбәгендә ергә балыҡ һибелде.

Был күренештәр тәбиғи. Атмосферала йыш ҡына ел өйөрмәләре барлыҡҡа килә. Улар ҙур тиҙлек менән (секундына 100 метрға тиклем) әйләнә. Ошондай өйөрмә һыу йәки ер өҫтөнән үткәндә балыҡ, медуза, тәлмәрйендәрҙе һауаға күтәрә. Өйөрмәнең көсө бөткәс, улар ергә яуа.

* * *

Ер йөҙөндә 28 мең төр балыҡ йәшәй.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

Һуңғы 25 йыл эсендә балыҡ тотоу күләме шул тиклем артты, ул бынан әлгәре өс мең йыл буйына тотолғандан ашып китте. Был, бөтәһенән элек, диңгеҙҙә һәм океанда балыҡ тотоуҙы арттырыу иҫәбенә эшләнде.

Әгәр Рәсәйҙә 1913 йылда 10,5 млн. центнер балыҡ тотолған булһа, 1961 йылда 37 млн центнерға етте. Шул балыҡтың тик 8,1 генә илдең эсендәге һыу ятҡылыҡтарында тотолған.

* * *

Донъялағы бөтә илдәрҙә йыл һайын 30 миллион тонна балыҡ тотола. Ер шарындағы һәр кешегә сама менән ун килограмм балыҡ тура килә.

## БЫЛАР ҠЫҘЫҠЛЫ

Шотландия балыҡсыһы Генри Дженкинс 169 йыл йәшәгән (1500 йылда Йорк графлығында тыуған). Англияның суд эштәренән күренеүенсә, 1665 йылда ул ошонан 140 йыл элек булған эш буйынса шаһит итеп судҡа саҡыртылған.

Ҡағиҙә булараҡ, оҙаҡ йәшәүселәр бөтәһе лә ғүмерҙәренең һуңғы көндәренәсә эшләгәндәр. Шуның өсөн актив хеҙмәт эшмәкәрлеге, дөрөҫ туҡланыу (иттең һәм балыҡтың һимеҙ булмаған төрҙәре, аш тоҙон сикләү һ. б.), туризм, балыҡ тотоу менән регуляр шөғөлләнеү кеше ғүмерен оҙонайта тиергә мөмкин. Былар барыһы ла ҡартайыуға ҡаршылыҡ тыуҙыра.

Охот диңгеҙе яры буйында 1951 йылда колхозсы эвен К. Г. Попов балыҡ тотоп, һунарсылыҡ менән шөғөлләнеп йөрөнө. Был саҡта уға 111 йәш ине.

## **Лампа ярҙамында**

Балыҡты лампочкалар ярҙамында ла тоталар. Эйе, эйе, аптырап ҡалмағыҙ. Ғалимдар ҡайһы бер балыҡтарҙың утҡа килеүенә иғтибар иткән. Балыҡсылар был һыу мәхлүктәренең үҙенсәлегенән файҙаланырға булды. Төндә судноның бортынан тышҡа насос һәм оҙон торба менән герметик колпакта булған лампочка төшөрәләр. Яҡтылыҡ менән әүрәтелгән ваҡ балыҡ торба аша һурҙырып алына.

Сайра тигән балыҡты (ул беҙҙең Алыҫ Көнсығыштағы диңгеҙҙәрҙә йәшәй) тағы ла ҡыҙығыраҡ тоталар. Судноның борты буйлап төҫлө лампочкаларҙы ҡабыҙалар. Улар тирәһендә күп балыҡ йыйылғас, ҡыҙыл лампочканы яндыралар, ә зәңгәрҙәрен һүндерәләр. Барса балыҡ шунда уҡ ҡыҙыл утҡа бара һәм алдан уҡ аҫтан килтереп ҡуйылған йәтмә менән эләктереп алына ла палубаға күтәреп ауҙарыла. Бына ошолай сайра, килька-фәлән беҙҙең өҫтәлдәребеҙгә юл таба ла инде, хөрмәтле уҡыусылар!

## ЕР АҪТЫНДА ЛА ТОТОЛА, ИМЕШ

Был хәл Ҡаҙағстандағы Петропавловск ҡалаһының Трудовой урамында булды. Һыу үткәргес линияһын ремонтлағанда бер экскаваторсы, ике метр тәрәнлектә ер ҡаҙый ине. Нәүбәттәге сүмес тупраҡты сығарғанда, ул траншея төбөндәге мәтелә табан балыҡтары һикерешкәнен күреп шаҡ ҡата.

Бынан алты йыл элек ошо урында соҡор ҡаҙылғанлығын ерле халыҡ хәтергә төшөрә. Соҡорға ер аҫты һәм ямғыр һыуҙары тулған була. Табан балыҡ-

тарын соҡорға кемдер ташлаған, күрәһең. Һуңынан соҡорҙо күмгәндәр, ә күршеләге һыу үткәргес линияһынан һыу ағып ятҡан. Шул арҡала табан балығы ер аҫтында йәшәй биргән...

## КАРАПҠА ҺӨЖҮМ

Ҡылыс балыҡ. Океандың серле был йән эйәһенең әлегә аңлатып булмай торған күп кенә сәйер яҡтары бар. Шундай бер ваҡиға булған: был балыҡ, елкәнле судноға һөжүм итеп, уны өс урындан тишкән. Икенсе бер тапҡыр ул танкерға һөжүм яһаған. Йыртҡыс балыҡ карaптың металл төбөн тишкән, ләкин был юлы үҙенең ҡылысын тартып сығара алмаған һәм шунан һуң команда уның үҙен тотоп алған. Балыҡтың оҙонлоғо 7 метр самаһы, ә ауырлығы 700 килограмға яҡын булған.

Уҫал ҡылығына ҡарамаҫтан, ул бик ваҡ балыҡтар менән туҡлана. Балыҡ көтөүенә барып сыға ла, һыуҙан һикереп, балыҡтар өҫтөнә ҡолап төшә, уларҙы шаңҡыта һәм ашай.

## Бик ғәжәп күл

Кола ярымутрауы эргәһендә ҙур булмаған күл бар. Могильное исемендәге был күл донъялағы иң ғәжәп күлдәрҙең береһе.

17 метр ғына тәрәнлектәге Могильное күлен биш ҡатлы тип атап йөрөтәләр, сөнки уның һыуы биш төрлө ҡатламдан тора. Иң аҫҡы ҡаттағы һыуҙа кислородһыҙ йәшәй алған бактерияларҙан башҡа бер төрлө лә йән эйәһе юҡ. Бында тик ағыулы көкөрт — водород газы ғына.

Икенсе ҡаттың һыуы матур һандал төҫтә. Был төҫтө һыуға ундағы күп төрлө бактериялар бирә. Һәм шул уҡ бактериялар ағыулы көкөрт-водород газын күлдең өҫкө ҡатламына үткәрмәй. Өсөнсө ҡаттағы һыуҙа диңгеҙ йондоҙҙары, диңгеҙ алабуғаһы, тәрәс һәм башҡа күп төрлө балыҡтар йәшәй. Улар аҫҡа төшә алмай, сөнки ағыулы газдан үлә, өптәге һыу ҙа улар өсөн яраҡһыҙ.

Дүртенсе ҡатта тик тоҙло һыуҙа йәшәй алған хайуандар ғына осрай. Ә күлдең иң өҫкө ҡатында һыу бөтөнләй сөсө. Бында инде йылғаларҙа һәм сөсө күлдәрҙә осраған күп төрлө хайуандар, балыҡтар бар.

## Кем сәлдергән?

Бер ваҡыт бер сауҙагәр голланд балыҡсыларынан 5 мең тонна селедка һатып алған да, уны карапҡа тейәп, Амстердамдан Багдадҡа оҙатҡан. Был йөктө Багдадта бушатҡанда пружиналы үлсәүҙә үлсәп ҡараһалар, 1,5 тонна балыҡ етмәгән. Караптың капитаны балыҡты урлауҙа ғәйепләнгән. Ләкин капитан үҙе лә аптырашта ҡалған. Балыҡ ҡайҙа булған һуң? Сөнки мискәләр ныҡлап ябылған, уларҙың һаны ла кәмемәгән.

Сер нимәлә һуң? Сауҙагәрҙәрҙең балығын кем урлаған?

Был осраҡта беҙҙең Ер ғәйепле. Төрлө киңлектәрҙә ул есемдәрҙе үҙенә төрлө көс менән тарта. Төньяҡта был көс, көньяҡҡа ҡарағанда, күберәк. Шуға күрә Амстердамда 5 мең тонна булған балыҡ Багдадта 1,5 тоннаға кәмерәк тартҡан.

## КӘМӘНЕ ТИШӘ...

Ҡылыс балыҡ. Урта диңгеҙҙә, Ҡара диңгеҙҙә һәм Атлантик океанда ҡылыс балыҡ йәшәй. Уның оҙонлоғо 5—9 метрға, ауырлығы 2000 кг-ға етә.

* * *

Диңгеҙҙә электрҙы йыртҡыстарҙан һаҡланыу һәм вағыраҡ хайуандарға һөжүм итеү өсөн ҡуллана торған йән эйәләре бар. Мәҫәлән, тропик диңгеҙҙәрҙә электр скаттары йәшәй. Уларҙың оҙонлоғо 2 метрға тиклем етә. Был хайуандарҙың башының ике яғында — тире аҫтында махсус электр биҙҙәре бар. Был биҙҙәр үҙенсәлекле электр аккумуляторҙары һымаҡ.

Электр биҙҙәрендәге токтың көсөргәнеше һәм көсө ярайһы уҡ ҙур. Скаттар 300 вольтҡа тиклем көсөргәнешле һәм 7—8 ампер көсөндәге ток бирә.

* * *

Һинд океанының көнбайыш өлөшөндә урынлашҡан ҙур Ғәрәп диңгеҙендә кислород режимының боҙолоуы арҡаһында бер юлы ғына ла 20 миллион центнер самаһы балыҡ һәләк булды, үлеп һыу өҫтөнә ҡалҡҡан балыҡтар унарлаған, меңәрләгән квадрат километр майҙанды биләне.

* * *

Әгәр ҙә һыуҙа кислород 17 проценттан да кәм булһа, унда һыу үҫемлектәре лә, балыҡтар ҙа йәшәй алмай.

## ЕР АҪТЫНДА... БАЛЫҠ

Сахара сүлдәре үҙәгендә артезиан ҡоҙоҡтарын быраулаған ваҡытта ғалимдар ғәжәп ҡыҙыҡ күренешкә тап булды. Бырау йөҙҙәрсә метр тәрәнлектәге һыу ҡатламына еткәс, скважинанан ҡеүәтле фонтан бәрә башланы. Һыу менән бергә ер өҫтөнә тере балыҡтар ҙа сыҡты. Был балыҡтар Сахара сигендәге күлдәрҙә йәшәй торған балыҡтарҙан бер нәмә менән дә айырылмай, тип әйтерлек. Хәҙер Сахараның был урындағы ер аҫты һыу ятҡылыҡтары менән бынан йөҙҙәрсә километр алыҫта ятҡан күлдәр араһында ниндәйҙер бәйләнеш булған йәки барҙыр, тип уйлайһы ғына ҡала.

## БЫЛАР ҘА ҠЫҘЫҠЛЫ

Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: балыҡтар һыуҙа ниндәй тиҙлек менән йөҙә? Сөсө һыу ятҡылығында иң шәп йөҙгән балыҡ — бағры. Ул сәғәтенә 35 км тиҙлек менән йөҙә.

Суртан менән ҡайһы бер пароход ярыша ала — ул сәғәтенә 23 км араны үтә.

Мыйыҡлы балыҡ сәғәтенә — 19, ә карп менән ҡара балыҡ («яй йөҙөүсән» балыҡтар) 13 км тиҙлектә йөҙә.

Атлантикала макрель тигән бер балыҡ бар. Ул бер минут та ял итмәй, ғүмер буйына хәрәкәт итә. Макрель ауға эләкһә, хатта һыу эсендә булһа ла, шунда уҡ

үлә. Был шуның менән аңлатыла, был балыҡ һыуҙы айғолаҡтары аша бик ҙур тиҙлек менән үткәргәндә генә үҙен кислород менән тәьмин итә ала. Ә хәрәкәт итмәһә, кислородһыҙ ҡала һәм үлә.

## Файҙалы «дракун»

Беринг диңгеҙендә ҙур тәрәнлектәрҙә балыҡ тотоусы балыҡсыларҙың ҡоралдарына макрурустар йыш ҡына эләгә. Уларҙы оҙон ҡойроҡло балыҡтар тип тә атап йөрөтәләр. Ҙур тәрәнлектә йәшәүсе был балыҡтар боронғо легендаларҙа һөйләнә торған «дракундарға» оҡшаған.

Макрурустың бауыры, витаминдарға бай булғанлыҡтан, юғары баһалана. Балыҡтың ыуылдырығы ла ашарға яраҡлы. Макрурустың итен киптереп тарттыралар.

Беринг диңгеҙендә «дракунды» аулау башлағаны бирле бер нисә йыл үтеп китте лә инде.

## АКУЛАНЫҢ ИҢ УҪАЛ ДОШМАНЫ

Диодон макулатус исемле бәләкәй генә балыҡ йыртҡыс акуланың иң уҫал дошманы булып һанала, сөнки уның бик үткер энәһе бар. Диодон макулатус Көньяҡ Америка диңгеҙендә йәшәй. Акула ошо балыҡты аңғармаҫтан йотоп ебәрә. Ләкин диодон макулатус үлмәй, ә акуланың ашҡаҙанына энәһе менән ҡаҙала ла быраулай башлай, һәм акуланың ҡорһағын тишеп сығып, үҙ юлына китә. Акула иһә шунда уҡ үлә.

* * *

Ғилми тикшеренеү эштәре алып барыусы «Витязь» судноһының экспедиция ваҡытында океан төбөнән иҫ киткес ҙур акула тештәре табылды. Был табыш ҡасандыр бер ваҡыт Тымыҡ океанда 25—35 метр оҙонлоҡтағы ғәжәп ҙур акулалар йәшәгәнлеге тураһында һөйләй. Ул акулалар хәҙергеләренә ҡарағанда ике-өс тапҡыр ҙурыраҡ булған.

## ИҢ ЭРЕҺЕ...

Баренц диңгеҙендә «Вайгач» балыҡ тотоу траулеры диңгеҙселәре бик ҙур палтус балығы тоттолар, тип хәбәр итте Мурманскиҙағы ИТАР ТАСС хәбәрсеһе. Балыҡты үлсәп ҡарағас, күпте күргән балыҡсылар ҙа ғәжәпкә ҡалғандар. Ул сирек тонна тартҡан.

«Вайгач» йылымына ошондай ҙур палтус эләккән. Беренсеһен уның диңгеҙселәре Норвегия диңгеҙендә тотҡайнылар. Ләкин ул 50 килограмға еңелерәк булған.

## ҺИКЕРЕҮСЕ БАЛЫҠ

Ағас башына үрмәләп менгән балыҡты күҙ алдына килтереүе ҡыйын, әлбиттә. Әммә диңгеҙ балыҡтарының шундай төрҙәре лә бар икән. Көнбайыш Африка ярҙарында осраған бындай балыҡтар офтальмус йәки ләмле һикер-

гестәр тип атала. Улар ҙур түгел — бары тик 15 сантиметр оҙонлоҡта ғына була.

Бүтән балыҡтарҙан айырылып торған, үҙенсә айғолаҡлы был балыҡтар, һауа менән тын алып, үҙҙәрен ҡорола ла диңгеҙҙәге кеүек үк тоя. Улар, ярға һикереп сығып, бөжәктәр менән аҙыҡлана икән. Үҙҙәренә ҡурҡыныс тыуа ҡалһа, был балыҡтар шунда уҡ ләмгә күмелә йәки күкрәк ҡанаттары менән иң яҡындағы ағас башына үрмәләп менә.

## ИҢ ОҘОН ИСЕМ

Америка Ҡушма Штаттарында бер күл бар. Уның исеме, моғайын, донъяла иң оҙон исемдер. Уны ҡапылда әйтермен тип уйлама ла. «Чароггогогогоманча-учгагаггчаубуэгунгамауи». Америка индеецтары телендә был: «балыҡ тотоу һәм ҡәбиләләр кәңәшмәһен үткәреү өсөн нейтраль биләмә» тигәнде аңлата.

* * *

Бер көн Дания балыҡсыһы Кристиан Йенсендың ауына ауырлығы 1 тонна тартҡан 5 метрлы акула эләгә. Балыҡсының кәмәһен йыртҡыс ике сәғәт буйы диңгеҙҙә һөйрәп йөрөтә. Тик иптәштәре ярҙамы менән генә Йенсен акуланы ярға сығара.

* * *

Һыу үҫемлектәре генә ашап йәшәгән аҡ амур балығы бик ҡомһоҙ. 4—5 амур балығы бер һыйыр ашаған саҡлы үлән ашай. Аҡ амур балығының ауырлығы 30 килограмға етә.

## ҠОРО ЕРҘӘ

Һиндостанда ағасҡа үрмәләүсе һәм аҙналар буйына ҡоро ерҙә йәшәүсе балыҡтар бар.

Һөмбаш балыҡ шарлауыҡтан һикереп сыға. Ул 3 метрҙан артыҡ бейеклеккә һикерә ала.

Тымыҡ океанда һыу һиптереүсе балыҡ йәшәй. Ул һиптергән һыу фонтаны биш метр киңлеккә йәйелә.

## ТЕРЕ ҠАРМАҠ

Лоцман һәм йәбешкәк балыҡтар акулаларҙың юлдаштары. Бигерәк тә йәбешкәк балыҡ ҡыҙыҡлы. Уның алғы һырт йөҙгөсө оҙонса түңәрәк һурғысҡа әүерелгән. Ул һурғыс һуҙыла һәм балыҡ йөҙөп йөрөй торған әйберҙәргә, эре балыҡтарға, бүрәнәгә, караптың аҫҡы өлөшөнә бик ныҡ йәбешә. Йәбешкәк балыҡ акуланан ҡалған йәки караптан ташланған аҙыҡты эләктереү өсөн генә ысҡына. Ана шул балыҡ урта һәм тропик бүлкәттәрҙең йылы диңгеҙҙәрендә йәшәй, илебеҙҙә иһә Камчатка ярҙарында осрай. Балыҡсылар уны тере ҡармаҡ итеп файҙаланалар: балыҡтың ҡойроғона оло бау тағалар ҙа диңгеҙ ташбаҡалары йәки эре балыҡтар йыйылған урынға алыҫ түгел генә диңгеҙгә ташлайҙар. Йәбешкәк балыҡ үҙенең табышына бик ныҡ йәбешә, ә балыҡсы уны һаҡ ҡына кәмәһенә табан тарта.

* * *

Франциянын Биллье портынан алыç түгел океандан бер ташбаҡа тоталар. Унын ауырлығы 820 килограмм була, буйы биш метр ярымдан аша. Был — донъяла иң ҙур ташбаҡа.

* * *

Маска һәм көпшә менән тәрәнлектә сумыуҙа Италия егете Раймонд Букер 1963 йылда донъя рекордын ҡуя. Ул 39 метр тәрәнлеккә сума.



## Беҙҙең илдәге мәҙәктәр

### ШУНДАЙ БАЛЫҠ БАР

*Голомянка* — Байҡал күлендә генә осрай торған бик үҙенсәлекле балыҡ. Был ғәжәп балыҡтың алһыу төҫлө тәнендә тәңкәләр булмай (шуға уны «голомянка» (яланғасҡай) тигәндәр). Ул гел майҙан тора һәм быяла кеүек үтә күренмәле. Шуның өсөн дә был балыҡ аша хатта гәзит уҡырға мөмкин.

Алабуға һымаҡтар төрөнә ингән был балыҡтың буйы 19 сантиметр, ауырлығы 50 грамм самаһы. Ул 500 метрҙан да тәрәндә йәшәй, төндә генә күл өҫтөнә күтәрелә.

Бер ваҡыт балыҡ белгестәре донъялағы иң тәрән Байҡал күлендә балыҡтарҙың йыйылыу урындарын эҙләгән. Улар махсус йәтмәне 400 метр тәрәнлеккә һалған. Йәтмәгә бик һирәк осрай торған голомянка балыҡтары ла эләккән. Байҡалда был балыҡтың ике төрө йәшәй икән. Улар ыуылдырыҡ сәсмәй, ваҡ ҡына тере балыҡтар тыуҙыра. Яҙ көнө, Байҡалда бөтә башҡа балыҡтар ыуылдырыҡ сәскәндә, голомянканың селбәрәләре тыуа.

Улар донъяға килгәс тә үҙҙәренә үҙҙәре аҙыҡ эҙләп таба башлай. Уларҙың да бөтә тәне тиерлек үтә күренеүсән төҫһөҙ майҙан тора. Ҡайһы ваҡыттарҙа көслө ел был балыҡтарҙы яр ситенә ташлай. Улар шунда ҡояш нурында бөтөнләй ирей ҙә ҡуя.

Голомянка Байҡал нерпаһы өсөн төп аҙыҡтарҙан һанала. Ҡайһы саҡ уның селбәрәләрен данлы омуль дә ашай.

## Яһалма ысул менән

Владимир Павлович Врасский Рәсәйҙә фән нигеҙендә балыҡ үрсетеү эшенә нигеҙ һалған күренекле ғалим булған. Сәнәғәт өсөн балыҡ үрсетеү өлкәһендә В. П. Врасский асҡан ғилми ысулдары оҙаҡламай сит илдәрҙә лә ҡулланыла башлаған.

Новгород губернаһының алпауыты, белеме яғынан юрист В. П. Врасский балыҡ ыуылдырығынан яһалма рәүештә балыҡ үрсетеү менән ҡыҙыҡһына баш-

лаған. Ул һөмбаш, сыбар балыҡ (бағры), алабалыҡ селбәрәләрен күпләп үрсетеүҙе һәм бикре нәҫеленән булған йылы яҡ балыҡтарын төньяҡта үрсетеп, Новгород губернаһындағы йылғаларҙа һәм күлдәрҙә ошо ҡиммәтле балыҡтарҙы үрсетеүҙе үҙенә маҡсат итеп ҡуйған. Ул замандарҙа балыҡ үрсетеү буйынса бер төрлө лә китап булмағанлыҡтан, В. П. Врасский 1854 йылда ыуылдырыҡтан нисек балыҡ яралыуын үҙе тәжрибә яһап өйрәнә башлаған. Ул үҙ алдына тәжрибә яһап өйрәнеү нигеҙендә, һис бер ярҙамсыһыҙ, яһалма түлләндерелгән ыуылдырыҡтан таҙа селбәрәләр сығарыу ысулын эшләп сығарған. Ошо яңы ысулды ҡулланып, был ғалим 1857 йылда Никольский ауылы аша аға торған Пестовка йылғаһына балыҡ үрсетеү заводын һалған һәм уның эргәһендә быуа хужалығы ойоштороған. Был Рәсәйҙә балыҡ үрсетеүсе тәүге завод булған. Дөрөҫөрәге, Рәсәйҙә генә түгел, бөтә донъяла балыҡ үрсетеүсе беренсе кәсепхана булған.

В. П. Врасский ыуылдырыҡты ҡоро юл менән түлләндереү ысулдарын уйлап сығарған. Был ысул аҙаҡтан «Рус ысулы» тигән исем менән сит илдәрҙә лә ҡулланыла башлаған.

В. П. Врасский балыҡ түлдәренең яралыу тиҙлеге һыуҙың йылылыҡ-һыуыҡлығына бәйләнгән булыуын асыҡлаған. Температураны түбәнәйтеү юлы менән түлдән селбәрә яралыу ваҡытын кисектерергә мөмкин икәнлеген анығлаған. Ә балыҡ үрсетеү тәжрибәһендә уның әһәмиәте бик ҙур.

Врасский шулай уҡ ыуылдырыҡты һәм балыҡ ағын һыуһыҙ, түбән температурала ауыҙы томаланған банкаларға һалып һаҡларға һәм ситкә алып китергә мөмкин булыуын да асыҡлаған. Бындай шарттарҙа ыуылдырыҡтан да, балыҡ ағынан да селбәрә үрсетеү һәләте бер нисә көн буйына юғалмай икән. Алыҫ көньяҡтағы ҡиммәтле балыҡ ыуылдырыҡтарын төньяҡҡа күсереп үрсетеүҙә уның практик әһәмиәте бик ҙур.

Ғалим шулай уҡ үлгән балыҡтарҙың да ыуылдырыҡтарынан, әгәр уларҙы һыуыҡта тотһаң, селбәрә яралырға мөмкин икәнлеген асҡан. В. П. Врасский һөмбаш балығын һәм башҡа төрлө балыҡтарҙы яһалма аталандырыу юлын тапҡан.

1865 йылда Никольскийҙағы балыҡ үрсетеү заводы ҡаҙна ҡарамағына күсә һәм Рәсәйҙә балыҡ үрсетеү буйынса ғилми-тикшеренеү эштәренең үҙәгенә әйләнә. Ул уйлап тапҡан ыуылдырыҡты ҡоро юл менән түлләндереү ысулы хәҙер «Врасский ысулы» исеме менән бөтә донъяла билдәле.

## ДОНБАССТА ҮРСЕЙ

Славянск (Донецк өлкәһе) тирәһендәге «Донрыбкомбинат»ына ҡараған ялан быуаларында бағыр балығы үрсетелә. Константиновка төбәгенең бер алдынғы колхозында бағыр балығы үрсетеү хужалығы 60-сы йылдарҙың аҙағында төҙөлдө. Ул йылына ике йөҙ центнер балыҡ етештереүгә иҫәпләнгән.

## **Бикреләр өсөн ем**

Бынан бер нисә тиҫтә йыл элек Голландия крабтары Балтик диңгеҙенән Каспий диңгеҙенә килтерелгәйне. Улар бында күпләп үрсеп китте, шуға күрә балыҡтар өсөн ем запасы ла күбәйҙе.

Каспий диңгеҙендә, бынан ярты быуат элек, Ҡара диңгеҙҙән килтерелгән нереис селәүсендәре лә яҡшы үрсене. Балыҡтар өсөн ем хеҙмәтен үтәүсе йән [illegible]әләрен бүтән климатҡа яраҡлаштырыу тәжрибәһе көткәндән ҙурыраҡ һөҙөмтә бирҙе. Нереис селәүсенен бикре һәм башҡа промысла балыҡтары ла яратып ашай.

## ЫСЫН ЫУЫЛДЫРЫҠ ТҮГЕЛ

Һыуыҡтыстан ыуылдырыҡ һалынған быяла һауытты сығарҙылар. Тик был ыуылдырыҡ ҡырпа йәки мәрсен, кета йәки уҡбаш балыҡтарынан алынмаған. Ул ошонда, лабораторияла, диңгеҙ хайуандары менән уртаҡ бер нәмәһе лә булмаған сималдан эшләнгән. Был ыуылдырыҡтарҙы полимерҙар физикаһы лабораторияһының хеҙмәткәрҙәре синтезлап яһаған.

Өҫтәлгә балыҡ эсенән алынған ыуылдырыҡ һалынған һауыт ҡуйыла. Ләкин кеше, ғәҙәттә, тәбиғи ыуылдырыҡты тышҡы күренеше менән дә, тәме менән дә яһалманан һис тә айыра алмай.

Ыуылдырыҡ кеүек затлы аҙыҡ башлыса беҙҙең илдә генә етештерелә. Балыҡсыларҙың эше миҙгелле була, һәр саҡ балыҡ бер күләмдә тотолмай, шулай уҡ ыуылдырыҡты һаҡлау ҙа еңел түгел. Шуға күрә лә ул бик ҡиммәт.

Күп илдәрҙә уны алмаштырырлыҡ ашамлыҡ эҙләп ҡаранылар. Шулар араһында Японияла яһалған ыуылдырыҡ иң яҡшыһы булып иҫәпләнә. Япония белгестәре һөмбаш балыҡтарын ваҡ ҡына итеп турайҙар. Ләкин ошо фарш менән тәбиғи ыуылдырыҡ араһында айырма бик ҙур.

Ә беҙҙең химик ыуылдырыҡ иһә тәбиғи ыуылдырыҡтан бөтөнләй айырылғыһыҙ. Ихтимал, микроскоп аша ҡарағанда ғына уларҙы айырырға мөмкиндер. Оҡшашлыҡ тышҡы ҡиәфәттә генә түгел, химик анализ иң яҡшы бөртөклө ыуылдырыҡтағы бөтә матдәләрҙең дә яһалма ыуылдырыҡта булыуын күрһәтә. Яһалма ыуылдырыҡтың, моғайын, бер генә етешһеҙлеге барҙыр, ул да булһа, был ыуылдырыҡтан балыҡ үрсетеп булмай.

Синтетик аҙыҡ комбинатындағы ҙур булмаған бер цехта осһоҙ, яҡшы ыуылдырыҡты анһат ҡына күпләп әҙерләргә мөмкин һымаҡ. Әлегәсә затлы ашамлыҡ булып иҫәпләнгән ыуылдырыҡтың май, ит, шәкәр һымаҡ уҡ киң ҡулланыла торған аҙыҡҡа әйләнеүе бар.

## **Ҡарсыға менән балыҡҡа**

Был ғәҙәттәге балыҡ тотоу түгел ине. Ташкенттың танылған йылан аулаусыһы, биология фәндәре докторы Олег Богданов һаҙан балығын тотоу өсөн ҡарсыға нәҫеленән булған йыртҡыс ҡош — ҡәлмәргәнде (балыҡсы ҡарсыға) файҙалана.

Эш былай була. Йылан аулаусылар экспедицияһы Ҡыҙылҡом сүллеге аша Сырдарья ярына килеп сыға.

— Бөгөн киске ашҡа яңы тотолған балыҡ буласаҡ,— тине Олег Богданов һәм йылғанан ситкә — сүллек төпкөлөнә ҡарай сығып китте.

Бер аҙ барғас, ғалим ҡәлмәргән ояланған саҡсауылдың кәкре-бөкрө ботаҡтары аҫтына туҡтала.

Богданов йылға ярында саҡта тырнаҡтарына ниндәйҙер табыш эләктергән ҡоштоң ошо яҡҡа осоп китеүен күреп ҡала. Ул яңылышмай. Ысынлап та, ояла,

ике йөнтәҫ себеш эргәһендә, көмөш кеүек ялтырап, ҙур бер һаҙан ята. Уға әле тере була.

Богданов балыҡты эләктереп ала һәм тағы ла ҡуйы ҡыуаҡ аҫтына йәшеренә. Егерме минут самаһы үтеүгә, ҡош, аяҡтарына һаҙан балығын эләктереп, ояһына әйләнеп ҡайта. Ҡәлмәргәндәр һунарға йылға аръяғында урынлашҡан күлгә йөрөйҙәр, күрәһең. Бер сәғәт самаһы үтеүгә, йәнә бер балыҡ «сиртә». Хәҙер инде «табыш» ике килограмдан да кәм тартмай. Был кисте экспедиция тәмле аш ашай.

## БАЛЫҠСЫЛАРҘЫҢ ТАБЫШЫ

60-сы йылдарҙа «Слава» кит базаһында гарпунсы Алексей Золотов бер ҙур кашалот атып үлтерҙе. Уның ашҡаҙанында бик яҡшы һаҡланған балыҡ йылымы табылды. Был йылым Одессаның диңгеҙ музейына тапшырылды.

## Тауыш эҙләй

Зоолог-акустиктар диңгеҙ хайуандарын, уларҙың тауыш тулҡындарын кире ҡайтара алыуҙарын ҡарап, беренсе тапҡыр кластарға бүлде. Был, атап әйткәндә, промысла өсөн кәрәк. Атлантик океанда акустик яҡтан тикшереү диңгеҙ хайуандарын дүрт төркөмгә бүлергә мөмкинлек бирҙе. Был төркөмдәр тауыш тулҡындарын төрлөсә кире ҡайтара.

Беренсе төркөмгә 10 миллиметрҙан алып 150 миллиметрға тиклем ҙурлыҡтағы умыртҡаһыҙ йомшаҡ тәнле хайуандар, ҡойҡа һымаҡ медузалар, моллюскалар һәм океандағы шуға оҡшашлы йән эйәләре инә. Был организмдарҙы ғалимдар «тауышты ярым үткәреүселәр» тип атайҙар.

Кальмарҙар тауыш тулҡындарын насарыраҡ үткәрә. Уларҙың бик йоҡа һөлдә нигеҙе бар. Үҫештең юғарыраҡ кимәленә барып еткән ҡыҫала һымаҡтар төркөмө тауышҡа тағы ла нығыраҡ ҡаршылыҡ күрһәтә. Тығыҙ хитин ҡатламы менән ҡапланған һәм 150 мм ҙурлыҡтағы был хайуандар көндөҙ 200 метрҙан алып 700 метрға тиклем тәрәнлектә көтөүҙәре менән йөҙәләр.

Ҡыуыҡлы балыҡтар тауышты бигерәк тә яҡшы кире ҡайтара.

Ғалимдар, диңгеҙ хайуандарын эҙләгәндә тауыш тулҡындарынан файҙаланып, балыҡтарҙың ҙурлығын һәм ҡайһы бер ваҡытта хатта төрөн дә билдәләп буласаҡ, тип уйлайҙар.

## Ҡырпалар

Әстрхан. Бында 1964 йылда 520 килограмм ауырлыҡтағы бик ҙур ҡырпа балығы килтергәндәр. Эсен ярғас, унан 80 килограмм ҡара бөртөклө ыуылдырыҡ сыҡҡан.

Иң ҙур ҡырпа балығы 1921 йылда Татарстандың Тәтеш ҡалаһы янында тотола. Был балыҡтың ауырлығы 960 килограмм була. Татарстан дәүләт музейында булыусылар уның фоторәсемен дә күрә алалар. Ә инде 1902 йылда тотолған тағы бер гигант ҡырпа балығының ҡарасҡыһы былдай балыҡтарҙың ни тиклем ҙур була алыуы тураһында асыҡ һөйләй.

ӨС МЕТРЛЫ!

Әстрхан өлкәһенең «Ракуша» хужалығы балыҡсылары Оло Иҙел йылғаһында 3 метрлы ҡырпа балығын тоталар. Уның ауырлығы 456 килограмм булған. Балыҡтан 3 бот ҡара ыуылдырыҡ алынды.

## Көрәкморон

...Төркмәнстанға яңы килгән саҡ ине. Бер иптәш менән кисен Амударъя буйына балыҡҡа барырға булдыҡ. Һәр кемгә таныш алабуға, сабаҡ йәки ҡорман тоторға ғына йыйынмай инек беҙ. Бөтә ер шарында ни бары өс кенә йылғала — беҙҙең Амударъя менән Сырдаръя һәм Америкалағы Миссисипиҙа йәшәүсе бик хикмәтле бер балыҡ бар. Ул балыҡты аҙ кеше белә. Шуғалыр ҙа, үҙенең төплө генә исеме лә юҡ. Уны тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап «көрәкморон» тип йөрөтәләр. Ул бик боронғо замандарҙан ҡалған бер йән эйәһе булғанға, ғалимдар уны латинса ғына атай һәм бик ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Башҡа балыҡтар һымаҡ, көрәкморондо аҙыҡ өсөн тоторға рөхсәт ителмәй. Сөнки хикмәт уның исемендә түгел — есемендә. Бер ни тиклем бикре балығын хәтерләтә ул, үҙе һөйәкһеҙ, умыртҡаһы тик кимерсәктән генә тора. Иң ҡыҙыҡлыһы шунда, бик мәҙәк ҡойроҡло... Эйе, эйе, әгәр башҡа балыҡтарҙың ҡойроғо кәүҙәһенең бер өлөшө булып торһа һәм һыуҙа йөҙгәндә руль хеҙмәтен үтәһә, быҙың ҡойроғо, кешеләрҙә һуҡыр эсәктәй, уға кәрәкмәгән бер нәмә. Сөнки ул ҡомаҡ ҡойроғолай нәҙек, өҫтәүенә, һис кәрәкмәгәнгә балыҡтың артына тағылған еп һымаҡ.

*Ә. Чаныш*

* * *

Фәнни нигеҙҙәргә таянып билдәләнгән норма буйынса, беҙҙә йән башына йылына кәмендә 20 кг балыҡ етештерергә кәрәк.

## Кем етеҙерәк?

Һеҙ, дуҫтарым, балыҡтарҙың һөйләшкәнен ишеткәнегеҙ бармы? Ә мин ишеттем. Күптән түгел хатта бәхәсләштеләр ҙә. Кем тиҙерәк йөҙә — һүҙҙәре шул хаҡта ине.

— Мин пароходтар, катерҙар менән ярышам,— тип һалды суртан,— бер сәғәткә 23 саҡрым ара үтә алам.

— Әйттең һүҙ! Үткән йылғы ярышта мин беренсе килдем! Чемпион булдым! Тиҙлегемде сәғәтенә 35 саҡрымға еткерҙем,— тип тегене еңергә тырышты бағыр.

— Юҡҡа бәхәсләшмәгеҙ,— тип туҡтатты уларҙы карп.— Мин бына күпме тырышһам да, тиҙлегемде 13 саҡрымдан арттыра алмайым. Ҡарабалыҡ та минең һымаҡ, «бик яй». Ә мыйыҡлы балыҡтың тиҙлеге сәғәтенә 19 саҡрымға етә.

Бына шундай бәхәс ишеттем мин. Дуҫтар, һеҙ ҙә үҙегеҙҙең тирәләге һыуҙарҙа йөҙгән балыҡтарҙың исемен, төрөн яҙып ебәрегеҙ. Атай-әсәйҙәрегеҙ ҙә ярҙам итер, моғайын.

## Ҡармаҡ һалғанда һөйләшеүҙәр

Ял көнө ине. Иртән иртүк иптәштәребеҙ менән йыйылышып ҡармаҡ ағас-тарын иңбаштарыбыҙға һалдыҡ та Ағиҙелгә табан йүнәлдек. Беҙҙән дә иртә уяныусылар бар икән. Улар, күптән килеп, ҡармаҡтарын һыуға һалып та өлгөргәндәр.

Беҙ ҙә, яйлы бер ерҙе табып, туҡтаныҡ. Азат емләгән ҡармағына төкөрҙө лә: «Ҡап, ҡармағым, ҡап-ҡап!» — тип һыуға ырғытты. Башҡаларыбыҙ ҙа уға эйәрҙе.

— Азат, тарт, тарт! Ҡалҡыуысыңды балыҡ шаярта! — тип ҡысҡырҙы Фәр-үән. Азат, ҙур балыҡты өмөт иткән һымаҡ, кирелеп, ҡармаҡ һабын ярға табан һелтәне лә ризаһыҙлығын белдерҙе: «Нимә булһын, шул ташбаш инде»,— тип мығырҙап, бармаҡ саҡлы балыҡты ҡармаҡтан ысҡындырырға маташты.

Ҡалҡыуыс тағы ла һыуға сумды, тағы ла — ташбаш!

Байтаҡ ҡына ваҡыт ултырғас, Әнүәр ағай тамаҡ ялғап алырға тәҡдим итте. Ашанырға булғас, ашанырға. Берәүҙәр балыҡ таҙартырға, икенселәре ут яғырға тотондо, өсөнсөләребеҙ биҙрә менән йылғанан һыу ташыны. Оҙаҡ та үтмәне, йәшел хәтфәлә ултырған табындың уртаһына биҙрә менән балыҡ һурпаһы ла килеп ултырҙы. Әле генә уйын-көлкөгә ҡоролған табын шымып ҡалды. Сөнки балыҡ мөнйөгәндә һөйләшеп булмай. Ҡылсыҡтарының тамағыңа китеүе бар. Балыҡсылар әллә туйыпмы, йә булмаһа ваҡ балыҡты мөнйөүҙән ялҡыпмы-лыр, аҡрынлап табындан ситләшә башланылар.

— Әнүәр ағай,— тип һүҙ башланы Азат,— Ағиҙелдең балыҡтары ҡайҙа ки-теп бөттө икән? Элек, беҙ бала саҡта әле, бик эре балыҡтарҙы тота торғай-нылар ҙа баһа.

— Элек бит, егеттәр, Ағиҙелдең һыуы саф ине,— тип яуап ҡайтарҙы Әнүәр ағай,— хәҙерге феноллы һыуҙа балыҡ үрсейме ни? Ана бит, нефть ҡалдыҡтары һурпа өҫтөндәге өрө һымаҡ йөҙөп йөрөйҙәр. Нефть эшкәртеү заводтары, карап-тар ҙа нефть ҡалдыҡтарын шунда ағыҙғас, һыу феноллы булмай, ҡайҙа барһын!

*УЙНАЙЫҠ БЕРГӘЛӘШЕП*

## Балыҡсы

Оҙон ғына бау алына. Шуның нәҡ уртаһына — ҡатырғанан эшлән-гән уйынсыҡ балыҡ, ә ике осона ла таяҡсыҡтар беркетелә. Ике бала ҡапма-ҡаршы тороп, бауҙы шул таяҡсыҡтарға урай-урай, бер-бере-һенә яҡынлаша. Кем дә кем урталыҡҡа алданыраҡ етеп балыҡты эләктереп ала, шул еңеүсе була.

*КӨЛГӘНГӘ — КӨЛКӨ*

## ЯРАТҠАН КҮЛ

Балыҡсылар үҙҙәре йөрөгән күл тураһында һөйләшә:

— Ниндәй генә балыҡ юҡ унда: ҡыҙылғанат юҡ, суртан юҡ, шамбы юҡ. Хатта тәлмәрйендәр ҙә юҡ.

## ДӨРӨҪӨН ӘЙТКӘНДӘ

— Балыҡ ҡаптымы? — тип һорай бер балыҡсы икенсеһенән.
— Килоға яҡын ҡыҙылғанат тоттом.
— Эреләрме?
— Берәүһе кило ярым самаһы тарта...

## АЛТЫН БАЛЫҠ

Бер кеше алтын балыҡ тотҡан. Балыҡ:

— Ебәр мине, зинһар, йәнең ни теләй — шуны эшләрмен, ә күршеңә хатта ике тапҡыр күберәк булыр,— тигән.

Балыҡсы төнө буйы уйланып сыҡҡан: ни һорарға? Машина һораһам, яҡшы булыр ине... Юҡ, ул саҡта күршенең ике машинаһы була...

Икенсе көндө ул балыҡҡа:

— Тешем төшһөн,— тигән.

## **Суртан, тиһәм...**

Эй тотам мин балыҡты,
Аптыратып халыҡты.
Ҙуры килеп эләкһә,
Көс төшә бит беләккә.

Ҡармаҡ яҙылып китә,
Ауыҙ асылып китә.
Бына ҡармаҡ бер заман
Ауырайҙы бик яман.

Элэктеме тамырға,
Нисек тартып алырға?
Төшмәһен, тип юрайым,
Суртандыр ул, моғайын...

Эй һөйрәйем, һөйрәйем,
Аҙаҡтан ни күрәйем:
Ҡармаҡ һабын эйелтеп,
Килде-сыҡты бер итек...

***М. Дилмөхәмәтов***

*БЕЛӘҺЕҢМЕ?*

## А-КУЛА!!!

Ер йөҙөндә акуланың 150-нән артыҡ төрө бар. Уның бөтә төрҙәре лә тиерлек диңгеҙ һыуында көн күрә. Тик берәүһе генә — сөсө һыу акулаһы — Үҙәк Америкалағы Никарагуа күлендә йәшәй.

Акулалар табыш эҙләп йөҙҙәрсә километр ара үтергә һәләтлеләр. Үҙҙәрен күбеһенсә һыу өҫтөнә яҡын тоталар, бик тәрәнгә китмәйҙәр.

Күптәр акулаларҙы йыртҡыс балыҡ тип кенә беләләр. Ысынында уларҙың зыянһыҙҙары ла бар. Мәҫәлән, йыш ҡына караптар артынан эйәргән акулаларҙан хатта бәләкәй балыҡтар ҙа ҡурҡмай. Сөнки улар караптан һыуға ташланған аҙыҡ ҡалдыҡтары менән генә туҡлана.

Ныҡ ҙур акулалар ҙа, үҙең һөжүм итмәһәң, һиңә теймәйәсәктәр. Шундайҙарҙың береһе — кит акулаһы. Ул Урта диңгеҙҙә, Тымыҡ океанда, Кариб диңгеҙендә көн итә. Оҙонлоғо 11 метрҙан ашһа, ауырлығы — 13 тонна. Икенсе бер



зыянһыҙ төр — гигант акула. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 13 метрҙан да арта. Ул йыш ҡына һыуҙан арҡаһын күрһәтеп ҡояшта ҡыҙынып ятырға ярата.

Иң ҡурҡыныcы — оҙонлоғо 12 метрға еткән ҙур аҡ акула. Ул һәр саҡ кешеләргә ташланырға әҙер генә тора.

*(«Йәншишмә» гәзитенән)*

## Латинса нисек?

Нөгөш ярында байтаҡ автобустар туҡтағайны. Халыҡ ҡайнаша. Кемдер ниҙер һөйләй, башҡалар уны уратып алған да тыңлай.

— Браконьерҙар түгел былары. Туристар. Килгәс, туҡталып китәйек инде. Арыҫлан да күрһен сит ил кешеләрен.

«Жигули» турист автобустары эргәһенә килеп туҡтаны. Бейек ҙур ҡыҙыл «Икарус»тар эргәһенә бәләкәй генә булып туҡтаған «Жигули»ҙан мөһәбәт кәүҙәле ир килеп сыҡҡас, сит ил туристары йылмая-йылмая уға яҡынлаштылар. Уның кейеменең нимә аңлатҡанлығын һораштылар. Береһе уға ҡарап «Полицай?» тип һораны. Тәржемәсе Нөгөшкә күрһәтеп ниҙер аңлатҡайны, теге турист йәнләнеп китте. Моталовтан Нөгөштә ниндәй балыҡтар барлығын һораштьі. Тәржемәсе был балыҡтарҙың инглизсә атамаһын белмәй аптырап ҡалғайны, Ғайсар үҙе:

— Абрамус брама, езох лусиус,— тине.

Туристар аңланы һәм шатланып инспекторҙың ҡулын ҡыҫтылар.

Көн кискә һарҡыу ине. Туҡтап, аҙыраҡ ял алып, тамаҡ ялғап китергә уйланылар. Нөгөш буйында усаҡ яҡтылар, ҡаҙан аҫтылар. Арыҫлан атаһының туристар менән сит ил телендә аңлашҡанына шул тиклем ҡыуанды.

— Атай, һин улар менән ниндәй телдә һөйләштең? — тине, ашарға ултырғас.
— Һөйләшмәнем мин. Ҡорбан балығы менән суртандың латинса исемен генә әйттем.
— Ә һин латинса ҡайҙан беләһең?
— Әлбиттә китаптан.
— Ә ташбаш нимә була ул?
— Гобио гобио.
— Ә йәйен?
— Силурус гланис.
— Әллә әҙерәк шыттырып та ебәрәһең инде, атай!— Арыҫлан эсен тотоп рәхәтләнеп көлдө.
— Ышанмаһаң, ҡайтҡас, китаптан ҡарап имтихан алырһың.
— Юҡ, мин ышанам. Кешегә ышанырға кәрәк,— тигән булды улы етди ҡиәфәт менән.

*М. Бураҡаева*

## Аҡкүл

Беҙҙең ауылдан ике генә саҡрым алыҫлыҡта ай кеүек түңәрәк, көмөш тәңкә кеүек ялтырап ятҡан бер күл бар. Аҡкүл тип йөрөтәләр уны. Күлдең киңлеге 5—6 саҡрым, уның бер яғынан икенсе яғында булған нәмәләр күҙгә саҡ-саҡ күренәләр ине.

Йәй көндәрендә күлдең тирә-яғы йәшел үләндәр һәм төрлө игендәр менән ҡаплана. Алыҫ түгел тау башынан ҡарағанда, был күл йәшел балаҫ өҫтөндәге түңәрәк көҙгө кеүек ялтырап ята.

Май айы етеү менән, күлдең тирә-яғында кешеләр ҡайнаша башлайҙар. Бында тирә-яҡтағы ауылдарҙан әллә ни тиклем халыҡ йыйыла. Улар шунда уйнап-көлөп, ял итеп көн үткәрәләр.

Кисен күл тирәләй үҫкән ҡамыштар, талдар араһында төрлө ҡоштар бөтә туғайҙы яңғыратып һайрайҙар.

Күл яны йәй буйына шулай йәмле, күңелле булып торһа ла, көҙ яҡынлашып, һалҡын елдәр иҫә башлау менән, йәнлелек юғала. Күл тынып, моңһоуланып ҡала. Ҡыр өйрәктәре һәм башҡа ҡоштар йылы яҡҡа китәләр.

*М. Ғафури*

## Талҡаҫ күле

Юлдаш менән Ҡыҙырас, күл янына килеп еткәс, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙолар. Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине.

Яр ситендәге ҡуйы ҡамыштар өҫтөндә ҡыр өйрәктәре өйөрөлә. Аҡсарлаҡтар, сыр-сыу килеп, күл уртаһында әйләнә, сурттандан ҡасып, өҫкә һикергән балыҡтарҙы аулай. Ирәндектең зәңгәр күк йөҙөнә эре аҡ биҙәк булып төшкән өйкөм болоттарға аралашҡан мүкле ҡаяларына тейә яҙып, иренеп кенә бөркөттәр кәйелә. Күлдең уртаһында, алыҫта, күкһел томан эсендә, бик бәләкәй генә

ҡара нөктә булып, Уртаташ күренеп ята. Юлдаш уға ҡарап, өләсәһенең әкиәтен хәтерләй. Был Уртаташ уға тағы ла серлерәк, тағы ла мауыҡтырғысыраҡ булып күренә.

*З. Биишева*

## Тәбиғәт ҡосағында

Май башында йылғалар ярҙарына ҡайта. Яҙғы буръяҡ һыу әкренләп тоноҡлана, уның өҫтөндәге ваҡ киҫәксәләр төпкә бата.

Республиканың тау йылғаларында майҙың тәүге көндәрендә бәрҙеләр ыуылдырыҡ сәсә.

Майҙа ташбаш, сабаҡ, еҙмыйыҡ, шырт балыҡ, йәйен, ажау ыуылдырыҡ сәсә. Тау йылғаларында ҡыҙылса йәки ҡыҙыл суртан ыуылдырыҡ һала башлай. Беҙҙә уны тотоу тыйылған.

Һыу температураһы 14°-тан түбән булмағанда, ай аҙағында табан балыҡ, температура 16°-тан юғары булһа, ҡара балыҡ ыуылдырыҡ һала. Был ваҡытта ялҡау балыҡтар ҙа һыу төбөнән күтәрелеп, уйнай башлай.

Табан балыҡ менән бер үк ваҡытта ҡорман ыуылдырыҡ сәсә. Ғалимдар, йәш ҡормандар ыуылдырыҡты май аҙағында, ә ҡарттары — һуңыраҡ, арыш баш ҡоҫҡанда (июндә) һала, тип иҫәпләй.

Ғәҙәттә, яҙ ыуылдырыҡ сәсеү ваҡытында 40 көнгә балыҡ тотоу тыйыла.

Йылғаларҙа селбәрәләр барлыҡҡа килә, улар көтөү булып йөҙөп йөрөй. Һыу ҡайтҡандан һуң, селбәрәләр йыш ҡына ҙур булмаған соҡорҙарҙа тороп ҡала, һәм, һыу парға әйләнгәндән һуң, улар һәләк була. Тәбиғәтте һаҡлау йәмғиәтенең ағзаларына һәм уҡыусыларға балыҡ селбәрәләрен ҡотҡарыу өсөн көс һалырға кәрәк. Шундай күләүектәрҙән селбәрәләрҙе иплəп кенә сүмес ау менән һөҙөп алып, һыулы биҙрәгә һалырға һәм йылғаға ебәрергә кәрәк.

*Е. Кучеров*



## Балыҡ тотоу ҡоралдары

Балыҡтар тураһында яҙғанда, балыҡсылыҡ эше, балыҡ тотоу, аулау ҡоралдары хаҡында бер аҙ булһа ла уҡыусыларға хәбәр кәрәк булыр. Теге йәки был халыҡта теге йәки был кәсептең — һөнәрҙең үҫешкәнен уға ҡараған һүҙҙәр, терминдар әйтеп тора. Башҡорт телендә иһә балыҡсылыҡҡа ҡағылышлы бер тиҫтәләп һүҙҙәрҙе килтерһәк тә, беҙҙә был кәсеп аҙаҡҡы урында тормағанлығын күрһәтер. Мәҫәлән, ҡарпыу, ялмау, бәрҙе ҡармағы, күбәләкле ҡармаҡ, балыҡ ҡаҡлау, балыҡ шешләү, шеш, балыҡ шаңғытыу һ. б. Быларҙың ҡайһы берҙәре хәҙер инде онотолоп бара, һирәк ҡулланыла.

Балыҡ тотоу ҡоралдарының күпселеге бик борон ваҡыттарҙан билдәле. Замандар үҙгәреү менән балыҡ тотоу эше лә үҙгәрмәй ҡалмай. Хәҙерге ваҡытта байтаҡ ҡына балыҡ аулау ҡоралдары ҡулланылмай тиерлек, ҡулланылһа ла, уларҙың күп төрҙәре тыйылған ҡоралдар тип иҫәпләнә. Шуның өсөн беҙ тотоу ҡоралдарын тасуирлағанда уларҙың тарихта ниндәй булғандарын күҙ уңында тотабыҙ, башҡорттар араһында балыҡсылыҡ эше нисек торған, хәҙер ул ниндәй — шуларҙың бер нисә өлгөләрен күрһәтәбеҙ.

Балыҡ тотоу артель балыҡсылары, ҡайһы бер һәүәҫкәр балыҡсылар ҙа түбәндәге тотоу ҡоралдарын файҙалана: ау — бының бер нисә төрө бар — ваҡ ау, эре ау, аналы ау. Элек, әле лә бәғзе балыҡсылар ауҙарҙы үҙҙәре үрә*,

---

* *Борон ауҙар ептән түгел, ә һалабаштан үрелгән булған, шуның өсөн дә ағас ау тип әйткәндәр, аҙағыраҡ епте кесерткән һуғып яһағандар.—Ш. Н.*

был эш ау энәһе (Дим башҡорттарында ау энәҫе) аша һәм ау ҡалағы, таҡтаһы (Дим башҡорттары таҡтаҫы ти) менән эшләнә. Белгән балыҡсылар үҙҙәре үк ау ултыртыу (йәки аналау, ирнәүләү) эшен башҡара. Балыҡ тотоу ҡоралдарын киңерәк яҡтыртыу өсөн, Дим буйы башҡорт балыҡсылары ҡулланған балыҡсылау йыһаздарына күберәк туҡталайыҡ. Бындай ҡоралдар һәм уларҙың атамалары башҡа урындарҙа ла бар.

Ауҙар, күҙәнәктәренең иңенә ҡарап, ваҡ күҙәнәкле ауҙарға (әйтәйек, сабаҡ ауы — сабаҡ һ. б. шундай балыҡтар өсөн) һәм эре күҙәнәкле ауҙарға (суртан ауы, ҡорман ауы тиҙәр) бүленә. Ау үргәндә (һатыуҙағы капрон ауҙарҙан башҡа), нигеҙҙе эшләгәндә, ялсы (бәләкәс сәнскегә оҡшаған нәмә) алалар. Белгән балыҡсылар үҙҙәре үк үргән ауҙы оҙон һәм ныҡ бауға — тыжым тип атала — ирнәүләйҙәр. Ауҙың өҫкө яғында ҡалҡылар (ау тулы ла тиҙәр) тора, аҫҡы өлөшөндә — батырғыстар, ау таштары.

Күлдәрҙә күберәк оло йылым менән артель йә колхоз балыҡсылары һөҙә, һәүәҫкәрҙәр иһә күл йылымы (перәтник, һөҙгөс) менән төшәләр.

Һыу ташҡан мәлдә балыҡты махсус саҡ — йәтмә менән тоталар. Ағиҙелдең түбәнге ағымында быны һөҙгөс тиҙәр.

Элегерәк Димдә, Ағиҙелдә киң файҙаланған ҡорал булып нәрәтә хеҙмәт иткән, быныһын да күпселек ваҡытта балыҡсылар үҙҙәре үргән (һатыуға ла сығарғандар), селтәрҙе ағас ҡулсаларға (бөгәзе, бөгәже) урап беркеткәндәр.

Сәнске тотоп сыраҡҡа төшөү. (Браконьер ысулы булараҡ, рөхсәт ителмәй). Быныӊ менән күберәк таулы Башҡортостан һыуҙарында аулағандар. Йылтымбыйҙы ишкәкле кәмәнән һөйрәтеп, суртан, һыла һ. б. йыртҡыстарҙы тоталар. Тотолғаң балыҡты ҡужын тигән кәрзинкәлә һаҡлайҙар.

Ҡышын боҙҙо пишнә (һөймән) менән уялар. Яңы ғына ҡатҡан боҙҙан ҡарап йөрөп, әүәл балыҡты шаңҡытып йөрөгәндәр.

Инйәр-ҡатай, табын һ. б. ырыу балыҡсылары сурағайҙарҙы, бағрыны (күберәк тау шишмәләрендә) мәскәү менән аулағандар.

Боронғо ҡоралдарҙан, аҙаҡ килеп ептән үрелгән пител (питәл) тигәндәрен һәм йысуҡ тип исемләнгәндәрҙе күрһәтеп була. Быныһыларына балыҡ алданып үҙе инә, балыҡсы тик ваҡытында ҡоралдарҙы ҡарап торорға онотмаһын.

Балыҡ ауы (унан башҡа башҡортта кейек ҡош тота торған ауҙар ҙа булған) һыуҙың тымығыраҡ урынына һалына.

Йылым ауҙан да киңерәк ҡулланыла. Йылым менән балыҡ һөҙгәндә йыш ҡына гөмбөр менән эш итәләр. Гөмбөр — йылғала балыҡ һөҙгәндә, йылымды тартып ярға сығарырға тейешле урындың түбәнге яғына балыҡ ҡасмаһын өсөн. йылғаның арҡырыһында кәмәләрҙә тороп, һыуҙы һәр ваҡыт гөмбөрләтеп тороу ҡоралы: ул оҙон ағас башына беркетелгән эсе ҡыуыш, ауыҙы асыҡ, ауыҙ яғы киң тимерҙән ғибәрәт. Арғаяш башҡорттары был ҡоралды бут тип әйтәләр. Башҡа урындарҙа уны бутауыс, бутауғыс, дөмбөр һ. б. тип исемләйҙәр. Был ҡоралдың исемдәре өноҡшаш һүҙҙәрҙән килеп сыҡҡан: дөмп-өр, гөмп-өр.

Йылым-фәлән менән күмәк кеше йөрөһә, яңғыҙ балыҡсының йыш ҡына кәсебе мурҙа һалыуҙан тора. Мурҙа ябай, ваҡ ҡорал булһа ла, уның да айырым бер нисә өлөштәре бар. Иң мөһиме, йәлдәү — мурҙаның эсенә ҡарата индереп үрелгән тар ауыҙлы (балыҡ кире сыҡмаһын өсөн) өлөш. Былай, мәҫәлән, Күгәрсен районында һөйләһәләр, шул мурҙа тишеген, йәлдәү һүҙенән башҡа, балаҡас тиҙәр, ә Арғаяшта мурҙаның тар урыны бөйрәк була.

Мурҙаны тик һалып ҡына ҡуймай, тағы шаран менән йыһазлайҙар, быныһы

иһә мурҙаға талдан үреп эшләнгән ҡанат була. Учалы районында инде шаран тип мурҙаның ике яҡ ҡанатына терәп ҡуйылған ситән йәки нәҙек талдан үрелгән текмә атала. Башҡорттарҙа тағы балыҡ үҙе инеп тотола торған ҡоралдарҙан ҡур тигәне билдәле — яҙғы ташҡында йылғаның кире аҡмалы урынында үрләгән балыҡтарҙы тотоу өсөн һалына торған ҡорал.

Көнсығышта ла (Әбйәлил районы), көньяҡта ла (Күгәрсен районы) балыҡты тағы һеүән менән аулайҙар. Унда һеүән — йылғаның ағын урынына һалына торған мурҙа. Ә бына Ғафури районында һеүән — тотолған балыҡ иҫкермәһен өсөн уны һалып һыу эсенә ҡуя торған кәрзин, бәләкәй мурҙа.

Элек балыҡсылау өсөн киң таралған (хәҙер тыйылған) ҡоралдарҙың береһе һалдау — балыҡ төртөп ала торған өс асалы тимер ҡорал (бәләкәй ҡалаҡ һымаҡтары ла булған) күп урындарҙа ҡулланылған.

Беҙҙең ваҡытта иң күп кеше файҙаланған ҡорал булып ҡармаҡ йөрөй. Уның да бер нисә төрҙәре бар. Мәҫәлән, Миәс буйҙарында йерә тигәндәре — ул төнгөләккә эре балыҡҡа һалынған ҡармаҡ. Шулай уҡ көнсығышта, Әбйәлил яҡтарында ҡарт балыҡсылар бик боронғо ҡармаҡ төрөн иҫләп ҡала әле, уның исеме — тейәк — был суртан аулай торған ҡорал, ул ян-яҡтары ослайып торған таяҡсанан ғибәрәт. Шул урындарҙа тағы бер ағастан булған боронғо ҡорал беленеп ҡала, уны һүгән тип исемләйҙәр. Был ҡорал ҡыуышы булған ағастан эшләнә икән. Урал аръяғында әле Л. Сабанеев телгә алған йәнә бер ағас балыҡ тотоу ҡоралы бар (хәҙер беҙҙә ҡулланыуҙан сыҡҡан тиерлек, күберәк Көнбайыш Себерҙә осратып була). Быныһы йеҙә була — бармаҡ йыуанлығындағы 2—3 метрлы нескә ағастарҙы еп менән үҙ-ара тоташтырып яһалған ҡорал. Йеҙә күлдәге балыҡты тотоу өсөн ҡулланыла.

Тимерҙән булған ҡоралдарҙан бер нисәһен әйтеп үтәйек: ялтырғы (Бөрйәндә ялтыраҡ тиҙәр) — йыртҡыс балыҡты тотор өсөн, бәлйә — ағас олонон уйып кәмә яһай торған балта.

Балыҡсылыҡҡа ҡараған һүҙҙәр башҡорттарҙа бик күп (үҙе айырым китапҡа теркәрлек), уларҙың бер-икеһен генә танышыу өсөн генә әйтеп үтәйек: балыҡ ояһы — балыҡ ятыуы, балыҡ уйнауы — ҡарпыу, бурмаш — ҡармаҡҡа ҡаптырып һала торған ҡорт, күлдә була.

## Ап-аҡ ҡанлы балыҡтар

Халыҡ телендә йыш ҡына «ҡан кеүек ҡып-ҡыҙыл» тигән сағыштырыу ишетергә тура килә. Ысынлап та, барлыҡ умыртҡалыларҙың да ҡаны ҡыҙыл төҫтә, сөнки составында тимер бар.

Ә шулай ҙа был сағыштырыу һәр ваҡыт та дөрөҫлөккә тура килмәй.

Антарктида һыуҙарында, мәҫәлән, ап-аҡ ҡанлы балыҡтар йәшәй. Улар һыу кеүек үтә күренмәле. Баштары иҫ киткес ҙур һәм яңаҡтарында оҙон тештәр урынлашҡан. 50—70 сантиметр оҙонлоғондағы был уникаль балыҡтарҙы тәү тапҡыр 1954 йылда Норвегия ғалимы Руду өйрәнгән. Анализдар менән шуны асыҡлаған: крокодил ауыҙлы балыҡтарҙың ҡанында гемоглобин ғәҙәти балыҡтарҙыҡына ҡарағанда 25 тапҡырға әҙерәк. Ә йөрәктәре өс тапҡырға ҙур. Шуныһы ғәжәп, был аҡ ҡанлылар төркөмөнә ҡараусылар, ғәҙәттәгесә, ҡуйы капилляр тамырҙар урынлашҡан тән аша һулай, тамырҙың майҙаны ғәҙәттәгенән ике

тапҡырға ҙурыраҡ. Тик әлеге балыҡтарҙы тәбиғәт тарафынан кәмһетелгән тип уйламағыҙ — уларҙың ите иҫ киткес тәмле һәм юғары сифатлы.

Ә шулай ҙа иң ғәжәбе — уларҙың ҡаны туңмай.

*(«Огонек» журналынан)*

## Викторина

1. Ниндәй балыҡтарҙың мыйығы бар? Я у а п: *мәрсен һымаҡтарҙың, эт балығының, йәйендең, һаҙандың.*
2. Ниндәй промысла балығын ҡулға эйәләштерелгән тип иҫәпләйҙәр? Я у а п: *карпты.*
3. Ниндәй хайуандар күҙҙәрен асып йоҡлай? Я у а п: *балыҡтар (уларҙың күҙ ҡабаҡтары юҡ) һәм йыландар (уларҙың күҙ ҡабаҡтары ҡушылып үҫкән).*
4. Илебеҙҙә аулана торған иң ҙур балыҡты әйтегеҙ: Я у а п: *ҡырпа (оҙонлоғо алты метрға яҡын, ауырлығы мең килограмдан да артыҡ булыуы билдәле).*
5. Ниндәй балыҡтарҙың мороно өҫтөндә ҡорал була? Я у а п: *ҡылыс балыҡ, бысҡы балыҡ.*
6. Нисә балыҡ төрө билдәле? Я у а п: *егерме меңгә яҡын балыҡ төрө билдәле.*
7. Ниндәй балыҡтар инстинкт буйынса нәҫел ҡалдырыу хаҡында ҡайғырта? Я у а п: *сәнскеле балыҡ, һыла, асы балыҡ.*
8. Ниндәй балыҡтар оҙаҡ йәшәй? Я у а п: *ҡырпа (йөҙ йәшкә ҡәҙәр), мәрсен (илле йәшкә тиклем), суртан (етмеш йәштән ашыу), йәйен (етмеш йәшкә ҡәҙәр).*
9. Ниндәй балыҡтар башҡа балыҡтарға ҡарағанда шәберәк йөҙә? Я у а п: *ҡылыс балыҡ (секундына 36 метрға тиклем), бағры.*

## Балыҡтар баш ҡатыра

1. Башҡортостан һыуҙарында ғәҙәти балыҡ (Сабаҡ).
2. Күҙҙәре бер яҡтан урынлашҡан яҫы балыҡ (Камбала).
3. Сөсө һыуҙа йәшәй торған бик етеҙ балыҡ. (Бәрҙе).
4. Ҙур йыртҡыс балыҡ (Акула).
5. Ваҡ диңгеҙ балығы (Анчоус).
6. Алабуға тоҡомонан ҡиммәтле балыҡ (Һыла).
7. Һаҙан һымаҡтар тоҡомона ингән балыҡ (Ҡыҙылғанат).
8. Төньяҡ диңгеҙҙәре балығы (Треска).
9. Беҙҙең һыуҙарҙа йәшәй торған йыртҡыс балыҡ (Суртан).
10. Треска тоҡомонан бер балыҡ. А. П. Чеховтың бер хикәйәһе шул балыҡ исеме менән аталған (Шамбы).
11. Ашамай торған балыҡ (Йыланбалыҡ).
12. Һөмбаштар тоҡомонан булған төньяҡ йылға-күл балығы (Ала балыҡ).
13. Һаҙан һымаҡтарынан кескәй генә балыҡ (Ташбаш).
14. Һөмбаш тоҡомонан алһыу итле балыҡ (Һөмбаш).
15. Майҙа консервланған ваҡ балыҡ (Шпрот).



## Балыҡсы кроссворды

*Горизонталь буйынса.* 1. Башҡортостандағы йылға исеме. 3. Ваҡ балыҡ. 5. Балыҡ еме. 8. Балыҡ ашаусы һыу ҡошо. 10. Балыҡ тотоу ысулы. 12. Йыртҡыс балыҡ. 13. Балыҡ тотоу ҡорамалы. 14. Үләндәге иртәнге һыу. 15. Аҡ төҫтәге урта эрелектәге балыҡ. 18. Ваҡ балыҡ ярала торған нәмә. 19. Ҡармаҡ өлөшө.

*Вертикаль буйынса:* 1. Балыҡ. 2. Башҡортостандағы йылға. 4. Балыҡ тотоу ҡорамалы. 6. Йыртҡыс балыҡ. 7. Шыйғалаҡ балыҡ. 9. Ҡармаҡ өлөшө. 11. Ҡармаҡ һабы өсөн ҡулланылған ағас. 14. Һыу үҫемлеге. 16. Ҡармаҡ һабы. 17. Балыҡ тотоу ҡорамалы.

### ЯУАПТАР

*Горизонталь буйынса.* 1. Һаҡмар. 3. Ташбаш. 5. Селәүсен. 8. Аҡсарлаҡ. 10. Сыраҡ. 12. Алабуға. 13. Ҡармаҡ. 14. Ысыҡ. 15. Сабаҡ. 18. Ыуылдырыҡ. 19. Батырғыс.

*Вертикаль буйынса.* 1. Һыла. 2. Ашҡаҙар. 4. Ау. 6. Суртан. 7. Шамбы. 9. Ҡалҡыуыс. 11. Бамбук. 14. Ылымыҡ. 16. Ҡыуал. 17. Йылым.



## БОРОНҒО ШӨҒӨЛ

Балыҡ тотоу башҡорттарға борондан хас булған. Балыҡсылыҡ менән күбеһенсә тау, урман, дала-урман төбәктәрендә йәшәүсе башҡорттар шөғөлләнгән. Быға Башҡортостан һәм уға йәнәш ятҡан өлкәләр территорияларының тәбиғи һыу ятҡылыҡтарына бай булыуы мөмкинлек биргән. Бик күп йылға, күлдәр араһында балыҡлылары ла аҙ түгел. Урал алдындағы Асылыкүл, Ҡандракүл, Аҡкүл, Урал аръяғындағы Сыбаркүл, Мауыҙҙы (Яҡтыкүл), Сирғансы, Талҡаҫ, Оҙонкүл, Ҡарағайлы, Өргөн, Оло Асыуҙы күлдәрен белмәгән кешеләр юҡтыр. Ә йырҙарҙа маҡталған йылғаларҙың берәүһе генә ни тора!? Ағиҙел, уның ҡушылдыҡтары Ҡариҙел, Әй, Дим, Йүрүҙән, Оло Инйәр, Танып, Еҙем, Эҫем, Нөгөш, Өршәк, Сәрмәсән; Урал (Яйыҡ) бассейнындағы Һаҡмар, Таналыҡ, Оло Ҡыҙыл борон борондан халыҡтың көнкүрешенә туранан-тура бәйле була килгән.

Талантлы мәшһүр ғалим С. И. Руденконың этнография буйынса «Башкиры» исемле классик хеҙмәтендә балыҡсылыҡ тураһында махсус бер бүлек бирелә. Был бүлектә иһә балыҡ тотоу ҡоралдары һәм уларҙың башҡорт диалекттарындағы, һөйләштәрендәге атамалары хаҡында ҡайһы бер өҫтәлмә мәғлүмәттәр биреү маҡсат итеп ҡуйылды.

Башҡортостандың көнсығыш һәм үҙәк райондары (Әбйәлил, Учалы, Ғафури һ. б.) башҡорттары балыҡты күбеһенсә күлдәрҙән тота. Ә йылға буйҙарында йәшәүселәр уларҙы күберәк йылғаларҙан аулай.

С. И. Руденконың билдәләүенсә, XIX быуаттың аҙағында — XX быуат башында балыҡ тотоу менән Кама һәм Пермь, Себер һәм Ырымбур яғы башҡорттары ла шөғөлләнгән.

Күлдән балыҡ тотоу нигеҙҙә ирҙәр шөғөлө булып һаналған. Ә XIX быуаттың аҙағында был шөғөлгә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа йөрөгән.

С. И. Руденко хеҙмәтенең был бүлеген түбәндәге һүҙҙәр менән тамамлай: «Башҡорттарҙың балыҡ тотоу шөғөлө, күрәһең, Волга—Кама бассейнындағы балыҡсылар менән туранан-тура бәйләнештә тора. Балыҡ тотоу кәрәк-ярағтарының күбеһе башҡорттарҙан тыш татарҙарҙа, мишәр, типтәр, сыуаш, вотяк (удмурт), мордваларҙа һәм рус халҡында осрай. Тик башҡорттар файҙаланған балыҡ тотоу ҡоралдарының бер нисәһе генә, атап әйткәндә, *еҙәләрҙең* төҙөлөшө Урал аръяғындағы һәм Башҡортостандың көньяғындағы ҡайһы бер күлдәр өсөн хас, йәнә балыҡ тотоуҙың айырым махсус ысулдары *(сыраҡҡа төшөү, һеүән* һәм нәрәтәнең төҙөлөшө) башлыса Көньяҡ Уралдың тау йылғаларында осрай».

Билдәле булыуынса, балыҡ тотоу ҡоралдары бер нисә төргә бүленә. Төрлө-төрлө ауҙар, *мурҙалар, мәскәүҙәр, ҡармаҡтар* бар. Улар араһында *һалдау* һәм багор һымаҡтары боронғораҡ булған. Ә бөгөнгө көн балыҡсылыҡ ҡағиҙәләре буйынса быларҙың күбеһе тыйылған ҡоралдар рәтенә индерелгән.

## АУ ТӨРҘӘРЕ

Хәҙерге ваҡытта балыҡ тотоуҙа ауҙар киң таралған ҡоралдарҙан һанала. Кәсепселәр ҙә, һәүәҫкәр балыҡсылар ҙа төрлө ауҙар ҡуллана. Мәҫәлән, *йөҙмә* ауҙар бар. Уларҙың *инәле* ау (аналы ау, решле ау), *ваҡ күҙле* ауҙарҙан түбән ауыҙ ауы, сабаҡ ауы, ваҡ күҙәнәкле *йәтмә*, өс ҡатлы ау; *эре күҙлеләренән* ҡорман, ауы, суртан ауы; һыуҙа бер урынға беркетеп ҡуйыла торғандарынан *нәрәтә, битәл* тигәндәрен белгәнегеҙ, йә ишеткәнегеҙ барҙыр, әлбиттә.

Эйе, мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, башҡорттар балыҡсылыҡ кәсебенең тарихта билдәле булған ысулдарының бөтәһен дә тиерлек белгән...

***Сафуан Әлибай***

## **Балыҡта**

Ҡалҡыуысым хәбәр итте:
«Ҡармаҡты ҡара алып»,
Әллә ни дәү булмаһа ла,
Йылтырап сыҡты балыҡ.

Әләкһә лә кескәй балыҡ,
Ҡыуанам эстән генә.
Беләм: һәр эш тә башлана
Бик бәләкәстән генә.

## Емде ... һыуыткыстан

— Бушты һөйләйһегеҙ,— тип ҡаршы төшөр һәүәҫкәр балыҡсы. Йөҙләп төрлө емде һынап ҡараған бит ул. Әммә ләкин был юлы ... Эш ниндәй ем һайлауҙа ғына ла түгел, ә ҡайҙа һәм ниндәй балыҡ тоторға йыйыналыуыбыҙҙа. Бөтә сер, минеңсә, тап ошонда.

Суртан, билдәле булыуынса, ялтырмаға бик ташланып бармай, тере балыҡҡа яҡшыраҡ ҡаба. Һыуҙа ваҡ балыҡ тулып йөрөгәндә, уны ялтыр тимергә еңел генә алдай алмаҫһығыҙ.

Дөрөҫ, ваҡ балыҡ менән туҡланыу ярайһы уҡ мәшәҡәтле. Мәсекәй ҡорһағын туйҙырыу өсөн уға байтаҡ «йүгерергә» кәрәк. Бөтә хәле бармаҡ буйы алабуға йә сабаҡ тотоуға китә. Хәйер, балыҡсы ла ем итеп ҡаптырыу өсөн бәләкәй балыҡты тотоуы еңелдән түгел. Тап ошондай осраҡта һыуыткыс ярҙамға килә лә инде.

Булмаһа, бәйнә-бәйнә һөйләп бирәйем.

Былтыр көҙ аҙаҡтарында таныш бер күлдә шүкәнең спиннингка ихлас эләгеүе ғәжәпләндерҙе. Күрәһең, көндөң йонсоу тороуы быға булышлыҡ иткәндер.

Ямғыр һибәләй. Ел резина кәмәне тап шайы күрмәй, ҡамышҡа бәйләнеп ултырыуы бик ауыр. Шул мәлдән алып һыу туңғанға тиклем шүкәһеҙ ҡайтманыҡ. Тап шул саҡта башҡа уй килде: спиннингтан «макалка»ға күсмәҫкәме икән? Уның менән тотоуы ла еңелерәк, мәшәҡәтһеҙ. Эшләп алыуы ла «һә» тигәнсә. Ҡәҙимге бамбук ҡыуалға 0,4—0,5 мм йыуанлыктағы леска бәйләп, ауыр ҡурғаш-мормышка тағаһың.

Эш емдә, ваҡ балыҡта ғына ҡала. Уны мин һыуыткыста һаҡлайым да инде. Көнэлгәре тотоп, шунда һалып ҡуям. Яҡын-тирәлә ваҡ балыҡ, әйтәйек, табан, ташбаш кеүектәрҙе анһат тоторлоҡ күл-йылғалар, быуа һәр ҡайҙа ла бар инде ул. Алабуғаны шүкә яратып бөтмәгәндәй тойолдо миңә. Йыуантыҡ, төҫө лә йыртҡыс балыҡтың иғтибарын йәлеп итеп бармай.

Шулай алдан әҙерләгән емде һыуыткыста ярайһы уҡ оҙаҡ һаҡлап була. Шүкәле урынға барып еткәнсе ем иреп өлгөрә. Йомшарыңҡыраған икән, бәлә түгел. Иң мөһиме, ҡармаҡҡа ныҡ эләгеп торһон. Шүкә тотоуға хатта һатыуҙағы ҡәҙимге килькаңы файҙаланып була. Тик бөгөн уны табыуы ауыр.

Йә, дуҫтар, хәҙер емде алдан уҡ әҙерләп ҡуйҙығыҙ, суртанға юлланырға ла мөмкин. Уңыш теләйем һеҙгә!

*А. Чураков*

## Ҡап, ҡап, ҡап...

Балыҡҡа барыр алдынан, уның иғтибарын йәлеп итер өсөн, бер нисә көн алдан һайланған урындарға ем һибеп сығығыҙ. Быны тәүлектең бер үк ваҡытында йәй буйы эшләргә тәҡдим ителә. Балыҡтарҙың ҡайҙа күберәк йыйылғанлығын күҙәтеп белегеҙ.

Емде балыҡ тотор алдынан ғына ла һибергә мөмкин. Ләкин ул иҫкермәгән булырға тейеш. Балыҡты йәлеп итеү өсөн түбәндәге ашамлыҡтарҙы ҡулланырға була:

— тары, арпа, һоло бутҡалары;
— эремсек (табан, ҡорбан, ҡарабалыҡ өсөн);
— бешерелгән һөм көнбағыш майы ҡушып иҙелгән картуф;
— ҡыҙҙырылған арыш шәкәрәһе;
— туралған һәм балсыҡ менән буталған ямғыр селәүсене.

Ағын һыуҙа емде балсыҡ бутап, йоморсалар рәүешендә ҡулланығыҙ. Тымыҡ урында тары бөртөгө йә бутҡа ҡулайыраҡ булыр.

Ошо кәңәштәргә ҡолаҡ һалһағыҙ, балыҡтан буш ҡул менән ҡайтмаҫһығыҙ.

*М. Ишбулатов*

## Ғәләмәт тәмле!

Кәрим, Сәлим гел бергә
Әүәҫ ҡырға йөрөргә:
Еләккә лә баралар,
Бәшмәген дә табалар.
Тырыш булғас малайҙар
Бөтәһе лә маҡтайҙар.
Бына улар был юлы,
Елле хыялдар тулы,
Йыйындылар алыҫҡа.
Кәлтәгәүгә балыҡҡа.
Кистән селәү ҡаҙҙылар,
Иртүк тороп барҙылар.
Төрҙөләр балаҡтарын,
Һалдылар ҡармаҡтарын,
Ҡырҙылар тамаҡтарын,
Әйттеләр һамаҡтарын.
«Ҡармаҡ һалдым —
йүгереп ҡап.
Яр башында ялтырап ят!
Һөмбәштең һөндөрөнән
Саматтың сандырынан».
Уйнап тора ҡармаҡтар,
Ялт-йолт итә сабаҡтар.

Ажау ҙа килеп ҡаба —
Тулырлыҡ оло таба.
Тотҡас эре бәрҙеләр —
Ҡысҡырып ебәрҙеләр.
Йөрөгән юл уң булды;
Биш саталы шеш тулды.
Ҡыуанышып ҡайттылар,
Усаҡҡа ут яҡтылар.
Әсәй бешерә балыҡ
Өлкән табаға һалып.
Ҡайтҡандармы баҙарҙан,
Малайҙар кем уҙарҙан
Кем ни тотҡанын һөйләп,
Һүҙ ҡуйырталар тәмләп.
Саҡ ҡына алдаҡсылар,
Нәҡ ысын балыҡсылар!
Бына таба өлгөрҙө,
Әсәй алға килтерҙе,
Ултырҙылар күмәкләп,
Ҙур өҫтәлде түңәрәп.
Балыҡ тәмле, ғәләмәт!
Бөтәһе лә ҡәнәғәт...




## Балыҡтар баш ҡатыра (чайнворд)

1. Башҡортостан һыуҙарында ғәҙәти балыҡ (сабаҡ).
2. Күҙҙәре бер яҡтан урынлашҡан яҫы балыҡ (камбала).
3. Сөсө һыуҙа йәшәй торған бик етеҙ балыҡ (бәрҙе).
4. Ҙур йыртҡыс балыҡ (акула).
5. Ваҡ диңгеҙ балығы (анмоус).
6. Алабуға тоҡомонан ҡиммәтле балыҡ (һыла).
7. Һаҙан һымаҡтар тоҡомона ингән балыҡ (ҡыҙылғанат).
8. Төньяҡ диңгеҙҙәре балығы (треска).
9. Беҙҙең һыуҙарҙа йәшәй торған йыртҡыс балыҡ (суртан).
10. Треска тоҡомонан бер балыҡ. А. П. Чеховтың бер хикәйәһе шул балыҡ исеме менән аталған (шамбы).
11. Ашамай торған балыҡ (йыланбалыҡ).
12. Һөмбаштар тоҡомонан төньяҡ йылға-күл балығы (ала балыҡ).
13. Һаҙан һымаҡтарындан кескәй генә балыҡ (ташбаш).
14. Һөмбаш тоҡомонан алһыу битле балыҡ (һөмбаш).
15. Майҙа консерваланған ваҡ балыҡ (шпрот).

# Краткий алфавитный указатель названий рыб

*ағарсаҡ/ағасаҡ* лит., диал. жерех
*ағасъяңаҡ* жерех
*ажау* (взрослый) голавль
*ажаусыҡ* диал. мальки голавля
*айбалыҡ* луна-рыба
*аҡ амур* белый амур
*аҡ балыҡ* 1. белорыбица; 2. белуга;
*аҡгүҙ/аҡкүҙ* белоглазка
*аҡ сабаҡ* диал. елец
*аҡ табан* карась серебряный
*аҡбалыҡ* белорыбица
*алабуға* 1. окунь; 2. ерш
*асы балыҡ* горчак

*бағры* диал. 1. форель; 2. ерш; 3. голец
*бағыр* форель
*береш* берш
*бикре* осетр
*биртас* голавль
*бөгәрсә* лит., диал. елец
*борош* лит., диал. подуст
*бәрҙе* 1. хариус; диал. 2. форель;
*бәрҙесәк* диал. 1. мальки хариуса; 2. елец
*бәшкәләй/бәшкәләк* лит., диал. уклея

*вобла-сабаҡ* вобла
*густера-ҡорман* густера
*диңгеҙ сабағы* 1. тарань; 2. корюшка
*еҙмыйыҡ* голец
*зөгәй* подкаменщик
*ялтыр сабаҡ/ялтырсабаҡ* диал. уклея
*йоморо сабаҡ* лит., диал. елец
*йотҡо/йотҡос* диал. только что вылупившиеся мальки
*йотҡолоҡ* диал. самые маленькие мальки
*юрыш/йәреш* диал. ерш
*йыланбалыҡ/йылан балыҡ* 1. минога; 2. угорь; 3. вьюн
*йыртыш/юртыш* диал. ерш
*йәйен* сом
*йәйен балаһы* соменок
*көҙгө карп* карп зеркальный
*көмөрө балыҡ* горбуша

*красүлә* диал. таймень, красуля
*күк балыҡ* синец
*күкйөн* 1. синец, сопа; 2. уклея; 3. плотва мелкая; 4. малек, мальки длиной с мизинец
*күкем(күкен)* диал., лит. 1. синец, сопа; 2. чехонь; 3. уклея; 4. плотва мелкая
*күкәнәш* синец, синьга
*күтәмә* диал. 1. елец; 2. хариус
*ҡарабалыҡ/ҡарабалыҡ* 1. линь; 2. голец
*ҡарагүҙ/ҡаракүҙ* елец
*ҡарағанат/ҡараҡанат* 1. подлещик; 2. густера; 3. голавль (молодь)
*ҡарағойроҡ/ҡара ҡойроҡ* диал. голавль мелкий; густера
*ҡомай/ҡомой* лит., диал. пескарь
*ҡомтөрткө* 1. пескарь; 2. голец; 3. щиповка
*ҡорман балыҡ/ҡорманбалыҡ* лещ
*ҡушбаш* 1. (молодой) голавль; 2. пескарь; 3. жерех
*ҡыҙыл балыҡ* таймень
*ҡыҙылғанат/ҡыҙылҡанат* 1. красноперка; 2. плотва; 3. голавль; 4. окунь; 5. язь
*ҡыҙылгүҙ(ҡыҙылкүҙ)* диал. 1. плотва; 2. красноперка
*ҡыҙылса* диал. таймененок;
*ҡыҙыл суртан* диал. таймень
*ҡыҙыл табан* диал. карась золотой
*ҡыҙыл шүкә* диал. таймень
*ҡылысбалыҡ* чехонь; меч-рыба
*ҡырпа/ҡырпы* белуга
*майбалыҡ* сельдь
*майма* 1. гольян; 2. мальки
*мәрсен* осетр
*опло/опто/отто* диал., лит. 1. язь; 2. голавль
*оплосаҡ/оптосаҡ* диал. язенок, подросший язь, малька язя
*рипус* рипус
*сабаҡ* 1. плотва; 2. уклейка; 3. елец; 4.чехонь; 5. гольян; 6. мелкая рыба
*сағалаҡ* голец
*селбәрә* лит., диал. мальки

---

** Первым указываются значения слов в башкирском литературном языке, далее даются диалектные формы.*

*селтей/селтәй* диал. молодь рыб. малек;
*сибәр майма* диал. гольян, красавка
*сига/сиға* диал. 1. сиг; 2. стерлядь
*сурағай* 1. щуренок; 2. щука средней величины
*сөгә* стерлядь
*суртан* 1. щука старая; 2. щука крупная
*сыбар балыҡ* форель
*сәнскеле балыҡ* колюшка
*табан* *карась*
*таран* диал. 1. густера; 2. лещ; 3. плотва крупная; 4. белоглазка
*тарансай* диал. подлещик
*тарансабаҡ* густера
*ташбаш* 1. пескарь; 2. ерш; 3. бычок
*ташбаш балаһы* пескарик
*түбәнауыҙ/түбән ауыҙ* диал. подуст
*уҡбалыҡ/уҡ балыҡ* 1. стерлядь; 2. вьюн; 3. севрюга
*уҡбаш/уҡ баш* севрюга
*үгеҙбалыҡ/үгеҙ балыҡ* бычок
*үгербалыҡ* угорь

*һаҙан* 1. сазан; 2. карп
*һаҡалсан* 1. вьюн; 2. голец
*һары табан* карась золотой
*һөмбаш/һөмбәш* 1. лосось, семга; 2. пескарь
*һыла* 1. судак; 2. ерш; 3. бычок; 4. окунь; 5. форель
*шамбы* 1. налим; 2. бычок; 3. щука
*шаршы күкене* быстрянка русская
*шүкә* 1. щука молодая; 2. щуренок
*шүрәңке/шүрәнкә* диал. 1. самая маленькая щука; 2. щуренок
*шырт балыҡ/шыртбалыҡ* 1. ерш; 2. бычок-подкаменщик
*эт балығы* 1. вьюн; 2. щиповка; 3. голец; 4. ерш; 5. минога
*юрш/юрыш* диал. см. юрыш

## Ҡыҫҡаса русса-башҡортса терминдар һүҙлеге

*Ҡармаҡ һалыу*

забросить удочку — ҡармаҡ һалыу, ҡармаҡ һелтәү
заброс — һелтәү
подсечь — тартыу, ҡармаҡ һирпеү
подсечь удочку — ҡармаҡ сыбығын һирпеп ебәреү
насадить на крючок червяка — ҡармаҡҡа селәүсен ҡатыу
наживить крючок — ҡармаҡ емләү, ултыртыу
наживить удочку — ем ҡаптырыу
закинуть, наживив — ҡармаҡты емләп һалыу
рыба клюет — балыҡ ҡармаҡҡа сиртә, төртә, балыҡ семтей
клев — сәйнеү, сиртеү, төртөү
сматывать удочку — ҡармаҡты йыйыу
ҡармаҡ — удочка; крючок
удилище — ҡармаҡ һабы; ҡолға, ҡыуал, ҡармаҡ сыбығы, һырғый (бейек, төҙ үҫеп ултырған ағастан эшләнә)
маленький крючок — сабаҡ ҡармағы
крупный крючок — суртан ҡармағы
крючок (для больших рыб) — көрөк
бородка — тел, мәҫ., ҡармаҡ теле
цевье — күҙәү
двойник — ике йәпле **ҡармаҡ**
тройник — өс йәпле ҡармаҡ
самый мелкий крючок («заглотыш») — күкйөн ҡармағы
леска — ҡармаҡ ебе; еп; бау; ҡыл; ҡармаҡ ҡылы

*Ҡармаҡ өлөштәре (детали удочки)*

поплавок — төрткө, сиртке
поплавок — ҡалҡҡы (епкә бәйләнә торған ағас, бөкө)
грузило — ҡурғаш батырғыс, ҡармаҡ батырғысы
ловить (на крючок), удить — ҡармаҡҡа алыу, ҡармаҡлау, ҡармаҡ һалыу
срываться (с крючка) — ҡармаҡтан төшөү, төшөп ҡалыу
ловить — балыҡ алыу, тотоу
ловить на удочку — (ҡыуал менән) ҡармаҡлап алыу

*Төрлө балыҡ тотоу ҡоралдары*

жерлица (большой крючок для ловли щук) — суртанныҡ
перемет — ҡармаҡлы ау, бәрәмәт, йеле, ҡайбат
перетяг — перәтәк
донка — төп ҡармағы
закидушка — ерә
дорожка — йылтыраҡ
блесна — ялтырауыҡ, йылтырма, ялтамбай
спиннинг — кәтүкле ҡармаҡ

*Балыҡ ҡаптырыу емдәре*

приманка, насадка — алдатҡыс ем
мормыш — бурмаш (ҡармаҡҡа ҡаптырып балыҡ әүерәтә торған күл ҡорто)
личинка майского жука — аҡ ҡорт
ручейник — мәңке
малек — йот балыҡ, йотҡолоҡ

*Балыҡ тотоуҙа кәрәк-яраҡтар*

садок — көжнә, һеүән
кукан — балыҡ теҙгесе, шеш (тал сыбыҡтан яһайҙар)
корзина для улова — тубал (ҡарама сыбығынан яһалған балыҡ һауыты)
сачок — сүмес ау (күҙәнәктәре бәләкәй сөкө). сөкө
пешня — һөймән, бөрөз
мотовило — әшә, тәбәлдерек
кошель — тоҡсай

*Балыҡтарға ҡағылған дөйөм һүҙҙәр*

рыба нерестует — балыҡ уйнай, ыуылдырыҡ сәсә
нерест — уйын

клюнуть — тейеү
начался вечерний клев — балыҡтың киске сиртеүе башланды
поймал на удочку — ҡармаҡлап тоттом
пошел на рыбалку — балыҡҡа ҡармаҡ һалырға киттем
мне попалась рыба — минең ҡармаҡҡа балыҡ ҡапҡан
улов — тотолған балыҡ
ловить на мушку I — күбәләкле ҡармаҡ уйнатып тотоу (йөндән, ҡауырһындан, әтәс ҡойроғонан эшләнә)
ловить на мушку II — сирттереп тотоу (бөрҙөне һ. б.)
ловить на макалку — суртан ҡарпытыу
подкармливать рыб — емләү
прикормить — балыҡ эйәләштереү
посадить на кукан — шешкә теҙеү (балыҡ шеше — балыҡ теҙә торған сыбыҡ)
дележ улова — балыҡ өләшеү (күрмәгән килеш әйтеш)
уха — балыҡ һурпаһы, һалау
рыба плавится — балыҡ ҡарпый, һикерә
рыба жирует — балыҡ туҡлана
зимовка рыб — балыҡ ятыуы (аҡрын ағышлы йылғала балыҡтар йыйыла һәм ҡышлай торған тәрән урын)
замор — ҡышҡыһын тынсып үлеү, үләтләү (ерле һөйләштәрҙә)
заморное озеро — тонсой торған күл
рыбная яма (в реке) — ҡумыж (йылғаның балыҡ йыйылып ятҡан ере) ятыу
ход рыбы (нерестовый) — балыҡ йөрөшө
греться на солнце — эҫе көндә эре балыҡ ойоп ята (йәйен, суртан)
стая рыб — балыҡ тубы, эркеүе, иле, көтөү
весенний лов щуки — шыға (шүкә тотоу ваҡыты)
рыбий пузырь — күшкә, үт, шалтыраҡ, шартлама, балыҡ ҡыуығы
перекат — йылғаның шараны (шәп аҡҡан ере), шаршы

## Аҙаҡҡы һүҙ

Бына беҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, һеҙ тотҡан китаптың һуңғы битенә барып еттек тиергә була.

Былдай китапты яҙыу кәрәклеге хаҡында беҙ байтаҡ ваҡыттан инде ишетеп, белеп килә инек. Һеҙ танышып сыҡҡан китапта беҙҙең балыҡтар, балыҡсылыҡҡа ҡағылған мәсьәләләрҙе автор ҡәнәғәтләнерлек итеп яҡтырта алдымы, юҡмы, быныҢ тураһында хөкөм сығарыу һеҙгә ҡала, әлбиттә.

Балыҡтар донъяһы менән танышыу һәр кемдең йәш сағынан тиерлек башлана. Балыҡҡа йөрөү менән беҙҙә мендәрсә кеше мауыға. Гүзәл Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәт һөйөүселәренә яҙғандарыбыҙ фәһем, белешмәләр алыуға ярҙам итер тип өмөтләнгеһе килә лә инде.

Башҡортостан балыҡтары хаҡында бында сағылыш тапмаған да мәғлүмәттәребеҙ аҙ түгел әле. Тик барыһын да тәүге тәжрибәбеҙ булған китапҡа индерергәме-юҡмы, шуныһы икеләндерә тип әйтһәк, яңылыш булмаç. Балыҡ телһеҙ була ти, ә уның тураһында кеше күп кенәһен белеп алған да, тағы ла белемен арттырырға зиһенен-көсөн йәлләмәй. Беҙҙәге балыҡтар менән ҡыҙыҡһыныусыларға ошо китапты уҡып сығыу файҙа килтерһә, эшебеҙ аҡланған тип ҡәнәғәтләнер инек.

Был китапты яҙыуҙың бер аҙ тарихы ла бар. Һәүәçкәр балыҡсы «стаж»ым әсәйемдең тыуған төйәгендә — Орск ҡалаһы һыулаған данлыҡлы Яйыҡ буйында башланып китте. Хәҙер ана шул малай-шалай саҡтарҙан бирле ҡулдан ҡармаҡ төшөргәнем юҡ тиерлек.

Ә инде балыҡтар донъяһы хаҡында махсус йыйынтыҡ төҙөүгә рухландырыусы өлкән ағайҙарға (тап мәғәнәһендә остаз тип тә атайым уларҙы!) — ғалимдар Зиннур Ураҡсин менән Эрнст Ишбирҙин, яҙыусылар һәм журналистар Дәүләт Мәһәҙиев, Ғәтиәт Үзбәков, Алексей Чураков, Рәшит Сабитов, Сабир Шәриповҡа рәхмәтлемен.

Китап, моғайын, айырым кәмселектәрҙән дә азат түгелдер. Һәр хәлдә, уның хаҡында уй-фекерҙәрегеҙҙе «Китап» нәшриәте адресына яҙып ебәрһәгеҙ ине. Кәңәштәрегеҙ һәм тәкдимдәрегеҙ был баçманы киләсәктә тағы ла күркәмерәк һәм камилыраҡ нәшер итеүгә фәһемле булыр тип ышанам.

**Йөкмәткеһе**


Инеш һүҙ . . . . . . . . . . . . . 3
Балыҡсының йыл миҙгелдәре . . . 5
Яҙ етһә . . . . . . . . . . . 6
Йәйге көндәрҙә . . . . . . . . 9
Көҙ . . . . . . . . . . . . . 11
Ҡыш . . . . . . . . . . . . . 13
Балыҡтар болаһы. *Т. Йосопов* . . . 14
Ҡыш көнө — табан. *Ғ. Шәмсетдинов* . 15
Ҡармаҡ һалдым... . . . . . . . . . 16
Ниңә ҡапмай ҙа ҡапмай? *Ш. Сабиров* 17
Кәңәштәр . . . . . . . . . . . . 20
Ҡайһы йылға йомартыраҡ? . . . . 20
Ҡыш та ҡыҙыҡ . . . . . . . . . 22
Боҙ һәм балыҡ . . . . . . . . . 22
Шамбы оҙаҡ көттөрҙө. *Ү. Ғәтиәтов* . 24
Ҡышын ҡаптырыу . . . . . . . . 25
Тарих биттәренән . . . . . . . . 28
Һөйләшеү. *Ф. Әсәновтан* . . . . . . 28
Беҙҙәге балыҡтар . . . . . . . . 31
Ташбаш . . . . . . . . . . . 31
Мажара. *Ғ. Ибраһимов* . . . . . 33
Күкен . . . . . . . . . . . . 34
Ваҡ. *Ф. Шакир* . . . . . . . 35
Сабаҡ . . . . . . . . . . . . 36
Аҡ сабаҡ. *Мостай Кәрим* . . . . 36
Алабуға . . . . . . . . . . . 38
Балыҡ тотҡанда . . . . . . . 41
Шырт балыҡ . . . . . . . . . 41
Аңла һин алабуғаны! *Ғ. Шәмсетдинов* . . . . . . . . . . . . 42
Еҙем буйында . . . . . . . . 44
Суртан . . . . . . . . . . . 44
Сабағын йотто. *Ш. Ғәлин* . . . . 47
Үәт һемәйҙек! *Ғ. Шәмсетдинов* . . 48
Табан . . . . . . . . . . . . 48
Ташбаш. Мәҙәк хәл. *С. Шәрипов* . 51
Ҡара балыҡ . . . . . . . . . 52
Ҡарағайлы күл . . . . . . . . 53
Бөгәрсә . . . . . . . . . . . 54
Аҡ сабаҡтар. *Ҡ. Даян* . . . . . 55
Ажау йәки ҡушбаш . . . . . . 55
Йәмле Ағиҙел буйҙары . . . . 57
Көлкө лә, яҙыҡ та... . . . . . . 59
Опто . . . . . . . . . . . . . 60
Бурыш . . . . . . . . . . . . 61
Ҡыҙылғанат . . . . . . . . . 62
Балыҡ ҡаптырғанда. *Ә. Әхмәт-Хужа* 63
Шамбы . . . . . . . . . . . 63
Йәйен . . . . . . . . . . . . 65
Ҡорман . . . . . . . . . . . 68
Һаҙан . . . . . . . . . . . . 69
Иртә торҙоҡ. *Р. Хәйри* . . . . . 71
Ҡылыс балыҡ . . . . . . . . . 72
Кеҫәләге балыҡ . . . . . . . . 73
Ағарсаҡ . . . . . . . . . . . 74
Әләкте... *Ф. Мөхәмәтйәнов* . . . 75
Һыла . . . . . . . . . . . . . 75
Шулай ҙа була! . . . . . . . . 76
Аҡкүҙ . . . . . . . . . . . . 77
Майма . . . . . . . . . . . . 78
Эт балығы . . . . . . . . . . 80
Еҙмыйыҡ . . . . . . . . . . . 81
Сағалаҡ . . . . . . . . . . . 82
Ялтыр сабаҡ . . . . . . . . . 83
Йәләй сабаҡты йәлләй. *Ф. Мөхәмәтйәнов* . . . . . . . . . . 84
Балыҡ донъяһында... кем хаким? *Р. Үзбәков* . . . . . . . . . 84
Асы балыҡ . . . . . . . . . . 85
Яңы йыл күстәнәсе. *Р. Мөхәмәҙиев* 86
Энә балыҡ . . . . . . . . . . 87
Аулай ҙа, үрсетә лә беләләр . . . . 89
Аҡ амур . . . . . . . . . . . . 91
«Ҡыҙыл китап» балыҡтары . . . . 93
Ҡыҙыл балыҡ . . . . . . . . 93
Бәрҙе . . . . . . . . . . . . 95
Диккенс һәм ҡарт балыҡсы . . . 96
Бағыр . . . . . . . . . . . . 97
Былар ҡыҙыҡлы . . . . . . . 98
Тәүҙә ышанмағайным. *Ғ. Үзбәков* . . 98
Ала балыҡ үҙ итте . . . . . . 99
Рипус . . . . . . . . . . . . 101
Мәрсен . . . . . . . . . . . 102
Күкәнәш . . . . . . . . . . . 103
Шаршы күкене . . . . . . . . 103
Энәле балыҡ . . . . . . . . . 104
Хәстәрлекле аталар . . . . . . 105
Зөгәй . . . . . . . . . . . . 106
Аҡ балыҡ . . . . . . . . . . 107
Аквариум тураһында . . . . . 109
Балыҡсы ҡарт кilә... . . . . . . 110
Йылан менән балыҡ . . . . . . 112
Арбауҙар. *И. Ғәләүетдиновтан* . . 113
Өс йомаҡҡа бер яуап . . . . . 115
Башватҡыс . . . . . . . . . 115
Балыҡ бүлешеү . . . . . . . . 116
Ер-һыу исемдәре һәм балыҡтар . . . 118
Йәй көнө — ҡышҡы ҡармаҡҡа. *Ғ. Үзбәков* . . . . . . . . . . . . . 119

Балыҡсы-ашнаҡсы . . . . . . . . . 120
Ҡаҡлау . . . . . . . . . . . . 120
Киптереү . . . . . . . . . . . 120
Балыҡ ҡаҡлау . . . . . . . . 120
Һалауың өлгөрҙөмө? . . . . . . . 121
Белеп эшлә! . . . . . . . . . 121
Нисек һаҡларға? . . . . . . . . 122
Кәңәштәр . . . . . . . . . . 122
Табынға танһыҡ ул! . . . . . 123
Ашнаҡсы иҫкәрмәләре . . . . . 123
Йылғаларыбыҙҙы таныйһыңмы? . . . 125
Әй . . . . . . . . . . . . . 125
Танып . . . . . . . . . . . . 125
Сәрмәсән . . . . . . . . . . . 125
Ҡыҙыл . . . . . . . . . . . . 126
Ағиҙел . . . . . . . . . . . . 126
Яйыҡ . . . . . . . . . . . . . 127
Учалы — данлыҡлы, күлдәре балыҡлы . . . . . . . . . . . 128
Оҙонкүл . . . . . . . . . . . 128
Талҡаҫ . . . . . . . . . . . . 129
Аҡкүл . . . . . . . . . . . . 129
Асылыкүл — аҫыл күл . . . . . . 129
Нуғаҙаҡ . . . . . . . . . . . 130
Ҡандракүл . . . . . . . . . . 130
Шыға . . . . . . . . . . . . . 131
Йәнгел . . . . . . . . . . . . 132
Каспий диңгеҙе — Башҡортостанда 132
Ыҫлаусылар . . . . . . . . . . 132
Таш эсендә — балыҡ һөлдәләре . 133
Ғәжәп балыҡтар донъяһында . . . . 135
Вәт әй, дүрт күҙле! *Р. Сабитов* . . 136
Ышанмайһыңмы? . . . . . . . . 136
Төрлөһөнән . . . . . . . . . . 138
Шулай ҙа була икән! . . . . . 139
Йәнә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр . . 140
Ә быны беләһегеҙме? . . . . . 140
Төрлөһөнән . . . . . . . . . . 141
Былар ҡыҙыҡлы . . . . . . . . 142
Лампа ярҙамында . . . . . . . 142
Ер аҫтында ла тотола, имеш . . . 142
Карапҡа һөжүм . . . . . . . . 143
Бик ғәжәп күл . . . . . . . . 143
Кем сәлдергән? . . . . . . . . 143
Былар ҙа ҡыҙыҡлы . . . . . . 144
Файҙалы «дракун» . . . . . . 145
Акуланың иң уҫал дошманы . . . 145
Һикереүсе балыҡ . . . . . . . 145
Иң оҙон исем . . . . . . . . . 146
Беҙҙең илдәге мәҙәктәр . . . . . . 149
Яһалма ысул менән . . . . . . 149
Бикреләр өсөн ем . . . . . . . 150
Ысын ыуылдырыҡ түгел . . . . 151
Ҡарсыға менән балыҡҡа . . . . 151
Балыҡсыларҙың табышы . . . . . 152
Тауыш эҙләй . . . . . . . . . 152
Ҡырпалар . . . . . . . . . . 152
Көрәкморон. *Ә. Чаныш* . . . . . 153
Кем етеҙерәк? . . . . . . . . 153
Ҡармаҡ һалғанда һөйләшеүҙәр . . 154
Уйнайыҡ бергәләшеп . . . . . . 154
Көлгәнгә көлкө . . . . . . . . 154
Суртан, тиһәм... *М. Дилмөхәмәтов* .155
А-кула!!! . . . . . . . . . . . 155
Балыҡ тотоу ҡоралдары . . . . 159
Ап-аҡ ҡанлы балыҡтар . . . . . 161
Викторина . . . . . . . . . . 162
Балыҡтар баш ҡатыра . . . . . 162
Балыҡсы кроссворды . . . . . 163
Краткий алфавитный указатель названий рыб в русском переводе . . . . . . 169
Ҡыҫҡаса русса-башҡортса терминдар һүҙлеге . . . . . . . . . . . . . 171
Аҙаҡҡы һүҙ . . . . . . . . . . . 176

*Литературно-художественное издание*

**Нафиков Шамиль Валеевич**

**НАЧИНАЮЩЕМУ РЫБОЛОВУ БАШКОРТОСТАНА**

*Сборник научно-популярных статей, путевых заметок*

*(на башкирском языке)*

Мөхәррирҙәре *Илдар Аҡъюлов менән Сабир Шәрипов*
Рәссамдары *Фәйзрахман Исмәғилев, Ришат Арсланов, Фазлетдин Ислахов*
Биҙәлеш мөхәррире *Фазлетдин Ислахов*
Техник мөхәррире *Надия Пятаева*
Корректоры *Эльвира Шәйхетдинова*

ИБ № 5455

Йыйырға бирелде 27.06.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.03.97. Ҡағыҙ форматы $60 \times 90^1/_8$ Офсет ҡағыҙы № 1. Журнал гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 22,0+0,5 форзацы. Шартлы буяу отт. 89,5. Иҫәп-баҫма таб. 14,14+0,9 форзацы.

Тиражы 5000 дана. Заказ № 267. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.